

# ӘКИӘТТӘР



# ӘКИӘТТӘР

3—4
синыфтарҙа
кластан тыш
уҡыу өсөн

*Башҡортостан Республикаһы*
*Халыҡ мәғарифы министрлығы тарафынан*
*раҫланды*

РТОСТАН
РАЙОН
...АЕВСКАЯ
...(ПОЛНАЯ)
...РАЗОВА-
...ШКОЛА
66 г.

ӨФӨ
«КИТАП»
1996

ББК 84 Баш
Ә 27

Төҙөүселәре: Т. Х. АСЛАЕВ, С. В. АТНАҒОЛОВА

Рәссамдары:
АЛЕКСАНДР КОСТИН, ИВАН ФАЙРУШИН

Ә 27 **Әкиәттәр:** 3—4 синыфтарҙа кластан тыш уҡыу өсөн/Төҙ. Т. Х. Аслаев, С. В. Атнағолова.— Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1996.— Һүрәттәре менән 320 бит.

ISBN 5-295-01454-1

Ә $\frac{4306020200-92}{M121(03)-96}$ 169-96 ББК 84 Баш

ISBN 5-295-01454-1

© Төҙ. Аслаев Т. Х., Атнағолова С. В., 1996

© Костин А. А., Файрушин И. С. һүрәттәре, 1996

# III синыф

## Аҡъял батыр

Бик борон заманда булған был хәл. Ҡарт Урал тауҙары араһында бәләкәй генә башҡорт ауылы булған. Ошо ауылда ҡатыны менән бер кеше йәшәгән. Бик ярлы булған уларҙың тормошо — малдары ла, ҡош-ҡорттары ла булмаған уларҙың. Ә игенде ул ваҡытта байҙар ғына сәскәндәр, улар ҙа аҙ сәсер булғандар. Ярлыларға йәшәү бик ҡыйын булған. Байҙарҙан ҡасып-боҫоп тотҡан балыҡ һәм болонлоҡтан йыйған еләк менән генә туҡланғандар улар.

Берҙән-бер ваҡыт, һалҡын ҡыш килгәс, уларҙың яғырға бер ағас утындары ла ҡалмаған. Төн урталарында улар урманға ирле-ҡатынлы барғандар ҙа үҙҙәренә утын ҡырҡып алғандар. Иртә менән байҙар, быны һиҙеп алып, ирҙе ҡамсы менән һуҡтырғандар, ә унан һуң уны ҡатыны менән бергә бәйләгәндәр ҙә

алыҫ-алыҫҡа, Урал төпкөлөнә, алып барып ташлағандар. Яңы урында тормош тағы ла ауырыраҡ булған. Ләкин көндәрҙең береһендә уларға шатлыҡ килгән: ҡатын оҙон ҡуңыр сәсле ул тапҡан. Улар үҙҙәренең улына Аҡъял батыр тип исем ҡушҡандар.

Бала көнләп түгел, сәғәтләп үҫкән. Күп тә үтмәй, Аҡъял батыр типһә тимер өҙөрлөк, тулҡындарҙа йөҙөрлөк ҡыйыу егет булып киткән, һунарға ла йөрөп, ҡош һәм йәнлектәр аулай башлаған. Шул көндән алып туҡ йәшәй башлағандар улар. Ата менән әсә улдарына ҡарап туя алмайҙар икән.

Аҡъял батырға ун биш йәш тулғас, ата-әсәһе үлеп ҡалған. Батыр бик ныҡ ҡайғырған, ләкин, ни эшләмәк кәрәк, үлгән кеше артынан үлеп булмай; кешеләрҙең нисек көн күреүҙәрен барып ҡарарға кәрәк (урманда бит бер кем дә булмаған), бәлки, уға яҡшы кәңәш бирерҙәр һәм нисек йәшәргә өйрәтерҙәр. Бына шулай тип уйлаған да Аҡъял батыр, уҡһаҙағын алып, биленә үткер булат ҡылысын тағып, юлға сыҡҡан.

Бик оҙаҡ барған Аҡъял батыр, күп кенә тау, урмандарҙы үтеп, күп йылғаларҙы кискәндән һуң, бер бейек тауҙың итәгендә ял итергә туҡтаған.

Шул ерҙә Аҡъял батыр, ял итеп ята торғас, үҙенән алыҫ түгел ерҙә, туҙан туҙҙырып, хәлдән тайғансы ниҙер эшләп маташҡан бер кешене күргән.

Аҡъял батыр урынынан ҡалҡып торған да теге кешенең янына барып һораған:

— Эй, әҙәм балаһы! Кем булаһың үҙең һәм ни эшләйһең бында?

Ә кеше уға былай тип яуап ҡайтарған:

— Күрәһең бит, тауҙы күсерәм. Мине Тау батыр тип йөрөтәләр. Был тауҙар араһында бик күп йәшәнем һәм ошоға тиклем бер кеше затын күргәнем юҡ ине. Ә һин үҙең кем булаһың?

— Мин — Аҡъял батыр. Тыуып үҫкән төйәгемде ташлап, юлға сығып киттем, был яҡты донъя йөҙөндә ниҙәр эшләнгәнен күргем килә.

— Мине лә үҙең менән бергә алып кит,— тигән Тау батыр,— юлдаш булырмын.

— Әйҙә, улай булғас, киттек. Икәүебеҙгә күңеллерәк булыр.

Тауҙар буйлап улар оҙаҡ-оҙаҡ баралар, тик кейек йәнлектәрҙән башҡа берәү ҙә осрамай уларға.

Бына улар, ҡара урман араһынан барғанда, ниндәйҙер шау-шыу һәм ағас ботаҡтары сытырлаған тауыш ишетәләр.

Абайлаңҡырап ҡараһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр: бер кеше ағастарҙы төбө-тамыры менән аҡтарып ала ла икенсе урынға ултыртып маташа.

Батырҙар ошо кешенең янына киләләр ҙә һорайҙар:

— Әй, егет, ни эшләйһең һин?

Ә теге егет уларға былай тип яуап ҡайтара:

— Мин — Урман батыр. Күрәһегеҙ, ағастарҙы күсереп ултыртам. Бында инде урман бик ҡуйырып киткән. Ә һеҙ үҙегеҙ кем булаһығыҙ?

— Мине Аҡъял батыр тип йөрөтәләр. Бына донъя күрергә сыҡҡайным да юлда Тау батырҙы осраттым,— тип яуап ҡайтарған Аҡъял батыр.

— Мине лә үҙегеҙ менән алығыҙ,— тип һораған уларҙан Урман батыр.

һәм бына өс бәһлеүән юлға сығып киткәндәр. Көн төн менән алмашынған, төн үтеүгә көн тыуып торған.

Көндәрҙең береһендә, өс бәһлеүән инде күп тау, урмандарҙы үтеп, байтаҡ йылғаларҙы кискәндән һуң, бер бәләкәй генә өй янына барып сыҡҡандар. Ләкин өйҙөң эргәһендә лә, эсендә лә бер кем дә булмаған. Шул ваҡыт яҡында ғына үрешләп йөрөгән ҡырағай йылҡы өйөрөн күргәндәр былар. Алыҫ түгел бер ауыл булып, унда ла бер әҙәм заты күренмәгән.

Шул ерҙә Аҡъял батыр, юлдаштарына ҡарап:

— Оҙаҡ уйлап тораһы юҡ,— тигән.— Һин, Урман батыр, бер бейәне тотоп һуй ҙа ит бешер, ә беҙ Тау батыр менән тирә-яҡта ни барын ҡарап ҡайтайыҡ.

Дуҫтар үҙ юлына киткәс, Урман батыр бысағын үткерләгән дә йылҡы өйөрө янына барған. Унан бер һимеҙ бейәне һайлап алып һуйған да, ҙур ҡаҙанға тултырып, ит бешерергә тотонған.

Ҡапыл һис көтмәгәндә кемдеңдер ишек туҡылдатҡанын ишеткән.

— Кем бар унда? — тип һораған Урман батыр.

Ишек артынан:

— Мин — ҡунаҡ,— тигән тауыш ишетелгән.

— Әгәр ҙә ҡунаҡ булһаң, түрҙән уҙ,— тигән дә Урман батыр ишекте асҡан.

Шул ерҙә ни күҙе менән күрһен, уның алдында үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш бер ҡарт иргәйел баҫып тора.



— Мине өйгә күтәреп индер,— тип өндәшкән ҡарт.

Урман батыр ҡартты күтәреп өйгә индергән.

— Мине иң түргә ултырт,— тигән ҡарт.

Урман батыр уны өйҙөң иң түренә ултыртҡан.

— Һин ҡаҙан тултырып ит бешерәһең икән, миңә ашарға бир,— тигән ҡарт.

Урман батыр ҡаҙандан бер ҙур киҫәк ит сығарған да ҡартҡа тотторған.

Иргәйел ҡарт итте бер юлы һоғоноп ебәрә лә:

— Тағы ла бир! — ти.— Быныһы минең тешемә лә йоҡманы.

— Минең иптәштәрем бар, улар урманға киттеләр, был итте мин уларҙың ҡайтыуына бешерәм,— ти Урман батыр.

— Мин бер ни ҙә ишетергә теләмәйем. Ҡана, миңә тиҙерәк ит бир! — тип ҡысҡырған ҡарт, асыуланып.

Иргәйел ҡарт Урман батырҙың тыңламағанын күргән дә, ҡапыл урынынан тороп, батырҙың бармағынан эләктереп алған һәм уны өйҙөң бүрәнәләре араһына ҡыҫтырған, ә үҙе ҡаҙанда бешкән итте бөткәнсе ашаған да күҙҙән юғалған.

Урман батыр бармағын ҡанатҡансы һурып алған да уйға ҡалған:

«Хәҙер ни эшләргә инде? Иптәштәремә ни тип яуап ҡайтарырмын икән? Юҡ, ҡоро яуап менән уларҙы туйҙырып булмаҫ, ә улар бит асығып ҡайтырҙар...»

Ул, оҙаҡ уйлап тормайынса, икенсе бейәне һуйған да ҡабат ит бешерергә тотонған.

Тиҙҙән уның иптәштәре лә ҡайтып ингәндәр.

— Итең бештеме? — тип һораған Аҡъял батыр.

— Беште,— тип яуап ҡайтарған Урман батыр.

Баһадирҙар ултырып алғандар ҙа ит ашарға тотонғандар. Шул ваҡытта Аҡъял батыр Урман батырҙың бәйләнгән бармағын күреп ҡалған да:

— Һинең бармағыңа ни булды? — тип һораған.

Урман батыр иптәштәренә дөрөҫөн әйтергә гәрләнгән; шулай ҙа, бер аҙ уйлап алып:

— Ит тураған ваҡытта бысаҡ тейҙе,— тип яуап ҡайтарған.

Һимеҙ ит менән туйғансы һыйланғандар ҙа улар йоҡларға ятҡандар.

Иртә менән Аҡъял батыр, Тау батырға ҡарап:

— Беҙ Урман батыр менән икәүләп урманға барабыҙ,— тигән,— ә һин бөгөн өйҙә ҡал һәм беҙҙең ҡайтыуға ни булһа ла ашарға әҙерләп ҡуй.

Иптәштәре урманға киткәс, Тау батыр әлеге йылҡы өйөрөнән бер һимеҙ байталды тотоп һуйған да ит бешерергә тотонған. Шул ваҡыт кемдеңдер ҡапыл ҡаты итеп ишек туҡылдатҡанын ишеткән дә:

— Кем бар унда? — тип һораған.

Ишек артынан:

— Мин — ҡунаҡ, ишегеңде ас! — тигән тауыш ишетелгән.

Тау батыр, ишекте асып ебәрһә, ни күҙе менән күрһен: уның алдында үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш бер ҡарт баҫып тора.

— Түрҙән уҙ, бабай, ҡунаҡ булырһың,— тигән уға Тау батыр.

— Үҙем булдыра алмайым, күтәреп индер,— тигән ҡарт.

Тау батыр ҡартты күтәреп индергән дә өйҙөң иң түренә ултыртҡан.

— Миңә ашарға бир,— тигән ҡарт.

Тау батыр ҡартҡа ҙур киҫәк ит тотторған, ҡарт иһә шунда уҡ итте бер юлы һоғоноп ебәргән дә тағы ла һораған.

— Тағы ла бирә алмайым һиңә: минең иптәштәрем бар, улар тиҙҙән асығып ҡайтырҙар,— тип яуап ҡайтарған Тау батыр.

Уның шулай тип әйтеүе булған — ҡарт урынынан ырғып торған да Тау батырға ташланған, уны

күтәреп, ҡолағынан ырғаҡҡа элгән, ә үҙе ҡаҙандағы итте бөткәнсе һоғонған да күҙҙән юғалған.

Шул ваҡытта Тау батыр, ҡолағы йыртылып, ырғаҡтан ысҡынған. Шунан һуң ул иптәштәрен иҫенә төшөргән дә ҡайтанан ит бешерергә тотонған.

Аҡъял батыр менән Урман батыр ҡайтыуға ит бешеп тә сыҡҡан. Улар ашарға ултырғандар.

Аштан һуң Аҡъял батыр үҙҙәренең ниндәй урындарҙа булыуҙары һәм ниҙәр күреүҙәре тураһында һөйләгән, ә Тау батырҙың яраланған ҡолағын күреп ҡалғас:

— Һинең ҡолағыңа ни булды? — тип һораған.

— Өйөрҙән байтал тотҡанда, тибеп ебәрҙе лә, тояғы ҡолағыма тейҙе,— тип алдаған.

— Һеҙгә ни булды һуң? Берегеҙ бармағын киҫкән, икенсегеҙ ҡолағын йырттырған! — тигән Аҡъял батыр, ниҙер һиҙенеп.— Ярар, иртәгә үҙем ҡалам һәм бөтәһен дә белермен. Ҡарап ҡарайыҡ, минең менән ни булыр икән?

Иртә менән иптәштәре урманға киткәндәр, ә Аҡъял батыр өйҙә ҡалған. Ул өйөрҙән бына тигән йәй йөрөм бер ҡонанды тотоп алған да, уны һуйып, итен ҡаҙанға тултырған.

Шул ерҙә ишекте ҡаты итеп туҡылдатҡан тауыш ишетелгән. Аҡъял батыр, ишеккә яҡын килеп:

— Кем бар унда? — тип һораған.

— Мин — ҡунаҡ! — тип өндәшкән берәү.

Аҡъял батыр ишекте асып ебәреүгә, әлеге үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш иргәйел ҡарттың баҫып торғанын күргән. Башта бер-береһенә оҙаҡ ҡарашып торғандар улар. Аҙаҡ килеп:

— Мине күтәреп өйгә индер,— тигән ҡарт.
— Бында тиклем атлап килгәнһең бит, өйгә лә үҙ аяғың менән инеп ултырырға булдырырһың әле,— тип яуап ҡайтарған Аҡъял батыр.
Ҡарт, өйгә үҙе инеп, түрҙән урын алған да:
— Миңә ит бир! — тигән.
Аҡъял батыр быға һис иҫе китмәй генә:
— Беҙгә килгән ҡунаҡ һый талап итмәй. Ҡулың бар, асыҡҡан булһаң, үҙең дә алып ашарһың әле,— тип яуап ҡайтарған.
— Ә, һин минең менән әрепләшмәксе булаһыңмы?.. — тип асыу менән ҡысҡырған ҡарт һәм Аҡъял батырҙың яғаһынан бөрөп алған. Ә батыр ҡаушап ҡалмаған, шунда уҡ уны әләктереп алған да һаҡалынан таяуға бәйләп тә ҡуйған.
Ҡарт, үрле-ҡырлы һикергеләп, йән-көскә өҙгөләнергә тотонған, һәм, аҙаҡ килеп, һаҡалы өҙөлгәс кенә ҡасып ҡотолған.
Ошо ваҡытта Урман батыр менән Тау батыр ҡайтып ингәндәр. Аҡъял батыр, иптәштәрен күргәс, берәүһенең бармағын һыҙырған, икенсеһенең ҡолағын йыртҡан кеше теге ҡарт икәнлеген һиҙеп алған. Ул иптәштәренә таяуҙа өҙөлөп ҡалған һаҡалды күрһәткән дә:
— Һеҙҙе шул йыртҡыланымы? — тип һораған.
— Тап шул үҙе, батыр.
— Улай булғас,— тигән Аҡъял батыр,— беҙгә ул ҡартты эҙләп табырға ла кәрәген бирергә кәрәк. Ул шулай күп кешеләргә зыян килтереп йөрөй булһа кәрәк. Беҙ быға сик ҡуйырға тейешбеҙ.
Батырҙар, ашап-эсеп туйғандан һуң, ҡоралдарын

алып, ҡарттың һаҡалын тоҡҡа тыҡҡандар ҙа юлға сығып киткәндәр. Тау-урмандар үтеп, йылғалар кисеп, оҙаҡ барғандар батырҙар. Бейек тау башына күтәрелгәс, алда кемдеңдер, бик ҡабаланып, уларҙан ҡасып барғанын күреп ҡалғандар.

Шул ерҙә Аҡъял батыр иптәштәренә ҡысҡырған:

— Дуҫтарым! Ана ҡайҙа ул теге иргәйел ҡарт! Ул беҙҙән ҡаса булһа кәрәк,— тиҙерәк ҡыуып етергә кәрәк үҙен!

Шул ерҙә өс бәһлеүән теге ҡартты ҡыуып киткәндәр. Ләкин икенсе бер тауҙың түбәһенә барып менгәс, ҡарт, ергә һеңгән кеүек, күҙҙән юғалған.

Батырҙар ҡарт юғалған ергә барып ҡараһалар, бер ҙур тишек күргәндәр.

— Дуҫтар,— тигән Аҡъял батыр, иптәштәренә ҡарап,— һеҙ өҫтә һаҡлап тороғоҙ, ә мин аҫҡа төшәм дә теге ҡартты эҙләп табам.

Күп уйлап тормайынса, улар теге ҡарттың һаҡалынан арҡан ишкәндәр ҙә, Аҡъял батыр арҡандың бер осона үҙе йәбешкән, икенсе осон иптәштәренә тоттороп, ер аҫтына төшә лә башлаған.

Батыр, аяғы ергә тейгәс, тирә-яғына әйләнеп ҡараһа, киң ялан уртаһынан юл һуҙылып киткәнен күргән. Шул юлдан бара торғас, батыр бер ҡала янына барып сыҡҡан. Ҡаланың иң ситендә бер иҫке генә өй ултыра икән. Өйгә барып инһә, унда ҡот осҡос ябыҡ бер ҡарт менән ҡарсыҡ ултырғанын күргән.

Батыр уларҙың хәл-әхүәлдәре, көнкүрештәре тураһында һорашырға тотонған.

Ҡарт тәрән итеп көрһөнгән дә:

— Улым, һыуға барып килсе, юғиһә безгә бында һыу бирмәйҙәр,— тигән.

— Һиңә ашарға әҙерләр өсөн һыуыбыҙ ҙа юҡ шул беҙҙең,— тип өҫтәгән ҡарсығы.— Һин бында ҡунаҡ кеше, шуның өсөн һиңә бер биҙрә һыу алырға рөхсәт итерҙәр.

Аҡъял батыр ҡулына биҙрә алған да ҡаланың икенсе осона һыуға киткән. Унда күҙгә күренеп ялтыр ҙур күлгә барып ҡоя торған бер һалҡын шишмә бар икән.

Көмөш кеүек, сылтыр-сылтыр килеп аҡҡан шишмәнән һыу алырға тип ынтылғанда ғына, батыр ҡапыл бер ҡалын тауыш ишеткән:

— Ни өсөн килдең һин бында? Кем булаһың һин?

— Мин — ҡунаҡ! — тип яуап биргән Аҡъял батыр.

— Ҡунаҡ булғас, бер биҙрә һыу алырға ярай.

Аҡъял батыр биҙрәһенә һыу тултырған да ҡайтып киткән. Ә уға юлда осраған кешеләр, был ваҡытта һыу алырға ниндәй хәйлә тапты икән тип ҡыҙығалар ҙа, ғәжәпләнәләр ҙә икән.

Батыр, һыу алып ҡайтып, биҙрәһен ҡуйырға ла өлгөрмәгән, аҡтыҡ сиккә етеп һыуһаған ҡарт менән ҡарсыҡ һыуҙы тын да алмай эсеп тә бөтөргәндәр.

Шул ерҙә Аҡъял батыр бында йәшәгән халыҡтың көнө-төнө һыуһыҙ интегеүен аңлап алған.

Ҡулына үҙенең үткер ҡылысын һәм биҙрәне алған да өйҙән сыҡҡан.

Ҡарт, быны күреп:

— Ҡайҙа бараһың, улым? Ул һиңә башҡа бер тамсы ла һыу бирмәйәсәк! — тип ҡысҡырған.



Ләкин Аҡъял батыр үҙ һүҙендә торған:

— Мин кешеләрҙең һыуһынын ҡандырырға теләйем. Мин ул уҫал һыу хужаһын ҡыуып ебәрәсәкмен! — тигән ул.

Йылға ярына килеп баҫҡан да биҙрәһен һыуға сумырған, ә үҙе ҡылысын әҙер тотоп тора икән. Ул биҙрәһен һыуҙан күтәреп алдым тигәндә генә, һаҡалһыҙ бер ҡарт уның өҫтөнә ташланмаһынмы!

— Һин бына ҡайҙа икәнһең! — тип ҡысҡырған Аҡъял батыр.— Миңә һин кәрәк тә инде!

Шул ерҙә ул үҙенең үткер ҡылысы менән ҡарттың башын тап муйынынан өҙә сапҡан.

Аҡъял батыр, юл буйлап ҡайтҡанда, үҙенә осраған бер кешегә ҡарап, былай ти икән:

— Бөтәгеҙ ҙә, ҡурҡып-өркөп тормайынса, барып һыу алығыҙ. Мин һыуҙың ҡомһоҙ хужаһын — иргәйел ҡартты юҡ иттем.

Халыҡ ҡыуанып һыуға йүгергән. Бөтәһе лә һыуһындары ҡанғансы эскәндәр, аш бешергәндәр, мунса яҡҡандар. Ә ҡыйыу Аҡъял батырҙың даны бөтә ер аҫты батшалығына таралған.

Бер аҙҙан һуң Аҡъял батыр ҡарттар менән хушлашҡан да ары киткән.

Ҡала урамдары буйлап бара торғас, ул бер киң майҙанда күп халыҡ йыйналғанын күргән. Хәбәр таратыусылар урам буйлап йөрөйҙәр ҙә ҡысҡыралар икән:

— Әгәр ҙә кем дә кем уҡ менән батшаның балдағын үтә ата алһа, шул кешегә батша үҙенең бөтә байлығын бирергә вәғәҙә итә, ә кем дә кем яҙа атһа, уны ҡамсы менән һуҡтырасаҡ!

66

— Ҡана, бәхетемде һынап ҡарайым әле,— тигән дә Аҡъял батыр майҙанға табан киткән.

Ул майҙанға барып күренгәс тә, вәзирҙәр һәм батшаның башҡа яҡын кешеләре унан көлөргә тотонғандар, сөнки уның өҫтөнә кейгән кейеме иҫке, алама булған. Ләкин ул үҙенә әйтелгән һүҙҙәргә ҡолаҡ һалмаған, ә атаһынан ҡомартҡы булған әлеге йәйәһен алған да, керешен тарта һалып, атып та ебәргән. Уҡ, һыҙғырып барып, балдаҡты әләктергән килеш батша һарайының стенаһына ҡаҙалған.

Майҙандағы халыҡтың бөтәһе лә шау-шыу килеп ҡысҡырырға, аяҡ тибергә тотонғандар, ә ҡалҡыу урында ултырған батша, ҡулын күтәреп, халыҡты тынысландырған да:

— Был егет минең бөтә байлығымды аласаҡ,— тигән.

Шунда уҡ ул Аҡъял батырҙы үҙенең һарайына алып барған.

Аҙмы-күпме ваҡыт үткәндер, Аҡъял батыр күрше батшалыҡта ла шундай уҡ мәргәндәр ярышы үткәрелеүе тураһында ишеткән һәм шунда ҡарап юл тотҡан.

Аҡъял батыр, батшалыҡтың баш ҡалаһына килеп еткәс, әлеге хәбәр таратыусыларҙың белдереүен ишеткән:

— Кем дә кем уҡ менән атып энә күҙенән үткәрә алһа, шул кешегә батша бөтә милкен бирә, ә яҙа атҡан кешенең иңбашына тиклем ҡулдарын киҫтерәсәк!

— Ҡана, тағы ла бәхетемде һынап ҡарайым

әле,— тигән Аҡъял батыр һәм батша һарайына барған.

Ул батша һарайының ишек алдына барып инһә, вәзирҙәр һәм батшаның башҡа яҡын кешеләре унан тағы көләргә тотонғандар.

Аҡъял батыр һаман иҫке кейемендә булған, сөнки ул үҙенең бөтә байлығын ярлыларға таратып бөткән икән.

Ләкин батыр үҙенә әйтелгән һүҙҙәргә ҡолаҡ һалмаған, уғын йәйәһенә һалған да атып та ебәргән. Ә уҡ энә күҙе үтә сығып киткән.

Бөтә халыҡ шау-шыу килеп ҡысҡырған, аяҡ тибергә керешкән, ә батша, халыҡҡа ҡарап, былай тигән:

— Бөтә милкемде мин ошо егеткә тапшырам!

Һәм ул үҙ милкен батырға биргән.

Аҙмы-күпме ваҡыт үткән, Аҡъял батыр күрше батшалыҡта тағы ла шундай ярыш буласағы тураһында ишеткән.

Йәһәт кенә йыйынған да шунда киткән.

Ҡалаға килеп инһә, унда әлеге хәбәр таратыусылар урам буйлап ҡысҡырып йөрөйҙәр икән:

— Беҙҙең батша бәһлеүәндәрҙе көрәшкә саҡыра. Кем дә кем уны еңһә, шуға батшалыҡ бирелә; әгәр ҙә еңә алмаһа, уның башы киҫелә!

Аҡъял батыр өсөнсө тапҡыр үҙенең бәхетен һынап ҡарамаҡсы булған һәм ҡаланың киң майҙанына барып сыҡҡан. Унда вәзирҙәр һәм батшаның башҡа яҡын кешеләре унан көләргә тотонғандар, ләкин батыр уларҙы тыңламаған, батшаның алдына барып баҫҡан да:

— Һин бәһлеүәндәрҙе көрәшкә саҡырғанһың икән,— мин дә һинең менән алышырға теләйем! — тигән.

— Ҡара, егет,— тип иҫкәрткән уға батша,— минән яҡшылыҡ көтмә: мин инде күптәрҙең башына еттем.

— Мин ҡурҡмайым,— тип яуап ҡайтарған Аҡъял батыр.

Улар билдәренән аймап тотошҡандар ҙа көрәшә башлағандар. Батша батырҙы, күтәреп алып, ергә һуғам тигәндә генә, Аҡъял батыр биленән һыпырылып китеп, батшаны күтәреп алған да бик бейеккә сөйөп ебәргән. Ә унан, түбән төшөп килгәндә, тотоп алған да үҙен ергә баҫтырған. Шул ерҙә батша, үҙенең еңелеүен танып, бөтә тауышы менән ҡысҡырған:

— Батыр кейеме менән түгел, ә егетлеге менән көслө! Хәҙер мин еңелдем! Бөгөнгө көндән алып минең бөтә байлығым Аҡъял батырҙыҡы буласаҡ!

Шулай итеп, Аҡъял батыр тағы ла ҙур байлыҡҡа эйә булған.

Аҙмы-күпме ваҡыт уҙғандан һуң Аҡъял батыр, урманда һунарҙа йөрөй торғас, үҙенең ер өҫтөндә ҡалған иптәштәрен иҫенә төшөргән. Ул, оҙаҡ уйлап тормайынса, күпме күтәрә алһа, шул тиклем алтын, көмөш һәм һәр төрлө затлы нәмәләрен алған да юлға сыҡҡан.

Ай киткән, йыл киткән. Ҡараһа, үҙенең әлеге ер аҫтына төшкән урынына барып еткән. Баҡһа,— арҡан үҙ урынында. Шул ерҙә ул үҙенең бөтә алтын, көмөштәрен һәм аҫыл таштарын арҡанға аҫҡан да, өҫкә тартып сығарығыҙ, тип иптәштәренә ҡысҡыр-

ған. Ә өҫкә сығарғас, шул тиклем байлыҡты күреү менән, иптәштәренең күҙҙәре аҡайған, көнләшеүҙән йөрәктәре ҡарайған, ҡулдары ҡалтыранған.

— Был байлыҡты икегә генә бүлергә мөмкин булғанда, ниңә уны өскә бүлеп торорға! — тигән Урман батыр.

Тау батыр ҙа уның һүҙен ҡеүәтләгән:

— Ысынлап та, һин хаҡлы,— тигән.

Шулай итеп, улар үҙ-ара һүҙ беркеткәндәр ҙә Аҡъял батыр күтәрелеп килгәндә, арҡанды киҫеп тә ебәргәндәр. Ә батыр инде, өҫкә сыҡтым ғына тигәндә, кире түбәнгә осҡан.

Батыр, аҫҡа барып төшкәс, аҙмы-күпме ваҡыт һушһыҙ ятҡандан һуң, иҫенә килеп, башын күтәргән дә уйға ҡалған: «Хәҙер миңә ни эшләргә инде?..» Ләкин оҙаҡ уйлап торорға ваҡыт юҡ, бынан сығыу юлын эҙләп табырға кәрәк. Шул ерҙә ҡалҡып торған да башы һуҡҡан яҡҡа сығып китеп барған.

Бара-бара торғас, ул бер ҡара урманға килеп сыҡҡан. Ошо урман араһынан барғанда, ҡапыл уға ниндәйҙер аяныс тауыш һәм ҡанаттар елпенеүе ишетелгән. Байҡаңҡырап ҡараһа, ни күҙе менән күрһен: баш осонда ғына ҡанаттарын йәйеп сәмреғош осоп йөрөй, үҙе, үкһеп илаған кеүек, йөрәк өҙгөс итеп ҡысҡыра икән.

— Ни булды икән уға? — тигән дә батыр ағас башына менә башлаған.

Иң осҡа тиклем менеп еткәс, ҡараһа, унда бер аждаһа, сәмреғоштоң балаларын һоғонмаҡ булып, уның ояһына ынтыла икән. Шул ерҙә Аҡъял батыр,



оҙаҡ уйлап тормайынса, үҙенең үткер ҡылысын һурып алған да аждаһаны тураҡлап ташлаған.

Быны күргәс, сәмреғош, ҡыуанып:

— Ҡыйыу һәм изгелекле егет,— тигән уға,— әйтсе, минең балаларымды ҡотҡарғаның өсөн ни менән бүләкләй алам һине?

— Миңә һинән бер төрлө лә бүләктәр кәрәкмәй,— тигән батыр.— Тик һин мине яҡты донъяға ғына сығар.

— Мин быны эшләй алам,— тигән сәмреғош,— тик миңә юлға күп аҙыҡ кәрәк буласаҡ. Һин миңә бер тоҡ сысҡан, бер тоҡ йомран тотоп килтер.

Аҡъял батыр бер тоҡ сысҡан, бер тоҡ йомран тотоп килтергән дә сәмреғоштоң арҡаһына ултырған, һәм улар осоп та киткәндәр. Әй осалар, әй осалар икән улар... Сәмреғош башын уңға борһа, батыр уның суҡышына сысҡан тыға, башын һулға борһа, йомран тыға икән.

Ни тиклем юғары күтәрелһәләр, осоу шул тиклем ҡыйын булған уларға. Ә уның ҡарауы серле ҡараңғылыҡ юғала барған һәм ер аҫты батшалығына яҡтылыҡ инә башлаған.

Бына, аҙаҡ килеп, улар ер өҫтөнә сыҡҡандар, һәм сәмреғош бер тау башына килеп ҡунған.

Аҡъял батыр сәмреғош менән хушлашҡан да, улар шул ерҙә айырылышҡандар: һәр ҡайһыһы үҙ юлына киткән.

Батыр, юл буйлап барғанда, туҡтап тирә-яғына ҡараһа, ни күҙе менән күрһен: уның иптәштәре ағас күләгәһендә теге байлыҡтарҙы бүлешеп ултыралар икән.

Аҡъял батыр улар эргәһенә барып баҫҡан да:

— Ах, хыянатсылар! — тип ҡысҡырып ебәргән.—Барыбер минән ҡасып ҡотола алмаҫһығыҙ!

Тау батыр менән Урман батыр ҡапыл ҡаушап ҡалғандар, ә һуңынан, Аҡъял батырҙың ҡылысын үбеп:

— Һин дөрөҫ әйтәһең. Үлтер беҙҙе! — тигәндәр.

Ләкин Аҡъял батыр былай тигән:

— Көнләшеү һәм яуызлыҡ менән һеҙ үҙегеҙҙе үҙегеҙ үлтерҙегеҙ инде. Һеҙ минән хыянат менән алған байлыҡты мин үҙем өсөн йыйманым — мин уны ярлыларға таратып бирергә теләгәйнем. Бирегеҙ уны миңә!

Тегеләр Аҡъял батырға бөтә байлыҡты кире ҡайтарғандар ҙа, ер үбеп, шундай вәғәҙә биргәндәр:

— Беҙ кешеләр алдында бурыслы булып ҡалмабыҙ: Тау батыр, тауҙарҙың бөтә байлыҡтарын табып, кешеләргә бүләк итер, ә Урман батыр — үҙенең көсөн аямайынса, кешеләр рәхәт йәшәһендәр өсөн, урмандар үҫтерер, баҡсалар ултыртыр,— тигәндәр.

Шул ваҡыт Аҡъял батыр уларҙы ебәргән дә, үҙе, ярлыларға ярҙам күрһәтер өсөн, тыуған ауылына ҡайтып киткән...

## Хәтәр шәп батыр

Борон заманда бер бай йәшәгән. Уның егерме туғыҙ хеҙмәтсеһе булған. Бай оҙаҡ йылдар буйы бер үгеҙ һимерткән, үгеҙ шул тиклем уҫалланып киткән, хатта егерме туғыҙ хеҙмәтсенең көсө етмәй икән. Яҡын барһалар, һөҙгөләй ҙә ташлай, ти.



— Утыҙ булһаҡ ине,— тигәндәр, ти, хеҙмәтселәр. Бер көндө байҙы күреп:

— Тағы берәй кеше булһа, көсөбөҙ етһә етер,— тигәндәр.

Бай хеҙмәтсе эҙләп сығып киткән, ти. Бер ауылда уға:

— Ана, мейес башынан төшмәгән бер малай бар, кәрәкһә, шуны ал,— тигәндәр.

Бай башта: «Мейес башынан төшмәгән кешенең ни рәте булһын?» — тигән. Һуңынан һөйләшеп ҡарарға булған.

Өйгә барып керһә, ысынлап та, малай мейес башында ята, ти.

— Улым, улым,— тигән бай,— бер генә айға миңә хеҙмәтселеккә бар әле.

— Ярар.

— Күпме һорарһың?

— Кәрәкмәй. Маңлайыңа бер сирттерерһең,— тигән малай.

Бай, йүгерә-атлай өйөнә ҡайтып, ҡатынына:

— Ҡарсыҡ, бушҡа бер хеҙмәтсе таптым, хаҡ алмайым, ти. Маңлайыңа бер сирттерһәң, етер тигәс, мин шуға риза булдым,— тип һөйөнсө алды, ти.

— Ай-һай, йүнле кеше булмаҫтыр ул,— тип әбейе шикләнә төшә. Бай:

— Мейес башында ятҡан малай хаҡ һорай беләме ни ул? — тип көлдө генә, ти.

Малай килә. Хеҙмәтселәр менән ашап-эсә лә, үгеҙҙең маңлайына сиртһә, үгеҙ йығылып китә. Бөтәһе лә хайран ҡалалар. Егерме туғыҙ хеҙмәтсе күтәрә алмаған үгеҙҙе ул бер үҙе күтәрә икән. Тегеләр

күмәкләшеп бер көн эшләгән эште был яңғыҙы ярты көндә бөтөрә, ти.

Бай бөтөнләй ғәжәпкә ҡала. Көн-төн уйлана, хәсрәтләнә. Шунан Мәскәй әбейгә үҙ ҡайғыһын һөйләп бирә.

— Донъя батырына осрағанһың,— ти теге ҡарсыҡ.— Бер сиртеүҙә үҙеңде лә үлтерер ул,— ти.

— Ни эшләтергә һуң уны? Үлтерергә кәрәк ине,— ти бай.

— Минең бер тәжрибәм бар. Оло үгеҙҙең ботон, шуға ҡушып егерме бот бойҙай килтерһәң, өйрәтермен,— тигән Мәскәй.

Бай риза булған.

— Улым,— тигән Мәскәй әбей байға,— донъяла алтын тау бар. Шул тау башында алтын киле менән алтын килеһап ята. Уларҙы дейеү һаҡлай. Шуны алып ҡайтырға ҡушып сығарып ебәрһәң, ул кире ҡайтмаҫ.

Бай, әбейгә рәхмәттәр уҡып, өйөнә ҡайта ла малайға:

— Улым, алтын тау бар икән. Шул тауҙа алтын киле менән алтын килеһап ята икән, алып ҡайтып бир әле,— ти.

Малай икенсе көндө үк юлға сыҡҡан. Ай китәһен — бер сәғәттә, йыл үтәһен бер көндә үтеп, малай алтын тауҙы эҙләп тапҡан. Барһа, бер дейеү йоҡлап ята икән. Малай килене тәгәрәтеп, һабын күтәреп алып ҡайта ла китә. Ҡайтып етә лә киле менән килеһапты байҙың ишек алдына ҡуя.

Бай, йоҡоһо осоп, тағы Мәскәй әбейгә йүгерә.

— Ни эшләтергә инде? Алып ҡайтты бит! — ти.

— Ураҙгилде һыуында ике тирмән ташы ята. Шуларҙы төшөп алып сыҡһын,— ти әбей.

Бай малайҙы шул таштарҙы алып ҡайтырға ебәрә.

Малай оҙон итеп арҡан ишә лә, байҙы тыңлап, ике-өс көндә күл янына барып етә. Етһә, бер дейеү аш бешереп ултыра. Иҫләмәҫтән генә дейеүҙе ҡыҫып үлтерә. Икенсеһе һыу килтерә икән, уныһын сиртеп үлтерә лә, арҡан буйлап төшөп, тирмән таштарын алып сыға.

Байҙың, малайҙы күреп, ҡото оса, ул тағы Мәскәй әбейгә йүгерә.

— Ни эшләтергә? Алып ҡайтты бит,— ти. Ҡарсыҡ:

— Ата-бабанан ҡалған малдар кейекләнеп киткән, шуларҙы алып ҡайтһын,— ти.

Бай, өйөнә ҡайтып, малайға был хәл тураһында һөйләп бирә.

— Ярар, барырмын,— ти малай.— Баҙарға барып, күп кенә киндер алып ҡайтырға кәрәк,— ти.

— Ни эшләтәһең уны?

— Уныһын үҙем беләм,— ти малай.

Бай менән малай, баҙарға барып, киндер алып ҡайталар.

Малай киндерҙән оҙон итеп сыбыртҡы ишкән дә икенсе көн иртә менән урманға сығып киткән. Көн йөрөгән, төн йөрөгән, урман эсе шаулап торған. Сыбыртҡы шартлауын ишетеп, барлыҡ йәнлектәр юлға сыҡҡан, ти.

Малай, уларҙы өйөрөп, ҡыуып ауылға алып ҡайтҡан да:

— Бына алып ҡайттым, эшем бөттө,— тип ҡысҡыра икән.

Бай, урам тулы йәнлектәрҙе күреп, ғәжәпкә ҡалған. Ни эшләргә? Муллаларҙы йыйып кәңәшләшә. Муллалар теге малайҙы өгөтләргә тотоналар.

— Ни теләһәң, шуны ал,— тиҙәр.

— Әйткән һүҙ — атҡан уҡ,— тигән дә байҙың маңлайына сиртеп тә ебәргән теге батыр. Бай шунда уҡ үлеп ҡалған. Ә донъя батыры, уның донъяһына хужа булып, уртансы ҡыҙын алып, әле лә көн күреп йәшәп ята икән шунда.

## Ырыçбикә менән Хеҙмәтйән

Борон-борон заманда ерҙә аслыҡ, ялanғаслыҡ хөкөм һөргәндә, әле бәхет тыумаған саҡта, йәшәгән, ти, бер ырыу.

Кешеләр йылғаларҙа көмөш балыҡ, яландарҙа кейек тотоп, урмандарҙа бал әҙерләп көн күргән. Ерҙә бәхет тыумағас, бик хәсрәтле, аслы-туҡлы йәшәгән бахырҡайҙар. Тыуған балалары ла бер-бер артлы үлеп торған, ти. Ырыу кешеләре, аптырашҡа ҡалып, ырыуыбыҙҙы кем дауам итер, тип ҡайғырышҡанда, Шишмәгөл менән Эшйәр батырҙың улы тыуған, ти. Ырыу бик шатланған, урман, тау, һыу, ялан тәңреләренә күп ҡорбан салған, бик ҙурлап исем туйы үткәргән. Балаға Бапаҡ тип исем ҡушҡандар.

Бапаҡты көслө кеше итеп үҫтерәйек, тигәндәр. Тәмле итле кейектәрҙе, кем уҙарҙан тотоп, уға килтереп ашатҡандар. Унан артып ҡалһа ғына, һөйәктәрҙе үҙҙәре кимергән. Бапаҡ алты йәшкә тиклем

имгән, имеш. Ырыуҙағы бөтә әсәләр уға күкрәк һөтө имеҙгән, үҙ улылай күргән. Ырыу ирҙәре, ғәйрәтле батшабыҙ булыр, башҡа ырыуҙарҙы еңгәс, бөтәбеҙгә лә батша итербеҙ, тип өмөтләнгән. Бапаҡты һунарға алмағандар, айыу, бүре талар, тип ҡурҡҡандар.

Бапаҡ шулай үҫә. Көс яғынан уға ҡаршы торорлоҡ әҙәм табылмай. Батша булырға ваҡыт етте, тип уйлай ул.

Бер көн ырыу ирҙәре һунарҙан ҙур үгеҙ тотоп алып ҡайтҡас, Бапаҡ:

— Етер,— тип бойорған.— Батша итеп ҡуйығыҙ мине.

Ырыу уҙамандары ныҡ аптыраған, шулай ҙа тәүҙә батша булыр өсөн өс һөнәреңде күрһәт, тигән.

— Шартығыҙҙы әйтегеҙ! — Бапаҡ ергә типкән, хатта яҡындағы тау һелкенеп ҡуйған, ти.

Ырыуҙың иң оло кешеһе, һүҙ алып:

— Улыбыҙ Бапаҡ, ҙур үҫтең, батша булырға теләйһең. Батша булырҙан алда көсөңдө, икенсенән, аҡылыңды, өсөнсөнән, беҙгә тоғролоғоңдо күрһәт! — тигән.

— Яҡшы! — тигән Бапаҡ һәм, һигеҙ ир көскә-көскә күтәреп ҡайтҡан үгеҙҙе елкәһенә һалып, усаҡ тирәләй йүгереп сыҡҡан.

— Һе... е... — тигән ырыу ҡарты,— һинең йәштә ундай үгеҙҙе мин дә күтәрә инем. Батша итеп ҡуймаһылар.

Бапаҡ үҫеп ултырған йыуан имәнде тамыры менән йолҡоп алған.

— Көслө, көслө! — тип ҡысҡырған халыҡ.

— Юҡ! — тигән ырыу ҡарты.

Бапаҡ, тауҙы ишеп төшөрөп, йылғаны быуып ташлаған.

— Ниндәй йәш, ниндәй көслө! — тип аптыраған тамашасылар.

— Юҡ,— тигән ырыу ҡарты.

Үсегеүенән Бапаҡ, йүгереп килеп, ҡартты, һаҡалынан алып, һауаға сөйгән.

— Аҡылһыҙ, аҡылһыҙ,— тигән халыҡ.

Ҡарт, табандары ҡабат ергә тейгәс:

— Улым Бапаҡ, көс беләктә түгел, ә беҙҙең берҙәмлектә! — тигән.

Бапаҡтың бик асыуы килгән. Батша итеп ҡуйғың килмәй, тип, ҡарттың һаҡалынан йәнә бер ҡармап алған да ергә типкән. Ер ярылып киткән. Шул ярыҡҡа ҡартты төшөрөп ебәргәс, Бапаҡ:

— Мин һеҙҙең батшағыҙ! — тип ҡысҡырған. «Тоғролоғоңдо күрһәт!» тигән тауыш ер аҫтынан килгән, ти. Кешеләр ҡаушап ҡалған.

— Халыҡ, һеҙ миңә үҙегеҙ тоғролоҡ күрһәтегеҙ,— тип аҡырған Бапаҡ.— Мин — батшағыҙ!

Кешеләрҙең ауыр нужаларына өҫтәлеп, хәсрәтле көндәр шулай башланып киткән, ти. Бапаҡ батша бейек тау башында үҙенә ҡыуыш эшләттергән. Төнөн арыҫлан, юлбарыҫ, айыуҙар үтеп инмәһен өсөн төйәген таш ҡойма менән ураттырған. Ул ҡыуыш-ҡоролма бейек-бейек булған, ти, хатта йыраҡтағы олпат тауҙар күгәреп күренеп торған. Болот сыҡһа, ямғыр түбәнгә яуған. Бапаҡ батшаны һәр ваҡыт ҡояш йылытҡан. Тау башындағы ҡыуышынан ул кешеләр эшләгәнде күҙәтеп кенә ултырған. Итте аҙ килтерһәләр, балыҡ ҡына тотһалар, туҡмап кире

ебәргән. Ҡатын-ҡыҙ, бала-сағанан ҡараңғы төндә еләк йыйҙыртҡан. Бер кем икенсе ырыуға сығып китә алмаған: Бапаҡ батша тау башынан йыраҡ ерҙәрҙе күреп торған, ти. Башҡа ырыуҙар, унан ҡотолор өсөн, дөм-ҡараңғы, йонсоу төндәрҙә икенсе урынға күсеп киткән.

Көтмәгәндә ҙур ҡайғы килгән.

Ете көн, ете төн туҡтауһыҙ боҙло ямғыр яуған. Йылғалар, ярҙарынан сығып, күлдәр менән тоташҡан. Тәпәш тауҙар һыу аҫтында ҡалған. Ырыу торған урынды һыу баҫа, халыҡты батша тауына ҡыҫырыҡлай. Халыҡ Бапаҡ батшаға ялбара:

— Үлемдән ҡотҡар, ҡоро урын бир! — ти.

— Күрмәйһегеҙме, тирә-яғымды һыу баҫа. Үҙемә лә урын тар әле,— ти батша.

— Эсергә бер йотом һыу бир, улым,— тип үтенгән әсәһе.

— Батшанан һыу һорамайҙар! Тирә-яғында — һыу,— тигән Бапаҡ батша.

— Халыҡҡа ҡоро урын бир,— тигән атаһы.

— Тиҙерәк китегеҙ! — тип ҡыуған Бапаҡ.

Халыҡтың күбеһен ташҡын, боҙло һыу ағыҙып алып киткән, бер төркөм генә, үҫкән ағастарға йәбешеп, тере ҡалған. Тереләр, был урынды ҡалдырып, икенсе ергә күскән. Икенсе ырыу менән аралашып йәшәй башлаған, ти.

Бапаҡ батша тау башында яңғыҙ ҡалған. Ямғыр туҡтап, һыу кәмегәнен көтөп, ул ҡыуышында оҙаҡ ултырған. Халыҡ килтергән ризығы ла бөткән. Батша асыға башлаған. Ниңә һаман аш-һыу килтермәйҙәр, тип, тирә-яғын байҡаһа, бер кем дә күренмәй.

Мине ташлап ҡасҡандарҙыр, тип ул нығ асыулана, үс аласаҡмын, тип ғәйрәтләнә. Әммә көслө ташҡын уны ебәрмәй, ти.

Иәнә ете көн үтеүгә генә, һыу ярҙарына ҡайта башлай. Бапаҡтың ризығы бөтә, ул асыға. Ниндәй еләкте ашарға ярағанлығын да белмәй. Балыҡты нисек тотҡандарын күргәне лә булмағас, ул тау башынан төшөргә мәжбүр була.

— Асыҡтым, ашарға килтерегеҙ,— тип һөрәнләй. Тауышын бер кем ишетмәй. Ул ағастарға йәбешеп ҡалған мәйет өлөштәре эргәһенән йүгереп йөрөй.

— Мин һеҙҙең батшағыҙ! — тип ҡысҡыра, ләкин тирә-яҡта йән эйәһе булмай. Бапаҡ мәйеттәр батшаһы булып ҡала.

Оҙаҡ йөрөй, ти, ул ырыуҙы эҙләп. Осраған айыу, бүреләр ҙә уның һорауына яуап бирмәй генә һыпырта. Болан, кәзәләр урап үтә.

Ауырлыҡ нужаһы үҙенең ата-әсәһен иҫенә төшөрә. Бапаҡ үҙен йәлләп илай. Күҙ йәше тамған ерҙә гөл-сәскәләр һулый. Алға барған һайын, урман ҡуйыра, артҡа боролам тиһә, юлы һаҙға әйләнә. Юл һалырға ағас йолҡам тиһә, көсө етмәй.

— Юл бир, урман,— тип ҡысҡыра.

— Юл юҡ... юҡ,— тип ауазлай урман.

— Ниңә батшаға юл юҡ?

— Халҡыңды үлемгә ҡыуҙың,— ти урман.

— Халыҡ үҙе мине ташлап китте.

— Юҡ,— ти урман,— һин ҡыуҙың.

— Торған урыным тар ине,— ти Бапаҡ,— шул хәтле халыҡты һыйҙырырғамы...

— Күңелең тар ине,— ти урман.— Юл юҡ һиңә. Мәңге аҙашып йөрө!

Бапаҡҡа урман юл күрһәтмәгәс, аптырауынан ул, тауға күтәрелеп, тирә-яҡҡа ҡарамаҡ була. Тауға менәм тиһә, баҫҡан таштары түбәнгә тәгәрәп төшә, йәбешәм тиһә, йәбешә алмай, таштар боҙға әйләнә. Боҙло таштар уның ҡулын, өшөгән аяҡтарын йәрәхәтләй. Күпме генә тырышһа ла, тауға менә алмай бахыр. Оҙаҡ хитланғас, ул тауҙың һөҙәк яғынан менергә була. Унан да менә алмай, ти, теге, баҫҡан урыны һаҙға әйләнә, бата башлай. Тамам хәлдән тайғас, ул тауҙан:

— Тау, ниңә мине мендермәйһең? — тип һорай.

— Халҡыңды ҡыуҙың, ата-әсәйеңде йәберләнең.

— Юҡ,— ти Бапаҡ,— йәберләмәнем. Уларҙы һағынып илайым.

— Йәберләнең!.. — ти тау үкереп.

— Йәберләнең! — тип икенсе тауҙар тауышты күтәреп ала.

— Йәберләнең! — тип урман да ҡушыла.

— Йәберләнең! — тип ҡоштар ҙа телгә килә. Кейектәр ҙә, быуар йыландар ҙа: «Йәберләнең, ата-әсәйеңде йәберләнең!» — тип Бапаҡ алдында өйөрөлә.

Бапаҡ, тауыштарҙы ишетмәҫкә тырышып, өшөгән ҡулдары менән ҡолаҡтарын ҡаплап, күккә ҡарай. Күктә яңғыҙ ҡоҙғон емтек эҙләп әйләнә. «Ҡоҙғон, ҡоҙғон!» — тип, ҡулдарын алға һуҙһа, ҡулдары ҡолаҡтарына йәбешә. Көслө ҡулдарын ҡолаҡтарынан айырып ала, ләкин ҡолаҡтары һуҙылып ишәк

ҡолағына әүерелә. Алға һуҙылған ҡулдарының бармаҡтары кәкрәйеп тырпайыша, ти.

— Ҡоҙғон, ҡоҙғон! — тип ҡысҡыра ул.

— Ә...ә...ү, Бапаҡ.

— Әйт әле, ҡоҙғон, мин һине йәберләнемме?

— Йәберләнең!..

— Йәберләнем? Мин һиңә күпме ризыҡ бирҙем.

— Бик күп бирҙең, Бапаҡ. Мәйет күҙҙәрен генә лә айҙар буйы соҡоноҡ. Күпме соҡорға кәрәк әле? Ҡошсоҡтарым һимереп хәҙер оса алмай йөрөй — кем ғәйепле?.. Шулай ҙа аслыҡтан ҡотҡарҙың...

— Шулай булғас, әйт, ҡоҙғон, ырыуым ҡайһы яҡҡа китте?

— Йыраҡҡа! Ҡара урман артындағы йәшел болондарға, киң йылғалы һөҙәк тауҙарға. Етер өсөн — өс көн, ҡайтыр өсөн йәнә өс көн осор кәрәк.

— Булдыңмы һин унда?

— Булдым, булдым. Улар хәҙер батшалы һәм бәхетле йәшәй.

— Батшалары кем?

— Бер туған ҡустың Хеҙмәтйән.

— Нисек бәхетле йәшәйҙәр, аңламайым?

— Хеҙмәттең кәләше — Ырыҫбикә. Ул кешеләрҙе йылмайырға, бейергә, йырларға өйрәтте.

— Күрһәт миңә юлды!

— Улар ҡояш батҡан яҡта йәшәй. Күп тауҙар үтергә, күп һыуҙар кисергә кәрәк. Сикһеҙ яландар башыңды әйләндерер. Барып етһәң дә, һине улар ҡабул итмәҫ.

— Мин уларһыҙ ас йәшәйем. Бер кем ҡыҙҙырыл-

ған ит килтермәй. Барып еткәс тә үс алам,— ти ҙә Бапаҡ ҡояш батҡан яҡҡа ыңғайларға итә.

— Урап үтә алһаң — үтерһең, ләкин мин юл бирмәйем,— тип Тау уның ҡаршыһына баҫа.

Бапаҡ урманға ынтыла. Барып керһә, ағастар сәнскеле ботаҡтары менән уны уратып ала, ебәрмәй.

— Ҡоҙ-ғон! — тип ҡысҡыра Бапаҡ,— мине ебәрмәйҙәр.

— Көндөҙ бара алмаҫһың, төнөн, урман йоҡлағас, кит. Ялан ерҙән бар. Артыңдан мин дә осормон. Һин бар ерҙә миңә ризыҡ мул,— ти ҙә ҡоҙғон Бапаҡ батшалыҡ иткән тауға мәйеттәр эҙләп оса.

Бапаҡ, төн еткәнен көтөп, тып-тын ултыра, урман йоҡлағас, юлға сыға. Яҡтыра башлауға, урман уяна. Был ваҡытта Бапаҡ яланға сыҡҡан була. Урман оло ғауға күтәрә. Оҙон-оҙон олондары менән уны тоторға һуҙылып ҡарай — буйы етмәй. Бүтән бер ваҡытта ла төнөн йоҡламаҫҡа ант итә урман.

Бапаҡ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ яланға сығып, йәнә китеп бара. Ҡараңғы төшөүгә, ял итергә туҡтай. Тирәяғына ҡараһа, үҙе батшалыҡ иткән тауға әйләнеп килгән икән. Үкһеп-үкһеп илай ҙа йоҡларға ята, йоҡлап торғас, тағы юлға сыға. Туҡтап ҡараһа, йәнә шул уҡ тау ҡаршыһында тора, ти. Тағы илай-һыҡтай яланға өндәшә:

— Ниңә, Ялан, мине аҙаштыраһың? — ти.

— Ата-әсәйҙе, халыҡты йәберләүсегә юл юҡ,— ти Ялан һәм мал, кешеләр йөрөгән һуҡмаҡтарҙы йәшереп, йәшел үлән менән ҡаплай һала. Бапаҡ үҙенең килгән юлын да тапмай, ҡайһы яҡҡа барырға белмәй ҡала.

— Мин уларҙы ҡыуманым, үҙҙәре, ташҡындан файҙаланып, мине ташлап ҡасты,— ти Бапаҡ.

— Халҡыңа мин ҡайһы яҡҡа китергә юл күрһәттем,— ти Ялан.— Күҙ йәштәре көҙгө ямғырҙай туҡтауһыҙ, күргән хәсрәттәре йөҙҙәрендә айһыҙ төндәй ҡара ине. Һиңә юл юҡ, һине һыйҙырырлыҡ урыным да юҡ,— ти Ялан, Бапаҡты ҡыуып.

Бапаҡ аптырағас, ҙур йылғаға килә:

— Йылға! Йылға! Миңә юл күрһәт әле,— тип өндәшә.

Бер кем яуап бирмәгәс, ул таш алып, һыуға ырғыта.

Бына дауыл ҡуба. Бейек-бейек тулҡындар, ярға килеп бәреләләр кире тәгәрәп төшә. Тулҡындар уны әләктереп, һыуға ташларҙай тойола, һәм Бапаҡ ҡурҡыуынан күҙҙәрен йома. Күҙҙәрен асһа, алдында оҙон ҡара сәс толомон борғаландырып, балыҡҡа оҡшаған кәүҙәле, көмөш тәңкәле Һыу инәһе баҫып тора, ти.

— Ниңә минең тынлығымды боҙҙоң? — ти ул.

— Ырыуыма барырға юл күрһәт! — ти Бапаҡ.

— Һин кем?

— Бапаҡ батша.

— Һин, батша булам тип, минең кесе ҡыҙымдың юлына тау ишеп төшөрҙөңмө?

— Мин,— ти Бапаҡ ғорурланып.

— Һин минең ялтыраҡ үҙәндәремә кешеләр ҡыуып, мәйет менән һыуымды бысраттың.

— Ә... кешеләр? Үҙҙәре батты,— ти Бапаҡ.

— Мин һине лә батырам,— тип, Һыу инәһе уға лайлалы ҡулдарын һуҙа.



— Минең йәшәгем килә! — тип, Бапаҡ артҡа сигенә.

— Уларҙың да йәшәгеһе килә ине,— тип, Һыу инәһе Бапаҡты баҫтыра башлай.

Эҫе ҡояш нурҙары Һыу инәһенең тәңкәләрен киптерә, ти, сәсе елберләп, үләнгә урала. Ул, оҙаҡ баҫтыра алмай, һыуға ҡабат ҡайта.

Бапаҡ ҡайһы яҡҡа китергә лә белмәй. Аптырауынан ул тағы ла ҡоҙғонға өндәшә. Ҡоҙғон:

— Төнөн генә бар,— ти.— Өкө юл күрһәтер. Йылғаларҙы әтәс ҡысҡырғанда ғына кис. Ул ваҡытта

һыу инәһе йоҡоға китә. Ашыҡ, Бапаҡ, ризыҡтарым бөтөп килә. Тиҙерәк ҡыбырла!

Мул үләнле йәшел болондар, емешле ағастар тулы һөҙәк тауҙар, балыҡлы күлдәр... ырыуҙың яңы урыны шундай була. Урманда төрлө кейектәр, болонда емештәр шул тиклем күп, ти, кешеләргә ҡыш буйына еткән. Балыҡ күлдәргә һыйышмай, хатта ҡоро ергә сығып йөрөгән, ти. Эйе, ырыу, шулай итеп, ҡайғыһыҙ көн күргән. Бапаҡ батшаның яуызлығы иҫенә төшһә, уны телгә алғандар ҙа йәнә онота башлағандар, имеш.

Көндәрҙән бер көндө Эшйәр батыр менән Шишмәгөлдөң йәнә бер улы тыуған, ти. Ырыу ҙур исем туйы үткәрмәгән. Усаҡ эргәһендә йыйылышҡандар ҙа балаға Хеҙмәтйән тип исем ҡушҡандар.

Хеҙмәтйән дә, Бапаҡ ағаһына оҡшап, тиҙ үҫкән, ти. Өс ай тигәндә, сәңгелдәктән шыуып төшөп, үҙ йүнен үҙе күрә башлаған. Ата-әсәһе уны, ағаһы Бапаҡҡа оҡшап үҫер тип, иркәләтмәй ҙә икән. Төрлө йомош ҡушһалар, Хеҙмәтйән бөтә эште еренә еткереп эшләй. Әсәһе балыҡ таҙартырға ултырһа, ул да, үткер таш табып, балыҡ тәңкәләрен ҡыра. Ирҙәр һөңгө ослаһа, ул һөңгө һабына ағас әрсей. Бер көн һунарсыларҙың тәкә баҫтырып этләнгәндәрен күреп, ир-егеттәргә уҡ яһап бирә. Ҡулдан ырғытылған уҡ әллә ни алыҫҡа осмай. Хеҙмәтйән уйға ҡала. Күп тә үтмәй, таяҡ бөгөп йәйә эшләй ҙә, атаһына бирә. Эшйәр батыр ҡуян, кәзәләрҙе атып ала хәҙер.

Бөтә кеше Хеҙмәтйәндең аҡыл-зиһененә, тырышлығына һоҡлана. Бүтән ырыуҙарҙан килеп:

— Әйҙә, беҙҙең ырыуға, беҙҙе лә өйрәтерһең.

Үҙеңде ырыу батшаһы итербеҙ,— тиҙәр икән. Хеҙмәтйән:

— Үҙегеҙ килегеҙ, бергә йәшәйек! — тип кенә ҡуя, ти.

Бер ваҡыт ҡыҙҙырылған үгеҙ ите көтөп ултырғанда, ырыу аҡһаҡалы һүҙ башлай:

— Мин бик ҡартайҙым,— ти.— Ырыуға яңы батша ҡуяйыҡ.

— Хеҙмәтте! Хеҙмәтте! — тип халыҡ шатлана башлай.

— Мин дә йәш,— ти Хеҙмәтйән.

— Иң аҡыллыһы,— тиҙәр.

— Иң көслө!

— Иң тоғро! — тип хуплайҙар.

Хеҙмәтйән ҡаршыһа ла, уны батша итеп һайлайҙар.

Бер батша ла батшабикәһеҙ булмай бит инде. Хеҙмәтте батша итеп ҡуйғандың икенсе көнөнә ҡул аҫтындағы ырыуҙың иң сибәр Ырыҫбикә исемле ҡыҙына өйләндерәләр. Ике ырыу бергә ҡушыла, туғанлаша. Хеҙмәтле һәм бәхетле йәшәй башлай. Хеҙмәтйән менән Ырыҫбикә бик татыу тора, ҡайҙа Хеҙмәт — шунда Бәхет була. Бәхет тә хеҙмәтһеҙ йөрөмәй. Хеҙмәтйән ырыу кешеләрен яңынан-яңы һөнәргә өйрәтә. Кеше ҡырағай кейектәрҙе ҡулға эйәләштерә, иген сәсергә өйрәнә. Ырыҫбикә үҙенең гүзәллеге менән йәшәү шатлығы бирә. Ырыуҙаштар күңелендә йыр уяна, улар бейей башлай, ҡоштарға оҡшатып һыҙғыра.

Шулай матур йәшәгәндә генә, балалар юғала башлай. Кешеләр бының сәбәбен айыу, бүре, йылан-

дарҙан күрә. Тегеләре, беҙ урламаныҡ, тип ант итә. Эҙләргә сыҡһалар, мәйетте йә һыуҙа табалар, йә ҡуйы урманда...

Кешеләр ҡайғырыша, ярҙам, кәңәш һорап, Хеҙмәтйәнгә килә. Егет нисек ярҙам итергә лә белмәй, яуызлыҡтың ҡайҙан сыҡҡанын һиҙмәй. Сабыйҙарҙы табындан ебәрмәгеҙ, ҡарауыллап тороғоҙ, ти.

Балаларҙың юғалыуы туҡталмай. Бигерәк тә тыңлауһыҙ балалар юғалып ҡына тора, ти.

Бер көндө кис, ҡараңғы төшкәс, Бапаҡ ырыу усағына килә. Уның яҡтылығында балалар ғына һөйләшеп ултырған икән. Бапаҡ ялҡынлы торомбашты әләктереп ала һалып, ырыу йәшәгән тау битләүенә ут төртә. Ут ҡыуыштарға яҡынлай. Кешеләр йүгерешеп сығып, утты һүндерә. Ялҡын шәүләләре аша улар Бапаҡты күреп ҡала.

Улы Бапаҡ тураһында ишеткәс, Шишмәгөл ҡайғыһынан ҡаты ауырыуға һабыша. Бер ниндәй үлән файҙаһы ла теймәй, эскән һыуы тамағынан үтмәй. Бапаҡҡа үлем дә теләй алмай, оҙон ғүмер ҙә теләмәй. Шишмәгөлдөң шиңгәнен күреп, ҡоштар һайрамай башлай. Малдар мөңрәшә, ти... Эшйәр батырҙың ҡулына эш бармай. Кешеләр, оло ҡайғы кәтөп, өнһөҙ ҡала. Шулай ҡаты ауырығанда, улы Хеҙмәт батшаны әсәһе саҡыртып ала ла:

— Батшам һәм улым, миңә Бапаҡты саҡырып килтер, ти.

— Ниңә, әсәй?

— Әйтер васыяттарым бар...

— Ләкин Бапаҡ ағайымды кешеләр... күреү менән үлтерәсәк.

— Һин батша бит, үлтертмә.

Хеҙмәт батша тауҙарға, ҡалын урмандарға Бапаҡты эҙләргә сығып китә. Көндәр, төндәр буйы йөрөй ул, ләкин Бапаҡ осрамай. Тау араларын ҡарай, һаҙлыҡтарҙан йөрөп сыға, ағас баштарына менеп саҡыра. Бер кем өндәшмәй. Тамам арый батша. Хәл алырға йәшен йыҡҡан ағас олонона килеп ултыра. Ҡараһа, алдында ҙур ялан. Яланда — сабый һөлдәләре, улар араһында ҡоҙғон балалары соҡсоноп йөрөй, ти.

Ярһыуына сыҙай алмай, Хеҙмәтйән:

— Ба-паҡ! — тип ҡысҡыра.— Кил бын-да!

Тауышҡа ҡоҙғон балалары, һөлдәләрҙән айырылып, ағас ботағына менеп ҡуна ла ҡарҡылдай башлай. «Үҙе килгән, үҙе килгән, ҡар-ҡар. Беҙгә ашарға ит бар».

— Ба-паҡ! — тип Хеҙмәтйән тағы ла ҡысҡыра.— Сыҡ ти-ҙе-рәк! Сыҡмаһаң, урманыңа ут төртәм.

— Сыкһам, үлтерәһең,— тигән ҡурҡаҡ тауыш йыуан ағастың ҡыуышынан ишетелә.

— Сыҡ, әсәйем ҡаты ауырый,— ти Хеҙмәтйән,— һине саҡыра.

— Барһам, мине үлтерәләр.

— Бармаһаң, мин үлтерәм. Үлемдән ҡасып ҡотола алмаçһың.

— Бармайым,— тип Бапаҡ ағас ҡыуышына төпкәрәк йәшеренә.

— Бармаһаң, баулап алып барам,— ти Хеҙмәт. Бапаҡтың ҡыуышына инеп китә.

Дөп-дөп иткән тауыштар ишетелә. Ботаҡтар ергә тейерҙәй булып бөгөлә, бер нисә урындан төбөнән

алып осона сак̡лы сатнап ярыла йыуан ағас. Күп тә үтмәй, бауға сорналған ҙур йомғак̡ ергә килеп төшә. Ағас к̡ыуышынан Хеҙмәт ергә төшә лә, тирен һөртөп хәл алғас, Бапак̡-йомғак̡ты арк̡аһына йөкмәп, йәйләүгә к̡арай китә, ти. Ә к̡оҙғондар, Бапак̡ты к̡отк̡арыр өсөн, Хеҙмәткә ябырыла. Батша, ҙур ботак̡ һындырып алып, к̡оҙғондарҙы к̡ыуа, үлтерә-үлтерә һуға. Йыртк̡ыс к̡оштар быларҙы битләүгә тиклем оҙатып бара, ләкин Бапак̡ты к̡отк̡ара алмай.

Тауға етмәҫ борон, Хеҙмәтйән Бапак̡ты елкәһенән төшөрә лә муйынына бау һалып ала, ти.

— Үлем! Үлем! Ҙур утта көлө күккә осһон! — тип һәр к̡ыуыштан нәфрәтле тауыштар килә.

— Әсәйем к̡ушманы, хушлашырға сак̡ыртты,— тип Хеҙмәтйән халык̡ты көскә тыя, Бапак̡ты әсәһе янына алып килә.

— Улым,— тигән Шишмәгөл,— һин кешеләргә бихисап яуызлык̡ эшләнең, күпме аһ-зар килтерҙең. Үҙ әсәң ғәфү итә алмаҫлык̡ хилафлык̡ к̡ылдың... Уларҙы инде хәҙер иҫкә алыуы ла ауыр. Бына әле к̡айғы-һағыштарымдан ике тамсы йәшем тәгәрәй. Береһе унын̡ көйгән ирендәремде сылатты. Икенсеһе, мине һуңғы тапк̡ыр үпкәндә, һинең ирендәреңде көйҙөрһөн.

Бапак̡, ни әйтергә лә белмәйенсә:

— Әс-сәй! Беҙҙе к̡алдырма! — тигән дә к̡осак̡лап Шишмәгөлдөң битенән тәгәрәгән һуңғы тамсы күҙ йәшен үбеп алған.

— Ярай, балам, үтенесемде үтәнең. Шөкөр. Үҙем менән гүргә һинең йәнеңде лә алып китәм. Һинең кеүекте ер күтәрмәһә лә гүр күтәрер, тик к̡алғандар

имен-аман булһын,— тигән дә Шишмәгөл мәңгегә күҙҙәрен йомған, ти.

Бына шунан бирле Бапаҡтың ни бары шәүләһе тороп ҡалған, имеш. Үҙ һүҙле, үгеҙ күҙлеләрҙе, атаәсәләрен рәнйеткәндәрҙе, олоно — оло, кесене — кесе итә, ер-һыуының ҡәҙерен белмәгәндәрҙе, үҙ ғүмеркәйҙәрен тәүфиҡ менән эштә биҙәмәгәндәрҙе ул әле лә ҡарауыллап, һағалап ҡына йөрөй, тиҙәр...

Шишмәгөл үҙе үлһә лә, күҙ йәштәре туҡтамаған, имеш. Күмһәләр ҙә, ҡәберҙән атылып сыҡҡан һәм ике күҙенең йәше ике шишмә булып ағып киткән, ике ҙур йылғаны башлап ебәргән. Ул йылгалар бер-береһен уҙырҙай ярышып аға, ти.

Хеҙмәтйән менән Ырыҫбикә, әсәләрен күмгәс, бөтә ырыу хәстәре менән көн күргән, балаларын кеселекле, кешелекле итеп үҫтергән. Уларға яңы ырыуҙар ҡушылған. Бөтәһе лә Хеҙмәтйәнде яратҡан, уның әйткән-ҡушҡандарын үтәй-үтәй йәм тапҡан, шуға күрә, аслыҡ, ялангаслыҡтың нимә икәнен белмәй, бик бәхетле йәшәп яталар, ти.

## Һауа әсәнең кәңәштәре

Борон-борон заманда ғына түгел, беҙҙең көндәрҙә булыуы ла бик ихтимал был хәлдең. Әкиәт бит мәңгелек есемдәр: Һауа, Ҡояш һәм Ямғыр хаҡында.

Һауа тигән бик изге күңелле ҡатындың Ҡояшбикә исемле ҡыҙы, Ямғыр атлы улы булған, ти.

Ҡояшбикә аҡыллы, асыҡ йөҙлө, ә ҡустыһы Ямғыр апаһының тап киреһе — үҙ һүҙле, илаҡ, мыжыҡ булған, имеш.

Ҡояшбикә үҙенең ике туған ағаһы — эшһөйәр Таң менән бергә уянған. Өйҙәге эшен бөтөргәндән һуң, ул сәйәхәткә сығып киткән. Бигерәк Ер тирәләп гиҙергә яратҡан ул, бар йән эйәләре лә Ҡояшбикәне һәр көн шатланып ҡаршы алған... Бигерәк тә балалар менән дуҫлашып киткән. Йылға буйында көндәр буйы сыр-сыу килеп йөрөгән моңһоҙ сабыйҙарҙың, ҡомда аунап, Ҡояшбикә апалары һипкән нурҙан иҙрәп ятыуҙарын бик үҙ күргән ул.

Улары ла бит, Ҡояшбикә тик бер аҙ ғына тотҡарланһа ла, уны юҡһынып һамаҡлай башлай, ти:

*Ҡояш, сыҡ, сыҡ, сыҡ,*
*Алтын ҡалаҡ бирермен,*
*Майлы бутҡа бирермен,*
*Алтын ҡалаҡ — баҙарҙа,*
*Майлы бутҡа ҡаҙанда...*

Яратмаҫлыҡмы ни ул тел биҫтәләрен!

Ямғыр апаһының тап иреһе булған, тигәйнек инде. Ҡояшбикә апаһы сәйәхәткә сығып киткәндә, Ямғыр болот юрғанын ябынып рәхәтләнеп йоҡлар булған. Ҡайсаҡ ул иртәрәк уяныл, апаһын ҡыуып еткән дә:

— Ниңә минең бер үҙемде ҡалдырып киттең, миңә би-и-ик күңелһеҙ,— тип апаһына үпкәләп мыжырға тотонған.

Ямғырҙың, кәйефе китеп, шулай иламһырап мыжыған мәлендә аяҙ көндә лә ҡапыл ғына ямғыр яуып үтә, имеш.

Бер көн Ҡояшбикә апаһы түҙмәгән: «Эй, ҡустым, ҡустым. Шулай һытыҡ йөҙлө, илаҡ булғаның өсөн

ерҙә бераү ҙә яратмай бит һине. Ана, һин илай башлағас, ниндәй күңелле ер балаларының да кәйефе китте. Күрәһеңме, ағас аҫтына инеп, һинән йәшеренеп ултыралар»,— тип ҡустыһын әрләп ташлаған.

Апаһының һүҙҙәренә бик тә хәтере ҡалған Ямғырҙың. Ғәрлегенән бүтәнсә был Ер тигән планетаға әйләнеп тә ҡарамаҫҡа ант итеп, үпкәләп ҡайтып киткән, ти. Ҡустыһын ауыр һүҙ әйтеп рәнйеткәненә үкенгән Ҡояшбикә уны бергәләп сәйәхәт итергә ни тиклем генә өгөтләмәһен, Ямғыр һүҙендә ныҡ торған. Күңелһеҙерәк булһа ла, Ай, Марс, Венера кеүек планеталарға яңғыҙы йөрөр булып киткән. Ә Ҡояшбикәгә килгәндә ул Ергә тоғро ҡалған. Көндәр буйы, алтын нурҙарын көлтә-көлтә һибеп, уны иркәләгән. Был нурҙарҙан ерҙә бик эҫе булып киткән. Япраҡтар һарғайған, үләндәр кипкән. Кешеләр ҙә, был бөркөүлектән нисек ҡотолорға белмәй, тәҙрә ҡапҡастарын япҡандар, ҡалын-ҡалын ҡормалар ҡорғандар... Ҡояшбикә ни тиклем тырышмаһын, уны өй эсенә индермәгәндәр. Бар тереклек, берәй кескәй генә болот әҫәре күренмәйме, тигән өмөт менән күккә баҡҡан. Быны күреп-ишетеп торған Ҡояшбикә бик ныҡ үпкәләп ҡайтҡан да ҡустыһына:

— Бар, илағым, ерҙә һине көтәләр. Бөтәһенең телендә бер һүҙ — Ямғыр ҙа Ямғыр. Күптәнме ни әле апайҙар, еңгәйҙәр, ҡыҙҙар, минең нурҙарымды тотҡарламаһын тип, тәҙрәләрен көн дә таҙартып тора торғайнылар, ә бөгөн килеп, ошо кешеләр, мин инмәһен тип, тәҙрәләрен, ишектәрен бөркәп ҡуйҙылар,— тип ысын күңелдән аптыраған Ҡояшбикә.

Апаһының был һүҙҙәренән Ямғырҙың күңеле

үҫеп киткән. Ул, бөтә булған үпкәһен онотоп, Ер-планетаға сәйәхәткә сығып киткән.

Тик Ҡояшбикәнең дә, уның ҡустыһы Ямғырҙың да холоҡтарында бер хикмәт булған. Апаһы, шатланған саҡта, көлтә-көлтә нурҙар сәсһә, ҡустыһы шатлыҡтан түгелеп илар булған... Ерҙәге бар тереклек, Ямғырҙы, ысынлап та, шатланып ҡаршы алған. Урмандар, тауҙар, йылғалар, үләндәр, гөлдәр ихлас ҡойонғандар, өлкәндәр ямғырҙы маҡтаған, балалар йырғанаҡтар кисеп, бер-береһенә һыу сәсрәтеп уйнап мәж килгән. Лысма һыу булған балаларын һәр саҡ ҡырыҫ холоҡло әсәләре тыймаған, ә уларҙың шулай сыр-сыу килеүҙәрен кинәнеп ҡарап торған. Ямғырҙы иң ғәжәпләндергәне шул булған: хатта йөҙйәшәр ҡарттар ҙа, урманға сығып, сал һаҡалдарын һыйпай-һыйпай, ямғырға рәхмәттәр уҡыған. Был хәлде күреп, Ямғыр шашып киткән, көн тимәгән, төн тимәгән, яуған да яуған. Дымға туйған ер был өҙләкһеҙ ҡойған Ямғырҙан шешенгән, ағастар, үләндәр, йәнлектәр, ҡоштар күшеккән. Йылғалар, күлдәр ярҙарынан сығып, яландарҙы, ашлыҡ баҫыуҙарын һыу менән күмгән... Бар тереклек Ямғырҙы, әле генә шатланып ҡаршы алған Ямғырҙы, ҡан дошманылай күреп, уға ауыр-ауыр һүҙ әйткән. Ҡояш нурҙарын бик яратҡан бойҙай башаҡтарына бигерәк тә ҡыйын булған. Улар Ҡояш, Ҡояшбикә, тип ялуарып, тос баштарын күтәрә алмай ергә ауғандар. Быны күргән кешеләр ҙә Ямғырға бик рәнйегәндәр. Күптән түгел генә Ямғырға рәхмәттәр уҡыған аҡ һаҡаллы ҡарт та:

— Әллә был күктең төбө тишелдеме? Көн ти-

мәй, төн тимәй биҙрәләп ҡоя ла ҡояһы,— тип һуҡранған.

Был һүҙҙәрҙән гәрләнгән Ямғыр илай-илай апаһы Ҡояшбикә эргәһенә ҡайтып киткән һәм уға үҙенең үпкәһен белдергән. Ҡустыһының был һүҙҙәренә Ҡояшбикә лә бик ғәжәпләнгән. Ғәләмәт кешеләр йәшәй икән ул Ерҙә. Нисек инде, үҙҙәре саҡырып алалар ҙа аҙаҡтан ҡыуып уҡ ебәрәләрсе. Төрлөсә фараз итеп ҡараған улар, бәхәсләшеп тә киткән, тик бер фекергә лә килә алмаған. Аптырағас әсәләре Һауа янына барып, ишеткән-күргәндәрен һөйләп биргән. Әсәләре, бер аҙ уйланып, былай тигән:

— Әй, балалар, балалар. Йәшһегеҙ шул әле, күп нәмәне аңлап та етмәйһегеҙ. Хәҙер мин һеҙгә Ер кешеләренең ниңә һеҙгә асыуланғанын һөйләп бирәйем. Шул саҡ, бәлки, һеҙ ҙә уларҙы ғәфү итерһегеҙ. Ерҙә йәшәүсе бар тереклек күҙәнәктәрҙән тора. Улар үҫһен, бүленһен, йәғни яңы бер йән эйәһе тыуһын өсөн, Ҡояшбикә ҡыҙым, һинең йылы нурҙарың да, Ямғыр улым, һинең шифалы һыуҙарың да берҙәй кәрәк. Әгәр көн дә ҡояш нур һипһә, ер ҡорой, тереклек һәләк була, ә инде бер туҡтауһыҙ ямғыр ҡойһа, тәбиғәттәге бар есемдәр өшөй, күшегә, һыуҙан тонсоға, серей,— тигән...

Оҙаҡ һөйләшеп ултырған, ти, Һауа, Ҡояш, Ямғыр... Шунан һуң өсөһө лә уртаҡ фекергә килгән, имеш: һәр нәмә үҙ ваҡытында, үҙ мәлен, самаһын белеп килгәндә генә ҡәҙерле икән...

# Иң тәмле нәмә

Борон-борон заманда бер бабай менән әбей йәшәгән, ти. Улар бик ярлы торғандар, аслы-туҡлы көн иткәндәр. Уларҙы ҡарт көнөндә ҡарап, тамаҡтарын туйҙырырлыҡ улдары булмаған. Булған берәһе үлеп торған. Тик бер ҡыҙҙары ғына ҙурайып китә алған. Ҡыҙ үҙенең һылыулығы менән тирә-яҡта дан тотҡан. Уның даны хан улына ла килеп ишетелгән. Шунан ул һылыу ҡыҙҙы күрергә килгән. Күргән. Шул бер күреүҙән ғашиҡ булған да ҡуйған. Егетте ҡыҙ ҙа оҡшатты, ти. Хан улы яусы ебәреп һоратҡас, ҡыҙҙың ата-әсәһе ҡаршы килеп тормаған. Ижәп уҡытып, ҡыҙҙы алып, ҡайны йортонда бер нисә көн торған да хан улы ҡыҙҙы алып ҡайтып та киткән. Киткән саҡта, ата-әсәһе ҡыҙға:

— Төшкән ереңә барғас, беҙгә күстәнәскә тәмле берәй нәмә ебәрерһең,— тигән.

— Ебәрермен һуң,— тигән ҡыҙ.

Килен төшөргәс, хан өйөндә ҙур мәжлес ойошторолған. Ярлы ата-әсәһе ҡулында йәшәгән саҡта ғүмерҙә күрмәгән бик күп төрлө тәмле-тәмле ашамлыҡтар менән табын тулған. Быларҙың ҡайһыһын күстәнәскә ебәрергә булыр икән тип, ҡыҙ бөтә ашамлыҡтарҙы ла тәмләп ҡарарға булған. Тәмләп йөрөй, тәмләп йөрөй. Тәмләп йөрөй торғас, бик ныҡ һыуһап киткән дә был һалҡын һыу эскән. Уға рәхәт булып киткән. Һыу бөтә нәмәләрҙән дә тәмлерәк тойолған.

# Атаһын тоҙ кеүек яратҡан ҡыҙ

Батшаның өс ҡыҙы булған. Бер ваҡыт батша ҡыҙҙарын саҡырып алған да һорай икән.

— Һеҙ мине нисек яратаһығыҙ?

Иң оло ҡыҙы әйткән:

— Атай, мин һине балдан да татлы итеп яратам.

Икенсеһе:

— Шәкәрҙән дә татлы итеп яратам,— тигән, ти.

Иң кесе ҡыҙы:

— Мин һине тоҙ кеүек яратам,— тигән.

Батша өлкән ҡыҙҙарының яуабына һөйөнгән. Ул мине тоҙ кеүек әсе итеп ярата икән, тип кесеһенең һүҙенә бик көйөнгән. Шуның үсен алмаҡсы булып, батша ике ҡыҙын ике батшаға кейәүгә биргән, иң кесеһен иң насар кешегә бирергә ниәтләнгән.

Бер әбейҙең бер генә улы булған була. Егерме биш йәше тулһа ла, һаман бишектә ята икән был егет. Батша ҡыҙын шуға бирмәксе булған. Оҙаҡламай ҡыҙҙы шул егеттең йортона оҙатҡандар, ти.

Ҡыҙ теген тегә, сигә икән, таҡыя тегә, бәйләй. Үҙе был әйберҙәрҙе әбейҙән һаттыра икән. Бер ваҡыт әбей тағы ла баҙарға йыйына башлаған. Килене унан бер-ике сәнскеле сыбыҡ алып ҡайтыуын һораған. Әбей сыбыҡ алып ҡайтҡан. Килен кеше ошо сәнскеле сыбыҡ менән бер-ике тапҡыр егеткә һуҡҡан икән, егет бишектән һикереп төшкән дә шунда уҡ эшкә керешкән. Ҡыҙ уны эшкә өйрәтә икән. Ә ул күндәм эшләй, ти. Егет бик эшсән булып сыға. Былар шулай итеп бик яҡшы ғына йәшәп алып китәләр.

Бер ваҡыт ҡыҙ үҙенең атаһы менән әсәһен ҡунаҡҡа саҡырырға булған. Ҡыҙҙың әсәһе:

— Барайыҡ,— тип әйтә, ти. Ә атаһы:

— Бармайыҡ, йөрөмәйек,— тип тартыша, ти.

Шулай ҙа, еңешә торғас, барырға булалар.

Ҡыҙ һыйҙы бик яҡшы итеп әҙерләгән, ти. Өҫтәлдә йәнең ни теләй, барыһы ла бар, ти. Ул ашамлыҡтарҙы шундай матур итеп бешергән, ти, уларға ҡараһа, ашағыһы килмәгән кешенең дә ашағыһы килә башлаған, ти. Ҡунаҡтар өҫтәл тирәләй ултырышҡандар. Улар тәмләп-тәмләп ашай башлағандар. Кешеләр ашай, ҡыҙҙың атаһы ашамай тик ултыра, ти. Баҡһаң, теге ҡыҙ үҙ атаһына бөтә нәмәне лә тоҙһоҙ итеп әҙерләгән икән, ти. Шунда батша үҙенең хатаһын аңлаған.

— Эй, ҡыҙым, мин яңылышҡанмын. Ысынлап та, тоҙһоҙ бөтә нәмә лә тәмһеҙ була икән,— тип үҙенең элекке хаталары өсөн ҡыҙынан ғәфү үтенгән дә күп итеп байлыҡ бүлеп биргән, ти.

Шул ваҡыттан алып улар бик оҙаҡ татыу, матур тормош кисергәндәр.

## Аҡыллы ҡарттың үлемдән ҡотолғаны

Борон заманда булған, ти, бик аҡыллы бер ҡарт. Әйткән һүҙе раҫ килеп кенә торған, ти, бының. Берҙән-бер көндө был ҡартты батша янына елтерәтеп алып килтергәндәр, ти.

— Әйт әле, бабай, иртәгә нимә була? — тип һоранылар, ти. Ҡарт:

— Иртәгә борсаҡ ҡатыш ямғыр яуыр. Күп ерҙә иген әрәм булыр,— тип әйтте, ти.

— Ә төндә нимә була? — тип һоранылар, ти.

Ҡарт:

— Төнө буйы ғәскәр башлығының аяҡтары һыҙлап сығыр,— тип әйтте, ти.

Икенсе көндө, ысынлап та, борсаҡ ҡатыш ямғыр яуып, игендәр әрәм булды, төнө буйы ғәскәр башлығының аяҡтары һыҙлап сыҡты, ти.

Шунан батша үҙенең һанаттарын саҡырып алды ла:

— Был берәй сихырсы ҡарттыр. Беҙҙең башҡа бәхетһеҙлек кенә юрап йөрөйҙөр ул! Нимә әйтһә — шул була. Хәҙер үк аҫып үлтерегеҙ үҙен! — тип бойороҡ бирҙе, ти.

Аҫыр алдынан бабайҙан:

— Берәй һүҙең юҡмы, сихырсы ҡарт. Булһа, әйтеп ҡал! — тинеләр, ти.

— Әйтер һүҙ юҡ, иллә мәгәр бер генә үтенесем бар: батшаның нурлы йөҙкәйҙәрен күреп үлгем килә, шуны күрһәтһәгеҙ ине! — тигән булды, ти, ҡарт.

Ҡартты батша янына алып инделәр, ти. Ул аҙ ғына батшаға ҡарап торҙо ла боролоп сыға башланы, ти. Сыҡҡанда:

— Хуш инде, батшам, үлемдән ҡотолоу юҡ — ҡол да үлә, батша ла үлә! — тип әйтте, ти.

Шул ваҡыт батша:

— Эй, ҡарт, ысынын ғына әйт әле, мин ҡасан үләм? — тип һораны, ти.

— Мин үлгәндән һуң теүәл ете көн үткәс үләһең.

Бына шуның өсөн мин һинең менән бәхилләшергә индем дә инде! — тип әйткән булды, ти.

Батша шунда уҡ үҙенең был ҡартты аҫырға тигән бойороғон кире алды, ти, бабайҙы ашатып-эсереп, ебәктән генә кейендереп, уға ғүмеренә етерлек байлыҡ биреп сығарып ебәрҙе, ти.

## Көтөүсе батша

Борон заманда Ғәли исемле бер батша булған. Был батша батшалыҡ итә торғас, ҡомһоҙланып китеп, халыҡты бик ыҙалата башлаған, сиктән тыш ауыр һалымдар һалған, ти.

Халыҡ кәңәшләшеп, был батша өҫтөнән ҡағыҙ яҙып, ҙурыраҡ батшаға бер кеше ебәргән. Ғәли батша быны һиҙмәй ҙә ҡалған. Теге кеше ҙур батшаға барып, халыҡтың зарын тапшырып, унан фарман алып ҡайта. Фарманды мөйөш һайын эләләр. Унда: «Ғәли батшаны иртәгеһе көн сәғәт ун икелә аҫмаға»,— тип яҙылған булған, ти.

Ғәли батша белмәй әле, үҙенең тәхетендә ултыра бирә. Батшаның бер яҡын вәзире була. Ул Ғәли батша янына керә лә:

— Батшам, һин нимә ишетәһең? — ти.

— Бер нәмә лә ишетмәйем. Ни булған? — ти батша.

— Һин бер ни белмәй ултыраһың, батшам, һине бит, иртәгә сәғәт ун икелә аҫмаға,— ти.

Батша сыға, ҡарай, ысынлап та, шулай. Батша ҡалтыранып китә. Ни эшләргә? Ҡайҙа барырға? Инде ҡасмаға ғына ҡала.



Батша шул төндө үк ҡасып китә. Үҙе менән бер ни ҙә, хатта ашарға ла, аҡса ла алмай ҡаса. Тик Сәлимә исемле яратҡан ҡыҙын ғына эйәртә. Көнө буйы баралар былар, төнө буйы баралар. Ҡалаларға етәләр. Хәйер һорашып та алалар. Кисә тәхеттә ултыр, бөгөн хәйер һораш. Донъя ни эшләтмәй бәндәһен.

Бара торғас, ҡыҙы менән батша тағы бер ҡалаға барып керә. Шунда урын табып, ҡуналар инде былар. Иртәгеһен баҙарға баралар. Баҙар туп-тулы, һатыусылар ҡумталарын асҡандар. Бер аҙ ашарға

табып булмаҫмы, тип, урлашыу яғын ҡарап, теге икәү магазинға керә. Магазин мануфактура магазины булып сыға. Шулай ҙа бер мөйөштә кәстрүл менән май ултыра икән. Батша кәстрүлде шылдырырға уйлап ынтыла. Шул саҡ быны күреп ҡалалар ҙа ҡыйнап ташлайҙар.

Бер әбей, быларҙы ҡыҙғанып, хәйер бирә. «Хәйер һорашып ҡына тамаҡ туйҙырылмаһа инде»,— тип уйлай Ғәли батша. Ҡыҙына ла кәңәш итә. Шунан башҡа сараһы ла булмай шул. Эшләр ине — һөнәре юҡ, урлар ине — туҡмайҙар.

Хәҙер былар, хәйер һораша-һораша, ишетмәгән-күрмәгән яҡтарға китеп баралар. Күп бара торғас, бер ауылға барып етәләр. Шунда ситтә генә бер өйгә фатир һорап керәләр. Унда әбей менән бабай ғына тора икән. Әбей менән бабай уларға кәңәш бирә:

— Һеҙ, былай йөрөгәнсе, беҙҙең байға көтөүгә ялланығыҙ. Тамағығыҙ туҡ, өҫтөгөҙ бөтөн булыр, исмаһам,— тиҙәр.

Иртәгеһенә әбей менән бабай, байҙың торған ерен өйрәтеп, быларҙы сығарып ебәрәләр.

Ғәли батша Сәлимәһе менән бай йортона барып керә. Байҙың йөҙ баш һарығы, илле баш һыйыры бар икән. Шуларҙы көтөргә кәрәк була. Инде көтөү көтәләр аталы-ҡыҙлы. Йылдан артыҡ ваҡыт үтеп китә.

Бер саҡ көтөү көткәндә, төш ваҡыты еткәс, Ғәли ҡыҙын йылға буйына һыу алырға төшөрә. Үҙе ут яғып ебәрә. Ҡыҙ һыу буйына төшһә, ҡурҡып китә. Яҡындан ғына офицер кейемендә бик матур бер кеше килә. Ул өйрәк атып йөрөгән икән бында. Егет тә

ҡыҙҙы күреп, матурлығына һоҡланып, ашыға-ашыға килә, ти. Сәлимә һыуын сайпылдыра-сайпылдыра атаһы янына йүгереп килә. Егет уның артынан бара. Ата менән ҡыҙ янына килә теге егет, иҫәнләшә, ултыра. Уны-быны һөйләшмәйҙәр. Кем икәнен һорарға Ғәли ҡыйманы, ти. Теге егет хәйер итепмелер бер аҙ аҡса бирә лә китә.

— Был кеше сауҙагәр малайымы икән, батша малайымы икән. Оялып, һораманым да,— ти батша ҡыҙына.

Егет батша улы булған, ти. Сәлимәне күргәс тә, уға күҙе төшә. Ҡайтҡас был ашамай ҙа, эсмәй ҙә икән. Батша, хәүефләнеп:

— Беҙҙең малайға ни булған был? — ти, кеше аша һораштырып та ҡарай.

Батшаның вәзире:

— Бына, батшам,— ти,— һунарға йөрөгәндә, улың бер көтөүсенең ҡыҙын күреп, шуға ғашиҡ булған. Атам шул ҡыҙҙы алып бирһен, тип әйтә улың,— тигән.

Батша менән ҡатыны бик аптырашалар.

— Батша була тороп, көтөүсе ҡыҙын алып булмаҫ инде,— тиҙәр.— Беҙгә кемдәр килмәй,— тиҙәр.

Егет:

— Миңә башҡа кәрәкмәй,— ти.

Ата менән әсә, аптырағас, эстәнме, тыштанмы — уныһы билдәле түгел, риза булалар.

Батша:

— Көтөүсе ни ҡыҙын шатлана-шатлана биреп ебәрер минең улыма,— ти ҙә, аттар ектереп, көтөүсе янына улы менән яусыһын ебәрә.

Яусы Ғәлигә:

— Бына,— ти,— шундай хәл,— ти.— Күптән түгел һинең ҡыҙыңды бер батшаның улы күргән, ҡыҙыңды ул бик оҡшатҡан,— ти.— Хәҙер һин бирәп ебәр ҡыҙыңды батша улына кәләшлеккә,— ти.

Ғәли батша ашыҡмай. Мин көтөүсе, тимәй әле. Ҡыҙын биреү тураһында ла һөйләмәй.

— Ул егеттең,— ти Ғәли «көтөүсе»,— ни эше бар һуң? Батша улы булғас ни, ҡалала тик йөрөй торғандыр бит ул? — ти.— Берәй һөнәре бармы һуң уның? — ти.

— Ниндәй һөнәре булһын уның? Батша улы бит ул! Һөнәр нимәгә ул уға? — ти яусы.

— Мин ҡыҙымды бер төрлө лә һөнәр белмәгән кешегә ултыртып ебәрә алмайым. Иң элек егетегеҙ һөнәр өйрәнһен, шунан бында килер,— тигән Ғәли батша.

Егет ҡайтып китә хеҙмәтселәре менән. Ҡайта ла яҡшы атына ултырып сығып китә был. Һөнәргә өйрәнеү урыны эҙләй башлай, ти, хәҙер был. Бер ауылға бара. Унда эшкә өйрәтә торған оҫталыҡ йорто бар икән. Тик унда бай малайҙарын, сауҙагәр балаларын алмайҙар. Ата-әсәһе булмаған ярлы-ябаға ғына һөнәр өйрәнә икән бында. Батша улына дүкәмит алыу ни тора? Дүкәмитте яңынан әҙерләп, ярлы кейемен кейенә лә килә был оҫталыҡ йортона:

— Мине ике көндә һөнәргә өйрәтеп сығар,— ти батша улы хужаға.

— Бер һөнәрең дә булмағас, һине нисек итеп ике көндә өйрәтеп сығараһың? Бер һөнәргә өйрәнеү өсөн

генә лә кәм тигәндә ике аҙна ваҡыт кәрәк,— тиҙәр быға.

Егет ике аҙнаға риза булды. Өйрәнеп йөрөй был иплэп кенә. Септә һуғырға өйрәтәләр быны. Септә һуғырға өйрәнгәс, яҡшы кейемдәрен кейенеп, ярһып торған атына ултырып, өйгә лә ҡайтып тормай, Ғәли көтөүсе янына килә был.

— Инде бына өйрәндем,— ти. Септәһен күрһәтә.

Шунда ғына Ғәли һөйләшә башлай егет менән.

— Бындай септәне көнгә күпме эшләргә була һуң? — ти.

— Көнөнә берҙе эшләп була,— ти егет.

— Берәһе бер һум торһа септәнең, тамағығыҙҙы туйҙыра алырһығыҙ, ал ҡыҙымды,— ти.— Тик яландан алып китмә, фатирыма кил,— ти.

Егет «көтөүсе» фатирына килә. Иәрәшеп батша йортона китәләр былар. Ғәли «көтөүсе» лә ҡоҙа булып бара. Теге батша Ғәлигә «көтөүсе ҡоҙа» тип кенә өндәшә икән. Ашайҙар, эсәләр ҡоҙалар. Бер-ике стакан эсмәгә, телдәре асылып китә. Ғәли батша үҙенең хәлдәрен һөйләп бирә.

— Мин батшанан көтөүсе булдым, ҡоҙа,— ти.

Теге батша шаҡ ҡата. Көтөүсе ҡыҙы булманы, батша ҡыҙы булып сыҡты бит килен! «Бына мин дә бөгөн батшамын, иртәгә көтөүсе булыуым бар»,— тип ҡурҡыуға төшә.

Ғәли батша, бай булһа ла, кейәүен тиккә генә һөнәргә өйрәттермәгән икән. Бөгөн батша, иртәгә әллә кем. Ә һөнәрле кеше һис ҡайҙа юғалмаҫ.

## Өс ауыҙ һүҙ

Борон бер әбей менән бабай булған, ти. Уларҙың бер генә бөртөк улдары булған. Малай ир етеп кенә килгән саҡта, бабай ауырып киткән. Ҡарт, үҙенең хәле насарланғанын һиҙеп, бисәһенә:

— Мин инде кеше була алмам, үлермен,— тигән.— Минән өс йөҙ тәңкә аҡса ҡала. Улыбыҙға биреп, йыл да йөҙәр тәңкәлек кенә нәмә алдырып торһаң, өс йылға һуҙылыр. Ике-өс йыл эсендә малай үҙе лә мал табырлыҡ булып үҫеп етер әле,— тигән.

Күп тә үтмәй, бабай үлеп китте, ти. Бабайҙың васыяты буйынса әбей улын баҙарға ебәргән.

— Ҡара уны, йөҙ тәңкәлек кенә нәмә ал! — тип ныҡ киҫәтеп ҡалған.

Малай баҙарға барып, бер ҙә йөҙ тәңкә генә торған нәмә тап итә алмай. Баҙар тарала башлай. Был буш ҡул менән ҡайтырға сыға. Ҡайтып килә ятһа, күпер төбөндә аҡ һаҡаллы бер ҡарт баҫып тора, ти.

— Ҡайҙа барҙың, нимәләр алдың, улым? — тип һораған малайҙан был ҡарт.

— Баҙарға барғайным да, бабай. Әсәйем йөҙ тәңкәлек нәмә алырға ҡушҡайны. Бер ҙә ул хаҡҡа ғына торған әйбер тапманым,— тип әйтте, ти, малай.

— Оҡшатһаң, улым,— тип әйтте, ти, ҡарт,— минең йөҙ тәңкәлек бер һүҙем бар, ал шуны. Ул «йәнең кемде һөйһә, шул матур» тигән һүҙ булыр.

Малай риза булып, ҡарттың был һүҙе өсөн йөҙ тәңкә аҡсаһын биреп киткән. Өйгә ҡайтҡас, әсәһе:

— Улым, нимә алдың? — тип һорағас, малай хәлде һөйләп биргән. Әсәһе:



— Ярар инде, икенсе барыуында йөҙ тәңкәлек нәмә алып ҡайтырһың,— тигән.

Икенсе барыуында ла малай йөҙ тәңкәлек нәмә таба алмай. Әсәһе томанараҡ әҙәм булғандыр шул инде, аҡсаңды ваҡлап булһа ла ал, тип айырып әйтмәгән. Ҡайтып килә ятҡанда, әлеге күпер төбөндә теге ҡарт йәнә тап була. Малай баҙарҙа йөҙ тәңкәлек нәмә таба алмағанын әйткәс, ҡарт:

— Оҡшатһаң, ал, минең йөҙ тәңкәлек йәнә бер һүҙем бар,— ти. Малай:

— Ниндәй һүҙ һуң? Әйт, алам,— тип йөҙ тәңкә аҡсаһын бирә. Ҡарт уға:

— Ул һүҙ — «яҡшылыҡҡа итмә яманлыҡ»,— тип әйтте, ти.

Өйгә ҡайтҡас, әсәһе улынан ни алыуын һораған. Малай көнө буйы йөрөп тә, баҙарҙа йөҙ тәңкәлек бер нәмә лә таба алмауын һөйләп биргән.

— Ҡайтып килгәндә, йәнә былтырғы ҡартҡа тура килеп, йөҙ тәңкәгә «яҡшылыҡҡа итмә яманлыҡ» тигән һүҙен алып киттем,— тигән. Әсә улына асыуланмай ғына:

— Ярай инде, бәлки, өсөнсө барыуыңда беҙгә кәрәк нәмә осратырһың,— тигән.

Тағы бер йыл үтә. Әсәһе улына аҙаҡҡы аҡсаны биреп, өсөнсө тапҡыр баҙарға оҙатҡан. Малай, был юлы ла йүгерә-атлай йөрөп, йөҙ тәңкәлек нәмә эҙләй. Ни генә һораһа ла, йөҙ тәңкәлек түгел, ти: йә илле тәңкә тора, йә туҡһан туғыҙ тәңкә... ул арала баҙар һыуына, тарала башлай. Ахыры, малай ҡоро ҡул менән кеше ыңғайына ҡайтып китә. Ҡайтып килә ятһа, әлеге күпер төбөндә йәнә теге һүҙ һатыусы



й баҫып тора, ти, бит. Малайҙы күргәс, был юлы имә алып ҡайтыуын һораған. Малай:

– Әсәйем аҙаҡҡы йөҙ тәңкәне биреп ебәргәйне ер нәмә лә тап итә алманым шул,— тип көйөнә. Iунан бабай:

Минең йөҙ тәңкә торған бер генә һүҙем бар. й буш ҡул менән ҡайтҡансы, күңелеңә оҡшаһа, уны. Ул һүҙ — «боҫло ашты бора баҫма!» тигән – ти.

ыл малай, йөҙ тәңкәһен биреп, ҡарттың шул һүкүңеленә һалып, ҡайтып китте, ти. Бара-бара ың иҫенә шундай уй төштө, ти: «Мин бит инде н егет булып киләм. Атайым бахырҙан ҡалған ы аҡсаны ла бөтөрҙөм. Артабан нисек көн итеруң? Юҡ, былай ярамай, әсәйҙән оят. Берәй яҡҡа ı, эш эҙләйем, булмаһа. Аҙыраҡ табыш итеп йгәс, исмаһам, ҡайтып әсәйемде ҡарармын...» ан малай, өйөнә кермәй, кәртә артлап ауылдан ы ла китте, ти.

ара торғас, был малай каруансыларға тап булі. Шунан ул каруан башын күреп:

– Ағай, һеҙгә берәй хеҙмәтсе кәрәкмәйме? — ıораны, ти.

– Беҙгә мал һуғарып йөрөргә бер кеше кәрәк. не һораған булаһың һуң? — тип әйтте, ти, карушы.

– Үҙегеҙ белеп бирерһегеҙ әле,— тип малай быа эшкә ялланды, ти.

аруансылар менән йөрөй торғас, был үҫеп һымыҡты егет булып киткән. Бер ямғырлы көндө ансыларҙың уттары һүнгән бит. Саҡма сағып-

ып та, ут тоҡандыра алмай ултыралар былар. тырағас, бәлки, яҡын-тирәлә көн күреүселәр бар- әле тип, егетте ут эҙләргә ебәрәләр. Егет, байтаҡ на ҡыҙырынып йөрөп, кискә табан бер һыу буйы- барып сыға. Ҡараһа, яр ситендә бер өй ултыра, ти. т, уны-быны уйлап тормай, туп-тура шул өйгә ай китә. Өйгә килеп керһә, ике ҡыҙ, аҡ һаҡаллы ҡарт ултыра, ти. Ҡыҙҙарҙың береһе иҫ киткес ыу, икенсеһе, ҡутырлы әрмәнде һымаҡ, ҡот ос ямаҡ, ти. Егет, сәләм биреп, ҡыйыр-ҡыймаҫ на йомошон әйтә.

— Ут биреүен биререм дә, һылыу егет,— тип әйт- ти, ҡарт,— һин башта әйт әле: ошо ике ҡыҙым- ҡайһыһы матур?

Егет, әлеге йөҙ тәңкәгә алған һүҙен иҫенә төшө-

— Йәнең кемде һөйһә, шул матур,— тип әйтте,

Ҡарт:

— Һай, рәхмәт. Йәнең кемде һөйһә, шул матур . Ошо ҡыҙымды, ҡутырлы әрмәнде һымаҡ, кыр ғына булһа ла, үҙем бик яратам. Килгән бер е шул ҡыҙымды ямаҡ ти. Мин шулай тигән үҙең башын сабып өҙөп, кәүҙәһен һыуға ташлап ом,— ти.

Шунан был ҡарт, егетте келәткә алып сығып, һан туғыҙ баш күрһәтте, ти. Үҙе:

— Әгәр дөрөҫ яуап бирмәһәң, һин теүәл йөҙөнсө булыр инең! — тип, егеткә ут биреп ҡайтарып ҙе, ти.

Шулай итеп, егет бер ауыҙ яҡшы һүҙ арҡаһында мдән ҡотолоп ҡалды, ти.

Ҡаруан менән йөрөй-йөрөй, былар бер ҙур ҡала на килеп етәләр. Каруансылар, ҡалаға кермәй, ҙа туҡтаған. Аттарын туғарып, үләнгә ебәреп, өре йоҡларға ятҡандар. Ҡояш байыр алдынан ат һуғарырға киткән. Был аттар эсереп торғанда, йәш кенә ҡатын һыу буйында йөрөп ята ине, ти. ошо ҡала батшаһының әллә нисәнсе бисәһе икән. ныу егетте күреп, уға йылға аша ғашиҡ булған куйған был ҡатын. Шунан, һис тәҡәт итә алмай, ҙы яра кисеп, егет янына сыға ла үҙҙәренә са-ра башлай. Күп ныҡышҡас, егет риза була. Атта- туғайға ебәрә лә, бергәләп батша һарайына әләр.

һарайға ҡайтҡас, был йәш ҡатын батшаға:

— Алыҫтағы туғаным килде лә, туғаным кил- — тип егеткә ни алып, ни бирергә бөлмәй. Уны һәйбәт бүлмәгә урынлаштырып, яҡшы итеп оп һыйлайҙар. Батша үҙе хөрмәт итә. Ҡараңғы ә, егет ишекте бикләй, йоҡламаҡ була. Бер мәлде шыҡ-шыҡ тәҙрә сирткән тауышҡа уянып китә. рәгә килеп ҡараһа, тышта теге ҡатын тора, ти.

— Аса күрсе, егет, мин һине яратам. Бергә төн әрәйек. Күңел асайыҡ...— тип инәлә, ти.

«Юҡ,— ти егет үҙ-үҙенә,— миңә был йортта яҡ-лыҡ күрһәттеләр, мин хужаға яманлыҡ эшләй айым. Һүҙ һатыусы ҡарт: «Яҡшылыҡҡа итмә нлыҡ», тип дөрөҫ әйткән ул». Егет был шаҡшы ынға ишек тә, тәҙрә лә асмай. Ҡатын өйҙө ура- төн уртаһына саҡлы йөрөй, бик асыуы килә.

ıан батша янына керә лә күҙ ҙә йоммай алдаша:
– Туған тип, ит кешегә яҡшылыҡ. Һинең ҡу-
ка килгән ҡәйнешең: «Иреңде үлтерәйек тә бат-
ығын үҙебеҙгә алайыҡ!» — ти. Шуны туғаным
йөрөгәнмен! — ти.

Ѣатшаның быға бик асыуы килә. Егетте шунда уҡ
ерергә бойорор ине — бисәһенең ҡан ҡәрҙәше,
нлыҡ хаҡы бар. Хәйлә ҡора был. Ҡаланың бөтә
ıә «Иртәгә таң менән минең баҡсама, беренсе
ıп, һиҙҙермәй үтә алған кешегә ярты батшалы-
ды бирәм» тигән иғландар ҡаҙаҡлата. Шул уҡ
əрҙе орансылар баҙарҙарҙа, майҙандарҙа ҡыс-
ып йөрөйҙәр. Батша: «Был егет шулай батша-
ыма ҡаныҡҡас, моғайын, беренсе булып килер.
инеү-сығыу юлын да яҡшы белә. Был егеттең
аға беренсе булып үтеп инеүе булыр — һаҡсы-
ның сәнсеп үлтереүҙәре булыр», — тип уйлай.
Егет, ысындан да, быға ҡыҙыға. Каруансылар
на ҡайтып йоҡлай ҙа таң атмаҫ элек үк ҡалаға
е килә. Бара ятһа, юл өҫтөндә ут янып тора, ти.
əбей нимәлер бешереп маташа. Егет уның янына
еп еткәс, әбей:

– Балам, ашымды ғына ауыҙ итсе. Минең бер-
бер улым бар, шул бик ҡаты ауырып китте. Улым
лмәҫме тип, мин юлға сығып, аш бешереп то-
а, интегеп килгән бер юлсыны ашатып ебәрергә
ıым, — ти.

Егет әбейгә үҙенең ашыҡҡанлығын, таң атҡансы
аға кереп ҡалырға кәрәклеген әйтеп ҡарай. Тик
бик инәлә торғас, әлеге ҡарттан алған «боҫло
ы бора баҫма» тигән һүҙ иҫенә төшә лә ашты

ыҙ итергә була. Аш бик татлы итеп бешерелгән ын, егет байтаҡ ашап ташлай. Шул арала таң да ып китә...

Был ваҡытта теге йәш ҡатын, ҡарт батшаның ә нисәнсе бисәһе булып торғансы, уның ярты батлығын үҙемә алайым да берәй йәш кейәүгә сығам тип, һиҙҙермәҫ өсөн ирҙәрсә кейенеп, беренсе ып баҡсаға сығып ултырҙы, ти. Аңдып торған ҫсылар уны шунда уҡ сәнсеп үлтерҙеләр ҙә ҡуйҗар, ти. Батша, үҙе сығып, үлтерелгән кешене йлабыраҡ ҡараһа, ни күрһен — үҙ ҡатыны!..

Шулай итеп, теге егет ҡарттан һатып алған өс ҙ һүҙ арҡаһында ике тапҡыр үлемдән ҡалған. ҡшы һүҙ — йән аҙығы, яман һүҙ — баш ҡаҙығы» әндәре бына ошолор инде.

## Васыят

Элекке заманда бер ҡарт йәшәгән. Уның өс улы ған. Ҡарттың үлер ваҡыты еткән. Ул өс улын да ына саҡырып алған. Һәр улына васыят әйткән. оло улына былай тигән:

— Улым, һин ауыл һайын һарай һал.

Икенсе улына:

— Аҙна һайын ҡатын ал,— ти.

Ә өсөнсө улына:

— Ерҙе һөргәс, баш-баштарын ҡондоҙ ҡауырһы менән ҡаймалап ҡуй,— тигән.

Бабай үлеп киткән. Малайҙар аталарын һәйбәт п ерләгәндәр. Шул ваҡыт улар аталарының васытын иҫтәренә төшөрөп, аптырап ҡалғандар. Атаы әйткәндең мәғәнәһен бер нисек тә уйлап сығара

гандар. Ахырҙа, аҡыл эйәһенә барып, был ятты һөйләп биргәндәр. Һүҙҙе оло улы башла-

— Атайым өсөбөҙгә өс васыят әйтте, беҙ мәғәнә- төшөнә алманыҡ. Ул миңә ауыл һайын һарай рға ҡушты. Мин ауыл һайын нисек һарай һа- м, ти?

кенсе улы һүҙгә ҡушыла:

— Миңә аҙна һайын ҡатын алырға ҡушты. Аҙна н нисек ҡатын алып йөрөмәк кәрәк, ти?

ул ваҡыт өсөнсөһө лә үҙ зарын әйтеп һала:

— Миңә ер һөрөп, баш-баштарын ҡондоҙ ҡауыр- менән ҡаймалап ҡуйырға ҡушты. Ул ҡауыр- ы ҡайҙан алайым да нисек ҡаймалайым? — ти. туғанды бик иғтибар менән тыңлап бөткәс, эйәһе былай тине, ти:

— Атайығыҙ бик яҡшы васыят әйтеп ҡалдырған . Уны үтәһәгеҙ, кеше булырһығыҙ. Улым, һиңә һайын һарай һалырға ҡушҡан. Һиңә ул ауыл н дуҫ-иш булдырырға, кеше килгәндә, уларҙы ы ҡаршыларға, яҡшылап ҡунаҡ итеп, яҡшылап ырға ҡушҡан. Һиңә, уртансы егет, аҙна һайын н ал, тигән. Атайың, бик эшлекле бул, өйҙә п ятма, ҡатының янына һағындырып ҡына , аҙнаһына бер генә ҡайт, тип ҡушҡан. Өсөнсө- ерҙе бик яҡшы итеп эшкәртергә, еренә еткереп ргә, биш-алтышар ҡабат һөрөргә ҡушҡан.

туған, аҡыл эйәһенә рәхмәттәр әйтеп, атала- ың васыятын үтәргә керешкәндәр, ти.

та һүҙен тотҡанға, тормоштары етеш, дуҫ-иштә- уп, ғаиләләре татыу булған, ти.

## Урасы егет

Ҫорон заманда бер әбей булған, ти. Унының бер генә
нан башҡа бер кешеһе лә булмаған, ти. Кемдә
булһа, шунда эшләп, кемдә аш булһа, шунда
п көн күргәндәр, ти, былар. Әбейҙең улы йыл үҫә-
ай үҫеп, егет булып етте, ти. Улар хәҙер икәүләп
әй башланылар, ти. Байҙарға ураҡ уралар, бесән
лар икән. Үҙҙәренә бәләкәй генә өй һалып, баҡса
ı ебәрҙеләр, ти. Шулай бер ваҡыт ураҡ ваҡыты
, ти. Егет әсәһенә:

— Мин ураҡ урырға үҙем генә китәм, һин донъя
п өйҙә ҡалырһың,— тигән.

Егет бер үҙе генә ураҡ урырға сығып китте, ти.
байға ялланып, ураҡ ура ла башланы, ти. Ураҡ
п, аҡса йыйҙы, ашлыҡ алды, ти. Эш бөткәс, әсәһе
на ҡайтырға булды, ти. Тәүҙә баҙарға барып,
к-яраҡ әйберҙәр алайым тип уйлап, баҙарға
элде, ти. Баҙарҙа йөрөй торғас, бик ныҡ һыуһа-
ти. Сәйханаға кереп сәй эсһәм, аҡсам кәмей тип
ап, ҡойонан ғына һыу эсергә булды, ти. Ҡойо
һенә килеп, биҙрәһен ҡойоға төшөрҙө, ти. Тар-
алайым тиһә, биҙрәһе ысҡынып төштө лә ҡал-
ти. Быны ҡойо хужаһының ҡатыны күреп ҡалды
йүгереп сығып:

— Ҡойоноң биҙрәһен һин төшөрҙөң, хәҙер үк тө-
ал,— тине, ти.

Егет, меҫкен, ни хәл итһен — бар әйберен ҡойо
һенә ҡуйып, ҡойоға төшөп китә. Егеттең төшөп
үе була, хужа ҡатын унының өҫ кейемен, баҙарҙа
н әйберҙәрен алып, тиҙ генә өйөнә инеп юғала.



онан сыҡҡас, егеттең өҫтөнә кейер әйбере лә ҡал-
шәрә тороп ҡала. Шулай булһа ла, ул аптырап
май, ҡатын артынан йүгереп өйгә инеп китә.
ең ишеге эстән бикле була. Ураҡсы егет соланға
 ултыра. Был йәш ҡатын үҙенә таныш бер йәш
е менән ҡунаҡ булып ултыра икән, ти. Уларҙың
ләшкән һүҙҙәрен ураҡсы егет тыңлап ултыра,
Ҡатын:

— Мин ҡапҡаны яҡшылап бикләнемме икән,
ар сыҡмаһа ярар ине,— ти.

Быларҙы ишетеп ултырған урaҡсы егет тиҙ генә ҡапҡаны асып, тайҙарҙы сығарҙы ла ебәрҙе, ти. Тайҙар сығып, урам тулып китте, ти. Ҡатын менән унын ҡунаҡ кешеһе тайҙар ябырға сыҡтылар, ти. Шуны ғына көтөп торған егет тиҙ генә һәндерәгә менеп китте, ти. Тайҙарҙы ябып, тегеләр тағы ла инеп ултырҙылар, ти. Ҡунаҡты һыйларға тип әҙерләгән бай табынды күреп, урaҡсы егеттең бик ашағыһы килеп китте, ти. Бер аҙ ваҡыттан йорт хужаһы ла эштән ҡайтып етте, ти. Ҡатын ҡунағын һәндерәгә йәшерҙе, ти. Һәндерәлә ике егет булды, ти. Урaҡсы егеттең һәйбәт кейемдәрен теге егет кейеп тә алған булған икән, ти.

Хужа ҡатын, егетен һыйларға әҙерләгән һый-хөрмәтен тиҙ генә төрлө яҡҡа йыйып, иренә картуф, сәй әҙерләп ултыртты, ти. Йорт хужаһы ашай башланы, ти. Урaҡсы егет үҙ кейемдәрен систереп, кейенеп алды ла һәндерәнән килеп төштө, ти.

— Һаумыһығыҙ, хужа ағай, мин баҙарҙан өшөп килеп, һәндерәгеҙгә менеп ятҡайным, йоҡлап киткәнмен. Мин дә бер-ике сынаяҡ сәй эсәйем әле,— тигән.

Хужа риза булған, бергәләп сәй эсә башлағандар. Урaҡсы егет хужа ҡатынға:

— Апай, мин баҙарҙан алған күстәнәстәрҙе шкаф аҫтына ҡуйғайным, шуларҙы алып ҡуй әле,— тип ҡатындың йыйған һый-хөрмәтен таптыра башлаған, ти.

Башта ҡатын ишетмәмешкә һалынды, ти. Урaҡсы егет үҙе һәндерәнән күреп ятҡан урындарҙан һый-

хөрмәтте алып, йорт хужаһы менән ҡунаҡ була башланылар, ти.

— Ағай, һин беләһеңме? Һеҙҙең өйҙә шайтан бар бит, уны ҡыуырға кәрәк,— ти.

Хужа кеше аптырап ҡала. Ҡатынынан:

— Һин һәр ваҡыт өйҙә тораһың, һин беләһеңдер,— тип һораған.

Ҡатын, ҡурҡып ҡына:

— Бер ни ҙә белгәнем юҡ,— тигән, ти.

Ураҡсы егет:

— Мин шайтанды ҡыуырға беләм. Әгәр ҡыуҙырмаһаң, һиңә ҙур зыян килтерер,— тигән.

Хужа егеттән ярҙам һораған. Егет, шайтанды ҡыуған өсөн, хужанан ат һораған. Хужа быға ла риза булған. Егет:

— Апай, тиҙ генә самауыр ҡайнат,— тигән.

Ҡатын, теләмәһә лә, самауыр ҡуя. Күп тә үтмәй, самауыр ҡайнап сыҡты, ти. Ураҡсы егет:

— Бына хәҙер шайтанды ҡыуабыҙ. Апай, миңә ҡайнар һыу ағыҙып бир әле берәй ҡалаҡ,— тигән.

Егет ҡайнар һыуҙы һәндерәлә шәрә килеш ятҡан егеткә һибә башлаған, ти. «Һәндерә шайтаны»:

— Уф-уф! — тип ыңғыраша башланы, ти. Егет:

— Апай, ҡалаҡтың ҙурырағын бир әле,— тип ҙурыраҡ ҡалаҡ менән һибә башланы, ти.

Егет:

— У-у-у,— тип ҡысҡырып ебәрҙе, ти.

Ураҡсы егет ҡайнар һыуҙы «һәндерә шайтаны»на сүмеслләп һипте, ти. Егет, быға түҙә алмай, һәндерәнән һикереп төшөп, йүгереп сығып китте, ти. Егет өй хужаһына:

— Күрҙеңме, ағай, нindəй шайтан һәндерәндә йәшенгән, әгәр тағы килһә, миңә хәбәр ит,— тигән, ти.

Үҙенең бөтә әйберҙәрен алып, йорт хужаһы биргән атҡа атланып, хушлашып ҡайтып китте, ти. Ураҡсы егет үҙенең тапҡыр аҡыллылығы менән һәр ҡыйынлыҡты шулай еңгән икән.

## Ҡарт айыу менән төлкө

Ҡартлыҡтан бәлйерәгән бер айыу һыйыр-фәлән ауларға, бал эҙләп ағас башына менергә хәленән килмәй башлағас, тауыҡ үрсетеп көн күрмәксе булған. Ул тауыҡ аҫрай башлаған. Тауыҡтары бик үрсегән: төнәр урындары булмағанлыҡтан, уларҙы төйләгән тибеп алып киткеләй икән. Был бәләнән ҡотолор өсөн, айыу тауыҡ кетәге яһарға булған. Быны төлкө ишетеп ҡалған да айыу янына килгән.

— Мин бик һәйбәт балта оҫтаһы бит,— тигән ул.— Һиңә бына тигән тауыҡ кетәге ҡороп бирә алам.

Айыу, быға бик ҡыуанып, төлкөгә тауыҡ кетәге ҡороу эшен тапшырған. Тиҙ арала ул кетәкте ҡороп та биргән. Айыуға тауыҡ кетәге бик оҡшаған. Үҙе ныҡ, үҙе бейек, ем һалыр өсөн улаҡ кеүек нәмәһе лә бар, ти, ултырып төнәр өсөн арҡыры урҙа ла·бик һәйбәт кенә эленеп тора, хатта йомортҡа һалыр өсөн ояһы ла бар, ти.

Яҡшы эше өсөн айыу төлкөгә ҙур йомартлыҡ күрһәтеп, әллә нисә көн һыйлаған, юлға мул итеп күстәнәс тә биреп ебәргән. Тик, тауыҡтарҙың торор



урыны бик нығ булһа ла, эш алға бармаған: тауыҡтар, элеккесә, көн дә юғала ла юғала икән.

Аптырағас-йөҙәгәс, айыу тауыҡтарын һаҡларға бүрене яллаған. Һаҡта торған бүре тәүге көндә үк әлеге тауыҡ кетәге яһап биргән төлкөнөң үҙен тотҡан. Тауыҡтарҙы шул яуыз урлап торған икән. Кетәк яһаған саҡта йәшерен тишек эшләп ҡалдырған да шунан тауыҡтарҙы һурып ала ғына бирә икән ҡәһәр һуҡҡыры төлкө.



— Хәйләкәр, яуыз йән икәнһең һин! — тигән айыу.— Бының өсөн мин һине язаһыҙ ҡалдырмайым!

Шулай тигән дә ҡарт айыу бүрегә төлкөнө төнгө ҡарауыл хаҡы өсөн биргән. Бүре уны, шунда уҡ ботарлап, өс кенә һоғонған да ҡуйған, ти. Шулай итеп, айыу тынып ҡалған, бүре туйып ҡалған.

## Әтәс батыр

Борон-борон заманда Улаҡлы йылғаһы буйында йәшәгән, ти, бер ҡарт менән ҡарсыҡ. Ҡарты ғүмер

буйына эшләп тир түккән, бил бөккән, ә ҡарсығы байбикәләргә йөн теткән, кейем теккән. Икеһе лә сәләмәтлектәрен юғалта башлағас, бай уларҙы йортонан ҡыуып сығарған. Шунан былар бер ауылдың осонда, йылға буйында, ярҙы соҡоп, землянка эшләп ингәндәр. Ауылдың бер мәрхәмәтле кешеһе әбей менән бабайға бер тауыҡ менән бер әтәс бүләк иткән. Шулай итеп, улар дүртәү йәшәй башлағандар.

Берҙән-бер көндө, яҙ булғас, ҡарт үҙенең төйөнсөгөн биштәрләп, хәйер һорашырға сығып киткән, ҡарсығы өйҙә тороп ҡалған, тауыҡ менән әтәсте ашатып сығарған да үҙе өйҙәге эшенә керешкән. Әтәс менән тауыҡ яр башында, сүплек баштарында, ем эҙләп, тибенеп йөрөгән. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, тауыҡ, ҡыт-ҡытаҡ, ҡытайыҡ, ҡыт-ҡытаҡ, тип, йомортҡа һалырға инеп киткән, ә әтәс ем эҙләп тороп ҡалған.

Әтәс, сүплек башында тибенеп йөрөй торғас, һабы һынған ҙур ғына ағас ҡалаҡ башын ҡаҙып сығарып, ярға табан тибеп ебәргән. Ҡалаҡ башы, ярҙан тәгәрәп китеп, һыуға барып төшә. Әтәс был икмәк ҡатыһылыр, тауыҡ йомортҡа һалып сыҡҡас, бергә ашарбыҙ тип, ярҙан осоп барып, һыу өҫтөндәге ҡалаҡ башына барып ҡуна. Ҡалаҡ башы, әтәстең ҡапыл килеп ҡуныуынан ҡуҙғалып, һыу уртаһына йөҙөп китә. Әтәс хәҙер төшөп ярға сыға алмай. «Ни булһа ла булыр, ҡасан да булһа һыу мине ярға табан яҡынайтыр, шунда осоп сығырмын әле» тигән уй менән киткәндән-китә бара, ти. Етмәһә, ҡуҡырая биреп: «Ки-ки-ри-күк! Бына ҡайҙа китте кәкре ҡойроҡ!

Минең менән кем бара? Әйҙәгеҙ, һикерегеҙ!» — тип ҡысҡырған була, ти.

Яр буйында йөрөгән ата ҡаҙға етә ҡалды, ти, әтәстең был саҡырыуы, ул да барып ултырҙы, ти, ҡалаҡ башына. Әтәс менән ата ҡаҙ йөҙөп китеп баралар, ти. Әтәс ата ҡаҙҙы ишкәксе итте, ти. Бер ни тиклем ер киткәс, бер кәзә тәкәһен күрәләр. Ул яр буйына һыу эсергә килгән икән. Кәзә тәкәһе:

— Мә-ә-ә, әтәс ағай, ҡайҙа бараһығыҙ? — тип баҡыра, ти.

— Әйҙә беҙҙең менән барабыҙ,— ти Әтәс.

Кәзә тәкәһе риза була. Ҡалаҡ башына ултырып алғас:

— Мә-ә-ә, мин тәкә, мә-кә-кә-кә, мин тәкә, тәкә, бында барыу бик мәрәкә,— тип, үҙенең кем икәнлеген әйтә.

Ата ҡаҙ уға яуап итеп:

— Ҡыйғаҡ, ҡыйғаҡ, ҡа-ҡа-ҡа, ға-ға-ға. Мин һиңә аға-ға! Әтәс аға беҙҙе баға-ға! — тигән булып, үҙе менән дә, әтәс менән дә таныштырып ала. Әтәс ата ҡаҙ таныштырыуына ҡәнәғәтләнмәй:

— Ки-кири-күк! Мин кәкре ҡойроҡ! — тип ҡысҡырып ебәрә.

Яр буйында бер ҙур үгеҙ был өсәүҙең йөҙөп барғанын күрә лә:

— Әтәс ағай, мине лә үҙегеҙ менән алмаҫһығыҙмы? Һеҙгә минең кәрәгем булыр,— тип инәлеп баҡыра башлай.

Әтәс:

— Ки-кири-күк! Һин кәрәк, кәрәк кеүек! — тип ҡысҡыра.



Ишкәксе ата ҡаҙ ҡалаҡ башын үгеҙ торған яр буйына килтереп туҡтата. Үгеҙ инеп баҫа. Бер ни тиклем ер киткәс, яр ҡарлуғастарын һағалап тороп, тотоп ашарға килгән бесәй, быларҙы күреп ҡалып:

— Әтәс ағай, ҡайҙа бараһығыҙ? Мине лә үҙегеҙ менән алып китегеҙ әле,— тип ҡысҡыра.

Киң күңелле әтәс, әлбиттә, ҡаршы килмәй, алып китергә риза була. Бесәй ҙә ултыра.

Әтәс ҡалаҡ башының иң осонда, ата ҡаҙ ҡалаҡкәмәне алып бара, үгеҙ ҡойроҡсо, кәмәнең ҡойроғон ҡайҙа борорға кәрәк булһа, шулай бороп бара. Бесәй менән кәзә тәкәһе уртаға ултырғандар ҙа, тирә-яҡтағы бөтә нәмәгә ҡарап, һоҡланып баралар, ти.

Шулай бара торғас, былар бик күп ер киттеләр, урмандар, тауҙар, һыуҙар үттеләр, ти. Быларҙың бик ашағылары килә башланы, ти. Ҡалаҡ-кәмәне урман тәңгәленә килтереп туҡтатып, яр буйына бәйләп ҡуялар ҙа, урманға инеп, һәр кем үҙ тамағын туйҙыра башлай. Төндө ошо урында үткәрмәк булалар. Әтәс ағас башына менеп төнәй, ә ҡалғандары ерҙә ҡунырға ҡалалар. Төн урталары уҙғас, Әтәс:

— Ки-ки-рикүк! Торорға ваҡыт! — тип, урман яңғыратып ебәрә. Әтәстең был тауышын төлкө ишетеп ҡала, үҙенең төнгө табышына шатланып, был яҡҡа килә башлай. Ләкин, ул килеп етеү менән, эш бөтөнләй башҡаса булып сыға: әтәс ағас башында бик бейектә ултыра, ә ата ҡаҙ үгеҙ менән тәкәнең уртаһында тора, һис кенә лә алырлыҡ түгел. Шуға күрә төлкө был үгеҙ менән тәкә тирәһенә яҡын килергә лә ҡурҡа. Кире китә. Урмандағы бөтә йәнлектәрҙе йыйып килтереп, үгеҙ менән тәкәнән уларға

өләш сығарырға, ә үҙе этәс менән ата ҡаҙҙы ашарға уйлай. Төлкөнөң мәкерле уйын һиҙеп, этәс ағас башынан төшөп, иптәштәренә:

— Бына нәмә, дуҫтар! Мин был төлкөнө бик яҡшы беләм. Ул үҙ ғүмерендә бик күп ҡош-ҡортто ҡыйратты. Мин быны үҙемә ҡурҡыныс булғаны өсөн генә әйтмәйем. Хәҙер беҙҙең бөтәбеҙ өсөн дә үлем ҡурҡынысы тора. Бесәй, һин барып кәмәне рәтләй тор, беҙ хәҙер барып етербеҙ,— ти.

Былар юлға ҡуҙғалырға торғанда ғына, бесәй хәле бөтөп сабып килеп етә лә:

— Әтәс ағай! Әтәс ағай! Эш харап! Мин барып етер саҡта ғына әлеге төлкө ҡалаҡ-кәмәне, бәйенән ысҡындырып, ағыҙып ебәрҙе. Ә үҙе, шарҡылдап көлә-көлә, урман араһына инеп юғалды,— ти.

— Әтәс ағай,— ти ата ҡаҙ,— мин бит бик яҡшы йөҙәм, булмаһа, барып туҡтатайым, ә һеҙ яр буйына бара тороғоҙ. Мин кәмәне ярға сығарғас, ултырып китербеҙ.

— Юҡ,— ти этәс,— бындай ҡараңғы төндә ағып барған ҡалаҡ башын таба ла алмаҫһың. Бесәй менән мин ағас башына менә алабыҙ, ә бит үгеҙ менән тәкә бер нисек тә ҡотола алмаясаҡ.

— Ни булһа ла бергә булайыҡ, ҡурҡынысты бергә еңәйек. Хәҙер беҙ өй ҡорайыҡ,— тигән уйға киләләр былар. Үгеҙ шунда уҡ, эре-эре ағастарҙы һөҙөп йығып, бүрәнәләр әҙерләй башлай. Бесәй ҡырҡылған бүрәнәләрҙе ҡойроғона тағып ташый; кәзә тәкәһе бесәй килтергән бүрәнәләрҙән өй бурай башлай; ата ҡаҙ мүк йолҡа, йолҡҡан мүкте бүрәнә араһына түшәй бара, ә этәс яр буйынан таш, балсыҡ ташып,

мейес сығара башлай. Бына өй эшләнеп тә бөтә. Әтәс кәштә башына, ата ҡаҙ һике аҫтына, бесәй мейес башына, үгеҙ менән кәзә тәкәһе һике өҫтөнә һуҙылып төшөп яталар. Рәхәтләнеп йоҡоға киткәс кенә, берәү ишек ҡаға. Бесәй тороп:

— Кем бар унда? — тип һораһа, әлеге төлкө икән.

— Мин, төлкө, ас, ас, мин һиңә теймәйем, мин бесәй итен ашамайым,— тип йомшаҡ ҡына, юхалап ҡына әйтә, ти.

Бесәй ишекте асмағас, тыштағы йыртҡыс йәнлектәр тәҙрәгә килеп ҡапланалар. Был хәлде күреп торған бесәй үҙенең иптәштәрен уята башлай. Үгеҙ үкерә, кәзә баҡыра, ата ҡаҙ ҡаңғылдай, бесәй мыраулай, әтәс ҡытҡылдай.

Бындай күмәк тауышты ишетеп, тыштағы төлкө, бүре, айыу шөрләй башлай. Аҙаҡ килеп, улар шым ғына төрлөһө төрлө яҡҡа ҡасып бөтә.

## Сәйфелмөлөк

Борон-борон заманда бер батша йәшәгән. Уның Сәйфелмөлөк исемле улы булған. Сәйфелмөлөк һунарға һәр ваҡыт бер үҙе йөрөр булған. Бер көндө ул эңер төшкәнсе йөрөгән, бер йәнлек тә ата алмаған. Ҡапыл тиҫкәре әсе ел сыҡҡан, урман шаулаған, күк күкрәп, йәшен йәшнәп, ямғыр ҡоя башлаған. Сәйфелмөлөк ҡайтыу яғына боролған. Шул саҡ уның ҡаршыһына әҙәмгә лә, хайуанға ла оҡшамаған һыңар мөгөҙлө бер йән әйәһе килеп сыҡҡан. Өҫтөндә йыртыҡ ҡара тун, ти. Сәйфелмөлөк ҡурҡыуға төш-



кән, шулай ҙа, был йәнде атырға тип, уғын төҙәй башлаған. Шул ваҡыт теге, телгә килеп:

— Егет, һин миңә атма: миңә уҡ үтмәй, һыу һеңмәй, ут та мине яндырмай,— тигән.— Өҫтөңдәге кейемеңде миңә һыпырып бир, алмашҡа минең тунды алырһың,— тигән. Сәйфелмөләктөң затлы кейемдәрен иҫке тунға алмаштырғыһы килмәгән. Теге йән оҙаҡ көтөп тормаған, егеттең бөтә кейемдәрен һалдырып алған да үҙенең ҡара ялбыр тунын ҡалдырып киткән.

Сәйфелмөләк, ҡайтайым тиһә, бер урында өйөрөлөп тик йөрөй икән. Шулай аҙашып йөрөй торғас, бер ут күреп ҡалып, ут янына киткән.

— Йоҡларға индерегеҙ әле,— тип тәҙрә шаҡыған. Өйҙөң хужаһы, егеттең йыртыҡ тунын күргәс, был йә берәй ҡасҡындыр тип уйлап, ишекте нығыраҡ бикләп ҡуйған. Үҙенең батша улы булыуын, уны талап йыртыҡ тун кейҙереп китеүҙәрен һөйләгәс, хужа уны өйгә индергән. Был урман ҡарауылсыһы икән.

Сәй эсеп, Сәйфелмөләк йоҡларға ятҡан. Тик ул һис тә йоҡлап китә алмаған: күҙен йомһа, күҙ алдына йыртыҡ туны менән теге нәмә килеп баҫҡан. Шулай яфаланып ята торғас, төн уртаһы еткән. Урман ҡарауылсыһының әтәсе лә ҡысҡырып ебәргән. Шул мәлде Сәйфелмөләктөң күҙе ҡаршыһында эленеп торған теге ялбыр ҡара тунға төшкән. Ҡараһа, ни күҙе менән күрһен: әлеге ялбыр тунда бик матур ҡыҙ һүрәте тора, ти. Һүрәттәге ҡыҙ, тирә-яҡҡа нур сәсеп, бөтә өйҙө яҡтыртҡан да юғалған. Сәйфелмөләк һүрәт ҡыҙҙы күпме генә күрергә тырышып ҡараһа

ла, тунда ҡыҙ яңынан күренмәгән. Егет төнө буйы керпек тә ҡаҡмай сыҡҡан. Күҙен йомһа, күҙ алдында әлеге ҡыҙ һүрәте генә торған.

Иртәгеһен урман ҡарауылсыһы егеткә юл өйрәтеп ҡайтарып ебәргән. Батша улының бер табышһыҙ, иҫке тун кейеп ҡайтып кереүенә аптыраған. Сәйфелмөлөк башынан үткән хәлдең бөтәһен дә атаһына һөйләгән, тик тунда күренгән һүрәт ҡыҙҙы әйтмәгән. Шул көндән башлап Сәйфелмөлөк ашамаған-эсмәгән, уйнамаған-көлмәгән, һунарға ла ҡабат сыҡмаған. Төндәрен ул йоҡлай алмаған.

Атаһы әлеге тунды соланға элдереп ҡуйған икән, Сәйфелмөлөк, төн уртаһы еткәс тә, сығып юғала торған булған. Батша улын күҙәтергә булған. Улының соланға инеп ултырғанын белгәс, кире кереп йоҡларға ятҡан. Икенсе төндө батша, улынан алда барып, соланға кереп бикләнгән. Төн уртаһы еткәс, соланға Сәйфелмөлөк килеп ингән. Әтәс ҡысҡырғас та, тунда ҡыҙ һүрәте хасил булған. Батша эштең асылын аңлаған, улының һарғайыуына сәбәпсе тундағы һүрәт икәненә төшөнгән.

Берҙән-бер көндө ул, сихырсыға барып, сихыр ҡайтарырға уйлаған.

— Өс тау, өс диңгеҙ аша үтеп кенә сихыр ҡайтарыусыға барып була,— тигәндәр уға.

Батша вәзирҙәре, өс көн, өс төн барып, өс тау, өс диңгеҙ аша үтеп, сихырсыны эҙләп тапҡандар. Эштең нимәлә икәнен ҡарсыҡҡа һөйләп биргәндәр. Ҡарсыҡ уларға:

— Ул ҡыҙ донъяла бар. Ул ендәр батшаһы Күк ҡарғаның иң кесе, ун икенсе, ҡыҙы. Мин уға алып



барыу юлын өйрәтә алмайым. Уны минең уртансы апайым белә. Уға ете диңгеҙ аша үтеп кенә барып була,— тип әйтеп ҡайтарған.

Сәйфелмөлөктөң ҡыҙҙан башҡа тора алмаясағын белгәс, батша улына караптар, кешеләр биреп, бәхетле юл теләп, илап-илап алыҫ юлға оҙатҡан. Юлда барғанда, дауыл ҡубып, караптары ватылып бөткән, ә ярандары үлеп ҡалғандар.

Карап таҡтаһына тотоноп ҡалған Сәйфелмөлөктө дауыл утрауға сығарып ташлай. Был утрауҙа ҡырағай кешеләр йәшәгән була. Улар Сәйфелмөлөктө үҙҙәренең атамандарына килтереп бирәләр. Атамандың еткән ҡыҙы Сөйфелмөлөккә ғашиҡ була, был турала атаһына әйтә. Атаман Сәйфелмөлөккә:

— Йә һин минең ҡыҙыма кейәү булаһың, йә кешеләремә биреп, мин һине теткеләтеп ташлайым,— ти. Сәйфелмөлөк атамандың ҡыҙына өйләнергә риза булмай. Бер көндө ул ҡасып китә, ете ай тулды тигәндә, сихырсы ҡарсыҡтың уртансы апаһын эҙләп таба. Сихырсының уртансы апаһы:

— Бик ҡурҡынысլы юлға сыҡҡанһың. Унда барған кешеләр береһе лә кире ҡайта алмай. Дейеү батша кешеләрҙе теткеләп ташлай. Унда барыу юлын минең оло апайым белә. Мин һиңә алтын балдаҡ бирәм. Оло апайым был балдаҡтың ниңә кәрәклеген аңлатыр,— тип, сихырсы ҡарсыҡ оло апаһына юл өйрәтеп ебәрә.

Туғыҙ диңгеҙ, туғыҙ тау аша үтеп, Сәйфелмөлөк сихырсының оло апаһын эҙләп таба. Сихырсы ҡарсыҡ егеткә дейеү батшаға барыу юлын өйрәтә.

— Дейеү батшаһының ун ике ҡыҙы булыр. Улар



һәр көн иртән, ун ике аҡҡош булып, ҙур күл буйына осоп килерҙәр. Күлдең уртаһында ҡуйы ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланған утрау булыр. Ун икеһе лә осоп килерҙәр ҙә сисенеп һыуға сумырҙар. Ун бере бер урынға, ун икенсеһе икенсе урынға сисенер. Һин уларҙың сисенгәнен ҡарап тор ҙа ун икенсе ҡыҙҙың кейемдәрен алып йый. Тик һин, уны күреп һуштан яҙмаҫ өсөн, кәнфит ҡап, ә ҡыҙ һине яратһын өсөн һеңлем биргән балдаҡты уның урта бармағына кейҙер, — ти.



Егет, бик оҙон юл үтеп, һыуҙы эҙләп таба. Иртән аҡҡоштарҙың осоп килгәнен күҙәтә башлай. Тап ҡарсыҡ һөйләгәнсә, ун ике аҡҡош осоп килә. Сисенәләр, ҡыҙ һүрәтенә инәләр ҙә һыуға сумалар. Иң кесе һеңлеләре юғарыраҡ сисенә, һыуға ла һуңыраҡ сума. Шуны ғына көтөп торған Сәйфелмөлөк ҡыҙҙың әйберҙәрен ала ла ҡыуаҡ артына ҡаса. Бер аҙҙан һуң ҡыҙҙар һыуҙан сығалар ҙа: «Фу-фу, әҙәм еҫе килә»,— тип, тиҙ-тиҙ генә кейенеп осоп китәләр. Ә ун икенсе ҡыҙ, кейеме булмағас, аҡҡошҡа әүерелә алмай, илап тороп ҡала. Шунан ул кейемен йыйған кешене эҙләй башлай.

— Әгәр ҡатын-ҡыҙ булһаң, мәңгегә дуҫ булырмын, әгәр ир-егет булһаң, мәңгелек йәр булырмын, тик, зинһар, кейемдәремде бир,— ти ҡыҙ.

«Мәңгелек йәр булырмын» тигәнде ишетеү менән, егет ҡыҙҙың кейемдәрен бирә, балдаҡты кейҙерә лә ни өсөн килгәнен һөйләп бирә. Сәйфелмөлөк ҡыҙға оҡшай, тик ул, алып ҡайтһа, дейеү Сәйфелмөлөктө ашаясағын әйтә. Ҡыҙ атаһына ҡарағанда ла оҫта сихырсы була. Уйлап тора торғас, ул егетте энә итеп, ҡауырһыны араһына ҡыҫтырып алып ҡайта. Ҡыҙы ҡайтып инеү менән, дейеү:

— Фу-фу, әҙәм еҫе сыға,— ти.

Ҡыҙ егетте ниндәй генә һүрәткә индерһә лә, сихырсы атаһынан һис ҡотола алмай. Егетте әҙәм һүрәтенә баҫтырырға була. Егет дейеүгә ни өсөн килгәнен һөйләп бирә.

— Ярай, улай булғас, һин өс һынауҙы үтәһәң, ҡыҙ һинеке булыр,— ти дейеү.— Беренсеһе: энә күҙенә уҡтан атып тейҙер ҙә күҙен миңә килтер.



Ҡыҙ өйрәтеүе буйынса, егет әнә күҙенә ата, һынып ҡалған күҙҙе дейеүгә килтерә.

— Икенсеһе: минең йортта торған ҡара айғырға атланып, сабышҡа сыҡ,— ти дейеү. Ҡыҙ егеткә:

— Йортта торған ҡара айғыр атайым үҙе булыр, ул йүгән кейҙергәнсе генә һине тыңлар, ә һуңынан

күтәреп һуғып үлтерер. Йүгәнләгәндә айғырҙың һул күҙен соҡоп ал,— ти.

Икенсе көндө егет ҡара айғырҙы йүгәнләп эйәрләй ҙә, күҙен соҡоп алып, ат сабышында беренсе килә. Шунан ул айғырҙың күҙен дейеүгә килтерә. Ҡараһа, дейеүҙең һул күҙе юҡ. Дейеү егеткә:

— Егет икәнһең. Тағы бер шартты үтә. Минең ун ике ҡыҙым араһынан иң кесе ҡыҙымды ал,— ти.

Ҡыҙ уға:

— Беҙ бөтәбеҙ ҙә бер төрлө кейемдән, бер төҫлө булырбыҙ. Һин беҙҙең йөҙөбөҙгә ҡарама, ҡулыбыҙға ҡара. Минең йөҙөгөмдөң ҡашы булмаҫ: атайым күрмәгәндә, мин уны әйләндереп ҡуйырмын,— ти.

Егет, ҡыҙ өйрәтеүе буйынса, иң кесе ҡыҙҙы күрһәтә. Дейеүгә иң яратҡан ҡыҙынан айырылыуы ҡыйын була. Ул егетте яптырып ҡуя ла икенсе көндө ашарға уйлай. Ҡыҙ, быны һиҙеп ҡалып, егетте туҙанға әйләндерә, шунан тишектән алып сығып ҡаса.

Дейеү ҡасҡалаҡты алып килергә тип ғәскәр сығара. Ғәскәр ҡыуып етә башлағас, ҡыҙ тараҡ ташлай — ҡуйы урман хасил була, ғәскәр урманды үткән арала улар байтаҡ ҡына юл үтәләр. Ғәскәр ҡуйы урмандан үтеп сыға ла тағы ҡыуа башлай. Ҡыҙ арттарына таҫтамал ташлай — ташҡын киң даръя барлыҡҡа килә. Ғәскәр, даръяны сығып, ҡыҙ менән егетте тағы ҡыуа башлай. Ҡыҙ быны күреп ҡала ла, үҙе һандуғас була, егетте ағас итеп үҫтерә. Ғәскәр эҙләй-эҙләй, таба алмай, ҡайтып китә. Дейеүгә юлда нимә күрһәләр, шуны һөйләп бирәләр. Дейеү бик асыулана, ағас менән һандуғастың егет менән ҡыҙ булыуын әйтә. Ғәскәр яңынан ҡыҙ менән егетте

эҙләргә сыға, ә был ваҡытта ҡыҙ менән егет үҙ юлдарын дауам итәләр. Улар тағы ла ғәскәр килеүен күргәс, һарыҡ көтөүе менән көтөүсе ҡарт һүрәтенә инәләр. Ҡыҙ менән егетте таба алмай, ғәскәр яңынан ҡайта. Өсөнсө ҡабат дейеү батша үҙе сығып китә. Атаһының килгәнен күргәс, ҡыҙ үҙе сиркәү һүрәтенә инә, ә егетте сиркәү ҡарауылсыһы итә. Дейеү быларҙы ҡыҙ менән егет тип уйламай, ҡайтып китә. Ҡайтып өс көн торғас ҡына, уның уйына сиркәү менән ҡарауылсы килеп төшә. Ул яңынан юлға сыға, тик хәҙер сиркәү урынында елдәр иҫкән.

Өс көн тигәндә Сәйфелмөлөк кәләше менән үҙ батшалығына ҡайтып инә. Ҡайтһа, атаһы үлгән, был илдә батша таба алмайҙар, ти. Сәйфелмөлөк батша була, улар гөрләтеп туй яһайҙар. Хәҙер ҙә йәшәйҙәр, ти. Ә дейеү ҡыҙы менән кейәүен һаман таба алмай, эҙләп йөрөй, ти.

## Үгәй ҡыҙ Гөлбикә

Борон заманда йәшәгән, ти, бер тол ҡатын. Уҫалдың-уҫалы, ямандың-яманы булған, ти, ул. Ике ҡыҙы бар ине, ти, бының: береһе — үҙ ҡыҙы, икенсеһе — үгәй ҡыҙ. Үҙенең ҡыҙы — Миңлебикә, үгәй ҡыҙы Гөлбикә исемле булған.

Был ҡатын Гөлбикәне көнөн-төнөн эштән бушатмаған: ебен дә иләткән, йөнөн дә теттергән, һыу ҙа ташытҡан, керен дә йыуҙырған. Башын да ҡалҡытмай эшләгән дә эшләгән, әммә үгәй әсәһенә барыбер ярай алмаған, ти.

Бер ваҡыт үгәй әсә Гөлбикәнең иләгән ебен оҡ-



шатмайынса, тотҡан да тәҙрәнән ырғытҡан. Гөлбикә илай-илай йомғағын эҙләргә сығып киткән. Эй барған, эй эҙләгән — таба алмаған. Буш ҡул менән өйгә инһә, үгәй әсәһе туҡмарын белеп, Гөлбикә йомғағын эҙләй-эҙләй алыҫ китеп барған.

*Йомро-йомро йомғағым,*
*Ҡайҙа китеп юғалдың? —*

тип, юл менән бара ла бара икән Гөлбикә.

Юлда осраған бер кешенән ул:

— Йомро-йомро йомғағым тәгәрәп киткәйне. Шуны күрмәнегеҙме? — тип һорай икән.

— Анау яҡҡа бер йомғаҡ тәгәрәп китеп бара ине. Шул булғандыр әле һинең йомғағың,— тигән уға осраған бер кеше.

Гөлбикә шул яҡҡа табан барған да барған. Бара торғас, һыйыр көтөүсеһенә осраған.

— Йомро-йомро йомғағым тәгәрәп киткәйне. Шуны күрмәнегеҙме? — тип һораған.

Көтөүсе:

— Бынау яҡҡа бер йомғаҡ тәгәрәп китеп бара ине. Шул булғандыр әле һинең йомғағың,— тигән.

Гөлбикә шул яҡҡа бер аҙ барғас, йылҡы көтөүсеһенә тап булып, унан да:

— Йомро-йомро йомғағым тәгәрәп киткәйне. Шуны күрмәнегеҙме? — тип һораған.

Йылҡы көтөүсеһе лә:

— Ана теге яҡҡа бер йомғаҡ тәгәрәп барғанын күргәйнем. Шул булғандыр әле һинең йомғағың,— тип яуап биргән.

Гөлбикә шул яҡҡа барған да барған. Оҙон-оҙон яландарҙы ла үткән, соҡор-саҡыр ерҙәрҙе лә уҙған. Ә йомғаҡ һаман табылмаған. Бара торғас, ул бер ҡара урманға килеп ингән.

Бына ҡараңғы ла төшә башлаған. Уңда ла, һулда ла бүреләр генә олоп тора икән, ти, был урманда. Алда йымылдап ҡына бер ут күренгән. Гөлбикә шул утҡа ҡарап барған да барған. Барып етһә, йоҙроҡ саҡлы ғына бер өйҙән ҡыл кеүек кенә төтөнө сығып тора икән. Тәҙрәһенән ҡараһа, бәлтерәп бөткән бер әбей еп иләп ултыра, ти. Гөлбикә ҡурҡа-ҡурҡа ғына өйгә ингән дә:



— Һауғынамы, әбекәй? — тигән.

— Һау әле. Бында ни эшләп килеп сыҡтың? — тигән әбей.

Шунан Гөлбикә:

— Йомро-йомро йомғағым тәгәрәп китеп юғалғайны. Шуны эҙләп килеп сыҡтым. Шул йомғаҡты табып ҡайтмаһам, үгәй әсәйем күҙемде лә астырмаҫ, үлтергәнсе туҡмар,— тип илап та ебәргән.

Әбей быны тыңлап торған да:

— Ярар, юҡҡа балауыҙ һыҡма, ҡыҙым! Миндә бер ике-өс көн торорһоң да өйөңә ҡайтырһың. Бер ни ҙә булмаç,— тип йыуатҡан.

— Мин һиндә ни эшләп кенә торормон һуң, әбекәй? — тигән Гөлбикә.

— Мине ҡарарһың, ашарға-эсергә әҙерләрһең. Эш табылыр ул, ҡыҙым, эшләйем тигән кешегә,— тигән.

Гөлбикә быға риза булған. Иртәгеһен әбей уға:

— Келәттә тары ярмаһы булыр. Шуны килегә һалып төй ҙә ононан ҡоймаҡ ҡой,— тигән.

Гөлбикә:

— Ә нисек ҡойорға һуң, әбекәй? — тип һораған.

Әбей:

— Нисек булһа ла ярар. Шунда берәй табаҡҡа һыу һал да он һибеп буташтыр ҙа ҡуй,— тигән.

Гөлбикә тары ярмаһын килелә ваҡ ҡына итеп төйөп, уны ҡыл иләктән үткәреп, бик һәйбәтләп кенә шыйыҡ ҡоймаҡ ҡамыры әҙерләп ҡуйған да әбейҙән:

— Хәҙер нисек бешерәйем инде? — тип һораған.

— Нисек бешерһәң дә ярар. Әйҙә, шунда әҙерәк бешер-бешмәç, көйөр-көймәç булдымы — ярар. Көйөп сыҡһа ла, тамаҡҡа тормаç,— тигән әбей.

Гөлбикә күпереп-күпереп торған йомшаҡ ҡына ҡоймаҡ бешергән дә, мул итеп майлап, әбей алдына килтереп ҡуйған. Ҡапһаң, телеңде йоторһоң — шулай уңған, ти, Гөлбикәнең ҡоймағы.

Икенсе көндө әбей Гөлбикәгә:

— Ҡыҙым, мунса яғып индерер инең,— тигән.

— Нисек яғырға һуң уны? — тип һораған Гөлбикә.

— Нисек яҡһаң да ярар шунда. Мейесенә утын тултыр ҙа ут төрт тә ебәр,— тигән әбей.

Гөлбикә мунсаны һәйбәтләп тороп яҡҡан. Мунса уҙғас, ҡыҙыуы һүрелмәҫ борон томалап ҡуйған. Шунан ул:

— Әбекәй, мунса әҙер. Һине нисек алып барырға икән һуң? — тигән.

— Сәсемдән тот та елкәмә төрт,— тигән әбей.

Гөлбикә әбейҙе иплән кенә урынынан торғоҙоп ҡултыҡлаған да әкрен генә мунсаға алып барған. Эләүкәгә мендереп ултыртҡас:

— Һине нисек сабындырайым? — тип һораған.

— Миндектең һабы менән төй ҙә төй арҡамды,— тигән әбей.

Ҡыҙ уны хуш еҫ бәреп торһон өсөн мәтрүшкә аралаштырып бәйләнгән йомшаҡ ҡына япраҡлы ҡайын миндек менән арҡаһының ҡысыуы ҡанғансы рәхәтләндереп сабындырған да, һәйбәтләп йыуындырып, өйөнә алып ҡайтҡан. Шунан ҡарт һөйәктәре йомшап төшкән әбей:

— Хәҙер, ҡыҙым, миңә шунда берәй нисек сәй эсер ҙә килгән ереңә кире ҡайтып китерһең,— тигән.

Гөлбикә самауыр ҡайнатып, бик һәйбәтләп сәй әҙерләгән. Әбей самауырҙы йыҡҡансы, ете ҡат тире атылып сыҡҡансы тәмләп тороп сәй эсеп бөткәс, Гөлбикә өҫтәлде йыйыштырған да:

— Иә, әбекәй, мин ҡайтайым инде,— тигән.

— Ярар, ҡыҙым, ҡайтырһың. Әммә минән буш ҡул менән китмә. Бына һинең йомро-йомро йомғағың. Ә хәҙер һин сарҙаҡҡа менеп төш. Унда бәләкәй генә бер йәшел һандыҡ булыр. Шуны үҙеңә алыр-

һың. Иллә-мәгәр, өйөңә ҡайтып инмәйенсә, һандыҡты аса күрмә,— тигән әбей.

Гөлбикә, әбей менән хушлашып-аманлашып, биргән бүләге өсөн уға бик күп рәхмәт әйтеп, йүгерә-атлай ҡайтып киткән, ти. Ҡайтып еткәс, бәләкәй генә сәүек эттәре, ҡапҡа аҫтынан йүгереп сығып, Гөлбикәне өрә-өрә ҡаршы алған:

— Һау-һау, һау-һау, үлергә киткән апай иҫән-һау ҡайтҡан, үҙе бай!

— Юҡты өрәһең, кит бынан, өтөк! — тип, Гөлбикә этте ҡыуып ебәргән дә өйгә инеп киткән. Ә эт уның артынан баяғыса өрөп ҡалған.

— Һау-һау, һау-һау, үлергә киткән апай иҫән-һау, үҙе бай!

Үгәй әсәһе, Гөлбикәнең иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡанын күргәс, асыуынан ярылып үлерҙәй булған, ти.

Гөлбикә теге әбей биреп ебәргән йәшел һандыҡты асып ебәрһә — эсе тулы алтын-көмөш, ти. Быны күреп, үгәй әсә:

— Ҡайҙан алдың һин был тиклем хазинаны? — тип ҡысҡырған.

Гөлбикә булған хәлде түкмәй-сәсмәй, әнәһенән-ебенәсә һөйләп биргән. Шул ерҙә үгәй әсә:

— Минең үҙ ҡыҙым да шулай байлыҡ тейәп ҡайтһын әле,— тип, Миңлебикәнең йомғағын алған да ишектән ырғытҡан, ти. Йомро-йомро йомғаҡ тәгәрәп киткән. Ҡыҙы йомғаҡты эҙләп ҡараһа ла, таба алмаған. Шунан ул, яңғыҙы ғына йөрөргә ҡурҡһа ла, яланға сығып, бер юл менән китеп барған. Юлда уға Гөлбикәгә осраған һыйыр көтөүсеһе менән йылҡы көтөүсеһе тап булған. Миңлебикә уларҙан:

— Йомро-йомро йомғағым тәгәрәп киткәйне, шуны күрмәнегеҙме? — тип һораған.

Көтөүселәр:

— Анау яҡҡа бер йомғаҡ тәгәрәп китеп бара ине барыуын. Шул булманымы икән һинең йомғағың? — тигәндәр.

Бара торғас, ҡыҙ ҡара урманға барып кергән. Алда йымылдап ҡына бер ут күренгән. Шунда барып етһә, йоҙроҡ саҡлы ғына бер өйҙән ҡыл кеүек кенә төтөнө сығып тора, ти. Тәҙрәһенән ҡараһа, бәлтерәп бөткән бер ҡарсыҡ еп иләп ултыра, ти.

Әбей, Миңлебикәне лә һынап ҡарамаҡсы булып, миндә бер ике-өс көн торорһоң да шунан ҡайтып китерһең, тигән. Ҡыҙ риза булған. Шунан әбей:

— Ҡыҙым, миңә ҡоймаҡ бешереп бирһәнә! — тигән.

— Нисек бешерергә һуң уны? — тип һораған Миңлебикә.

— Нисек бешерһәң дә ярар. Шунда әҙерәк бешер-бешмәҫ, көйөр-көймәҫ булдымы — ярар. Көйөп сыҡһа ла, тамаҡҡа тормаҫ,— тигән.

Миңлебикә бер ни эшләй белмәй икән. Ҡоймаҡтары йә янып-көйөп бөткән, йә сейле-бешле булған.

Икенсе көндө әбей Миңлебикәгә:

— Ҡыҙым, бик мунса кергем килде, мунса яғып ебәрер инең! — тигән.

— Уны нисек яғырға? — тип һораған ҡыҙ.

— Нисек яҡһаң да ярар шунда. Мейесенә утын тултыр ҙа ут төрт тә ебәр, янып бөткәс, тағы өҫтәрһең,— тигән.

Миңлебикә утын килтерергә иренеп, мунсаны һа-

лам менән яҡҡан. Төтөнө-еҫе сығып бөтмәҫ борон уҡ мунсаны томалаған да әбейгә:

— Мунса әҙер, һине нисек алып барырға? — тигән.

— Ярамағанмы шунда — сәсемдән тот та елкәмә төрт,— тигән әбей.

Миңлебикә әбейҙе сәсенән урабыраҡ тотҡан да елкәһенән төртөп үк ебәргән.

Мунсаға барып ингәс, Миңлебикә:

— Әбей, һине нисек сабындырырға? — тигән.

— Нисек булһа ла ярар. Миндектең һабы менән төй ҙә төй арҡамды,— тигән әбей.

Миңлебикә әбейҙең арҡаһын миндектең һабы менән төйгән. Шунан һуң ул әбейҙе, мунсаға нисек алып килгән булһа, өйөнә лә шулай алып ҡайтҡан: сәсенән тотҡан да елкәһенән төртөп ебәргән.

Өйөнә ҡайтҡас, әбей:

— Ҡыҙым, мунсанан һуң бик тамаҡ кипте, һин миңә сәй ҡайнатып эсер инде, шунан ҡайтып китерһең,— тигән.

Миңлебикә ашыҡ-бошоҡ ҡыланып, самауыр ҡуйып, әбейгә ҡайнар-ҡайнамаҫ сәй эсергән дә:

— Әбей, миңә ҡайтһам да ярайҙыр инде? — тигән.

— Ярар, ҡыҙым, ҡайтырһың,— тигән әбей.— Миңә килгән ҡыҙҙар буш ҡул менән китмәйҙәр. Бына һинең йомро-йомро йомғағың. Хәҙер һин сарҙаҡҡа менеп төш. Унда бәләкәй генә бер һары һандыҡ булыр. Шуны үҙең менән алырһың. Иллә-мәгәр, өйөңә ҡайтып инмәйенсә, һандыҡты асып ҡарайһы булма,— тигән.



Миңлебикә һары һандыҡты алып, йүгерә-атлай ҡайтып киткән. Ҡайтып еткәс, бәләкәс кенә сәүек эттәре, ҡапҡа аҫтынан йүгереп сығып, Миңлебикәне өрә-өрә ҡаршы алған, ти:

— Һау-һау, һау-һау, апай ҡайтты — ҡыуандыҡ, хәшәрәттәре — бер һандыҡ.

Миңлебикәне дүрт күҙ менән көтөп алған әсәһе этен:

— Ниңә шулай өрәһең, ҡорогоро! — тип туҡмап ташлаған.

Өйгә инеү менән, Миңлебикә һары һандыҡты асып ебәрһә — һандыҡ эсе мыжлап тулған хәшәрәт, ти: йылан-саяндар, кеҫәрткеләр, тағы әллә ниндәй тәлмәрйендәр тулып ята икән, ти.

Йыландар, һандыҡтан ыҫылдашып сығып, үгәй әсә менән ҡыҙын сағырға тотонғандар. Гөлбикәгә яҡын да юламағандар, ти.

## Күк һыйыр

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың икеһенең дә берәр ҡыҙҙары булған. Ҡыҙҙар икеһе лә үҫеп еткән. Бабайҙың ҡыҙы бик матур, эшлекле булған. Ә әбейҙең ҡыҙы йәмһеҙ ҙә, эшлекһеҙ ҙә икән.

Бер ваҡыт күрше ауылдан бер батыр егет ҡыҙҙар һайларға килгән. Бер урында йыйын йыйнағандар, аш бешергәндәр. Бөтә кешеләр ҙә ошо урынға ҡыҙҙарын алып барырға тейеш булған. Әбей ҙә үҙенең ҡыҙына ебәк күлдәктәр кейҙереп, ебәк яулыҡтар ябып, иңенә елән һалып, йыйынға алып киткән.

Барып еткәндәр, ултырғандар, аш ашағандар. Әбейҙең ҡыҙы ашаған бер һөйәген еҫенә тығып ултырған.

Бабайҙың ҡыҙы йыйынға алып бармағандары өсөн бик ныҡ илаған. Үҙе барыр ине, кейер кейеме булмаған. Ул тышҡа сыҡҡан да әсәһенән ҡалған күк һыйырҙы күргән. Илаған-илаған да һыйырға һамаҡлап:

*Әсәйемдән ҡалған күк һыйыр,*
*Күккә ҡарап баҡырсы! —*

тигән.

Күк һыйыр күккә ҡарап баҡырған. Күктән ҡыҙға матур елән, камзулдар килеп төшкән.

Ҡыҙ тағы бер мәртәбә һамаҡлаған.

Күк һыйыр баҡырып ебәргән. Күктән ҡыҙға матур күлдәк, яулыҡ, шәлдәр килеп төшкән.

Ҡыҙ өсөнсө мәртәбә һамаҡлаған.

Күк һыйыр баҡырып ебәргән. Күктән ҡыҙға итек, калуштар килеп төшкән.

Ҡыҙ ҡыуана-ҡыуана кейемдәрҙе кейгән дә йыйынға киткән. Ул барғанда, йыйындың иң ҡыҙыу ваҡыты булған. Егет, ҡыҙҙар һайлап-һайлап, бер ҡыҙҙы ла оҡшатмаған. Ошо ваҡытта был ҡыҙ ишектән килеп ҡараған. Бөтә ҡыҙҙар араһында иң матур, бик ыҫпай кейенгәне был ҡыҙ икән. Егет, ҡыҙҙы күреү менән, етәкләп алған. Әбей, үҙенең ҡыҙы үтмәгәнгә асыуы килеп, кимереп ултырған һөйәге менән үҙ ҡыҙының күҙен һыта һуҡҡан да ҡайтып киткән. Ә егет, һылыу ҡыҙҙы кәләш итеп алып, ҙур байрам яһаған, шунан үҙенең ауылына алып ҡайтып киткән.

Әбей менән ҡыҙ, өйҙәренә ҡайтҡас, бабайҙың ҡыҙы өйҙә булмағанға аптырағандар. Егет алған ҡыҙҙың шул икәненә шикләнгәндәр. «Ул шундай кейемдәрҙе ҡайҙан алһын»,— тип уйлағандар. Һуңынан ышанғандар.

Егет менән ҡыҙ бик яҡшы донъя көткән. Уларҙың бер улы тыуған. Бер көндө улдарын алып, өсәүләшеп үгәй әсәгә ҡунаҡҡа килгәндәр. Нисә кистер инде ҡунаҡ булғас, ҡайтырға сыҡҡандар. Бер аҙ китә биргәс, ҡыҙ улының йүргәге тороп ҡалғанын белгән. Улын атаһына тотторған да ҡыҙ үгәй әсә өйөнә кире ҡайтҡан. Барып инһә, әбей:

— Ә-ә, килдеңме әле? — тип, ҡыҙҙы тотоп алған да туҡмап-туҡмап кейемдәрен систереп алған. Шунан һуң: — Бар, аҡҡош булып осоп кит,— тип ҡыҙҙы осороп ебәргән.

Үгәй әсә ҡыҙҙың кейемдәрен үҙенең һуҡыр ҡыҙына кейендергән дә, йүргәкте биреп:

— Әгәр күҙең ни эшләп һуҡырайҙы тиһә, йүргәкте алайым тигәндә, сөйгә төкөнөм тип әйтерһең,— тип, ҡыҙын оҙатып ҡуйған.

Ҡыҙ кейәү янына килеп еткәс, егет:

— Ни эшләп күҙең һуҡырайҙы? — тип һорай икән.

— Йүргәкте алайым тигәндә, сөйгә төкөнөм,— тип яуап биргән ҡыҙ.

Егет кәләшен, балаһын алған да, ҡайтып киткәндәр. Үҙенең әсәһе булмағас, бала алһыҙ-ялһыҙ илаған. Ҡайтып еткәндәр, ә бала һаман алһыҙ-ялһыҙ илауын дауам иткән. Егеттең һеңлеһе булған. Ул, бала бик илағас, уны урманға алып барған. Урманға

етеп, ергә ултырғас, һауанан бер төркөм аҡҡош килгәнен күргән. Шул ваҡытта ҡыҙ:

*Бынау ғына бәпкәнең*
*Күрмәнегеҙме әнкәһен? —*

тип һораған. Аҡҡоштар бер тауыштан:

— Артта! Артта! — тип ҡысҡырғандар.

Икенсе төркөм аҡҡоштар осоп килгән. Быларҙы күргәс, ҡыҙ тағы һораған.

Аҡҡоштар:

— Хәҙер килә,— тип киткәндәр.

Күп тә үтмәгән, һауанан бер яңғыҙ аҡҡош осоп килгәне күренгән. Ҡыҙ һамаҡлап һораған:

*Бынау ғына бәпкәнең*
*Күрмәнегеҙме әнкәһен?*

Аҡҡош осоп килеп төшкән дә кеше ҡиәфәтенә кергән. Быныһы — баланың әсәһе, ҡыҙҙың элекке еңгәһе булған. Ул бөтә хәлде һөйләп биргән. Улын имеҙеп:

— Өс төн, өс көн йоҡлар, унан һуң тағы ла ошонда килтерерһең,— тигән дә, аҡҡош булып, баяғы аҡҡоштар осҡан яҡҡа осоп киткән.

Ҡыҙ ҡустыһын алып ҡайтҡан. Бала өс көн, өс төн йоҡлаған. Унан һуң тағы илай башлаған. Апаһы ҡустыһын тағы ла урманға алып барған. Урманға етеп, ергә ултырғас, һауанан бер төркөм аҡҡош килгәнен күргән. Шул ваҡытта ҡыҙ:

*Бынау ғына бәпкәнең*
*Күрмәнегеҙме әнкәһен? —*

тип һораған.



Аҡҡоштар бер тауыштан:

— Артта! Артта! — тип ҡысҡырғандар.

Икенсе төркөм аҡҡоштар осоп килгән. Быларҙы күргәс, ҡыҙ тағы һораған.

Аҡҡоштар:

— Хәҙер килә,— тип ҡысҡырып киткәндәр.

Күп тә үтмәгән, һауанан бер яңғыҙ аҡҡош осоп килгәне күренгән. Ҡыҙ һамаҡлап һораған:

*Бынау ғына бәпкәнең*
*Күрмәнегеҙме әнкәһен?*

Аҡҡош килеп төшкән, балаһын имеҙгән дә осоп киткән.

Ҡыҙ ҡустыһын алып ҡайтҡан. Бала өс тән, өс көн йоҡлаған. Өйҙәгеләр:

— Был бала нисек кенә былай йоҡлай? Урманда былар ни эшләй икән? — тип аптырашҡандар, баланың атаһы аңдырға булған.

Һеңлеһе өсөнсө тапҡыр, ҡустыһын алып, урманға барған. Ағаһы артынан йәшенеп кенә күҙәтеп килгән.

Ҡыҙ, элеккесә һамаҡлап, аҡҡоштарҙан һораған.

Аҡҡоштар:

— Артта! Артта! Хәҙер килә! — тигәндәр.

Баланың әсәһе килеп улын имеҙгән дә, инде китәйем тигәндә генә, ире уны тотоп алған. Ҡатыны иренең ебәреүен үтенгән, яланғас булғас, оялған. Ире ебәрмәгән. Барыһын да һорашҡан, ҡатыны эштең нисек булғанын һөйләп биргән. Ағаһы менән һеңлеһе, ҡатынға үҙҙәренең кейемдәрен кейҙереп, өйгә алып ҡайтҡандар.

Үгәй әсәгә ләғнәт уҡығандар. Егет өйҙәге һуҡыр ҡатынын шул көндө ҡыуып ҡайтарып ебәргән.

Шулай итеп, былар элеккесә матур итеп донъя көтә башлағандар.

## Һалдат менән батша

Борон-борон заманда бер ярлы ғына бабай менән әбей йәшәгән, ти. Бер ваҡыт уларҙың бер ир балалары донъяға килгән. Баланы бик ҡыйынлыҡ менән тәрбиәләп ир еткергәс, батша бойороғо буйынса, уны егерме биш йыл хеҙмәт итергә әрмеләргә алып киткәндәр.

Егет әҫеһен дә, һыуығын да күреп, егерме биш йылын тултырып, ҡайтырға сыҡҡан. Әй килә, әй килә, ти, был. Текә тауҙар аша, киң даръялар кисә икән — һис туҡтамай, тырмашып булһа ла алға барыуын белә, ти. Шулай килә торғас, ул батша йәшәгән ергә лә яҡынлашҡан, ти. Шул ваҡыт бик шәп итеп ямғыр яуып ебәргән. Лысма һыу булып, арып, арманһыҙ булған һалдат батша йортона килеп еткән. Килеп етеүен еткән, батшаның һаҡсылары уны индереү түгел, йортҡа яҡын да ебәрмәйҙәр, ти.

Килеп ингән һалдаттың киң күкрәгенә, янып торған күҙенә ҡарап торҙо ла, ти, батша:

— Һиңә ни кәрәк? — тип һораны, ти.

— Мин һиңә егерме биш йыл хеҙмәт итеп ҡайтып барам. Ҡайтып еткәс, ауылдаштарым: «Һин батшабыҙға егерме биш йыл хеҙмәт иттең, үҙен бер күрҙеңме һуң?» — тип һораһалар, мин ни тиермен?

Шуға яуап биреү өсөн, һине күрергә индем,— ти һалдат.

Батша:

— Ярай, улай булғас,— тигән дә һалдатҡа алтын һауытҡа һалып эсемлек биргән. Һалдат эсемлекте эсеп бөтөргән дә алтын һауытты кеҫәһенә һалған. Батша аптыраған.

— Ниңә һалып алдың уны? — тип һораған.

— Мин кешеләргә, батшаны күрҙем, ышанмаһағыҙ, бына уның бүләге, тип әйтәсәкмен,— тип әйткән, ти, һалдат.

Ай, хәйерһеҙ, бөлдөрә бит был мине, тип уйлап торған да, ти, батша:

— Мин уны былай ҙа һиңә бүләк итергә тип тора инем әле. Оҡшаһа, ал әйҙә, ал, әле былай ғына һорай ҡуйыуым,— тигән булды, ти.

— Шулай йомарт булырһың тип уйлағайным да мин. Улай булғас, һин миңә бер иҫке эйәреңде лә бүләк итеп бир инде,— тигән һалдат.

Батша хеҙмәтселәренә иҫке эйәр кертеп бирергә ҡушҡан.

Егет эйәрҙе алған да батшаға:

— Һин был эйәрҙе биргәнлеккә, ҡултамғаңды һалып, мөһөр баҫып, яҙма ҡағыҙ бир инде,— тигән.

Батша «Иҫке эйәр фәлән һалдатҡа бирелде» тип ҡул ҡуйып, мөһөр баҫып, яҙыу биргән.

Батша янынан сығып, бара биргәс, һалдат иҫке эйәрҙе ташлап киткән. Шунан «Иҫке эйәр» тигән ерҙә йәшәгән байға барып, тегене ҡыуа башлаған, ти. Бай аптырап китә. Егет уға батша яҙып биргән яҙыуын күрһәтә. Бай ышанмай. Һалдат:

— Ышанмаһаң, әйҙә икәүләп батшаға барайыҡ,— ти.

Китәләр бергә. Батшаға барғас, егет, теге ҡағыҙҙы күрһәтеп:

— Бына, ни, бүләк иткән ерҙе был бай миңә бирмәй,— ти. Батша аптырап китә.

— Мин һиңә ер бирҙемме ни? Иҫке эйәрҙе бирҙем. Шул турала ҡағыҙ бирҙем,— ти.

— Бәй, «Иҫке эйәр» — ер исеме ул. Мин һинән шуны һораным, шуны алдым. Әгәр һүҙеңдә тормаһаң: «Беҙҙең батша алдаҡсы икән ул!» тип бөтә илгә таратам,— ти.

Ҡурҡышынан батша риза булған да ҡуйған, теге байға икенсе урынға күсергә ҡушҡан.

Һалдат, ерҙе алғас, аталарын, үҙе кеүек ярлыларҙы килтереп, һәр кемгә тигеҙ итеп ер бүлеп, яҡшы ғына йәшәй башлаған, ти.

## Бешкән тимер

Бер һалдат, егерме биш йыл хеҙмәт итеп, тыуған иренә ҡайтып бара икән. Йәйәү килә торғас, ул бик арыған, алйыған. Аҙығы ла, аҡсаһы ла бөткән. Шунан был, бер ауылды уҙып барғанда, бер кешенең ҡапҡаһы төбөнә, бүрәнәләр өҫтөнә ултырып, хәл йыйып китмәк булған. Ауылда бер кеше лә күренмәй: барыһы баҫыуҙа ашлыҡ ура икән.

Һалдат кеҫәһенән бер тимер сығарып, шуның менән булашып ултырһа, ҡапҡанан бер ҡыҙ сыҡҡан да:



— Ҡулыңда ниндәй уйынсыҡ ул, ағай? — тип һораған.

— Уйынсыҡ түгел был, һылыу, минең аҙығым шул,— тигән һалдат.

— Тимер түгелме һуң?

— Сей көйө тимер кеүек ҡаты була шул ул, бешкәс йомшара,— тигән һалдат.

Был ҡыҙ, тимер киҫәгенә бик ҡыҙығып:

— Ағай, беҙгә инеп бешерәйек тә миңә лә әҙерәк ауыҙ иттереп китерһең,— тип үтенгән.

Һалдат күнгән. Өйгә ингәндәр. Ҡыҙҙың ата-әсәһе ҡунаҡта, хеҙмәтселәре ураҡта икән. Һалдат тимер киҫәген бик һәйбәтләп йыуған да ҡаҙанға һалған. Шунан ҡыҙға:

— Һыуҙа бешерергә был һиңә кәзә ите түгел, бынау котелокты тултырып һөт килтер! — тигән.

Ҡыҙ ҡаҙанға бер котелок һөт килтереп ҡуйған. Шунан һалдат:

— Был ғына етмәй әле, тағы ике туҫтаҡ ярма, бер ҡалаҡ тоҙ һалырға кәрәк! — тигән.

Ҡыҙ быныһын да эшләгән.

Бығыр-бығыр килеп, бутҡа бешеп сыҡҡас, һалдат ярты йомарлаҡ май ҙа килтереп һалырға ҡушҡан. Ҡыҙ уны ла килтереп биргән. Шунан һалдат бутҡаны ҡоштабаҡҡа һалып, өҫтәлгә ултыртҡан, тимер киҫәген ҡыҙға күрһәтмәй генә кеҫәһенә алып һалған. Һалдат менән ҡыҙ тирләп-бешеп, рәхәтләнеп майлы бутҡа ашағандар.

Был бутҡа ҡыҙға бик оҡшаған. Һалдаттан:

— Ағай, шул ят ашамлығың бөтмәгән булһа, берәй киҫәген генә биреп китсе. Шуны бешереп, ата-

йым менән әсәйемә танһыҡ аш ашатып, иҫтәрен китәрер инем! Уның байына мин юлға һиңә ниндәй аҙыҡ кәрәк, бөтәһен дә бирермен,— тип ялынған.

— Ай, эттәгенәһе, бераү генә ине бит әле. Ярай, улай бик үтенгәс, бирһәм бирәйем һуң,— тигән булып, һалдат баяғы тимерҙе ҡыҙға тотторған да, тоҡсайына йәне теләгән аҙыҡты тултырып алып, үҙ юлы менән китеп барған.

## Мәргән

Борон-борон заманда бер әбей менән бер бабай йәшәгән, ти. Быларҙың бер улы булған. Улдарына Мәргән тип исем ҡушҡандар. Мәргән егет булып еттем тигәндә генә, атаһы менән әсәһе үлеп киткән. Ата-әсәһе үлгәс, өйҙә яңғыҙы толҡа тапмай, ҡайғыһына сыҙай алмай, егет башын алып сығып киткән. Ҡайҙа киткәнендә лә эше юҡ, китеп ултыра, китеп ултыра, ти. Шулай итеп, ул бик күп ерҙәр үткән, һыуҙар кискән, тауҙар артылған. Йөрөй торғас, бер ҡалаға килеп сыҡҡан. Был ҡалала бер батша йәшәгән. Ул шундай һаран, шундай уҫал булған була: бер тин аҡса өсөн генә лә кешене үлем язаһына тарттырыу — уның өсөн бер ни тормаған. Мәргән шул батшаға барған, һарайына инеп, сәләм биргән. Батша биргән сәләмде лә алмаған, аҡырып ебәргән:

— Нимә кәрәк һиңә? Һоранырға килдеңме әллә? — тигән.

— Мин һиңә хазина килтерҙем,— тип яуап биргән Мәргән. Батша һикереп килеп торған да ҡыуаныҫынан:



8—166

— Ҡайҙа ул? Күрһәт әле тиҙерәк,— тигән.

— Әйҙә, ишек төбөндәге таяғым эсендә ине,— тигән Мәргән. Шулай тип әйтеп бөтөр-бөтмәҫтән, батша туйтаңлап сығып киткән. Мәргән дә уға эйәргән.

— Таяғым үҙемә кәрәк булыр. Эсендәген бушатырға берәй һауыт бирмәһәң, булмаҫ,— тигән Мәргән. Батша уға:

— Бар, үҙең инеп, ана минең ҡатындан һорап ал,— тигән, ти. Мәргән кире ингән дә батша ҡатынына:

— Батша миңә йөҙ алтын бирергә ҡушты,— тигән. Ҡатын:

— Бәй, ни тип мин бер үткенсенең һүҙенә ҡарап, алтын биреп ултырайым?! Бында артыҡ алтын бармы ла, алйот кеше бармы? — тип һайрарға тотонған.

Бының бирергә бер ҙә яйы булмағас, Мәргән:

— Батшам, ҡатының бирмәй! — тип ҡысҡырған. Төптә тәхетендә ултырған ерҙән генә батша ҡатынына ҡысҡырған:

— Ул ни тигән һүҙ ул?! Бир, бирә һал тиҙ генә! — тигән.

Батша ҡатыны Мәргәнгә йөҙ алтын сығарып биргән, ти. Хәйләкәр Мәргән йөҙ алтынды һалып алған да икенсе ишектән сығып та тайған, ти.

Юлда осраған кешеләргә:

— Мин батшаға бер ағас таяғымды йөҙ алтынға алыштым,— тип һөйләй-һөйләй ҡайтҡан.

Шунан ауылына ҡайтып килеп, матур итеп өй һалып ингән, ти. Кәләш алып, әле лә бәхетле ғүмер итеп ята, ти. Теге батша, Мәргән ҡасан һауыт кил-

терер тип, оҙаҡ көткән. Бөгөн дә шулай көтөп ултыра, ти.

## Байҙың Нужаны танығаны

Бер ауылда ярлы бер крәҫтиән торған. Бер көндө алама кейемдәрен кейгән дә ағас киҫергә киткән. Бер аҙ эшләгәс, быныҡ янына пар ат еккән бер бай килеп туҡтаған.

— Нихәл?

— Яҡшы ғына.

— Һин ниндәй көс менән былай ағас киҫәһең?

— Нужа киҫтерә, бай абзый.

— Нужа? Ҡайҙа ул? Бында булһа, күрһәт әле, нисек була икән ул?

— Мөмкин. Ана, ҡалҡыу урында елгә һелкенеп бер ағас тора бит.

— Эйе, тора шул.

— Ана шул Нужа була инде.

— Әйҙә, һин уны беҙгә күрһәт әле.

— Була ул.

Китәләр былар. Ҡалҡыу урынға барып еткәс, бай аттарҙы туҡтаттыра ла хеҙмәтсеһе менән Нужаны яҡынданыраҡ ҡарарға китә.

Бай кире килһә, йөк бар, пар ат менән крәҫтиән юҡ. Ике ағастан сана рәүешендә бер нәмә этмәләп алып, йөктө шуға һалып, бай тәртәгә егелеп, хеҙмәтсе арттан этеп, ҡайтып китәләр. Шулай ыҙаланып ҡайтып килгәндә, быларға ҡаршы теге крәҫтиән осрай. Ул икенсе кейем кейеп сыҡҡан була. Байҙың йөктө нисек этләнеп тартҡанын ҡарап тора ла:

— Ҡара әле, бай, ниндәй көс менән был йөктө тартаһың? — ти.

— Уны мин тартмаҫ инем дә, Нужа тарттыра шул,— тигән бай.

## Алдар менән шайтан

Элек Алдар исемле бер кеше булған. Ул үҙенең әҙәм затынан булған дошмандарын — байҙарҙы, муллаларҙы, хандарҙы алдап бөткәс: «Туҡта әле, шайтан затынан берәйһе тура килмәҫме?» — тип тау башына, урманға, менеп киткән. Урманға килгән дә был, бер ағасты йығып, ҡайыҙлай ғына башлаған икән, ҙур ғына бер шайтан килеп тә сыҡҡан.

— Кем һин? — тип һораған шайтан Алдарҙан.— Ни эшләп беҙҙең урманда балта тауышы сығарып йөрөйһөң?

— Мин Алдар булам,— тигән был,— һеҙҙе алдарға тип килгәйнем.

Шайтан бынан бик ҡаты көлгән дә әйткән:

— Шайтанды әҙәм балаһы алдай алғаны юҡ әле,— тигән.— Беҙ үҙебеҙ әҙәмде алдайбыҙ, юлдан яҙҙырабыҙ. Юлдан яҙмаһалар, йәндәрен алып, юҡ итәбеҙ.

Шунан Алдар тегегә әйткән:

— Әләйһәң, һин әҙ генә көтөп тор. Мин бынауы бүрәнәне ҡырҡып бөтәйем дә шунан һуң көс һынашып ҡарарбыҙ.

Шайтан быны көтөп ултыра башлаған. Алдар һаман үҙ эшен эшләй икән. Шунан шайтан түҙмәгән.

— Һәй, Алдар, тиҙерәк маташ,— тигән,— минең бит әле башҡа ерҙәргә лә бараһым бар.

— Ярай,— тигән Алдар,— эшең улай бик ашығыс булһа, миңә бер аҙ булыша тор.

Шайтан риза булған:

— Әйҙә, тиҙерәк бөтөрәйек,— тигән.

Алдар шайтанды бүрәнә өҫтөнә ултыртҡан да әйткән:

— Һин ҡулыңды бынауы ярыҡҡа тығып тор,— тигән.— Мин шынаны һуғып сығарайым да шунан алышты башларбыҙ.

Шайтан бүрәнәнең ярығына ҡулын тыҡҡан. Алдар шынаны һуғып сығарыуы булған — шайтандың аҡырып ебәреүе булған. Алдар балтаһын биленә ҡыҫтырып, яйлап ҡына ҡайтырға йүнәлгән.

— Шуны белеп ҡал,— тигән ул шайтанға,— минең исемем Алдар түгел, Былтыр булыр,— тигән.

Алдар ҡайтып киткәс, был шайтандың ҡысҡырыуын ишетеп, башҡалары килеп еткән.

— Кем ҡыҫты? — тип һорағандар улар.

— Былтыр ҡыҫты,— тип яуап биргән быныһы, илай-илай.

— Һай, йүнһеҙ,— тигәндәр быға шайтандар,— былтыр ҡыҫҡанға, быйыл ҡысҡыралармы ни?

«Былтыр ҡыҫҡанға, быйыл ҡысҡырмайҙар» тигән һүҙ бына шунан тороп ҡалған, ти.

Икенсе бер ваҡыт Алдар тағы шул тауға килеп, бер кәкре ҡайынды һайлап ҡырҡа башларға ғына торғанда, әлеге шайтан килеп сыҡҡан.

— Әһә, килдеңме, Былтыр,— тигән был шайтан,— инде хәҙер эләктең!

— Килдем килеүен дә,— тип яуап биргән Алдар,— һин минең исемемде дөрөҫ әйтмәнең бит әле. Мин бит Былтыр түгел, Алдарҙың үҙе булам. Бына һине алдамаҡ булып килгәйнем инде.

— Юҡ инде,— тигән шайтан,— хәҙер минең ҡулды бүрәнә ярығына ҡыҫтыра алмаҫһың.

— Ярай, улай булһа,— тигән Алдар,— ҡыҫтыртмаһаң, ҡыҫтыртмаҫһың, ошо ағасты терәп кенә тор әле, мин ҡайтып алдар тоғомдо алып киләйем. Шунан алышырбыҙ.

Шайтан, икеләнеберәк:

— Һин тағы минең ҡулды ҡыҫтырырға уйлайһыңдыр әле? — тигән.

— Юҡ, юҡ,— тип яуап биргән Алдар,— ышанмаһаң, бына үҙең ҡара, был ағаста ярыҡ әҫәре юҡ.

Шайтан килеп ҡараһа, ысынлап та, ярыҡ-фәлән юҡ, мәгәр ағас үҙе бер яҡҡа янтайыбыраҡ тора, ти.

— Бына шул янтайып сыҡҡан еренән терәп торорға кәрәк,— тигән Алдар,— ауып китмәһен, мин тиҙ килермен.

Шайтан шулай, үҙе риза булып, кәкре ҡайынды терәп тороп ҡалған, ти. Алдар балтаһын яурынына һалып, ҡайтып киткән дә ҡабат килеү хаҡында уйлап та бирмәгән, ти.

«Кәкре ҡайынға терәткән» тигән һүҙ ана шунан тороп ҡалған, ти.

Бер заман Алдар урманға тағы килгән. Эшкә ҡыҙып ҡына тотонған икән, балта тауышына әлеге шайтан тағы килеп сыҡҡан.

— Эй, Алдар! — тигән был шайтан,— хәҙер һин мине кәкре ағасҡа терәтеп китә алмаҫһың. Әйҙә, көс



һынаша башлайыҡ. Алып килдеңме тоҡсайыңды!

Алдар, шайтанды күргәс, уфтанған кеше булып:

— Һай, ҡороғор икән! — тигән.— Алдар тоғон кистән санаға сығарып ҡуйғайным. Санаһы-ние менән ҡапҡа төбөндә онотолоп ҡалған. Булмаһа, һин бер нәмә лә эшләмәй генә бынауы ҡырҡылған ағас төбөндә ултырып тор. Мин тиҙ генә ҡайтып киләйем.

Шайтан тағы, икеләнеп:

— Ярыҡ ере юҡмы? — тип һораған.

— Юҡ, юҡ,— тигән Алдар,— бына, ышанмаһаң, килеп ҡара, шып-шыма!

— Кәкре ере юҡмы? — тигән шайтан.

— Юҡ, юҡ,— тигән Алдар,— ышанмаһаң, бына үҙең ҡара, һып-һырғый.

Шайтан килеп ҡараған да яйлап ҡына төп башына менеп ултырған, ти.

— Һин бер ергә лә китмә тағы,— тип киҫәтеп ҡуйған, ти, Алдар,— ҡуҙғалмай ултыр. Мин хәҙер килеп етермен.

Шайтан ултырып ҡалған. Алдар әлегесә ҡайтып киткән дә, ти, ҡабат килеүҙе уйлап та бирмәгән, ти.

«Төп башына ултыртыу» тигән һүҙ ана шул ваҡыттан тороп ҡалған, ти.

Бер саҡ Алдар әлеге тауға санаһын да алып килгән, ти. Урмандан утын ҡырҡып, санаһына тейәп бөтөп торғанда ғына, бының янына тағы әлеге шайтан килеп сыҡҡан, ти.

Алдарҙы күргәс тә, шайтан:

— Эй, Алдар! — тип ҡысҡырған,— хәҙер һин мине ҡырҡылған ағас төбөнә ултыртып китә алмаҫһың! Ташла эшеңде, башлайыҡ алышты!

Алдар, тағы нығырак уфтанған кеше булып:

— Һай, шайтан дуҫ, аҙ ғына алданырак килһәң, булмай инеме ни? — тигән булған.— Бына минең алдар тоғом сананың төбөндә ине. Утын аҫтында ҡалды. Булмаһа, был утынды икәүләп алып ҡайтып бушатайыҡ та шунан һуң алышып ҡарарбыҙ. Әйҙә, ултыр.

Шайтан, риза булып, санаға менеп ултыра. Былар икәүләп тау башынан выжлатып эйеп төшөп китәләр. Шайтан аптырай.

— Был ниндәй сана? — тип һорай.

— Үҙе йөрөй торған сана был,— тип яуап бирә Алдар,— тау башына менеп, башын түбән яҡҡа ҡаратып ултырһаң, ала ла китә.

Шайтан әйтә: «Бир миңә!» — ти.

Алдар әйтә: «Ал әйҙә,— ти,— шунын өсөн мине бер елкәңә атландырып йөрөрһөң».

Шайтан риза була. Алдар шунда уҡ утынын бушатып, санаһының төбөндәге ҡабығын алып, ҡарамаларын ҡырҡып ташлай ҙа шайтанға тоттора. Үҙе утынын йөкмәп ҡайтып китә.

Шунан ни шайтан, тау башына менеп, санаға ултырып ҡараһа — төбө юҡ. Сана шыуып түбән төшөп китә, шайтан һемәйеп тау башында ултырып ҡала.

«Төпһөҙ санаға ултыртыу» тип һөйләү ана шунан тороп ҡалған, ти, ул.

Бер саҡ Алдар мейесен яғып, ҡоймаҡ бешереп, ашарға ғына ултыра икән, әлеге шайтан бының өйөнә килеп ингән, ти.

— Эй, Алдар! — тип ҡысҡырған, ти, шайтан

ишектән ингәс тә,— ана санаң үҙеңә булһын. Ҡабат һин мине ундай санаға ултырта алмаҫһың! Ташла ҡоймағыңды, башлайыҡ алышты!

Шайтанды күргәс, Алдар тағы, үкенгән кеше булып:

— Һай, шайтан икәнһең, алданыраҡ килһәң ни була,— тип әйтте, ти,— һин килмәҫ инде тип, алдар тоғомдо әле генә утын менән бергә мейескә ташлағайным. Бар әле өй түбәһенә менеп ҡара, төтөн булып сыҡмаймы икән?

Шайтан ышаныр-ышанмаҫ ҡына тәҙрәнән башын тығып ҡараһа,— ысынлап та, мөрйәнән төтөн сығып тора.

— Бармы? — тип һораған була Алдар.

Шайтан әйтә:

— Бар, бар, бик шәп сыға,— ти.

Алдар әйтә:

— Шунда минең алдар тоғом күренмәйме?

Шайтан әйтә:

— Юҡ, юҡ, күренмәй.

Алдар әйтә:

— Әләйһәң, мин бында мейес эсендәге уттан эҙләйем. Һин сығып шул төтөнгә атланып эҙләп ҡара. Табылһа-нитһә, ҡысҡырырһың.

Шунан һуң шайтан менеп китә ҡыйыҡ башына. Менә лә был бик яйлап ҡына төтөнгә атлана. Атланыуын-атлана ла, төтөнгә тонсоғоп, лап итеп ергә килеп төшә.

«Шайтанды төтөнгә атландырған кеше» тигән һүҙ ана шунан килеп сыҡҡан, ти.

Алдар сығып һыйырына тоҙ ялатып тора икән, әлеге шайтан тағы килеп еткән, ти.

— Эй, Алдар! — тип әйтте, ти, был,— утының да кәрәкмәй, төтөнөң дә кәрәкмәй, йә, тиҙерәк алышайыҡ инде.

Алдар, ҡайғыға ҡалған кеше булып:

— Бик алышыр инек тә бит, шайтан дуҫ,— тип әйтте, ти,— минең алдар тоғом бынауы тоҙ эсендә ҡалған икән. Әле шуға һыйырҙы эшкә ҡушырға тура килде. Бына һыйырыбыҙ тоҙҙо ялап бөткәс тә башларбыҙ.

Шайтан, риза булып, көтә башлай, һыйыр бик әкрен маташа. Был түҙмәй, Алдарға әйтә:

— Эй, Алдар, һыйырың был тоҙҙо бик әкрен ялай бит.

— Мин үҙем дә шуны уйлап тора инем әле,— ти Алдар,— булмаһа, был эшкә һин үҙең дә тотон әле.

Алдар шайтанға бик ҙур боҙ килтереп тоттора. Шайтан боҙҙо ялай башлай, ти. Ялай торғас, шайтандың теле туңып, уйылып бөттө, ти.

Бына шунан тороп ҡалған, ти, ул «Һыйыр тоҙ ялағанда, шайтан боҙ ялаған» тигән әйтем.

Алдар бер саҡ баҫыуға барған, ти. Һуҡаһын ер өҫтөнә килтереп ҡуйыуы булған, әлеге шайтан килеп тә сыҡҡан, ти.

— Эй, Алдар! — тип әйтте, ти, шайтан, асыуланып,— ҡасан алышабыҙ һуң инде беҙ?

— Алышыр инек тә бит, шайтан туған,— тип яуап бирҙе,— ти, Алдар,— теге минең алдар тоғомдо бер яуызы урлап, ошонда ер аҫтына тығып киткән,—

ти.— Әле бына шуны аҡтарып ҡарарға килгәйнем,— ти.

Шайтан әйтә:

— Килгәс ни, ҡара, ни эшләп ҡатып тораһың?

Алдар әйтә:

— Мин ни хәҙер тотонормон да ул, һиңә күңелһеҙ булыр бит әле. Минең һуҡаға тотоноп ҡына йөрө булмаһа.

Шайтан әйтә:

— Ҡайһы еренә тотонорға һуң?

Алдар әйтә:

— Һинең кеүек дуҫты артҡа ҡуйып булмай инде, әйҙә алдынан төш.

Шулай итеп, шайтан һуҡаны һөйрәп бара, ти. Алдар үҙе йыр көйләп бара, ти.

Һөрөп бөткәс, Алдар әйтә:

— Сыҡманы бит,— тигән була,— булмаһа бынауы тешле нәмә менән йөрөп әйләнәйек. Шуға эләгеп сыҡмаҫмы икән.

Шайтан тырманы һөйрәй, ти, Алдар, тырма өҫтөнә баҫып, йыр көйләй, ти. Тырматып бөткәс, Алдар әйтә:

— Былай ҙа сыҡманы был,— тигән була,— хәҙер бынауы шалҡан орлоғон һибеп ҡарайыҡ. Шуға әйәреп, шытып сыҡмаҫмы?

Шулай итеп, Алдар шайтанды егеп, ерҙе һөрөп, тырматып, шалҡанын сәсеп ҡайтып китә.

Шулай итеп, был шайтан Алдарҙы тындырмаған. Ҡайҙа булһа ла, ҡайҙа йөрөһә лә тегенең алдына килә лә сыға, ти. Килеп сыға ла:

— Эй, Алдар! Хәҙер һин мине барыбер алдай алмаҫһың. Әйҙә алышабыҙ,— тип әйтә, ти.

Алдар тегене шыма ғына алдай ҙа ҡуя.

Шулай итеп, был кәсеп тә Алдарҙы туйҙырған, ти. Шунан бер саҡ шайтан килеп ингәс, Алдар быға әйтте, ти:

— Минең алдар тоғом бик алыҫта булып сыҡты бит әле. Әгәр түҙемең етһә, әйҙә, бергә барып алып киләйек.

Шайтан риза булды, ти. Былар икәүләп сығып киттеләр, ти. Эй баралар, ти, былар, эй баралар, ти. Бара торғас арып, хәл алырға ултырҙылар, ти. Бер аҙ ултырғас, Алдар әйтә:

— Мин ни эшләп йәйәү киләм әле,— тигән була,— һин бит мине елкәңдә күтәреп йөрөтөргә тейешһең.

Шайтан әйтә:

— Ни өсөн? — ти.

Алдар әйтә:

— Мин һиңә бер ваҡыт санамды бирҙем бит. Биргәндә әйтеп бирҙем.

Шайтан әйтә:

— Юҡ, ул дөрөҫ түгел. Һинең сана мине ултыртманы. Шуның өсөн мин дә һине күтәреп йөрөтмәйем.

Алдар әйтә:

— Улай булғас, әйҙә яңынан алышабыҙ. Быныһында кем еңә — шул еңелгәндең елкәһенә менеп ултыра,— ти.

Шайтан әйтә:

— Кем йәшкә олораҡ — шул еңә,— ти.

— Һин нисә йәштә һуң? — тип һорай Алдар.



Шайтан әйтә:

— Мин тыуғанда, күк табаҡтай ғына, ер ҡалаҡтай ғына ине,— ти.

Алдар, быны ишеткәс, илап ебәрә. Шайтан, аптырап:

— Ниңә илайһың? — тип һорай.

Алдар әйтә:

— Тап шул йылды минең кесе улым үлгәйне. Шуны хәтергә төшөрҙөң, ти.

Шулай итеп, Алдар бик яйлап ҡына шайтандың елкәһенә менеп ултыра ла һуҙып ҡына йырлап тик бара, ти. Шайтан уһылдай, ти, быныһы йырлай бирә, ти.

— Әллиләү генәйем шул, ай кем, әллиләү генәйем...

Шунан бер аҙ барғас, шайтан бынан һорай:

— Тағы оҙаҡ барабыҙмы әле?

Алдар әйтә:

— Бынауы йыр бөткәнсе барабыҙ әле,— ти, үҙе һаман шулай йырын һуҙа: — Әллиләү генәйем шул, һай кем, әллиләү генәйем...

Баралар былар, баралар, көн баралар, төн баралар, аҙна баралар, ай баралар. Шайтан атлай, Алдар һаман йырлай. Шунан шайтан, арый башлағас, Алдарҙан тағы һорай: «Һуң ул йырың ҡасан бөтә һинең?» — ти.

Алдар әйтә:

— Ашыҡма, шайтан, ашыҡма,— ти.— Башҡорттоң йыры оҙон була ул. Әле мин көйләп барған «Әлліләү генәйем» йырҙың башы ғына әле ул,— ти.—

Башын йырлап бөткәс, «Бәллиләү генәйем» тигән аҙағы буласаҡ әле! — ти.

«Еңгән еңелгәндең елкәһенә менгән» тигән мәҡәл ана шунан бирле йәшәй инде ул.

Шулай итеп, шайтан Алдарҙы ғүмер буйы елкәһендә йөрөткән, ти. Шунан һуң башҡортта йыр оҙон булыр булған, ти.

## Һаранбай менән Зиннәт ағай

Борон заманда, яҡты донъяла ҡараңғы күләгә кеүек, бер бай йәшәгән, ти. Бер кем дә уны үҙ исеме менән йөрөтмәгән. Ҡомһоҙлоғо, һаранлығы өсөн уны Һаранбай тип кенә йөрөтөр булғандар, ти.

Берҙән-бер көндө Һаранбай йәрминкәгә барырға йыйынған. Иртүк торған да: «Юл аҙығы итеп нимә алырға һуң?» — тип баш вата икән был. Ә үҙенең юҡ нәмәһе юҡ икән, ти: һарыҡ-кәзә тиһеңме, тауыҡ-ҡаҙ тиһеңме — бөтәһе лә теүәл меңәр баш икән, ти, быныҡ. Оно ла теүәл мең бот булған.

— Юлға бер ҡаҙҙы һуйып алһам — туғыҙ йөҙ туҡһан туғыҙ баш ҡына ҡала; бер тауыҡты һуйһам — шулай уҡ туғыҙ йөҙ туҡһан туғыҙ ғына ҡаласаҡ; бер бот ондан икмәк бешерткән хәлдә — туғыҙ йөҙ туҡһан туғыҙ бот ҡына ҡала; берәй һарыҡты һуйып, итен бешертеп алыр инем — быныһы ла туғыҙ йөҙ туҡһан туғыҙ баш ҡына ҡала. Бына бит, байлығымдың теүәл иҫәбе юғалырға ғына тора! Ни эшләргә һуң былай булғас? — тип баш вата икән, ти, Һаранбай.

Үҙенең генә башы етмәгәс, Һаранбай үҙе кеүек

бай, эштән сыҡҡан һаран күршеһе Дәүләтбайға кәңәш һорап барған. Ул да йәрминкәгә китергә йыйына икән. Һаранбай унан:

— Ни эшләргә инде, күрше? Юл аҙығына нимә алырға икән? — тип һораған.

— Тапҡанһың икән баш ватыр нәмә. Тот та Зиннәткә үҙенең ҡаҙын һуйырға ҡуш. Ул минән, йәрминкәгә ултыртып алып бар әле, тип һорағайны,— тигән күршеһе.

Быға бик ҡыуанып, Һаранбай ярлы ғына күршеһе Зиннәткә ингән:

— Зиннәт күрше! — тигән ул, өйгә инер-инмәҫтән.— Һинең йәрминкәгә барғың килә икән. Юлға аҙыҡ итеп ҡаҙыңды һуй ҙа, киттек әйҙә Дәүләтбай менән өсәүләп,— тигән.

Зиннәт ағай, үҙенең берҙән-бер ҡаҙын һуйырға теләмәһә лә, йәрминкәгә барырға аты юҡлыҡтан, быға риза булған. Зиннәт ағайҙың һуңғы ҡаҙын һуйҙыртып алып, Һаранбай, уның күршеһе Дәүләтбай, ҡаҙ әйәһе Зиннәт ағай — өсәүләп сығып киткәндәр.

Бына улар, ҡунып китергә тип, бер ауылға туҡтағандар. Һаранбай менән Дәүләтбай, ниндәй генә хәйлә табып, ҡаҙҙы бүлешмәй-нитмәй үҙем генә ашап ҡуйырға икән, тип уйлай икән. Хәйлә эҙләп, күп баш ватҡандан һуң, Һаранбай:

— Кем дә кем иң һәйбәт төш күрә, шул кеше ҡаҙҙы бер үҙе ашаһын,— тигән.

Быға бөтәһе лә риза булып, йоҡларға ятҡандар. Һаранбай менән Дәүләтбай, нисек итеп был икәүҙе оҫтараҡ алдарға ла бөтә ҡаҙҙы бер үҙем генә ашарға

икән тип, төнө буйы баш ватып сыҡҡандар. Тик таң алдынан ғына йоҡлап киткәндәр, ти.

Иртәнсәк Һаранбай башлап үҙенең төшөн һөйләргә тотонған:

— Их, юлдаштарым, бына ниндәй һәйбәт төш күрҙем мин: күрнәсә өйөмдә мамыҡ мендәр өҫтөндә ултырам, имеш, тим. Бер ваҡыт, мин һиңә әйтәйем, пар юртаҡ еккән бер кеше ҡапҡа алдыма килеп туҡтаны ла: «Хужа өйҙәме?» — тип һораны. Мин уға ҡаршы сыҡтым. Теге кеше: «Киттек, Һаранбай, мин һине алырға килдем»,— ти. Ултырҙым да китеп тә барҙым, имеш, тим. Ҡараһам, теге кеше мине туп-тура ожмахтың үҙенә алып килгән икән, тим. Ундағы донъяны, мин һиңә әйтәйем, экиәт итеп һөйләп тә, алтын менән яҙып та бөтөрөрлөк түгел. Ҡайҙа ҡарама — хуш еҫ бөркөп торған төрлө-төрлө сәскәләр, ҡыҙарып бешкән алмалар, һырғалай, инде өҙөлөп төшәм, инде өҙөлөп төшәм тип торған хөрмәләр, әллә ниндәй емеш ағастары, ә ағастарында, мин һиңә әйтәйем, аҫыл ҡоштар һайрап ҡына тора... Теге мине алып килгән кеше: «Һаранбай ағай, әгәр һиңә оҡшаһа, бөгөндән башлап ошонда торорһоң»,— ти. Оҡшамаған ҡайҙа инде ул!.. Төштөң бына ниндәйен күрҙем мин!

Һаранбайҙан һуң үҙенең төшөн Дәүләтбай һөйләп бирҙе, ти.

— Ә мин төшөмдә буҙ толпарға атланып остом,— ти Дәүләтбай.— Толпар мине күккә алып менеп киткән, имеш, тим. Ҡараһам, бында донъяның иң бай, иң затлы кешеләре йыйылған икән, тим. Улар мине: «Дәүләтбай килгән дә Дәүләтбай килгән!» — тип

арҡамдан һөйөп кенә йөрөтәләр, өрмәгән ергә ултыртмайҙар. Шунан былар мине һыйларға тотондолар. Өҫтәлдә ниҙәр генә юҡ — йәнең ни теләй, барыһы ла бар! Бында күгәрсен һөтө генә юҡ икән, тип тора инем, уныһын да килтереп ҡуйҙылар... Бындай һәйбәт төштө донъяла берәүҙең дә күргәне булмағандыр.

Төш һөйләү сираты Зиннәт ағайға килеп туҡталған.

— Йә, Зиннәт, һин ниндәй төш күрҙең? — тип һораған ике һаран бай.

— Һорамағыҙ ҙа инде,— тигән Зиннәт ағай.— Һеҙ, әйтәһе лә түгел, икегеҙ ҙә бик һәйбәт төштәр күргәнһегеҙ. Мине ошо арба янында бер үҙемде ҡалдырып, берегеҙ ожмахҡа китеп барған, икенсегеҙ күктә йөрөгән. Былар, мин әйтәм, бындай һыйлы ергә бер барып эләккәс, тиҙ генә әйләнеп ҡайтмаҫтар әле. Һеҙҙе көтөп ултырһаң, ҡаҙҙың да бурһыуы бар. Өҫтәүенә, бик асыҡтырған да ине. Шуға күрә ҡаҙҙы үҙем ашаным да ҡуйҙым, һеҙгә, ана, муйыны ғына ҡалды.

Быны ишеткәс, Һаранбай менән Дәүләтбай ауыҙҙарын асҡандар ҙа, бер һүҙ ҙә әйтә алмай, бер-береһенә ҡарашып, ҡатып ҡалғандар, ти. Шулай итеп, ике һаран байға, ҡаҙҙың Зиннәт ағайҙан ҡалған муйын кимерсәген кимереп кенә, ас йөрөп ҡайтырға тура килгән, ти.

## Иң ҡәҙерле аҡса

Донъяла булған, ти, бер тимерсе. Уның булған, ти, бер шундай ялҡау улы, ундайҙы көндөҙ шәм янды-



рып эҙләһәң дә таба алмаҫһың. Егерме йәшкә етһә лә, ул үҙ ғүмерендә ҡыл да ҡыбырлатмаған. Үҙе һап-һау, көслө булһа ла, ашап-эсә лә мейес башында рәхәтләнеп аунай — эште бар тип тә белмәй, ти.

Атаһы елкәһендә шулай йәшәй биргән ул.

Ләкин тора-бара атаһы ҡартайған, уның сүкеш тотор ҙа хәле ҡалмаған, ти. Хәлдән тайғас, үлемдең яҡынлашыуын һиҙенеп, улын саҡырып алған да:

— Кемгә оҡшап шундай ялҡау булғанһыңдыр. Ғүмерем буйына мин хеҙмәт иттем, донъямды үҙем көттөм, ә һинең бер һум аҡса ла тапҡаның юҡ бит әле,— тигән ҡарт.

— Бер һум аҡса табыу ҙа булдымы эш? — тигән улы.

— Улайһа кәсеп ит,— тигән атаһы.— Бер һум эшләп тапһаң, бөтә донъямды һиңә мираҫ итеп ҡалдырырмын, тапмаһаң — тутыҡҡан ҡаҙау ҙа минән ала алмаҫһың.

Ни эшләргә? Ялҡауҙың мираҫты эләктергеһе килә, ә эшләргә йыбана. Ҡыл да ҡыбырлатмай өйрәнгән кешегә эшләп бер һум табыуы анһатмы ни?!

Атаһы менән һүҙ көрәштереү файҙаһыҙ, сөнки ул үҙ һүҙендә ныҡ тора. Атаһының һүҙе ҡая таш кеүек ҡаты. Ташлы тауҙы күсереп булһа ла, ата һүҙен үҙгәртеп булмай. Әсәһе улын бик йәлләй, ти, үҙенең улы бит. Уңайлы ваҡыт тура килтереп, уға:

— Тыңла әле, улым, бына һиңә бер һум аҡса. Һин кискә тиклем йөрө лә, кис булғас, эштән ҡайтҡан булып, атайыңа бирерһең,— тигән, ти.

Малайҙың ҡыбырлағыһы ла килмәй, ти, ләкин ни эшләһен, барырға тура килә. Әсәһенән бер һум аҡса,

сыр, икмәк алып, тауҙар араһына сығып китә. Көн буйы ашай, эсә, үләндә аунай, һауалағы ҡоштарҙы һанай, ә кис булғас, ҡайта ла бер һумды атаһына бирә:

— Мә, атай, ал. Был бер һум миңә бик ауырға төштө, күп эшләү арҡаһында билемде лә яҙа алмайым,— тигән, ти.

Атаһы, аҡсаны алып, әйләндереп ҡарай ҙа утҡа ташлай:

— Юҡ, был аҡсаны һин үҙең тапмағанһың,— тигән, ти.

Улы, яурындарын һикертеп: «Ышанмаһаң, ышанма»,— тигән дә йоҡларға ятҡан, ти.

Икенсе көндө лә әсәһе тағы ла бер һум бирә лә:

— Йоҡоң килһә, йоҡла, ятҡың килһә, ят, ҡайтҡанда бер саҡрым ерҙе йүгереп үт. Ә тирләһәң, арыһаң, атайың һиңә ышаныр,— тигән, ти.

Ялҡау атларға ла иренә, ә атаның байлығын ҡулдан ысҡындырғыһы килмәй. Әсәһенән ашарға-эсергә алып, ул тағы ла тауға киткән, ти. Ҡояш сыҡҡандан байығанға тиклем ашай, эсә, рәхәтләнеп ҡояшта



ҡыҙынып, ҡайтыр ваҡыт еткәс, бер генә түгел, ике саҡрымды йүгереп үтә.

Тирләп-бешеп атаһы эргәһенә йүгереп килә. Саҡ-саҡ тын ала, битенән шыбыр тир аға, ти. Атаһына бер һум аҡса һуҙып:

— Был аҡса миңә бик ҡимməткә төштө. Көн буйына үгеҙ кеүек эшләнем. Хәлем бөттө, ҡолап барам,— тигән, ти.

Атаһы, аҡсаны алып, әйләндереп-әйләндереп ҡарай ҙа тағы баҙлап торған утҡа ташлай, ти.

— Юҡ, улым, һин алдайһың. Был аҡса һиңә бушҡа килгән. Юҡҡа ғына тауҙан йүгергәнһең,— тигән, ти.

Әлҡауаға нимә, йылмая ла: «Ышанмаһаң, ышанма инде»,— тип, йоҡларға ята.

Улы тәмле итеп йоҡлаһа ла, әсәһенең бөгөн йоҡоһо ҡасҡан, сөнки ҡартты алдай алмаясағын белә ул. Аҡсалар әрәм-шәрәм ителә, малайға ла унан файҙа юҡ, ти.

Иртәгеһен әсәһе улына тағы ла:

— Бына нәмә, улым, мираҫты бушҡа ғына бирмәйҙәр, уны алырға теләһәң, ысынлап эшләргә тура килер, ахыры. Көнөнә берәр-икешәр тинлек булһа ла эшлә, бәлки, аҙнаһына берәр һум таба алырһың,— тигән, ти.

Башҡаса әмәл ҡалмаған, ти. Ялҡауға әсәһенең һүҙен тыңларға тура килгән. Аҙна буйына ул берәүҙәргә нәмә ташый, икенселәргә ярҙам итә. Берәүҙәре уға бер тин, икенселәре ике тин биргәндәр. Шулай итеп, бер һум аҡса тапҡан да атаһына алып ҡайтҡан, уның алдына бер ус ваҡ аҡса һалған, ти.

Ҡарт, тағы ла аҡсаларҙы әйләндереп-әйләндереп, ауырлығын самалап, яҡтыға ҡуйып ҡараған да:

— Юҡ, улым, һин тағы ла алдайһың. Был аҡсаларҙы үҙең эшләп тапмағанһың,— тигән дә бөтә аҡсаны, услап алып, баҙлап торған утҡа ырғытҡан, ти.

Улы, быға түҙеп тора алмайынса, баҙлап торған утҡа ташланған һәм, ҡулдары менән ҡуҙҙарҙы таратып, аҡсаларҙы уттан йыйып ала башлаған, ти.

— Ни эшләйһең һин, атай? Күпме тир түгеп, көс һалып алған аҡсамды һин утта яндыраһың? — тип илап ебәргән, ти.

Атаһы ҡарап торған да:

— Хәҙер ышанам, улым, ышанам. Һиңә кеше тапҡан аҡса йәл түгел ине, ә үҙең тир түгеп тапҡаны ана шулай ҡәҙерле була ул! — тигән, ти.— Шулай, улым. Эшләһәң, аҡсаң да, үҙеңә хөрмәт тә булыр, эшләмәһәң, аҡсаң да булмаç, кеше аҡсалары ла ярҙам итмәç. Минең һүҙҙәремде ғүмерең буйына иçеңдә тот.

Шунан ҡарт улына үҙенең байлығын мираç итеп ҡалдырған, ти.

*Фәрит Иçәнголов*

## Бүленгәнде бүре быуыр

Борон заманда ҙур һөнәрле бер ҡарт йәшәгән. Уның алты улы булған. Ул улдарына ла хәл ҡәҙәренсә һөнәр бирергә тырышҡан. Улдарының иң олоһо, бик күп уҡып, бөтә тәбиғәт ғилемдәренә эйә булған. Икенсеһе, кесе йәштән үк көрәштәрҙә һыналып,

сынығып, танылған батыр булып етешкән. Өсөнсөhө, бөтә уҙыштарҙа, йыйындарҙа ныҡышып ярыша торғас, бер кемде лә уҙҙырмаҫлыҡ данлы йүгерек булып үҫеп етешкән. Дүртенсеhе сабый сағынан уҡ бик үткер күҙле, иҫ киткес мәргән атыусы булып әүерелгән. Үҫеп еткәндә инде, ул йөҙ саҡрым алыҫлыҡта ҡаҙалып ҡуйған энә күҙәүенә уҡ атып тейҙерер булған. Бишенсеhенең дә үҙенә күрә hөнәре булған. Ул әсәhе мәрхүмәнән аш-hыу әҙерләү оҫталығына өйрәнеп ҡалған. Тәү ҡарауға юҡ ҡына күренгән нәмәләрҙән ойоштороп, телеңде йоторлоҡ тәмле, туҡлыҡлы аштар бешерә алған ул.

Ә алтынсы улы, hәр йәhәттән иң hәләтлеhе, иң отҡоро, ағаларында булған бөтә белемгә, бөтә hөнәргә эйә булған.

Үлер алдынан аталары улдарына:

— Ҡулымдан килгәнсә, hәр ҡайhығыҙға ғилем, hөнәр бирергә тырыштым. Һөнәрле — хур булмаҫ, hеҙ барығыҙ ҙа hөнәрлеhегеҙ. Тыныс үләм. Хәҙер инде үҙ көнөгөҙҙө үҙегеҙ күрә алырhығыҙ,— тигән.

Аталары үлгәс, балалары: «Нисек йәшәргә?» — тип кәңәш ҡорғандар. Тәүге бишеhе бер ауыҙҙан: «Бер төптән бергә йәшәhәк, көнөбөҙ иркен булыр, беҙгә бер ни ҙә ҡурҡыныс булмаҫ»,— тигән ныҡлы ҡарарға килгән.

Ә алтынсыhы икенсерәк уй йөрөткән: «Мин,— тип уйлаған ул,— ағайымдарҙың hәммәhенең hөнәренә, ғилеменә бер үҙем эйәмен. Тимәк, мин уларҙың барыhына бер үҙем торорлоҡмон. Улар барыhы бергә тапҡан бәхетте мин бер үҙем табасаҡмын. Шулай булғас, ниңә миңә улар менән бергә йәшәргә,

бер үҙем мул итеп тапҡан бәхетте улар менән уртаҡлашырға? Уларға көнөм ҡалғанмы ни?!»

Ағалары бергә йәшәйек тип күпме генә димләһәләр ҙә, ул ипкә килмәгән — үҙенә тейешле өлөштө артмаҡлаған да ағаларынан айырылып киткән. Артымдан килеп, тапҡан байлығымды уртаҡлаша күрмәһендәр, тип, ул үҙенең ҡайһы яҡҡа киткәнен дә белдермәгән. Юл яҙлыҡтырған.

Тәүге биш ағай-эне аталары йәшәгән элекке урында ҡалған. Бер оҫта биш көндә һалырлыҡ өйҙө, бишәүләп тотоноп, бер көндә һалып кергәндәр улар. Берҙәм, татыу ғүмер иткәндәр. Һәр эштә бер-береһенә ярҙамлашҡандар. Урманда ла, яланда ла гел бергә йөрөгәндәр.

Иң оло ағалары төрлө үләндәрҙең файҙалы йәки зарарлы сифаттарын өйрәнә икән.

Батыры, мәргәне, йүгереге төрлө йәнлектәр аулаған. Үткер күҙлеһе ҡарай ҙа икән, мәргән атып, берәй йәнлекте үлтерә, ә йүгерек күҙ асып йомғансы уны алып килә. Инде йәнлек уҡ менән генә алырлыҡ булмай, ҙурыраҡ йәки алыҫыраҡ булһа, үткер күҙлеһе, уны күреп, батыр ағаһына әйтә лә, тегеһе барып, суҡмар менән һуғып ала.

Бишенсеһе тәүгеләренең асығып ҡайтыуына иң тәмле, иң туҡлыҡлы аштар бешереп ҡуя.

Бер көндө шулай үткер күҙлеһе урманда үҙҙәренең ағас башына ултыртҡан умартаһына бер ҙур айыу менеп барғанын күргән дә батыр ағаһына хәбәр иткән. Батыр суҡмарын, хәнйәрен алған да шул айыуҙы ауларға киткән. Ул, айыу артынан менеп, суҡмары менән ғәйрәтле киҙәнгән дә айыуҙы

ағас башынан иҫәңгерәтә һуғып төшөргән. Шунан төшөп, үҙенә бирешмәҫкә тырышыусы айыу менән алыша башлаған. Инде еңдем, үлтерҙем тигәндә генә, артынан ҡапыл икенсе айыу килеп сыға ла батырҙы ергә һалып, иҙгеләй башлай. Шулай итеп, батырҙы ул үлем хәленә килтереп яралай. Быны шунда уҡ күреп алған үткер күҙ ҡустыһы, мәргән атып, икенсе айыуҙың мейеһен сәсрәтә. Айыу ауа. Йүгерек, уҡтан да етеҙерәк елеп барып, бына-бына йән бирәм тип ятҡан ағаһын, минут та үтмәҫтән, өйгә алып ҡайтып еткерә.

Тәбиғәт ғилеме эйәһе, шунда уҡ иң шифалы үләндәрҙән дарыуҙар яһап, ҡустыһын дауаларға тотона. Батырҙың яралары көнләп түгел, сәғәтләп уңала бара. Аш оҫтаһының иң тәмле аштарын ашап, оҙаҡ та үтмәй, ул элеккесә таҙа, көслө булып әүерелә.

Инде айырылып киткән алтынсы туғанға киләйек.

Ул, үткер күҙе менән күреп, алыҫта ҡалған ағаларының берҙәм тотоноп, өй бөтөрөп ятҡандарын күрә лә сәмләнеп китеп, үҙенә өй һалырға керешә. Биш көн тигәндә, һәйбәтләп өй һалып та керә. Тегеләрҙең өйҙө бер көндә һалып кергәндәрен күреп, бер аҙ ғәрлеге килһә лә: «Ярай, уның ҡарауы, минең өй бер үҙемә генә, уртаҡ түгел»,— тип йыуата ул үҙен.

Шунан ул көн күрергә тотона — һунарсылыҡ итә. Үткер күҙе менән берәй йәнлек күрә лә, мәргән атып, уны үлтерә һәм йүгерек аяҡтары менән тиҙ генә барып ала. Уҡ алмаҫтай булһа, кейекте суҡмар менән һуғып ала. Һунарҙан ҡайтҡас, төрлө үләндәрҙән

шифалы дарыуҙар яһап, йәнлектәр менән булған алыштан ҡалған яраларын дауалай. Шунан тәмле аш бешереп ашай. Был эштәрҙең бөтәһен бер үҙе башҡарһа ла, эштән сығып йәнсоһа ла, сер бирмәй: «Унын ҡарауы, бөтә тапҡаным бер үҙемә генә»,— тип йыуата ул үҙен.

Бер заман шулай унын үткер күҙенә урман шырлығындағы бер мәмерйәгә урынлашҡан бүре ояһы салына. Ул суҡмар, хәнйәрен ала ла ел етеҙлеге менән шунда оса. Тиҙ генә ҡыланып, алты бүре балаһын алты яҡҡа сәсрәтеп ташлай ҙа, бөтә ғәйрәтен туплап, етенсе балаһынын башын йәнсергә киҙәнә. Шул саҡ өңөнә ҡайтып килгән ас инә бүре, аҡты-ҡараны айырып та тормай, бынын үңәсен тештәре менән матҡып ала. Үҙ батырлығы менән маһайып, сослоғон онотҡан алтынсы туған, тын ала алмай, хәлһеҙләнеп ергә ауа. Ә бүре йыртҡыс тештәре менән унын үңәсен быуғандан-быуа бара. Көрәш бик ҡаты була. Батырҙын да, бүренең дә тиреләре йыртҡыланып бөтә, ҡанға туҙышалар. Бүренең, йән көсөн йыйып, батырҙын үңәсен аҡтарыуы була, батыр хәнйәр менән унын йөрәген умырып ала.

Бүре үлә. Яңғыҙ батыр, ҡанһырап, һуштан яҙа. Көн үткәсмелер, аҙна үткәсмелер, ул аңына килә. «Иҫән ҡалыу өсөн яраларҙы дауаларға кәрәк»,— тип уйлай ул. Ул белгән дарыу үләндәре яҡында ғына ултыра ла ни — ятҡан ерҙән һуҙылып алырға ҡул етмәй. Таҙарыу өсөн тәмле, туҡлыҡлы аштар әҙерләп ашарға кәрәк. Бөтә аштарҙы әҙерләй белә — әҙерләр әмәл юҡ, ҡуҙғала ла алмай. Уны хәстәрләр кеше лә юҡ. Үткер күҙе менән ул үҙенән алыҫ аға-

ларын күреп ята. Уларҙан ярҙам һорап, уҡтай осоп барып етер ине лә, элекке йүгерек аяҡтарының бер аҙым атлар хәле ҡалмаған. Ана, бер бүре уға яҡынлашып килә. Батыр бер һелтәнеүҙә йә булмаһа бер тоҫҡап атыуҙа уны он-талҡан килтерер ине, суҡмарҙы, уҡ-һаҙаҡтарҙы күтәреү түгел, ҡыл өҙөрлөк тә хәле ҡалмаған.

Уға ярҙам итеүсе түгел, исмаһам, үлеменә ҡайғырыусы ла булмай яҡын-тирәлә.

*Баязит Бикбай*

## Бәлә

Борон заманда Йәноҙаҡ тигән бик данлы бер һунарсы булған, ти. Атһа — ҡош, сапһа йәнлек ҡотҡармаған ул. Елйеткермәҫ исемле ерән аты, Ҡотҡармаҫ тигән һоро эте булған уның. Гел һунарға бергә йөрөгәндәр улар.

Бер саҡ һунарға сығып киткән Йәноҙаҡ. Тау, урман араларын ҡыҙырып, көнө буйы йөрөй, ти, был, әммә бер йәнлек тә тап итә алмай. Ауылға буш ҡул менән ҡайтып булмай бит инде. Ғүмере күрелмәгән хәл. Намыҫлана Йәноҙаҡ, һаман ҡыҙырына, ә көн кисләп, эңер төшә башлаған.

Шулай йөрөй торғас, кеше аяҡ баҫмаған ҡарурман эсенә барып сыҡҡан Йәноҙаҡ. Елйеткермәҫ бышҡырына, үрәпсей, ә Ҡотҡармаҫы сәңкелдәп шыңшый башлаған бының. Туҡтап, абайлабыраҡ ҡараһа, мүкләнеп бөткән соҡор уртаһында балыҡ тиһәң, балыҡ, йылан тиһәң, йылан түгел, шөкәтһеҙ бер нәмә буй һуҙылып төшөп ята, ти. Аптырап кит-

кән һунарсы. Атырғамы, атмаҫкамы быны? Күп уйлап тормаған, атырға булған. Ҡырма башаҡлы уғын алып йәйәһенә ҡуя. Инде кереште тартырға ғына торғанда, теге нәмә, еҙ тастай күҙҙәрен быҙлатып, кеше теле менән:

— Атма миңә, Йәноҙаҡ, харап булырһың! — тигән, ти. Бына әкәмәт. Ҡурҡыуҙың нимә икәнен белмәгән Йәноҙаҡ хатта үҙе аптырап киткән быға. Шулай ҙа ҡойолоп төшмәгән, тотҡан да:

— Ә һин нимә һуң? — тип һораған.

Теге нәмә ер аҫты гөмбөрләгәндәй ҡалын тауыш менән:

— Бәлә мин, абайыраҡ бул! — тигән, ти.

— Бәлә икәнһең, үҙеңә бәләләнеп ята бир, миңә кәрәгең юҡ,— тип ҡайта ла китә Йәноҙаҡ.

— Бәләнән баш-аяҡ, шулай арыраҡ йөрө,— тип ҡала Бәлә уның артынан.

Ҡайтҡас был хәлде түкмәй-сәсмәй ҡатынына һөйләп бирә һунарсы. Ҡатыны бик ҡурҡҡан, илаған. Бигерәк тә балалары өсөн ҡурҡҡан ул. Ә уларҙың туп шикелле уйнап йөрөгән, әле ун йәштәре лә тулмаған ике малайҙары булған. Бәлә килә-нитә ҡалһа, ни эшләргә? Иртәгеһен ҡатыны:

— Бар әле, Йәноҙаҡ,— тигән, ти,— белеп ҡайт, ул беҙгә килмәҫме икән? Бик ҡурҡам.

Ярай, арлы-бирле тамаҡ ялғай ҙа, Елйеткермәҫ ерәне менән Ҡотҡармаҫын эйәртеп, кисәге урынға киткән, ти, Йәноҙаҡ. Килеп етһә, Бәлә әле уянмаған, йәйелеп төшөп, иҙрәп төшөп йоҡлап ята, ти. Атынан төшкән дә һунарсы, тегенең янына барып, ҡабырғаһына тибеп уята башлаған.

— Кем маҙаһыҙлай мине иртүк? — тип һуҡрана-һуҡрана күҙҙәрен асҡан Бәлә.

— Ә-ә, Йәноҙаҡ һунарсы икән... Ниңә килдең? Һунарсы төбәп килгән йомошон әйтеп биргән, ти.

— Мин ағас башынан йөрөмәйем, юғиһә үҙ башым ауырта,— ти Бәлә.— Ә мин һеҙгә иртәгә үк барып етермен!

Йәноҙаҡ: «Килә күрмә инде»,— тип инәлтеп-нитеп тормай, килә ҡалһа, кәрәген бирергә әҙерләнеп, ҡайтып киткән. Ҡайтҡас, был хәлде ҡатынына һөйләп биргән. Ә ҡатыны иларға тотонған. Ҡатынын йыуата ла Йәноҙаҡ уҡтарын осларға, ҡылысын сарларға тотонған, ти.

Юҡ, ай-вайына ҡуймай ҡатыны: «Бәлә менән бәлә булма, Йәноҙаҡ, ҡасайыҡ та китәйек. Бәлә беҙ юҡта килер ҙә китер, шунан ҡайтырбыҙ...» — тигән. Ҡатыны бик илағас, һунарсы риза була. Елйеткермәҫте егеп, ике малайҙы алдарына ултыртып, ауылдан сығып китәләр, ти, былар. Баралар былар, баралар, көн кисләй башлай. Бик матур һыу буйына барып еткәс, ат туғарып йоҡларға булалар. Тиҙ генә сәй ҡайнатып эсеп, ике малайҙы урталарына ғына һалып, йоҡларға яталар.

Иртәнсәк Йәноҙаҡ һиҫкәнеп уянып китһә, ҡатыны ла, малайҙары ла эргәһендә юҡ, ти, бының. Тик Елйеткермәҫе алғы аяҡтары менән сапсынып тора, Ҡотҡармаҫы, сәңкелдәп шыңшый-шыңшый, ерҙә аунап ята. Бына бәлә, ҡасып ҡотол унан! Йәноҙаҡ тиҙ генә атына менә лә Ҡотҡармаҫ ҡойроҡ сәнсеп сапҡан яҡҡа ҡарай сығып китә. Бара торғас, бер йыуан ҡарама төбөнә етәрәк, бының эте ерҙе тыр-

най-тырнай шыңшый башлай, аты үрәпсеп һауаға ырғый. Ҡараһа, Бәлә ята. Ул инде ҡурҡаҡ ҡатынды, ике малайҙы бына-бына ғына йоторға тора, ти. Йәнозаҡ атынан һикереп төшә һалған да, ҡылысын болғап, Бәлә өҫтөнә ташланған. Бына киткән һуғыш! Бәлә лә бирешмәй: һунарсы алдына сыҡһа, ут сәсеп торған ауыҙы менән йоторға, артына сыҡһа, ҡойроғо менән үлтерергә ынтыла, ти. Бик оҙаҡ алышҡандар былар. Йәноҙаҡ манма һыу булып тиргә батҡан, хәлдән тая башлаған. Шулай ҙа бирешергә теләмәгән ул, һуғышҡан да һуғышҡан. Бәлә ҡырҡ киҫәккә турала башлағас, саҡ ишетелерлек тауыш менән ялына башлаған:

— Зинһар, үлтерә күрмә, Йәноҙаҡ һунарсы, бынан ары нәҫел-ырыуыңа теймәм! Әгәр үлтерһәң, минең туғандарым ҡала әле, улар һиңә барыбер көн күрһәтмәҫтәр!..

Батыр һунарсы уның һүҙенә ҡолаҡ та һалмаған, тегене сапҡылап-сапҡылап, кәбән һымаҡ өйөп ҡуйып, ҡатынын, балаларын ҡотҡарып ҡалған, ти.

Ошо көндән һуң, Бәлә батыр кешеләрҙән ҡасыр, ә ҡурҡаҡтарҙың башына баҫыр булып ҡалған, ти.

# IV синыф

## Алтын йомортҡа

Борон-борон заманда Урал тауы итәгендә, Ағиҙел менән Яйыҡ араһында, йәйен йәйләүҙә, ҡышын ҡышлауҙа мал-тыуар аҫрап көн күргән, ти, бер ир менән ҡатын. Уларҙың Уралбай исемле берҙән-бер улдары булған. Атаһы ла, әсәһе лә уны бик яратҡан, батыр булып үҫер был, тип ҡыуанған.

Әммә Уралбай ата-әсәһе менән оҙаҡ йәшәй алмаған. Йәмле йәйге көндәрҙең береһендә таң атыр-атмаҫтан Яйыҡ аръяғынан бер төркөм баҫҡынсылар килеп сығып, Уралбайҙарҙың мал-тыуарын әйҙәп китә башлаған. Быға тыныс ҡына ҡарап ҡалып буламы һуң? Уралбайҙың атаһы ҡулына күҫәк тотоп, малын ҡурсып, баҫҡынсылар менән һуғышҡан, һыбайлыларҙы бер-бер артлы йыға һуғып төшөргән. Үҙе лә шунда һәләк булған. Бер баҫҡынсыға



киҙәнгән саҡта, икенсеһе, арттан килеп, муйынына боғал һалған да һөйрәтеп алып китә башлаған. Шул ваҡыт бисәһе, ирен ҡотҡармаҡсы булып, боғалға йәбешкән. Уралбай ҙа ата-әсәһе янына йүгереп килеп еткән. Күҙҙәрен ҡан баҫҡан бер баҫҡынсы Уралбай әсәһен, сәс толомонан күтәреп алып, эйәренең ҡа-

итеп ҡуйырмын, беҙҙең алтыныбыҙ ҙа, бүтән байлығыбыҙ ҙа күп булыр,— тигән.

Күсәпҡол, был хәлде ишетеп, бик ҙур ҡайғыға төшкән. Балаларҙы үлтерергә уның һис ҡулы бармаған. Ярай, ҡушҡаныңды эшләрмен, тигән булған, үҙе шунда уҡ малайҙарҙы үлемдән ҡотҡарыу өсөн хәйлә ҡора башлаған.

Шул арала малайҙар күл тирәһендә йөрөгәндә ҡамыш араһында талдан үрелгән бер иҫке кәрзинде тапҡандар. Быны улар Баҙарғол янына алып килгәндәр. Ул, кәрзинде ҡулына алып:

— Күренеүенсә, бында ниндәйҙер бер ҡош оялаған булған. Эшкә инерлек түгел, ташлағыҙ йә утҡа яғығыҙ,— тигән.— Мин күлдең теге яғына ҡош атырға киттем, әйләнеп килеүемә мин теләгән аш бешеп торһон. Ҡара уны, ҡолағың ишетһен! — тигән Күсәпҡолға.

Баҙарғол киткәс тә, Күсәпҡол балыҡ тотоп маташҡан Иҙелбай менән Яйыҡбайҙы саҡырып алған да серҙе асып биргән.

— Баҙарғол хәҙер үк икегеҙҙе лә үлтерергә бойорҙо. Ул берегеҙҙең — баш итен, икенсегеҙҙең бауырын бешереп ашарға теләй. Кәүҙәгеҙҙе һыу төбөнә ташларға ҡушты. Һеҙ кисә әсәйегеҙ бешереп ҡуйған өйрәктең башы менән бауырын ашағайныгыҙ. Ә ул ябай өйрәк булмаған. Шуға күрә берегеҙ батша буласаҡ, икенсегеҙ күпме кәрәк, шул саҡлы алтын төкөрәсәк. Шуны белеп алған Баҙарғол, һеҙҙе һуйып ашап, үҙе батша ла, алтын хужаһы ла булмаҡсы. Һеҙ хәҙер үк аяҡ тартҡан яҡҡа китегеҙ. Өйгә ҡайта

күрмәгеҙ. Ил гиҙеп йөрөгөҙ, бәлки, атайығыҙҙы ла табырһығыҙ,— тигән.

Иҙелбай менән Яйыҡбай үҙҙәре менән бергә йәшәүсе Күҫәпҡолдо аталары һымаҡ күргәндәр. Шуға бөтәһен дә ул әйткәнсә эшләгәндәр. Күҫәпҡол малайҙарҙың кейемдәрен һалдырып күл буйына ташлаған да өйҙән алып килгән башҡа кейемдәр кейҙергән. Баяғы кәрзинде күрһәтеп:

— Был атайығыҙҙың тәү башлап үргән кәрзине. Башы менән бауырын һеҙ ашаған өйрәк алтын йомортҡаһын тәүҙә ошонда һалған. Һеҙ уны үҙегеҙ менән алығыҙ,— тигән. Шул кәрзингә аҙыҡ-түлек һалып биргән.

Иҙелбай менән Яйыҡбай, Күҫәпҡол бабайҙары менән хушлашып, аманлашып, ҡара урман эсенә инеп юғалғандар.

Баҙарғол күл тирәләй йөрөп килгәс, Күҫәпҡолдан:

— Йә, эш булдымы? — тип һораған. Күҫәпҡол ымлап ҡына Иҙелбай менән Яйыҡбайҙың күл буйында ятҡан кейемдәренә күрһәткән, ҡайнап торған ашҡа табан башын ҡаҡҡан. Күп тә үтмәгән, бай алдына бешкән бауыр менән баш ите килтереп ҡуйған. Иҙелбайҙың баш ите тигәне ишәк башыныҡы, Яйыҡбайҙың бауыры тигәне өйрәк бауыры булған. Ишәкте лә, өйрәкте лә Күҫәпҡол әллә ҡайҙан эҙләп йөрөмәгән. «Бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына» тигәндәй, ишәк тә, .өйрәк тә күл буйында йөрөп ятҡан. Күҫәпҡол, билдәле, уларҙы бик һәйбәтләп кенә салған да кәрәк ерҙәрен генә бешергән.

Ҡомһоҙ Баҙарғол, ас бүреләй һоғаланып, баш

ите менән бауырҙы ашап бөтөргән. Батша булыуы хаҡында хыяллана башлаған. Шул арала уның башына: «Был ялсының булған эште берәйһенә һөйләп ҡуйыуы бар, уны юҡ итергә кәрәк» тигән уй килгән. Яр буйында балыҡ ҡармаҡлап ултырған Күсәпҡолдоң артынан шыпырт ҡына барып, быуа һалған да таш бәйләп күл төбөнә батырған. Иҙелбай менән Яйыҡбай кейемдәрен ҡулына тотоп, өйгә ҡайтып киткән.

Ҡайтҡас:

— Иҙелбай менән Яйыҡбай һыу ингән ерҙәрендә батып һәләк булдылар, бахыр балаларҙы ҡотҡарам тип, Күсәпҡол да күл төбөнә китте. Уларҙы һыуҙан эҙләйем тип, мин дә саҡ ҡына батып үлмәнем. Яр башында балаларҙың кейемдәре генә тороп ҡалды,— тигән.

Иҙелбай менән Яйыҡбай, үлемдән ҡотолғас, оҙаҡ ғүмер урманда йөрөгәндәр, унан аталарын эҙләп, ят ҡалаларға барып сыҡҡандар. Шулай, ете урман үтеп, ете диңгеҙ кисеп, оҙаҡ йөрөгәндән һуң: «Икебеҙ ике яҡтан эҙләһәк, бәлки, атайыбыҙҙы табырбыҙ»,— тигән уйға килгәндәр. Шунан икеһе ике яҡҡа ҡарап киткән.

Иҙелбай, ҡулына томбойоҡло тәрән күл буйында табылған иҫке кәрзинде тотоп йөрөй торғас, бик ҙур бер ҡалаға барып сыҡҡан. Унда бер ҙур майҙанда бик күп халыҡ йыйылғанын күргән. Майҙан уртаһындағы ҡалҡыу урында бер кеше ҡулына ҡош тотоп тора икән, ти. Иҙелбай ситтәрәк торған бер ҡарттан:

лып, алдашып бик күп алтын йыйған икән. «Алтыны етмәне йәки алтыны ысын түгел» тигән һылтау менән күптәрҙең башын киҫкәндәр, ә ҡыҙҙы бер кемгә лә бирмәй килгәндәр. Төкөрөп кенә ун ике батманды алтын менән тултырған Яйыҡбайҙы күргәс, вәзирҙәр бөтөнләй хайран булғандар, батша янына килеп:

— Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән ғәжәп хәл, батша хәҙрәттәре, теге егет ун ике батман саф алтын төкөрҙө,— тигәндәр.

Шунда батшаның баш вәзире:

— Ун ике батман алтынды ун бер тип иҫәпләгеҙ, егеткә, бер батман етмәне, уныһын иртәгә бирерһең, хәҙергә ял ит, тип әйтегеҙ. Үҙебеҙ хәҙер үк сихырсы Хәсби ҡарсыҡты саҡыртайыҡ. Ул, берәй әмәлен табып, егеттән тағы алтын ҡоҫторһон. Бөтә алтынын ҡоҫтороп бөткәс, башын ҡырҡырбыҙ,— тигән.

Батша был кәңәште бик хуп күргән. Яйыҡбайҙы ла, ун ике батман тигән алтының ун бергә генә сыҡты, ни өсөн тиһәң, аптырашҡан үлсәүселәр хата һанағандар, тип ышандырғандар. Шунда уҡ Хәсби ҡарсыҡты саҡыртҡандар. Сихырсы әбей, ниндәйҙер бер дарыуҙы һыуға бутап, һыуһаған Яйыҡбайға эсерткән. Был һыуҙы эскәс тә, егет иҫереп киткән, бер өҙлөкһөҙ алтын ҡоҫа башлаған. Күп ҡоҫа торғас, тамағынан ит киҫәге лә килгән. Был теге алтын өйрәктең бауыры икән. Шул ваҡыт Яйыҡбай алтын төкөрөүҙән туҡтаған. Егет айнығас, был алтынды үҙенә күрһәтмәгәндәр.

Бер батман алтын етмәне, тип Яйыҡбайҙың башын ҡырҡырға булғандар. Был хәл батшаның ҡы-

ҙына ишетелгән, ул үҙенә дуҫыраҡ булған вәзирҙәрҙең береһен саҡыртып алған да:

— Әгәр атайым егеттең башын ҡырҡтырһа, мин үҙ-үҙемде үлтерәм. Атайым егеткә башҡа яза бирһен, — тигән.

Был вәзир үҙе лә батшаның шул тиклем ҡарунлығына, ҡанһыҙлығына бер ҙә риза түгел икән. Шунлыҡтан ул батша ҡаршыһына барған да:

— Шаһым, солтаным! Егетте үлтермә, башҡа яза бир, юғиһә берҙән-бер ҡыҙың үҙен-үҙе һәләк итәсәк,— тигән.

Быйдай кәңәшкә батшаның бик асыуы килһә лә, ҡыҙының үҙен-үҙе харап итеүенән ҡурҡып, Яйыҡбайға еңелерәк яза бирергә булған. Вәзиренән:

— Ниндәй яза бирәйек һуң? — тип һораған. Вәзир:

— Егеткә йөҙ ҡамсы бирәйек,— тигән.

Батша быға риза булған. Яйыҡбайға йөҙ ҡамсы һуғырға булғандар. Батшаның был әмерен еренә еткереүҙе вәзир үҙ өҫтөнә алған, ул ҡамсы һуғыусыға:

— Ҡамсыңды ныҡ күтәр, йомшаҡ һуҡ,— тигән. Һуғыу вәзир бойорғанса булған.

Шулай ҙа Яйыҡбай быға намыҫланған. Эштең барып сыҡмауына бошонған, алтындың да төкөрөүҙән туҡталыуына ҡайғырған. Ахырҙа, үҙе иҫән ҡалыуына шатланып, был ҡаланы ташлап сығып киткән. Иллә-мәгәр һылыу ҡыҙҙы бер ҙә хәтеренән сығара алмаған. Ҡайҙа ғына барһа ла, шул һылыу ҡыҙ хаҡында ғына уйлап йөрөр булған.

Ауылдан ауылға, ҡаланан ҡалаға йөрөй торғас,

ҡуйын кесәһендә нимәгәлер ҡулы тейгән. Алып ҡараһа, бер ҡағыҙға өс алтын кисәге төрөп һалынған икән. Ҡағыҙында: «Егет, һине үлемдән ҡотҡарыусылар батшаның ҡыҙы менән фәлән вәзир булды. Был алтынды юл хәжәтеңә тоторһоң, исән булһаң, беҙҙе онотма», — тип яҙылған. Егет, алтынды ла, яҙыулы ҡағыҙҙы ла кесәһенә кире һалып, үҙ юлына киткән.

Яйыҡбай, күп һыуҙар, урмандар, тауҙар, яландар үтеп, икенсе бер ҙур ҡалаға барып еткән. Шул ҡала баҙарына барһа, өс кеше һуғышып ята, ти. Һуғышсыларҙың аяҡ астында бер келәм, бер һандыҡ менән бәләкәй генә бер мискә ята, ти. Был кешеләр һуғышалар-һуғышалар ҙа бер-береһенә табан мискәне типкеләйҙәр икән. Яйыҡбай ғәжәпләнеп ҡарап торған да үтеп-һүтеп йөрөүсе кешеләрҙән:

— Былар ниңә һуғышалар икән? — тип һораған.

Үткенсе кешеләр:

— Улар өс көн буйына һуғышалар инде, сәбәбен белгән кеше юҡ. Араларға барыусы кеше булһа, уның үҙен өсәүләп туҡмап ебәрәләр,— тигәндәр.

Яйыҡбай ҡанға туҙышып яғалашҡан был өс кеше янына барған да:

— Ниңә былай дыу килеп һуғышаһығыҙ, нимәгеҙҙе бүлешә алмайһығыҙ? — тип һораған.

Шул арала һуғышсыларҙың береһе Яйыҡбайға ташланған, икенсеһе лә йоҙроҡ төйөп уға табан килә башлаған саҡта, өсөнсөһө уларҙы туҡтатып:

— Өсөбөҙгә өс нәмә тапҡайныҡ: беребеҙгә — бына был һандыҡ, икенсебеҙгә ошо келәм булды, өсөнсөбөҙ анауы мискәне алғыһы килмәй. Ысынлап

та, уның кемгә кәрәге бар! Беҙгә шуларҙы ғәҙел генә бүлеп бирә алмаҫһығыҙмы? — тигән.

Ййыҡбай уларҙан:

— Ҡайҙан таптығыҙ һуң был нәмәләрҙе? — тип һораған.

Тегеләр:

— Унының һорашып торма, бирһәң, ғәҙел кәңәшеңде бир, юғиһә беҙ үҙебеҙ һиңә кәрәгеңде бирербеҙ! — тип, Ййыҡбайҙы туҡмарға уҡ йыйына башлаған.

Шул ваҡыт егет кеҫәһендәге өс алтынды алған да:

— Бына һеҙҙең өсөгөҙгә өс киҫәк алтын, ә был нәмәләрҙе миңә бирегеҙ! — тигән.

Тегеләр, быға бик риза булып, ерҙә аунап ятҡан нәмәләрҙе Ййыҡбайға ҡалдырып, үҙ-ара дуҫлашып баҙарға инеп юғалғандар.

Теге өсәү күҙҙән юғалғас, Ййыҡбай өс нәмәне күтәреп алған да, ҡала ситенә сығып, бер тауға менеп ултырған. Ни өсөн тиһәң, ул шул юл менән артабан китергә булған. Был әйберҙәрҙең ни хәжәте бар һуң әле миңә? — тип уйлап та ҡуйған. Ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, мискәгә сирткеләй башлаған. Шул ыңғайға — бына ғәжәп эш — мискә эсенән ҡоралли ғәскәрҙәр сыҡмаһынмы! Сыға торғандар, сафҡа теҙелә торғандар. Теҙелеп бөткәс кенә, Ййыҡбай мискәне сирткеләгән. Ғәскәрҙәр мискәгә кире инеп юғалған.

Ййыҡбай һандыҡты асып ҡараһа, унда бер нәмә лә булмаған. Ул, һандыҡты ябып, ҡапҡасына сирткеләгән. Хәҙер һандыҡ үҙе асылған, эсендә бик матур

ҡала күренгән. Был ҡала мин ташлап киткән яҡшы ҡыҙлы, яман батшалы ҡалаға оҡшай, иркенләберәк ҡарайым әле үҙен, тип келәмен йәйеп һалған. Уртаһына мискәһен, уның эргәһенә һандығын ҡуйып, үҙе һуҙылып ятҡан. Ҡаланы ентекләп ҡарай башлаған, үҙе келәмде һыйпаштырып ҡуйған. Шунда уҡ келәм, һауаға күтәрелеп, ҡалалар, ауылдар, урмандар, тауҙар өҫтөнән ҡоштан да йәһәтерәк осоп киткән.

Яйыҡбай теге бер күреүҙә ғашиҡ булған батша ҡыҙын ҡалдырып киткән ҡала эргәһендәге тау башына барып төшкән.

Ун ике батман алтынын алып, үҙен ҡамсы менән һуҡтырып ебәргән батшаға Яйыҡбай бик ҙур асыу һаҡлап йөрөгән. Тау башында яңғыҙы уйлана торғас, ҡарун батшаның ояһын туҙҙырырға кәрәк тигән уйға килгән. Серле мискәгә сирткән икән, шунда уҡ һалдаттар сыға башлаған. Һалдаттарҙың икеһен генә ҡалдырып, башҡаларын индереп ебәргән. Шунан һуң тағы бер янарал сиртеп сығарып, уға ике һалдат биргән дә, тау аҫтында ятҡан ҡаланың батшаһына барып, һуғыш иғлан итергә ҡушҡан. Янарал был әмерҙе еренә еткергән. Батшаға барып:

— Яуызлығың, ҡарунлығың, ҡанһыҙлығың өсөн Яйыҡбай тигән батыр иртәгә һинә яу менән килә,— тигән.

Батша быны ысынға алмаған.

— Килһен әйҙә, килһен, был юлы ҡамсы һуҡтырып ҡына ҡалдырмам, башын киҫтерермен! — тигән.

Янарал ҡайтып был хәбәрҙе әйткәс, Яйыҡбай

иртәгеһенә таң атыр-атмаҫтан, мискәһенә сиртеп, ҡораллы ғәскәрҙәрен сығарған да яуыз батшаға ҡаршы яу асҡан. Ике арала ҡаты һуғыш башланып киткән. Батшаның ғәскәре бик күп икән. Һуғыш өс көн, өс төн буйы барған. Ике яҡтың көсө тигеҙ булған. Быны күреп, Яйыҡбай йәнә мискәгә сирткән. Унан тағы бик күп ҡораллы ғәскәр сығып һуғышҡа киткән. Яңы көстәр килгәс, батша ғәскәрҙәре тар-мар ителгән. Батша үҙе лә әсиргә төшкән. Уны таш зинданға ябып ҡуйғандар. Яуыз батша яфалаған халыҡ Яйыҡбайҙың батша булыуын үтенеп һораған. Яйыҡбай иһә быға риза булмаған. Бөтә халыҡ йыйылып ҡарун батшаны язалаған. Уның урынына Яйыҡбайҙы үлемдән ҡотҡарған теге гәҙел вәзирҙе һайлап ҡуйғандар.

Яу баҫылып, ер өҫтө һил булғас, Яйыҡбай батшаның бер күреүҙә ғашиҡ булған һылыу ҡыҙын кәләш итеп алған. Шунан үҙенең бөтә серле нәмәләрен келәменә тейәп, кәләше менән ҡушарлап ултырып, һауаға күтәрелгән. Яйыҡбай, күп кенә ҡалаларҙа, ауылдарҙа туҡтап, ағаһы менән атаһын һорашҡан. Бына ул кискә табан бер ҡаланың ситенә барып төшкән. Бәләкәй генә бер өйгә ингән. Өй хужаһы менән һөйләшә торғас, бөгөн былдағы йәш батшаның кәләш туйы уҙғарыуын ишеткән. Көн буйы бөтә халыҡ, шау-гөр килеп, шул батша менән ҡыҙ тураһында ғына һөйләгән. Яйыҡбай, батшағыҙҙың исеме нисек һуң, тип һорағас өй хужаһы:

— Уның исеме Иҙелбай,— тигән.

Яйыҡбай, был минең ағайым түгелме икән тип уйлап, кәләше менән бөтә нәмәләрен ошо өйҙә ҡал-

дырып, үҙе батша һарайына киткән. Әммә һарай һаҡсылары уны ишеккә яҡын ебәрмәгәндәр. Шулай ҙа Яйыҡбай, һаҡсыларҙан бик ялынып:

— Һеҙ, зинһар, батшағыҙға инеп, Яйыҡбай тигән кеше килгән, һеҙҙе күрергә теләй, тип әйтегеҙсе,— тигән.

Һаҡсылар айбалталарын сатрашлап күтәргәндәр ҙә:

— Хәҙер туй мәжлесе дауам итә, батша хәҙрәттәре бер кемде лә ҡабул итмәй, тик саҡырылған ҡунаҡтарҙың ғына һарайға үтергә хаҡы бар,— тигәндәр.

Яйыҡбай иһә һаман да үҙ һүҙләнеп:

— Илсегә үлем юҡ, һеҙ минең илселәрем булығыҙ, мин сит ил кешеһе, хәҙер үк батшағыҙҙы күрергә теләйем, кереп әйтегеҙ,— тигән.

Шунан һаҡсыларҙың береһе, батшаның вәзиренә кереп, сит илдән килгән Яйыҡбай тигән кешенең батша янына инергә теләүен әйткән. Ә вәзир был хәбәрҙе шунда уҡ батшаға еткергән.

Иҙелбай батша, Яйыҡбай тигән исемде ишеткәс, ул минең ҡустым булырға тейеш, бик һәйбәт ваҡытҡа тура килде, тип уйлаған да шунда уҡ уны һарайға индерергә бойорған.

Яйыҡбай һарайға инеп, Иҙелбай менән күрешкән. Иҙелбай, тәүҙә бик шатланһа ла, ҡустыһының алама кейемен күргәс, уны ҡунаҡтарға күрһәтергә оялған.

— Мин — бында батшамын, бөгөн туйым була, ә һин ҡайһылай бик өтөкләнеп бөткәнһең? Хәҙер һиңә яҡшы кейемдәр бирергә ҡушырмын,— тигән.

Әммә Яйыҡбай ағаһының был тәҡдименә риза бул-
маған.

— Әгәр туған итһәң, мин, үҙем теләгән кейемем-
де кейеп, һинең туйыңда булыр инем; минән ғәрлән-
һәң, ҡустым тип әйтмәҫһең,— тигән.

Иҙелбай быға ҡаршы килмәгән. Яйыҡбай мәж-
лескә бер аҙ һуңлабыраҡ инергә булған. Шул арала
ул тиҙ генә бисәһе янына ҡайтҡан, киске ҡараңғы-
лыҡтан файҙаланып, кешегә күренмәй генә, бисәһе
менән икәүләшеп, келәмдә осоп, һарай ишеге алды-
на килеп тә төшкән. Икеһе лә яҡшы кейемдәрен
кейенгән. Былар мәжлескә килеп ингәс, туйға йы-
йылған бөтә халыҡ бындай матур егет менән һылыу
ҡыҙҙы күреүгә шаҡ ҡатып ҡалған. Бөтәһенән дә би-
герәк Иҙелбай батша хайран булған. Ул әкрен генә,

— Һинең менән ниндәй ҡыҙ килде? — тип һора-
ғас, Яйыҡбай:

— Ул минең кәләшем, бер батшаның ҡыҙы,—
тигән. Инде Иҙелбай, ғорурланып:

— Был егет минең ҡустым, ә быныһы — киле-
нем,— тип уларҙы ҡунаҡтар менән таныштырған.

Туй үткәс, икенсе көндө Яйыҡбай, ағаһы янына
инеп:

— Батша булыу һәйбәттер, әлбиттә, туй яһауы
ла күңелле эш, иллә-мәгәр беҙҙең үҙ илебеҙ бар, унда
әсәйебеҙ йәшәй, кем белһен, бәлки, атайыбыҙ ҙа
ҡайтҡандыр. Беҙ ҙә тыуған еребеҙгә ҡайтайыҡ. Ситт
илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан булыуың ар-
тығыраҡ,— тигән.

Иҙелбай иртәгеһен алтын көймәләргә яҡшы ат-
тар егергә ҡушҡан. Ә Яйыҡбай, нисек килдек, шул

лай ҡайтайыҡ, беҙгә бындай ат-арбалар кәрәкмәй, тигән. Быға Иҙелбай риза булмаған. Шунан һуң Яйыҡбай уға: «Бисәкәйең менән һарай баҡсаһына сыҡ әле. Бергәләп саф һауа алырбыҙ»,— тигән. Шунда улар тыуған илгә ҡайтыу тураһында кәңәш ҡорғандар, бәхәсләшкәндәр. Бына улар, баҡсала йөрөй торғас, йәшел үләнгә йәйелгән келәмгә барып баҫҡандар. Унда Яйыҡбайҙың бәләкәй һандығы менән мискәһе лә булған. Яйыҡбай, береһенә лә һиҙҙермәй генә, эйелеп келәмен һыйпаштырып алған. Шул арала келәм юғары күтәрелеп оса ла башлаған. Иҙелбай ҙа, уның бисәһе лә, быға бик хайран ҡалып, бер һүҙ әйтергә белмәй барғандар, тик бик күп аралыҡты үткәс кенә, Иҙелбай:

— Был ниндәй экәмәт? — тип һораған.

Яйыҡбай:

— Һин батша кеше бит, белергә тейешһең... Былай йөрөү тиҙерәк тә, уңайлыраҡ та,— тигән шаярып.

Тиҙ арала улар үҙҙәренең тыуған ҡалаларына ҡайтып та еткәндәр. Тәүҙә аталары йортона бармайынса, ҡала ситендәге бер йортҡа ингәндәр. Унда бисәләрен ҡалдырып, ҡалаға сығып киткәндәр. Улар ата-әсәләренең хәл-әхүәлен белергә ашыҡҡандар. Аталарының күршеһенә барып кергәндәр ҙә: «Беҙ— юлсылар, ҡунып сығырға мөмкин булмаҫмы?» — тигәндәр. Өй хужаһы ҡарт егеттәрҙе ҡунырға ҡалдырған. Ике туған ата-әсәләре хаҡында йорт хужаһынан ҡыялатып һораша башлаған. Хужа уларға түбәндәгеләрҙе һөйләп биргән.

— Уралбай былай таҙа-иҫән, күптән түгел сит

илдәрҙән әйләнеп ҡайтты. Уға ят ерҙәрҙә бик күп яфа сигергә тура килгән. Ул бынан күп йылдар элек бер сауҙагәрҙең каруанына ултырып киткәйне. Сауҙагәр бик яуыз кеше булып сыҡҡан, Уралбайҙың бөтә алтынын талап алған да үҙен ҡоллоҡҡа һатҡан. Уралбай оҙаҡ ғүмер таш ватҡан, бер батшаға яңы һарай һалған. Ә батша бик ҡаты бәғерле кеше булған, бөтә халҡын яфалап бөтөргән. Шунан һуң ул ҡанһыҙ батшаны ҡыуып ебәргәндәр. Ҡулына бер иҫке кәрзин тотоп, алыҫтан килгән йәш кенә бер егетте батша итеп һайлағандар. Шунан егет батша булып алған да ҡолдарҙы, тотҡондарҙы азат иткән. Бына шул батшаның изгелеклеге арҡаһында Уралбай ҙа ҡоллоҡтан ҡотолған. Ҡайтып төшкәндә, бахырҙы танырлыҡ та түгел ине. Ул шул тиклем үҙгәргән, бик йонсоған. Өйөнә ҡайтып инһә, элекке байлығынан бер нәмә лә ҡалмаған.

Иҙелбай менән Яйыҡбай:

— Уның байлығы ҡайҙа булған һуң? — тип һораған.

— Ана, баҙар майҙанына ҡаршы иң ҙур йортто күрәһегеҙме? — тигән ҡарт.— Ул Баҙарғол тигән әшәке бер байҙың йорто. Шул ҡарун бәндә Уралбайҙың приказчигы ине. Уның бөтә байлығын үҙенә алып бөтөрҙө, хәҙер ул ҡалала беренсе сауҙагәр, каруан менән төрлө илдәрҙән тауар ташыта, байлығының сиге лә юҡ.

— Күршегеҙ хәҙер нисек көн күрә һуң?

— Уралбай күрше бик эшлекле кеше. Ул, бахыр, ғүмер буйы, хатта бай ваҡытында ла, үҙ ҡул көсө менән йәшәне. Әле лә шулай тир сығарып көн

күрә, ул байлыҡ өсөн ҡайғырмай. Тик уның башҡа бик ҙур ҡайғыһы бар. Ул улдарын онота алмай. Уның бик матур ике улы бар ине, үҙе ситтә йөрөгәндә, шул сабый балалар күлгә батып үлделәр. Был эштә лә ана шул яуыз Баҙарғолдоң ҡатнашы булмаһы микән, тип уйлайбыҙ.

Шулай һөйләшеп ултырғанда, былар янына бер кеше килеп ингән дә йорт хужаһына ҡарап:

— Бабай, һине Уралбай ағай ашҡа саҡырҙы, хәҙер үк инһен тип үтенде,— тигән.

Ҡарт, аптырабыраҡ ҡалып:

— Байрам ваҡыты ла түгел, Уралбай күрше ниңә табын ҡорорға булды һуң әле? — тигән. Шунан иҫенә төшөрөп:— Һай, ҡартлыҡ, ҡартлыҡ, бөтөнләй хәтеремдән сыҡҡан, бөгөн Уралбайҙың уландары үлгән көн бит әле. Ул йыл һайын ошо көндә, ҡарт-ҡороларҙы, етемдәрҙе йыйып, балаларын иҫкә ала. Һеҙ юлдан арып килгәнһегеҙҙер, ял итегеҙ, мин күршенең ҡайғыһын уртаҡлашайым инде,— тип ашҡа киткән.

Ҡарт сығып киткәс, Иҙелбай менән Яйыҡбай, хәҙер ни эшләргә тип, кәңәшләшә башлағандар. Кәңәш ҡора торғас, ныҡлы бер фекергә килгәндәр.

Күрше ҡарт Уралбай йортона барып ингәндә, саҡырылған ҡунаҡтар йыйылып бөткән булған. Ололар бер табын булып, етем балалар икенсе табын булып ултырышҡан. Иң түрҙә теге ҡарун Баҙарғол ҡупырайып ултыра, ти. Ул йыл һайын килмәй ҡалмай икән, балалар менән Күҫәпҡол ҡарттың нисек итеп томбойоҡло тәрән күлгә батып үлеүҙәрен һөйләй икән.

Уралбай, ишектән ингән ҡартты күргәс:

— Күрше, һуңлабыраҡ килдең, әллә берәй мәшәҡәтең булдымы? — тип һораған.

Ҡарт:

— Әллә ни мәшәҡәт юҡ та ул, ҡунып сығырға тип ике егет ингәйне, шулар менән һөйләшеп ултырҙым,— тигән.

Уралбай:

— Юлсы кеше — алла ҡунағы ул, ҡунаҡтарыңды алып килергә кәрәк ине,— тигән.

— Алып килергә ҡыйманым шул, Уралбай күрше, — тигән ҡарт.

Шунан һуң Уралбай, бер бешкән аш барына ла етер, тип теге юлаусыларҙы ашҡа саҡыртҡан. Иҙелбай менән Яйыҡбай ҡарышып тормаған, уларҙы бер кем дә танымаған. Уралбай, әкрен генә һөйләнә-һөйләнә, ҡунаҡтарҙы һыйлай башлаған:

— Һай донъя, донъя, донъяны үҙең теләгәнсә генә ҡороп булмай шул. Бына минең дә алтын ашыҡ кеүек ике улым бар ине, бынан ун йыл элек һыуға батып харап булдылар. Иҫән булһалар, улар ҙа ошо егеттәр кеүек булырҙар ине инде,— тип көрһөнгән.

Түрҙә ҡупырайып ултырған Баҙарғол да көрһөнгән булған.

— Хоҙай ҡушҡанды күрмәй, гүргә кереп булмай шул, Уралбай кейәү,— тигән ул, күҙ йәштәрен һөрткән булып.— Бигерәк матур балалар ине, уңғанлыҡтарын, етеҙлектәрен һөйләп бөтөрөрлөк тә түгел. Мин уларҙы һунарға алып сыға торғайным; улар икеһе лә һис ҡурҡыу белмәҫ, осраған бер кейеккә ташланыр ине. Сабыйҙар һәләк булыр көндө мин

шул тиклем әйттем, һыу буйына бармағыҙ, был бик тәрән күл, тинем. Уларҙы тыңлатып булырлыҡ инеме һуң, ут кеүек балалар ине бит,— тигән булған.

Балалар хаҡында ҡайғырышҡандан һуң, донъя хәлдәре тураһында һөйләшә башлағандар. Шул арала Яйыҡбайҙың күҙе тәҙрә башында торған ҡурайға төшкән. Ул үҙенең бәләкәй саҡта уйнаған ҡурайын таныған һәм, йорт хужаһына ҡарап:

— Һеҙҙең ҡурайығыҙ ҙа бар шикелле, шул ҡурайҙы тартырға рөхсәт итмәҫһегеҙ микән? Бәләкәй ваҡытта мин ҡурай уйнай торғайным,— тигән.

Уралбай:

— Шулайҙыр ҙа бит, егет, ул минең мәрхүм Яйыҡбай улымдың ҡурайы бит әле, ҡайһылайыраҡ булыр икән,— тип икеләнгән.

Ике егеттең әсәһе, күҙҙәрен һөртә-һөртә:

— Эйе, Яйыҡбай бәпесемдең ҡурайы,— тигән.— Аҡтыҡ тапҡыр һунарға сыҡҡан көндө иртүк тороп уйнағайны, үкенескә булған икән. Ул уйнаған көйҙәрҙе мин һис онота алмайым, хатта төшөмдә лә шуларҙы ишетәм,— тигән.— Балаҡайым уйнаны-уйнаны ла ҡурайын тәҙрә башына ҡуйып китте, шунан бирле беҙ уны урынынан ҡуҙғатҡаныбыҙ юҡ ине әле. Бәлки ҡуҙғатырға ла ярай торғандыр, атаһы? — тигән.

Шул саҡ Иҙелбай, Яйыҡбайҙың һүҙен ҡеүәтләп:

— Минең иптәшем бик оҫта ҡурайсы, бәлки, һеҙҙең улығыҙ уйнаған көйҙәрҙе лә белә торғандыр, әҙерәк кенә уйнарға рөхсәт итегеҙ инде,— тигән.

Мәжлестә ултырған ҡунаҡтар ҙа, хужаға ҡарап:

— Уйнаһын әйҙә, уйнаһын. Ҡурайға бер ни ҙә

булмаҫ, егет әҙерәк уйнар ҙа, урынына ҡуйырһығыҙ, тиешкәс, Уралбай бик ҙур һаҡлыҡ менән ҡурайҙы алып Яйыҡбайға биргән.

Яйыҡбай ҡурайҙы алып, бер ни тиклем уйланып торғандан һуң, түрҙә ултырған Баҙарғолға күҙ ташлаған. Шунан ҡурайҙың эсенә һыу бөркөп, ашыҡмай ғына уйнай башлаған. Ул «Сыңрау торна» көйөн уйнаған. Тәүҙә ҡурайҙан дәһшәтле оран тауыштары ишетелгән. Көйҙөң һуҙып-һуҙып уйналған был өлөшө тыңлаусыларҙы шомландырған. Ни өсөн тиһәң, ҡурай тауышы ниндәйҙер афәт, ниндәйҙер фажиғәле ваҡиға булырын алдан иҫкәрткән хәбәр булып яңғыраған. Шунан һуң ҡурайҙан кемделер саҡырған, кемделер өмөтләнеп көткән борсоулы моң түгелгән. Көйҙө тыңлап ултырыусы ҡунаҡтар бер-береһенә ҡарашҡандар, ҡайһы берәүҙәре шыбырлап ҡына үҙ-ара һөйләшеп алғандар. Егет ниңә был шомло көйҙө уйнай икән, тигән уйға батҡандар. Ни өсөн тиһәң, был көй табында уйнала торған көй түгел бит инде.

Яйыҡбай, һуҙып-һуҙып уйнап, көйҙөң тәүге өлөшөн тамамлаған да, тәрән һулыш алып, икенсе өлөшөнә күскән. Бында инде торналарҙың ҡысҡырышып, сыңрашып, нимәлер һөйләшеп осҡандары ишетелгән. Торналар берсә юғары күтәрелеп, берсә түбән төшөп осҡан һымаҡ тойолған. Бына ҡурайҙан берсә ҡалын, берсә нәҙек көмөш тауыш ишетелгән — торналарҙың ҡанаттарын йәйгән көйө, аяҡтарын ергә бер тейҙереп, бер күтәрелеп сыңрашҡаны күҙ алдына килеп баҫҡан. Табында ултырыусылар,



12—166

тын да алмай, донъяларын онотоп, егеттең уйнауын тыңлаған.

Йорт хужаһы Уралбай, улдарын хәтерләп, көрһөнөп ултырған. Бисәһе ҡурай моңонан йөрәгенең һыҙлауын нисек баҫырға белмәй үрһәләнгән. Ә Баҙарғол иһә, ҡурайҙың тәүге шомло тыңлауын ишеткәс тә, һиҫкәнеп китеп, ҙур афәт көткән кеүек, ҡойолоп төшкән.

Яйыҡбай, «Сыңрау торна» көйөн уйнап бөтөргәс, уйға батҡан халыҡҡа ҡарап алып, «Ҡара юрға» көйөн өҙҙөрөп тарта башлаған. Ялан юлынан юрғалаған аттың елеп барыуына оҡшаған ҡурай тауышы ыңғайына ҡайһы берҙәре тороп бейергә уйлаһалар ҙа, баҙнат итмәгәндәр, хужанан тартынғандар. Ә бәғзеләре ултырған көйө генә яурындарын ҡыймылдатыр булған. «Ҡара юрға»нан һуң Яйыҡбай, киң күкрәген киреп тын алып, «Ирәндек» тигән һунарсылар көйөн уйнаған. Ҡурайсы йәш һунарсы егеттең һунарға сығыр алдынан һөйгән ҡыҙы менән һаубуллашыуын күҙ алдына баҫтырған. Был көй мәжлестә ултырыусыларҙы күңелләндереп ебәргән. Әммә Уралбайҙың ҡатыны, был көйҙө ишеткәс:

— Атаһы, атаһы! Улыбыҙ Яйыҡбай ҙа һунарға сыҡҡан көндө тап ошо егет кеүек, тап ул уйнағанса ҡыланып, «Ҡара юрға» менән «Ирәндек» көйөн уйнағайны, ә Иҙелбайың рәхәтләнеп тыңлап ултырғайны, — тигән дә тағы ла нығыраҡ илай башлаған.

Әсәһенең был һүҙҙәрен ишеткәс, Яйыҡбай ҡапыл ғына «Томбойоҡло тәрән күл» көйөн тартып ебәргән. Был көйҙө ишетеү менән, түрҙә ултырған Баҙарғол бөтөнләй ағарынып киткән, ҡабырға тип алған ҡул-

ламаны ауыҙына илтеп еткерә алмаған, ҡулдары ҡалтырап, ит киҫәктәре итәгенә ҡойолған, ә ауыҙы асҡан көйө ҡатып ҡалған.

Бына Яйыҡбай уйнауҙан туҡтаған. Ҡунаҡтар егетте оҫталығы өсөн арҡаһынан ҡағып маҡтағандар. Шул арала егеттәр үҙ-ара һөйләшеп алғандар. Яйыҡбай атаһы менән әсәһенә ҡарап:

— Мин белгән һөнәремде күрһәттем инде,— тигән, Иҙелбайға күрһәтеп:— Минең иптәшемдең дә берәй һөнәр күрһәтеүен һорарға кәрәк. Ул күпте күргән егет, һүҙгә лә оҫта, һеҙ унан күргән-белгәндәрен һөйләүен һорағыҙ,— тигән.

Йыйылған ҡунаҡ бөтәһе лә Иҙелбайҙан күргән-белгәнен һөйләүҙе һораған. Егет ялындырып тормаған, һөйләп алып та киткән:

— Бынан күп йылдар элек булған, ти, бер етем малай, килгән, ти, ул ҡалаға, шунда эш эҙләп йөрөгән, ти. Йөрөй торғас, барып ингән, ти, бер һөнәрсе ҡартҡа, ҡарт малайға ябай ғына бер һөнәр өйрәткән: бер бәләкәй арба менән балта биргән дә, урмандан ҡалаға утын ташырға кәңәш иткән. Малай шулай байтаҡ ғүмер утын ташыған, кәрзиндәр үреп тә һатҡан. Ул шулай урман менән ҡала араһында йөрөп үҫкән. Берҙән-бер ваҡыт егет урман эсендәге күл буйында гәжәп бер өйрәк осратҡан. Был өйрәк көн дә бер алтын йомортҡа һала икән. Егет өйрәкте өйөнә алып ҡайтҡан, шуның арҡаһында байып киткән, йорт һалған. Кәләш алған, кәләше игеҙ ир бала тапҡан. Байлығы арта барған, кибет асҡан, ҡатынының инәлеүе буйынса, кибетенә йылғыр ғына бер приказчик та алып ҡуйған...



Уралбай ҡунаҡ егеттең хикәйәһен тыңлап ултыра торғас: «Бының һөйләгәне минең баштан үткәндәргә шул ҡәҙәр оҡшар икән. Донъяла минең кеүек кешеләр ҙә булған икән, бахырҙарың», — тип уйлаған.

Иҙелбайҙың әсәһе лә егеттең һөйләгәненән: «Был ни хәл? Юлсының һөйләгәндәре беҙҙең баштан үткәндәргә бөтөнләй тура килеп тора ла баһа!» — тип иҫе китеп ултырған.

Ә Баҙарғол иһә: «Ҡайҙан ғына килеп сыҡтылар һуң әле был егеттәр, шулар килеп кергәне бирле, йөрәгем сығып бара, ниңә генә килдем икән был Уралбай йолҡоштоң мәжлесенә», — тип уфтанып ултырған. Иҙелбай иһә һаман һөйләй биргән:

— Приказчик бик ҡарун кеше булған, хужаһының байлығын урлап торған, батша булам, алтын төкөрөүсе кеше булам тип хыялланып, теге өйрәкте лә һуйҙыртып ашаған...

Шул ваҡыт түҙә ҡасҡан Баҙарғол:

— Дөрөҫ түгел! Башы менән бауыры приказчикка эләкмәгән, уларҙы хужаның малайҙары ашаған,— тип ҡысҡырып ебәрмәһенме!

Иҙелбай, быға иғтибар итмәйенсә, артабан һөйләп алып киткән:

— Приказчик шул тиклем ҡанһыҙ бер яуыз булған, хужаһының улдарын һунарға тип алып сыҡҡан да күлгә батыртҡан.

Шул ваҡыт Иҙелбайҙың әсәһе, Баҙарғолға ҡарап:

— Бына һин ниндәй яуыз бәндә икәнһең, бөтә байлығыбыҙҙы талауың етмәгән, минең ғәзиз балаларымды ла һин үлтергәнһең икән, — тип ҡысҡырған. Үҙе иҫтән яҙып йығылған.

Шул саҡ Баҙарғол, үҙен-үҙе онотоп:

— Дөрөҫ түгел, уларҙы мин батырманым, Күсәпҡол ялсы батырҙы,— тигән.

Шул ваҡыт Иҙелбай, урынынан тороп, Баҙарғолдоң ҡаршыһына баҫҡан да:

— Алдайһың, хәшәрәт! — тип ҡысҡырған.

Мәжлескә килгән халыҡ араһында шау-шыу, ығы-зығы ҡупҡан.

— Яуыз бәндә үҙен-үҙе тотторҙо, бына кем үлтергән икән Уралбайҙың уландарын,— тиешкәндәр.

Иҙелбай, һүҙен дауам итеп:

— Хикәйәнең һуңы шул: ул егеттәр иҫән-һау, уларҙы үлемдән изгелекле Күҫәпҡол ҡотҡарып алып ҡалған,— тигән.

— Ҡайҙа һуң минең уландарым? — тигән Уралбай, сабырһыҙланып.

Иҙелбай менән Яйыҡбай:

— Бына беҙ ул һинең улдарың! — тип, аталары Уралбайҙы ҡосаҡлап алғандар, унан һуң иҫтән яҙып ятҡан әсәләрен аяҡҡа баҫтырғандар. Ата менән әсә, шатлыҡтан нимә эшләргә белмәй, саҡ ҡына аҡылдарынан яҙмаған.

Шул ваҡыт өйҙәге ығы-зығынан файҙаланып, Баҙарғол сығып тайған. Ҡунаҡтарҙың береһе:

— Баҙарғол ҡасты! — тип ҡысҡырған.

Яйыҡбай:

— Ҡасһын әйҙә, әллә ҡайҙа китә алмаҫ,— тигән, ишек төбөнә ҡуйған мискәһенең төбөнә сиртеп, бер нисә һалдат сығартҡан да: — Баҙарғол тигән яуыз кешене тотоп килтерегеҙ! — тип әмер биргән.

Күп тә үтмәгән, һалдаттар Баҙарғолдо тотоп килтергәндәр. Асыуы шундай яман ҡабарған халыҡтан көс-хәлгә аралап, үҙен таш келәткә бикләп ҡуйғандар.

Әсәләре, улдарының иҫән-һау булыуын күреп, бик шатланған. Әммә уның күңеле тынысланмаған. Элек эшләгән хаталары, мәкерле Баҙарғолдо тыңлап, иренә ҡарата эшләгән насарлыҡтары өсөн бик ғазапланған. Ул хәҙер инде, Уралбайҙан да яҡшы, гәҙел кеше юҡтыр, тип уйлаған.

Иҙелбай менән Яйыҡбай үҙҙәренең бисәләрен аталары йортона алып килгәндәр. Кисә йыйылған кешеләрҙе йәнә саҡырып, бик ҙур туй яһағандар. Уралбай ҙа, уның бисәһе лә, уландары менән килендәренә ҡарап, ҡыуанып туя алмаған. Уралбай, берсә улдарына, берсә килендәренә ҡарап:

— Байлыҡ — бер айлыҡ, тигәндәр боронғолар. Мин байлығым юғалғаны өсөн бошонмайым. Һау-сәләмәт булһаң, эш юратһаң, мал табыла ул ирмен тигән ир кешегә. Эшләп ашағандан да тәмле аш юҡ, улдарым! — тигән.

Туйҙан һуң был ҙур ғаилә бөтәһе бергә томбойоҡло тәрән күл буйына барырға булған.

Уралбай ҡарт:

— Мин йәйәү йөрөп өйрәнгән кеше, ҡарт булһам да арымам, ә бына әсәйегеҙ ундай алыҫ ергә барып етә алырмы икән, ат ялларға кәрәк булыр,— тигән.

Шунда Яйыҡбай:

— Юҡҡа борсолмасы, атайым, беҙгә аттың кәрәге юҡ! — тигән. Бөтәһен дә әлеге серле келәмгә баҫырға ҡушҡан. Баҫҡандар. Шунда уҡ, Яйыҡбайҙың әмере буйынса, һауаға күтәрелеп оса башлағандар. Шул арала Иҙелбай:

— Яйыҡбай! Беҙ теге ҡәһәрле бәндәне лә үҙебеҙ менән алып барайыҡ! — тигән. Шунан һуң улар,

кире боролоп, таш амбарға бикләнгән Баҙарғолдо ла алып, яңынан һауаға күтәрелгәндәр. Тиҙ арала томбойоҡло тәрән күл өҫтөнә барып еткәндәр. Бик бейеккә күтәрелеп, күл тәңгәлендә осоп йөрөгәндәр. Шул ваҡыт Иҙелбай, Баҙарғолға ҡарап:

— Күрәһеңме, йыртҡыс бәндә! Ана теге яр буйында һин беҙҙе үлтерергә теләгәйнең, беҙҙең башыбыҙ менән бауырыбыҙҙы бешереп ашамаҡсы булғайның. Әйт, яуыз! Күҫәпҡолдо ҡайҙа иттең? — тип ҡысҡырған.

Баҙарғол яуап бирмәгән. Былар ҡулынан үлгәнсе, үҙемде үҙем үлтерәйем тип, күрәһең, бейектән томбойоҡло күлгә һикереп төшкән. Бөтәһе лә һоҡланып томбойоҡло тәрән күлгә ҡарап торғандар. Шул ваҡыт Иҙелбай:

— Теге хәсис Баҙарғолдоң мәйете күлде бысратып ятмаһын, уны һыуҙан эҙләп алырға кәрәк,— тигән.

Яйыҡбай мискәһенән бик яҡшы йөҙә белә торған бер нисә һалдат саҡырып сығарған да, Баҙарғолдо, һыу төбөнән алдыртып, бик алыҫҡа, тау-таш араһына илтеп, ас бүреләргә ташлатҡан. Шунан һуң Иҙелбай менән кәңәш иткәндәр. Уралбай ҡарт бер аҙ уйланып торған да:

— Уландарым, һеҙ күп илдәрҙә булғанһығыҙ, күп ерҙәр күргәнһегеҙ. Ләкин Урал кеүек матур ерҙе, уның кеүек бай илде күргәнегеҙ юҡ әле. Урал беҙҙең тыуған еребеҙ, хәҙер беҙ шунда китәйек,— тигән.

— Атай! Бында ла бик яҡшы бит, ошонда ҡалайыҡ,— тигәндәр егеттәр.

— Юҡ, улдарым, иле бар кеше иленә ҡайтырға тейеш,— тигән Уралбай.

Шунан һуң, хикмәтле келәмгә ултырып, бөтәһе лә Уралға ҡайтып киткәндәр.

## Икмәкбай

Борон-борон заманда, кәзә апай команда саҡта, булған икән бер әтәс, кейгән икән кәпәс, сыҡҡан икән урамға — түҙмәй ингән буранға. Шул заманда йәшәгән, ти, бер бабай менән әбей, балаһыҙ-ниһеҙ үҙҙәре генә.

Берҙән-бер көн бабай урманға утынға киткән. Әбей, бабай ҡайтыуға тип, икмәк баҫҡан. «Туҡта, бабай ҡайтыуға мәрәкә булһын, икмәктән малай эшләп ҡуяйым әле»,— тигән. Шунан, бала һүрәтенә керетеп, икмәкте әүәләгән дә, соланға сығарып, көбө эсенә ҡуйған.

Бабай утындан ҡайтып төшкән. Икәүләп сәй эсергә ултырғандар. Әбей бабайға икмәк малай тураһында әйтергә онотоп киткән, ти. Бер аҙ ваҡыт үткәс кенә, иҫенә төшөп:

— Бабай, беҙҙең улыбыҙ бар, соланға сығып, көбөнө ҡара әле,— тигән.

Бабай барып ҡараһа, көбө эсенән матур бер малай килеп сыҡмаһынмы! Баҡтыниһәң, икмәк малайға йән ингән, ти. Әбей менән бабай сикһеҙ шатланған. Малайға Икмәкбай тип исем ҡушҡандар. Был бала бик ҙурайҙы, үҫте, тиҙ арала бәһлеүән егеткә әйләнде, ти.

Берҙән-бер көн егет урманға сығып китә. Шул батшалыҡта бик ғәйрәтле, бик йыртҡыс бер айыу



йәшәгән, ти. Ошо айыу батшаның малын һис кенә лә ҡуймай икән. Урманда йөрөгәндә егет ошо уҫал һары ала айыуҙы үлтереп алып ҡайтып, тиреһен киптерергә тип, өйөнөң башына йәйеп ҡуйған, ти. Иртәгеһен иртәнсәк батша, тышҡа сығып, киреләпһуҙылып торһа, тегеләрҙең өй башына ябылған айыу тиреһен күреп ҡалды, ти.

— Һары ала айыуҙы кем үлтерҙе, был кем өйө? — тип һораны, ти, батша.

— Ул Икмәкбайҙың өйө, һары ала айыуҙы шул егет үлтерҙе! — тип әйттеләр, ти, һанаттары.

— Барығыҙ, алып килегеҙ бында ул егетте!

Батша һанаттары тиҙ генә егетте саҡыртып килтергәндәр.

— Һары ала айыуҙы һин үлтерҙеңме?

— Эйе, мин үлтерҙем,— тигән Икмәкбай.

Батша егеттең батырлығына ныҡ шатланған, уны бик ҡәҙерләй башлаған. Ҡайһы бер кешеләр егеткә батшаның хөрмәт күрһәтеүенән бик көнләшкәндәр, ти. Унан нисек кенә булһа ла ҡотолорға тырышҡандар. «Икмәкбай, батшаға Көнһылыу батшаның үгеҙен алып киләм әле, тип әйтә икән»,— тип юрый һүҙ таратҡандар. Был хәбәр батшаға барып еткән.

— Апкиләм тигәс, апкилһен Икмәкбай миңә шул Көнһылыу үгеҙен. Апкилмәһә, башын сабып өҙәм!— тигән батша.

Был батшалыҡтан бик алыҫта Көнһылыу тигән ҡыҙ батша йәшәгән икән. Уға һис кем яҡын бара алмаған. Барған кеше тере ҡайтмай икән. Икмәкбай, Көнһылыуҙың үгеҙен алып килмәк булып, юлға сыҡҡан. Эй барған, ти, был, эй барған, ти, бара торғас, яңғыҙ ғына йәшәгән бер әбейгә барып еткән, ти.

— Һаумы, инәй! — ти егет.

Әбей һаулыҡ ала ла:

— Төш, балам, атыңдан, ҡатыҡһыҙ-тоҙһоҙ өйрә эс! — ти.

Икмәкбай, атынан һикереп төшөп, ҡатыҡһыҙ-тоҙһоҙ өйрәне эсә лә әбейҙән:

— Инәй, Көнһылыу ҡайҙа икән? Уның торған ерен белмәйһеңме? — тип һораған. Әбей:

— Мин белмәйем, балам. Арыраҡ апайым йә-

шәй, ул һиңә әйтер,— тип, егеткә юл өйрәтеп ебәргән, ти. Бара торғас, егет бер әбейгә барып еткән.

— Һаумы, инәй!

Әбей һаулыҡ алған да:

— Балам, атыңдан төш, ҡатыҡһыҙ-тоҙһоҙ өйрә эсеп кит! — тигән.

Егетте әбей ашатып-эсереп алған. Тамаҡ туйҙырып алғас, егет:

— Инәй, Көнһылыу батшаның торған ерен белмәйһеңме? — тип һораған. Әбей:

— Юҡ, улым, белмәйем. Арыраҡ минең апайым тора, ул белергә тейеш, һорашырһың,— тип, егеткә юл өйрәтеп ебәргән, ти.

Икмәкбай өсөнсө әбейгә килеп еткән.

— Инәй кешегә сәләм! — ти егет.

— Йән тәндә әле, улым. Балам, төш, ҡатыҡһыҙ-тоҙһоҙ өйрә эс! — ти әбей.

Егет инәлтеп тормаған, атынан һикереп төшкән дә ашарға ултырған. Икмәкбай, ултыра биргәс, әбейҙән Көнһылыуҙың ҡайҙа йәшәгәнлеген һораған. Әбейгә унда ни өсөн барғанлығын да һөйләгән. Әбей:

— Беләм, улым. Көнһылыу батшалығы бынан алыҫ түгел. Уның һоро ала үгеҙен дә беләм. Көнһылыуҙың һыйыр малы һанап бөтөргөһөҙ, көтөүҙе ебәк нуҡталы һоро ала үгеҙ башлап йөрөй,— тигән.— Әгәр ҙә һин ул үгеҙҙе тотам тиһәң, ҙур йылға буйына төнөн барып, соҡор ҡаҙып ят. Ҡояш ҡалҡҡан мәлдә, үгеҙ көтөү башлап һыу эсергә килер; ҡояш байыуға, мал эсеп бөтөр. Үгеҙ иң аҙаҡтан ғына китер. Һин, үгеҙ килгән саҡта, соҡор эсенән генә уның ебәк нуҡтаһынан эләктереп алырһың, һис кенә



лә ебәрмәҫһең. Ул һине өс тапҡыр күтәреп һуғыр, шуға бирешмәһәң, үгеҙҙе алып ҡайтырһың,— тип, егеткә аҡыл өйрәткән, ти.

Икмәкбай һыйыр көтөүе төшә торған ҙур йылғаға барып еткән. Төн буйына соҡор ҡаҙып, таң атыуға шунда төшөп ятҡан. Таң атып, ҡояш ҡалҡыу менән, һыйыр көтөүен башлап, һоро ала үгеҙ килеп еткән. Егет, йәшенеп ятҡан соҡорҙан ҡалҡып, үгеҙҙең һөйрәлеп килгән ебәк нуҡтаһынан эләктереп алған, ти. Үгеҙ Икмәкбайҙы өс тапҡыр ергә күтәреп һуҡҡан, нуҡтанан ысҡынырға тырышҡан,— егет һис бирешмәгән. Шунан һуң ғына үгеҙ баш һалған, ти. Икмәкбай һоро ала үгеҙҙе батшаға алып ҡайтып биргән. Ҡайтышлай үҙенә юл өйрәткән әбейҙәргә инеп:

— Мин эҙләгәнемде таптым инде, хуш булығыҙ! — тип һаубуллашып сыҡҡан.

— Һау бул, улым, йәнә килерһең әле,— тип ҡалғандар, ти, әбейҙәр.

Бынан һуң батша Икмәкбайҙы элеккегә ҡарағанда ла нығыраҡ ҡәҙерләй башлаған, ти. Көнсөл кешеләргә был оҡшап етмәгән. Улар нисек тә булһа Икмәкбайҙы харап итмәк булғандар. «Икмәкбай, батшаға Көнһылыуҙың Күк айғырын алып ҡайтам, ти икән»,— тип һүҙ таратҡандар тегеләр тағы ла. Был хәл батшаға барып ишетелгән. Батша егетте саҡыртып алған да:

— Һин миңә Көнһылыуҙың Күк айғырын алып киләм тип һөйләгәнһең икән. Шул Күк айғырҙы апкил, апкилмәһәң, башыңды сабып өҙәм! — тигән. Егет:

— Мин һис кенә лә, Көнһылыуҙың Күк айғырын алып ҡайтам, тип һөйләмәнем,— тип ҡараһа ла, батша үҙ һүҙенән ҡайтмаған.

Икмәкбай ҡайғыра-ҡайғыра тағы киткән. Әлеге әбейҙәр тағы ла Икмәкбайға Күк айғырҙы нисек итеп тотоп алырға аҡыл өйрәтеп ебәргәндәр, ти. Егет, бик күп ҡурҡыныстар үтеп, Көнһылыуҙың Күк айғырын батшаға алып ҡайтҡан. Күк айғырҙы алгас, батша Икмәкбайҙы элеккегә ҡарағанда ла нығыраҡ ҡәҙер итә башлаған.

Әлеге көнсөлдәр Икмәкбайға ҡаршы тағы ла мәкер уйлайҙар икән. Уйлағандар, уйлағандар ҙа: «Икмәкбай, Көнһылыуҙың үҙен батшаға алып киләм, тип әйтә икән», — тип тағы хәбәр таратҡандар. Быны батша ишетеп ҡалып, егетте саҡыртып алған, ти.

— Миңә Көнһылыуҙы апкилергә булғанһың икән. Бар, апкил, апкилмәһәң, башыңды ҡырҡам! — тигән.

— Улай тип әйткәнем булманы,— тип ҡараһа ла, батша егет һүҙенә ҡолаҡ һалмаған.

Икмәкбай ҡайғыра-ҡайғыра тағы ла элекке юл менән киткән, ти. Теге өс әбейгә инеп сығып, Көнһылыуҙы нисек алып ҡайтыу тураһында һорашҡан, ти.

— Ай, балам,— тигән иң өлкән әбей,— уны алып ҡайтыуы бик ҡыйын булыр. Көнһылыу таш һарай эсендәге бер бүлмәлә оҙон сәсен алтын бағанаға урап ултыра. Уға үтеп инеү өсөн ҡырҡ тимер ҡапҡаны үтергә кәрәк. Уның тағы ла кеше үткәрмәй торған ҡырҡ ҡарауылы, ҡырҡ бурҙай эте, ҡырҡ көңө*, йәнә эргәһендә йөрөүсе бер көңө бар. Шуларҙы үтә алһаң, Көнһылыуҙы ҡулға төшөрөрһөң,— тигән. Шунан баяғыса тағы аҡыл өйрәткән:

— Улым,— тигән әбей,— Көнһылыуға үтеү өсөн ҡырҡ күнәк дегет, ҡырҡ һуйылған ҡуй, ҡырҡ икмәк һала торған көрәк, бер көҙгө, бер тараҡ алып бар. Ҡырҡ күнәк дегет менән ҡырҡ ҡапҡаны майларһың, ҡырҡ бурҙайға ҡырҡ ҡуй бирерһең, ҡырҡ ҡарауылға ҡырҡ икмәк өләшерһең, ҡырҡ көңгә берәр икмәк көрәге һонорһоң, Көнһылыу алдында йөрөгән көңгә тараҡ менән көҙгөнө тотторорһоң,— тигән.

Икмәкбай ҡырҡ күнәк дегет, ҡырҡ ҡуй, ҡырҡ икмәк, ҡырҡ көрәк, бер көҙгө менән бер тараҡ алып юлға сыҡҡан. Бик күп көндәр үткәс, Көнһылыуҙың

---

* Көң — хеҙмәтсе, ҡол ҡатын.

ҙур таш һарайына килеп еткән. Һарайға инеү өсөн ҡырҡ ҡапҡаны үтергә кәрәк икән. Икмәкбай ҡапҡаларҙың һәр береһен берәр күнәк дегет менән майлап бара, ә ҡапҡалар асыла бара, ти. Ҡапҡаны үтеүе булған, ҡырҡ бурҙай, ашай яҙып, ажарланып килеп сыҡҡан. Икмәкбай ҡырҡ бурҙайға ҡырҡ ҡуй итен ташлаған. Эттәр шунан һуң ғына үткәреп ебәргән, ти, быны. Бурҙайҙарҙы үтеүе булған, Икмәкбайҙың юлын ҡырҡ ҡарауыл кәртәләгән. Егет уларға ҡырҡ икмәк таратып биргән. Ҡарауылдар, икмәккә ҡыуанышып, егетте үткәреп ебәргәндәр. Ҡырҡ ҡарауылды үтеүе булған, егеттең юлын Көнһылыуҙың ҡырҡ көңө бүлгән. Егет уларға ҡырҡ көрәк тотторған. Көңдәр шатланып Икмәкбайҙы үткәреп ебәргәндәр. Икмәкбай, шулай итеп, Көнһылыу бүлмәһенә үтеп ингән икән, ҡаршыһына теге яңғыҙ көң килеп сыҡҡан. Икмәкбай уға көҙгө менән сәс тарағын биргән икән, көң үткәреп ебәргән. Хәҙер егет бүлмәгә барып инһә, Көнһылыу оҙон сәстәрен алтын бағанаға урап ултыра, ти. Икмәкбай, бысағын ала һалып, тегенең сәсен ҡырҡып өҙгән.

— Мин һине алып ҡайтырға килдем,— тигән ул ҡыҙға.

Егет Көнһылыуҙы алып сыға башлаған икән, теге үҙе алдында йөрөгән яңғыҙ көңгә:

— Йә, ни эшләп тораһың, миңә ярҙам ит, егетте тот! — тигән.

Көң Көнһылыуға:

— Мин һиңә нисәмә йыл хеҙмәт итһәм дә, бер көҙгө менән тараҡ та биргәнең юҡ ине. Башым бетләп бөтә торғайны. Икмәкбай миңә көҙгө менән тараҡ

бирҙе, мин уны тотмайым,— тип, һис кенә лә ярҙам итмәгән, ти.

Көнһылыу ҡырҡ көңгә лә егетте тоторға тип әйтеп ҡараған.

— Беҙ һиңә нисәмә йылдар хеҙмәт иттек, бер яҡшылыҡ итмәнең. Икмәк һалғанда ҡулдарыбыҙ янып бөтә ине, көрәк тә алып бирмәй торғайның. Икмәкбай һәр беребеҙгә икмәк көрәге бирҙе, шуның өсөн уны тотмайбыҙ,— тип, улар ҙа баш тартҡандар, ти.

Көнһылыу ҡырҡ ҡарауылынан ярҙам һорап ҡараған икән, былар ҙа:

— Икмәкбай беҙҙең һәр беребеҙгә берәр икмәк бирҙе. Һин беҙҙең бөтәбеҙгә бер икмәк биреп асыҡтыра торғайның, уны тотмайбыҙ! — тип баш тартҡандар, ти.

Көнһылыу аптырағас ҡырҡ бурҙайынан ярҙам һораған.

— Беҙ һиңә нисәмә йыл тоғро хеҙмәт итһәк тә, йүнләп ашатманың, ҡырҡыбыҙға бер ҡуй ҙа бирмәй торғайның. Икмәкбай ҡырҡыбыҙға ҡырҡ ҡуй бирҙе, уны тотмайбыҙ,— тип кенә ҡуйғандар, ти, бурҙайҙар.

Көнһылыу, аптырауҙың сигенә сығып, һарайҙың ҡырҡ ҡапҡаһынан егеткә юл асмауҙы, уны ҡыҫып үлтереүҙе үтенеп һораған, ти. Ҡапҡалар ҡыҙға:

— Һин беҙҙең ҡырҡыбыҙға бер генә күнәк дегет бирә торғайның. Ә Икмәкбай беҙҙең һәр беребеҙҙе берәр күнәк дегет менән майлап сыҡты. Беҙ уны ҡыҫмайбыҙ! — тигәндәр.

Шулай итеп, егет Көнһылыуҙы батшаға алып ҡайтып киткән, ти. Юлайҡан ул, үҙенә ярҙам иткән

әбейҙәргә инеп, рәхмәт әйтеп, һаубуллашып киткән. Өс әбей ҙә уға: «Хуш, хуш, хуш, улым!» — тип тороп ҡалған, ти.

Әлеге көнсөл кешеләр: «Икмәкбай, ҡайттыни-һәм, батшаны үлтерәм, тип әйткән»,— тип ялған хәбәр таратҡандар, ти.

Батша, бер ҡаҙанға һыу ҡайнатып, Икмәкбайҙың ҡайтҡанын көтөп торған. Ул егетте шул ҡаҙанға һалып үлтермәксе булған. Ҡайтып килешләй, Көнһылыу егеткә:

— Икмәкбай, һин мине алып ҡайтаһың да ул ҡайтыуын, батша һине үлтерергә йыйына бит. Ул ҙур ҡаҙанға һыу ҡайнатҡан, һине шунда сумдырып үлтерергә уйлай. Бына һиңә бер балдаҡ бирәм, шуны кейеп сумырһың. Ул һине яндырмаҫ! — тигән.

Икмәкбайҙың батша һарайына килеп инеүе булған, уны тотоп та алғандар, ти.

— Һин мине үлтерергә йыйынғанһың икән, мин һинең үҙеңде юҡ итергә булдым! — тигән батша.

Батшаның ярандары, егетте тотоп алып, борҡ-борҡ ҡайнап ултырған ҡаҙанға ташлаған икән, Икмәкбай, рәхәтләнеп йыуынып, ҡаҙандан көлә-көлә килеп сыҡты, ти. Икмәкбай Көнһылыуҙың балдағын кейеп алған булғас, бешмәгән инде.

— Һыуығыҙ йылынып етмәгән икән әле!— тигән булды, ти, етмәһә.

Батша ла, уның ярандары ла был хәлгә бик аптырағандар.

— Ысынлап та йылынмағандыр ул! Ҡайҙа әле, үҙем төшөп ҡарайым,— тигән батша.

Уның сисенеп ҡаҙанға һикереүе булған, ике күҙе

ағарып килеп тә сыҡҡан, ти. Батша шулай итеп бешеп үлгән.

Икмәкбай үҙе батша булып ҡалған. Көнһылыуҙы кәләш итеп алып, бик һәйбәт батшалыҡ иткән, ти.

## Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу

Борон-борон заманда Күсәр менән Күсмәҫ тигән ике хан йәшәгән, ти. Улар икеһе бик дуҫ булып, бер-береһенә ҡунаҡҡа барышыр, ҡош сөйөп, төлкө алдырып, бергә һунарға йөрөшөр булғандар, ти.

Шулай, ҡәҙимгесә, Күсәр хан менән Күсмәҫ хан һунарҙа йөрөйҙәр ине, ти. Бер көн йөрөнөләр, ике көн йөрөнөләр, ти, былар — бер генә ҡош та, йәнлек тә осратманылар, ти. Өсөнсө көн тигәндә, бер юл сатына барып сыҡтылар, ти. Юлдың береһе уңға, икенсеһе һулға китә икән, ти. Күсәр хан уң яҡҡа, Күсмәҫ хан һул яҡҡа китте, ти. Хәтһеҙ йөрөгәс, былар бер-береһенә яңынан тап булышҡандар, ти. Шул ерҙә Күсәр хан:

— Йә, Күсмәҫ, һин ниҙәр күрҙең? — тип һораны, ти.

Күсмәҫ хан:

— Мин бер болан осратҡайным, атмаҡсы булып, йәйәмде ҡулға алһам, болан абсая* баҫты ла торҙо, имсәктәренән һөтө эйеп китте. Йәлләнем дә, атманым... Ә һин нимә күрҙең һуң, Күсәр хан? — тип әйтте, ти.

---

* А б с а я — кирелеп.

Күсәр хан:

— Мин дә бер болан күрҙем. Атмаҡсы булып, йәйәмде алғайным, ул да абсая баҫты ла торҙо, имсәктәренән һөтө эйеп китте. Йәлләнем дә, атманым,— тине, ти.

Шунан һуң Күсмәҫ хан Күсәр хандан:

— Был беҙҙең күргәндәр нимә булыр, тип уйлайһың? — тип һораны, ти.

Күсәр хан:

— Минең бисәм йөклө булып ҡалғайны, шул, бала тыуғандыр, тип уйлайым,— тип юраны, ти.

Күсмәҫ хан да:

— Минең бисәм дә йөклө булып ҡалғайны. Мин дә шулайҙыр тип уйлайым,— тине, ти.

Шунан: «Әгәр ҙә беҙҙең юрағандарыбыҙ дөң килеп, беребеҙҙең ҡыҙ, беребеҙҙең ул булһа, ҡоҙа булышырбыҙ»,— тип һүҙ ҡуйыштылар, ти, былар.

Был ике хан өйҙәренә ҡайтып килһәләр, үҙҙәре юрағандың дөң килеүен күрәләр: Күсмәҫтең бисәһенән бер ир бала, ә Күсәрҙең бисәһенән бер ҡыҙ бала донъяға килгән, ти. Икеһе лә балалары булыуға бик шатланып, уларға исем ҡушырға булдылар, ти. Ат еткән ергә хат ебәреп, бик күп ҡунаҡ йыйҙылар ҙа ҙур исем туйы яһанылар, ти. Бөтә халыҡ алдында Күсмәҫ хан үҙ улына Ҡуҙыйкүрпәс тип, Күсәр хан ҡыҙына Маянһылыу тип исем бирҙеләр, үҙҙәренең ҡоҙа булышырға ҡуйған вәғәҙәләрен дә әйттеләр, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу береһе ай, береһе көн кеүек, матур булып үҫә башланылар, ти. Уларҙың матурлығына һоҡланмаған кеше юҡ ине,

ти. Улар бәләкәй саҡтарында гел генә бергә йөрөйҙәр, бергә уйнайҙар ине, ти.

Берҙән-бер көндө Ҡуҙыйкүрпәстең атаһы ауырып китте, ти. Тирә-яҡтағы бөтә им-томсоларҙы, бағыусыларҙы килтереп, имләп, баҡтырып ҡараһалар ҙа, уларҙың береһе лә ярҙам итә алманы, ти. Күсмәҫ хандың ауырыуына дарман табылманы, ул шулай итеп үлеп тә китте, ти. Ҡуҙыйкүрпәс әсәһе менән генә ҡалып, етем бала булып йөрөй башланы, ти. Күп ваҡытын урамда балалар менән уйнап үткәрә ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс йәшкә бәләкәй булһа ла, көрәштә үҙенән оло балаларҙы үҙ алдына сығармай ине, ти. Уйында, асыуландыра ҡалһалар, балаларҙың ашыҡтарын, бураларын талап ҡайтып киткән саҡтары ла булғылай ине, ти. Ләкин был уйынсыҡтарҙы шунда уҡ кире килтереп бирер ине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәстең ана шулай яманаты таралып китте, ти. Был хәл Күсәр хандың да эсен бошора башланы, ти. Маянһылыуҙың кейәүе буласаҡ Ҡуҙыйкүрпәстең, берҙән, етем булып, икенсенән, уның шулай үҙ һүҙле, шуҡ малай булып үҫеүе Күсәр ханға оҡшамай ине, ти. Берҙән-бер көн хан үҙенең бисәһенә:

— Йә, бисәкәй, һин нисек уйлайһың? Берҙән-бер ҡыҙыбыҙ Маянһылыуҙы Ҡуҙыйкүрпәскә кейәүгә бирһәк, ҡыҙыбыҙға ла, үҙебеҙгә лә хурлыҡ бит! Был илде ташлап, ете тау, ете ялан, ете диңгеҙ аша сығып китәбеҙме әллә? — тине, ти.

Күсәр хандың бисәһе быға риза булды, ти. Күп тә үтмәй, былар өйөр-өйөр, көтөү-көтөү малдарын әйҙәп — йылҡыларын кешнәтеп, һыйырҙарын мөң-

рәтеп, ҡуй-һарыҡтарын баҡыртып, баш һуҡҡан яҡҡа күсеп тә киттеләр, ти.

Хәтһеҙ йылдар үтеп, Ҡуҙыйкүрпәс тә ун ете йәшкә етте, ти. Тирә-яҡта уның көсөнә тиң булырлыҡ кешеләр ҙә табылмай башланы, ти.

Бер көндө шулай малайҙар менән көрәшепме, һуғышыпмы уйнағанда, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡулы яңылыш бер әбейҙең берҙән-бер балаһына тейеп китте лә, теге малай иҫенән яҙып йығылды, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс уны әсәһенә күтәреп алып барҙы, ти. Әбей, Ҡуҙыйкүрпәсте әрләй-әрләй:

— Бер йүнле егет булһаң, һинең кәләшең буласӑҡ ҡыҙың да ташлап китмәҫ ине! — тип әйтте, ти.

Был һүҙҙе ишеткәс, Ҡуҙыйкүрпәс әҫеле-һыуыҡлы булып китте, ти. Ни өсөн тиһәң, ул быға тиклем Маянһылыуҙың үҙенең кәләше булғанлығы тураһында бер нәмә лә белмәй йөрөй ине, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс, бик ҡыҙыҡһынып, әбейҙән:

— Мине ниндәй ҡыҙ ташлап китте һуң? Ниңә әйтмәйһең, әбей? — тип үтенде, ти.

— Ҡайт та әсәйеңдән һора,— тип әйтте, ти, был әбей.

— Ул быға тиклем әйтһә әйтер ине инде. Һорағас та әйтмәҫ булһа, ни эшләрмен һуң? — тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

— Һорап-һорап та әйтмәһә, мин һиңә бер аҡыл өйрәтәйем,— тип, был әбей Ҡуҙыйкүрпәскә ошондай бер хәйлә өйрәтте, ти: — Һин әсәйеңдән бик һәйбәтләп кенә ҡурмас ҡыҙҙырт. Әсәйең шул ҡыҙҙырылған ҡурмасты ҡалаҡ менән бирһә, алма — усына һалып бирһен. Шул саҡта һин әсәйеңдең әҫе ҡур-

мас һалған усын ҡуша баҫырһың да: «Миңә кәләш буласаҡ ҡыҙ кем ине? Ниңә ул мине ташлап китте?» — тип һорарһың. Шунан ул әйтмәй булдыра алмаҫ,— тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, өйөнә ҡайта һалып, әсәһенән:

— Миңә кәләш буласаҡ ҡыҙ кем ине? Ниңә ул мине ташлап китте? — тип һораны, ти.

Әсәһе:

— Ҡайҙан алдың был һүҙҙе, улым? Бер ҡыҙҙың да һиңә кәләш итеп әйттерелгәне лә, ташлап киткәне лә юҡ,— тине, ти.

Шунан Ҡуҙыйкүрпәс:

— Әсәй, бигерәк ҡурмас ашағым килеп китте, миңә ҡурмас ҡыҙҙырып бирсе? — тип үтенде, ти.

Әсәһе ҡурмас ҡыҙҙырып, ҡалаҡ менән алып биргәйне, Ҡуҙыйкүрпәс быны алмайынса:

— Ҡалаҡ менән бирмә, услап алып бир,— тип әйтте, ти.

Шунан әсәһе эҫе ҡурмасты алып, бирмәксе генә булғайны, Ҡуҙыйкүрпәс әсәһенең усын ҡуша баҫты ла: «Миңә кәләш буласаҡ ҡыҙ кем ине? Ниңә ул мине ташлап китте?» — тип һораны, ти. Шунан әсәһе ҡыҙыу ҡурмастың усты бешереп алып барыуына түҙмәй: «Һиңә кәләш булырға тейешле ҡыҙ — Күсәр хан ҡыҙы Маянһылыу ине. Һиңә бирмәҫ өсөн, атаһы күптән инде ете тау, ете ялан, ете диңгеҙ аръяғына алып китте»,— тип әйтте, ти.

Шунан һуң Ҡуҙыйкүрпәс, нисек тә булһа Маянһылыуҙы барып табыу уйына төшөп, баяғы әбейгә барып кәңәш итте, ә ул әбей шундай аҡыл өйрәтте, ти:

— Өйөр-өйөр йылҡығыҙ араһында атайың һунарға йөрөгән Күк толпар булыр. Һин нисек тә шуны тоторға тырыш. Йылҡыларығыҙ төш ваҡытында йылғаға һыулауға төшөр, ә Күк толпар иң алдан йөрөй. Һин ҡороҡ менән шул толпарҙы тотоп ал да баш тартҡан яғыңа кит тә бар.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙы тоторға атаһынан ҡалған йылҡы өйөрҙәре йөрөгән йылға буйына китте, ти. Төш ваҡыты етерҙән алда, ҡулына ҡороҡ тотоп, малдар һыулауға төшә торған йомро юл буйына йәшенеп ятты, ти. Бына бер ваҡыт өйөр-өйөр йылҡы йомро юл буйлап һыулауға төшә башланы, ти. Беренсе өйөр, икенсе өйөр үтте, ти. Ә өсөнсө өйөрҙөң алдында Күк толпар килә ине, ти. Әммә ул, Ҡуҙыйкүрпәс ятҡан ергә етер-етмәҫтән, ялын, ҡойроғон текә сәнсеп, уйнаҡлап, ҡоршолдап* кире китте лә барҙы, ти. Бер аҙҙан һуң боролоп килде, ти, был толпар. Был юлы ла, Ҡуҙыйкүрпәс тәңгәленә етер-етмәҫтән ҡоршолдап кире китте, ти. Өсөнсө тапҡыр килеүендә сабып үтеп китмәксе булғайны, Ҡуҙыйкүрпәс ҡороҡ менән муйынынан эләктереп тә алды, ти. Күк толпар Ҡуҙыйкүрпәсте өс тапҡыр ергә алып һуҡты, әммә уны бер нәмә эшләтә алманы, ти.

Шунан Күк толпар, телгә килеп:

— Хәҙер инде мин һинеке, ни ҡушһаң, шуны үтәйем,— тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс үҙенең теләген әйтеп биргәс, Күк толпар: «Хәҙер һин минең арҡамды телгеләп, унда атайыңдың батып ҡалған алтын ҡашлы эйәрен, ай-

---

* Ҡоршолдап — бышҡырып.



балтаһын, көмөш көҙгөһөн, һунарға йөрөгәндә кейә торған ҡырма бүркен, көмөш биҙәкле ҡәмәрен ал да үҙемде ошо йылғаның иң тәрән еренә индереп ҡуй. Шунда арҡамдың телгеләнгән ерҙәре уңалғас, алып сығырһың»,— тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙың арҡаһын телгеләп, ул әйткән әйберҙәрҙе берәм-берәм алды ла үҙен йылғаның иң тәрән еренә индереп ҡуйҙы, арҡаһы уңалғас, кире алып сыҡты, ти.

Күк толпар, йылғанан сыҡҡас, Ҡуҙыйкүрпәскә: «Әсәйең ете тау, ете ялан, ете диңгеҙ аша Маянһылыуҙы эҙләп китеүеңә ҡаршы булыр. Ул һине ебәрмәҫкә теләп, бына ошолай һамаҡлап әйтер,— тине, ти.

*Өйөр ҙә өйөр малың ҡалыр,*
*Уны нисек итерһең, балам?*
*Нисек итерһең, балам?*
*Осһоҙ ҙа башһыҙ урман булыр,*
*Уны нисек үтерһең, балам?*
*Нисек үтерһең, балам?*
*Икһеҙ ҙә сикһеҙ диңгеҙ булыр,*
*Уны нисек кисерһең, балам?*
*Нисек кисерһең, балам?*
*«Ете ҡабып, бер йотам» бүре килер,*
*Унан нисек ҡасырһың, балам?*
*Нисек ҡасырһың, балам?*

— Ә һин әсәйеңә бына ошолай һамаҡла[illegible] яуап бирерһең,— тип әйтте, ти, Күк толпар:

*Өйөр ҙә өйөр малым ҡалһа,*
*Бер йылҡынан биш булыр, әсәй,*

*Биш булыр, әсәй.*
*Осhоҙ ҙа башhыҙ урман булhа,*
*Атайымдың айбалтаhы иш булыр, әсәй,*
*Иш булыр, әсәй.*
*Икhеҙ ҙә сикhеҙ диңгеҙ булhа,*
*Атайымдың көмөш көҙгөhө иш булыр, әсәй,*
*Иш булыр, әсәй...*
*«Ете ҡабып, бер йотам» бүре килhә,*
*Атайымдың Күк толпары иш булыр, әсәй,*
*Иш булыр, әсәй...»*

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙы менеп алып, өйгә ҡайтып, Маянhылыуҙы эҙләп китергә йыйыныуын әйткәс, әсәhе уға ана шулай тип hамаҡланы, Ҡуҙыйкүрпәс тә уға, Күк толпар әйткәнсә, ана шулай hамаҡлап яуап бирҙе, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙың теҙгенен ҡағып ебәреүе булды — Күк толпарҙың осороп алып китеүе булды, ти.

Эй китте, эй китте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс, бара торғас, осhоҙ-ҡырыйhыҙ, дөм-ҡараңғы урманға килеп етте, ти. Шул ваҡыт Күк толпар телгә килеп:

— Атайыңдың айбалтаhын ташла! — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс атаhының айбалтаhын ташлап ебәргәйне, осhоҙ-ҡырыйhыҙ дөм-ҡараңғы урмандың уртаhынан туп-тура юл hалынды, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс айбалтаhын алды ла шул юлдан елдереп Күк толпар менән үтеп тә китте, ти.

Эй китте, эй китте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс, бер ваҡыт икhеҙ-сикhеҙ диңгеҙ янына барып етте, ти, был. Шул ваҡыт Күк толпар, телгә килеп:

— Атайыңдың көмөш көҙгөhөн ташла! — тип әйтте, ти.



Ҡуҙыйкүрпәс атаһының көмөш көҙгөһөн ташлап ебәргәйне, икһеҙ-сикһеҙ булып йәйелеп ятҡан диңгеҙ аша бөгөлөп-һығылып торған быяла күпер һалынды, ти. Ҡуҙыйкүрпәс, көмөш көҙгөһөн алып, ана шул бөгөлөп-һығылып торған күперҙән Күк толпары менән елдереп сығып китте, ти.

Диңгеҙ арҡыры һалынған был күперҙе сыҡҡас, эй китте, эй китте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс, бара торғас,

бер тау итәгенә килеп етте, ти, был. Ҡараһа — ҡаршы яҡтан ауыҙҙарын асып, тештәрен ыржайтып, «ете ҡабып, бер йотам» ете бүре килеп сыҡты, ти. Шул саҡ Күк толпар, телгә килеп:

— Ҡамсың менән минең уң яҡ ҡабырғама һуҡ— һул ҡабырғамдан ҡан атылып сығырлыҡ булһын, ә үҙең күҙеңде йом! — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡамсы менән Күк толпарҙың уң ҡабырғаһына һуҡҡайны, һул ҡабырғаһынан ҡан атылып сыҡты, ти. Үҙе күҙҙәрен йомдо, шул арала Күк толпар, ел кеүек осоп, бүреләрҙе үтеп тә китте, ти. Шунан Күк толпар:

— Инде күҙеңде ас та, артыңа әйләнеп ҡара,— тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, күҙен асып, артына әйләнеп ҡараһа, әле тороп ҡалған тау башында, сәстәрен туҙҙырып, әсәһе баҫып тора, ти.

Шул тау башынан әсәһе:

— Улым, мин һиңә күпме ҡаршылыҡ күрһәттем — сәстәремдә ҡара урман иттем, күҙ йәшемде— диңгеҙ, ете бөрсәне ете бүре иттем — барыһын да үтеп сыҡтың, батыр егет икәнһең, барыр юлың да, ҡайтыр юлың да уң булһын инде! — тип ҡысҡырып ҡалды, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс тағы ла алға китте, ти. Бара торғас, юлаусылар ҡунып киткән бер урынға килеп туҡтаны, ти. Ҡуҙыйкүрпәс, Күк толпарынан төшөп, ут яҡҡан урынды һәрмәштереп ҡараһа, көл эсенән ҡара күмер булып көйгән сөсикмәк ҭабып алды, ти. Был көлкүмәс «Ҡуҙыйкүрпәс мине эҙләп килә торған булһа, табып ашар» тип, Маянһылыу күмеп

киткән сөсикмәк ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс сөсикмәкте татып ҡарағас, «Барыр юлым бик оҙон икән шул әле» тип уйланы, ти. Бер аҙ барғас, ул икенсе бер урында ла шулай уҡ юлсылар туҡтаған урынды ҡараһа, көл эсенән тағы ла бер сөсикмәк тапты, ти. Быныһының яртыһы көйгән, яртыһы көймәгәйне, ти. Ҡуҙыйкүрпәс тағы ла алға китте, ти. Шундай уҡ өсөнсө урынға еткәс, юлсыларҙан тороп ҡалған көлдө ҡаҙып ҡараһа, һарғайып ҡына яңы бешкән сөсикмәк тапты, ти. Быны күргәс, Ҡуҙыйкүрпәс: «Инде бараһы юлым алыҫ ҡалмаған икән», — тип шатланды, ти.

Күп тә үтмәне, алыҫта бер йылҡы көтөүе күренә башланы, ти. Уға яҡынлаша төшкәс, Күк толпар телгә килеп: «Минең өс бөртөк ҡылымды алып ҡал да үҙемде ебәр, мин кәрәк булғанда, ана шул өс ҡылымды өтөрһөң, мин һинең яныңа килеп етермен», — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙың өс бөртөк ҡылын алды ла үҙен бушатып ебәрҙе, ти. Шунан ул көтөү эргәһенә барып, көтөүсе ҡарттан иҫәнлек-һаулыҡ һорашты, ти.

Көтөүсе ҡарт Ҡуҙыйкүрпәстән:

— Ни эшләп йөрөйһөң, ҡайҙа бараһың, балам? — тип һораны, ти.

— Эшкә ялланырға ине, бабай, һинең байың кем була, мине алмаҫмы икән? — тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

Көтөүсе ҡарт:

— Беҙҙең Күсәр хандан кеше артмаҫ; әйҙә, бөгөн бында ҡунып кит, беҙ килгән кешегә бер баш йыл-

ҡы һуйып, ҡунаҡ итмәйсә ебәрмәй торғанбыҙ,— тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡунып, бер йылҡы ашап, иртә менән тағы ла юлға әҙерләнде, ти. Китер алдынан йылҡы көтөүсе уға:

— Улым, алдыңда бер-береһенән тар ғына һуҡмаҡ менән бүленеп ятҡан ике күл булыр. Ул күлдәрҙең ғәҙәте шулай: уҙғынсы тап уртаһына еткәс, ҡушылалар ҙа уны йоталар. Шуға күрә һин ул күлдәр янына еткәс, береһенең һыуын икенсеһенә алып һал. Шунан ғына һин сығып китә алырһың,— тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс көтөүсе ҡарттан айырылып киткәс тә, өс бөртөк ҡылды өтөүгә Күк толпар килеп баҫты, ти. Егет толпарын менеп, көтөүсе ҡарт әйткән теге ҡуш күлгә еткәс, атынан төшөп, бер күлдең һыуын икенсеһенә ҡойҙо, ти. Шунан күл, телгә килеп: «Бик ҙур рәхмәт, егет. Ете йыл буйы бер-беребеҙгә ҡушыла алмай, зарығып ята инек, бик һәйбәт иттең әле. Үҙеңә лә шулай Маянһылыу менән ҡушылырға яҙһын,— тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарына менде лә тар һуҡмаҡ менән алға китте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс бара-бара бер һыйыр көтөүенә тап булды, ти. Күк толпарынан йәнә өс ҡыл алып, уны бушатып ебәрҙе лә үҙе көтөүсе эргәһенә барҙы, ти.

Көтөүсе ҡарт унан:

— Йә, улым, ниҙәр бөтөрөп йөрөйһөң, ҡайҙа бараһың? — тип һораны, ти.

— Бабай, берәй эшкә ялланырға тигәйнем, һеҙҙең ханығыҙҙа эш табылмаҫмы икән? — тип әйтте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.



Көтөүсе ҡарт:

— Һай, беҙҙең Күсәр хандан кеше артмаҫ. Әйҙә, бында ҡунып кит, беҙ килгән кешеләргә бер һыйыр һуя торғанбыҙ. Ҡунаҡ булырһың, иртән китерһең,— тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, һыйыр көтөүсеһендә лә ҡунып, икенсе көндө генә юлға сыҡты, ти. Китер алдынан көтөүсе уға:

— Алда тағы ҡуй көтөүсеһе булыр, унда ла туҡтап кит, улым,— тип ҡалды, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс өс бөртөк ҡылын өтөп, тағы Күк толпарына менеп китте лә кискә табан ҡуй көтөүсеһенә барып етте, ти. Ҡуҙыйкүрпәс көтөүсенән:

— Был кем ҡуйҙары, бабай? — тип һораны, ти.

Көтөүсе ҡарт:

— Был Күсәр хан ҡуйҙары, ә һин үҙең ҡайҙа бараһың, ни эшләп йөрөйһөң, улым? — тип һораны, ти.

— Берәй эшкә ялланырға ине, бабай, һеҙҙең ханығыҙға кеше кәрәкмәйме? — тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

Ҡуй көтөүсеһе:

— Беҙҙең Күсәр хандан кеше артамы һуң! Әйҙә, бөгөн бында ҡуныл кит, беҙ килгән кешегә бер ҡуй һуя торғанбыҙ, ҡунаҡ булырһың. Бынан Күсәр ханға алыҫ түгел, иртәгә иртә менән китерһең,— тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс көтөүсенең һүҙенә риза булып, ҡунырға ҡалды, ти. Былар икәүләп һөйләшеп ултырған арала, бер ҡуй көтөүҙән айырылып сыҡты ла ҡайҙалыр сабып китте, ти. Ҡуҙыйкүрпәс менән көтөүсе уның ҡайҙа китеүен белмәй ҙә ҡалдылар, ти.

Был ҡуй Күсәр хандың саңдауына* барып, баҡса аша Маянһылыу торған йорттоң тәҙрә алдына үтеп, телгә килде лә:

*— Һөйөнсө лә, Маян, һөйөнсө, Маян,*
*Итәгең-еңең төйөнсө, Маян:*
*Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр,*
*Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр!..—*

---

* Саңдау — эҫе көндәрҙә мал тора торған шыр урманлы ҡалҡыу урын. Бында хан утары мәғәнәһендә ҡулланылған.

тип һамаҡлай башланы, ти. Ҡуй, тағы ла әйләнеп килеп, шул уҡ һамағын ҡабатланы, ти:

*— Һөйөнсө лә, Маян, һөйөнсө, Маян,*
*Итәгең-еңең төйөнсө, Маян:*
*Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр,*
*Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр!..*

Маянһылыу тағы ла: «Юҡты һөйләп йөрөмә!» — тип, ҡуйҙы ҡыуып ебәрҙе, ти. Ҡуй өсөнсө тапҡыр килеп, тағы ла ҡысҡырыбыраҡ һамаҡланы, ти:

*— Һөйөнсө лә, Маян, һөйөнсө, Маян,*
*Итәгең-еңең төйөнсө, Маян:*
*Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр,*
*Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр!..*

Маянһылыу, бик асыуланып, йүгереп сыҡты ла: «Нимә юҡты һамаҡлап, ҡанға тоҙ һалып йөрөйһөң, бысаҡ ҡаҙалғыры!» — тип, бысағы менән һелтәгәйне, бысаҡ ҡуйҙың осаһына тейеп, ярып ебәрҙе, ти.

Бына шунан ҡуйҙарҙың осаһы ярыҡ булып ҡалған икән, ти...

Ҡуҙыйкүрпәс, ҡуй көтөүсеһендә ҡунып, үҙенең Күк толпарын менеп, иртә менән тағы юлға сығып китте, ти. Көтөүсе уның артынан:

— Инде оҙаҡ бармаҫһың. Алда Күсәр хандың саңдауы булыр; эшкә ялланғанда хан үҙе ҡарап ала торған, шуға күрә туранан-тура һин уның үҙенә бар,— тип ҡалды, ти.

Күсәр хан саңдауына килеп еткәндә, көн әле иртә ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарының өс бөртөк ҡылын алды ла үҙен бушатып ебәрҙе, ти.

Ҡуҙыйкүрпәсте Күсәр хандың Ҡарағол исемле,

Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ тип йөрөтөлгән бер яраны ҡаршы алды, ти.

— Иә, егет, беҙҙең ханда ни йомошоң бар?— тип һораны, ти, ул.

— Хан эшкә алмаҫмы икән, тип килгәйнем,— тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡуҙыйкүрпәскә бер ҡарап алды ла:

— Беҙҙең хандан кеше артыуын артмаҫ та, әҙерәк көтөп тор, ул хәҙер өйлә намаҙын уҡырға ингән,— тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күсәр ханды көтөп торған арала, Маянһылыуҙың ҡайҙа икәнен белергә теләп, тегеләйбылай ҡаранғылаһа ла, бер ҡайҙа бер нәмә лә белерлек түгел ине, ти.

Күсәр хан, Ҡуҙыйкүрпәсте үҙ янына саҡыртып алып:

— Һин, егет, эшкә ялланмаҡсы икәнһең, ни һөнәрең бар һуң? — тип һораны, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс:

— Ниндәй булһа ла ярай, ханым, барыһын да эшләй алам,— тине, ти.

Шунан Күсәр хан:

— Миңә бер йылҡы көтөүсеһе кәрәген кәрәк тә, тик минең бер шартым бар: йылҡы өйөрөндә өс йыл тыу йөрөгән бейәмде тотоп, ауыҙлыҡ һалып менә алған кешене генә көтөүсе итеп яллайым мин,— тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс был шартҡа риза булды, ти. Шунан былар йылҡы көтөүенә бармаҡсы булдылар, ти. Күсәр хан Ҡуҙыйкүрпәсте бер арыҡ ҡына дүнәнгә

мендерҙе, ә үҙе иң яҡшы тигән атына атланып алды, ти. Шул ерҙә хан, Ҡуҙыйкүрпәскә боролоп:

— Бына был юлдың уңға киткәне түтә, һулға киткәне урау, һин ҡайһыһы менән китәһең? — тип һораны, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс:

— Миңә икеһе лә барыбер. Әйҙә, урау булғаны менән китәйем,— тине, ти.

Күсәр хан түтә юлдан, Ҡуҙыйкүрпәс урау юлдан китте, ти. Бер аҙ барғас, Ҡуҙыйкүрпәс кеҫәһенән баяғы өс бөртөк ҡылды алып, өтөп ебәрҙе лә, Күк толпар уның алдына килеп баҫты, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс үҙе менеп килгән дөнәнде Күк толпарға арҡыры һалып алды ла «һә» тигәнсе хандың йылҡы көтөүенә барып та сыҡты, ти; етмәһә, юлда барғанда төрлө ҡоштар атып алды, ти. Йылҡы көтөүенә килеп еткәс, Күк толпарын ебәреп, арыҡ дөнән менән Күсәр хандың килеүен көтә башланы, ти.

Күсәр хан бик күп ваҡыт үткәс кенә килде, ти. Өҫ-башының ҡарар ере лә юҡ — бысранып бөткәйне, ти. Ни өсөн тиһәң, ул, теге егет килгеләгәнсе ашап-эсеп, шунан йоҡо туйҙырып алайым тип, йән-фарман сабып, бысраҡҡа бата-сума килгән икән. Ҡуҙыйкүрпәс, уны ҡаршы алып:

— Әйҙә, ханым, бик оҙаҡланың. Һинең килеүеңә тип бешергән ҡош һурпаһы ла һыуына башланы,— тине, ти.

Күсәр хандың аптырауҙан күҙҙәре шарҙай булды, ти. Ут яҡҡан ергә барып ҡараһа, ҡаҙан тулы ҡош ите бешеп ултыра ине, ти.

Күсәр хан, бер ҙә иҫе китмәгән кеше булып, ҡош итен ашап алды ла Ҡуҙыйкүрпәскә:

— Инде һин, ана теге өс йыл тыу йөрөгән бейәне тотоп алып, ауыҙлыҡлап бында килтереп бәйлә,— тип, өйөр араһында ялын текә сәнсеп, уйнаҡлап йөрөгән бер бейәне күрһәтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс: «Ярар, ханым», — тип, ҡороҡ алды ла теге тыу бейәне ҡамалай башланы, ти. Күп тә үтмәне, ул ҡороғон бейәнең муйынына кейҙереп тә өлгөрҙө, ти. Тыу бейә үрәпсей, тулай башлағас, Ҡуҙыйкүрпәс асыуланыбыраҡ ҡороғон тартҡайны, шул саҡ теге бейәнең муйыны өҙөлдө лә ҡуйҙы, ти.

— Ай, егет, харап иттең тыу бейәмде! — тип ҡысҡырҙы, ти, Күсәр хан.— Иә, ярай, хәйерле ҡаза булһын. Өйөрҙә алты йыл тыу йөрөгән бейәм бар, шуны тотоп килтер улайһа,— тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡороҡ һалыуға алты йыл тыу йөрөгән бейә лә бөтөнләй ярһынып-шашынып тулай башланы, ти. Ҡуҙыйкүрпәс ҡороғон асыуланыбыраҡ тартып ебәрһә, бының да муйыны өҙөлөп сыҡты, ти.

Күсәр хан, Ҡуҙыйкүрпәстең шул тиклем көслө булыуына ғәжәпләнеп:

— Егет, бына тигән ике тыу бейәмдең муйынын өҙөп әрәм иттең, хәйерле ҡаза булһын инде. Ана туғыҙ йыл тыу йөрөгән бейәм бар, ул да бер ҡасан да тотолмаған. Шуны тотоп мен, тик, зинһар, һаҡ бул, харап итә күрмә инде,— тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс туғыҙ йыл тыу йөрөгән бейәне «һә» тигәнсе тотоп алып, һыбайланып алды ла саба-саба манма тиргә төшөрҙө, ти. Унан Күсәр хандың алды-

на килтереп бәйләп ҡуйҙы, ти. Шунан һуң хан:

— Егет, мин һине көтөүсе итеп алырға ризамын, бына ошо яландағы йылҡыларымды көтөрһөң,— тип, ҙур яланды ҡаплап алған өйөр-өйөр йылҡыларҙы күрһәтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс яланда йылҡы көтөп ҡалды, Күсәр хан һаңдауына ҡайтып китте, ти.

Өйөнә ҡайтҡас, хан яңы алған хеҙмәтсеһенең шул тиклем көслө бер егет булыуын ғәжәпләнеп һөйләне, ти. Атаһының һүҙен тыңлап торған Маянһылыу ҙа, иҫе китеп: «Ҡуҙыйкүрпәстән дә көслөрәк егеттәр бар микән ни?» — тип уйлап ҡуйҙы, ти.

Маянһылыу яңғыҙы бер өйҙә тора икән. Уның тәҙрәһе төбөндә төрлө-төрлө емеш ағастары үҫеп, төрлө-төрлө ҡоштар һайрап тора ине, ти. Маянһылыу һәр ваҡыт ана шул тәҙрә төбөндә, емеш ағастарына ҡарап, һайрашҡан ҡоштарҙың тауышын тыңлап, Ҡуҙыйкүрпәсте уйлап ултырыр булған, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, Күсәр ханда эшләй башлауына хәтһеҙ ваҡыт үтеп китһә лә, гел генә ҡырҙа, йылҡы араһында булғанлыҡтан, Маянһылыуҙы һаман күрә алмай ине әле, ти.

Бына көҙ ҙә етеп, ҡар ҡатыш ямғырҙар яуа башланы, ти. Күсәр хан бөтә малдарын һаңдауға алып ҡайтырға ҡушты, ти. Ҡуҙыйкүрпәс тә үҙе көткән йылҡы көтөүен һаңдауға алып ҡайтып, кәртәгә япты, ти. Күшектергес елле-ямғырлы көндәр башланып киткәнлектән, йәш ҡолондарға бауырлыҡ бәйләргә булдылар, ти. Бындай көндәрҙә, малдарҙы ҡарарға көтөүселәр генә етешә алмағанлыҡтан, ярҙамға Маянһылыу ҙа сыға торғайны, ти. Шундай

елле-ямғырлы бер көндө Маянһылыу ашығып-ашығып ҡолондарға бауырлыҡ бәйләп йөрөй, ә уның артынан бәйләнгән бауырлыҡтарҙы кемдер ҡырҡып бара ине, ти. Маянһылыу, был хәлдең тиккә булмауын һиҙенеп: «Кем шулай шаяра икән?» — тип, абайлабыраҡ ҡараһа — уның алдында Ҡуҙыйкүрпәс баҫып тора ине, ти. Ҡапыл йылҡылар ҙа, ҡолондар ҙа онотолдо, ҡарлы-боҙло ямғыр ҙа туҡтағандай булып китте, ти. Егет менән ҡыҙ, бер-береһенә ҡарашып, баҫҡан урындарында ҡаттылар ҙа ҡалдылар, ти. Береһе: «Маянһылыу!..», икенсеһе: «Ҡуҙыйкүрпәс!..» тигән һүҙҙән башҡа бер һүҙ ҙә әйтешә алмай торҙолар, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу, ана шулай, әйтер һүҙҙәрен әйтә алмай, күпмелер ваҡыт бер-береһенә ҡарашып торғас, ышығыраҡ бер ергә һыйынып, бөтә донъяларын онотоп, пар күгәрсендәй гөрләшеп, бик оҙаҡ ултырҙылар, ти.

Бер-береһен йән күреп яратышҡан был икәүҙең нимә һөйләшкәнен Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡараголдоң һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр бисәһе тыңлап торҙо, ти. Шунан ул Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың ихлас күңелдән һөйләшкән һүҙҙәрен боҙоп, үҙенән ҡушып, иренә барып әйтте, ти, ә Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ ҡатыны һөйләгәнде тағы ла шаштырып, Күсәр хандың үҙенә алып барып еткерҙе, ти.

— Ҡыҙың ҡыҙ түгел инде хәҙер! Өҫтәүенә үҙе теге көтөүсең менән ҡасып уҡ китергә йыйына,— тип әйтте, ти, ул ханға.

Күсәр хан, был хәбәргә ни тип әйтергә лә белмәй,

елкәһен тырнап ултыра ине, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ, ханға ҡарап:

— Хуп күрһәң, мин бер хәйлә уйлап таптым,— тине, ти.

— Йә, ниндәй хәйлә ул? — тип һораны, ти, хан.

— Ханым, төптәнерәк уйлап ҡараһаң, Ҡуҙыйкүрпәсте үлтермәй тороп, унан ҡотолоп булмаҫына үҙең дә ышанырһың,— тип һүҙ башланы, ти, ул.— Әммә быны хәйләһеҙ-ниһеҙ генә булдырып булмай. Ни өсөн тиһәң, уны көс менән еңеү мөмкин түгел, ул бөтәбеҙҙән дә көслө. Шул көсөнә таянып, ул Маянһылыуҙы ғына түгел, бөтә байлығыңды талап, барлыҡ аяҡлы малыңды ҡыуып алып китеүе бар. Ҡыҙыңды йәштән үк унан айырып алып, күсеп киткәнең өсөн һинән үс алмай ҡалмаҫ ул. Эйе, көт тә тор, шулай итәсәк ул...

— Шулай булғас, ни эшләргә кәрәк һуң? — тип Күсәр хан Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың һүҙен бүлдерҙе, ти.

— Быны өсөн ялған туй уҙғарырға кәрәк,— тип әйтте, ти, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ.— Маянһылыуҙы Ҡуҙыйкүрпәскә бирәм тип, ҙур табын ҡороп, туй яһаған булырға ла Ҡуҙыйкүрпәсте бал эсереп иҫертергә. Шунан уны бейергә төшөрәһең. Бейегәндә, иҫереүе еткәнлектән, башы әйләнеп, сайҡала башлар. Шунан инде уны, әҙерәк айныһын тигән булып, ситкәрәк алып китәһең дә башына һуғып үлтерәһең... Ҡуҙыйкүрпәстән ҡотолоу өсөн башҡа сара юҡ, ханым.

Күсәр хан был турала көҙ буйы уйланы, ҡыш буйы уйланы ла, ахыр килеп, яҙ көнө, Ҡутыр башлы

ҡолтор таҙ әйткәнгә риза булды, ти. Бер заман ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу туйына, тип, бик күп кеше саҡыртты, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу был туйҙың ысын туй булмаҫын һиҙенеп торҙолар, ти. Шуның өсөн улар туйҙың иң ҡыҙыу мәлендә генә, Күк толпарға атланып, ҡасып китергә һүҙ ҡуйыштылар, ти. «Күк толпар беҙгә кәрәкле бер-бер хәйлә әйтмәҫме» тип, Ҡуҙыйкүрпәс кеҫәһендәге өс ҡылды өтөп, Күк толпарҙы килтерҙе, ти. Шунда Күк толпар, телгә килеп: «Егетем, һине туйҙа иҫертеп аяҡтан йығырға ла тышҡа алып сығып үлтерергә итәләр. Һин иҫермәҫкә тейешһең. Бының өсөн минең үҙеңдәге өс ҡылымдың береһен, балдаҡ кеүек итеп, бармағыңа урап ал да балды эсер алдынан ғына, шул бармағың менән бер ҡат болғат. Мине саҡырғанда инде ул ҡылды тегеләре менән бергә ҡушырһың»,— тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс тап Күк толпар әйткәнсә эшләргә булды, ти.

Туй башланды, ти, бер заман. Аттар саптырылды, көрәшселәр көрәште, йүгерektәр йүгеreште, ти. Табынға ултырып, бал да эсә башланылар, ти. Ҡуҙыйкүрпәскә балды һалып биреп торалар, ул, ҡыл балдаҡлы бармағы менән бер генә болғап ала ла эсеп бөтөрөп тора, ти. Иҫереп йығылыу Ҡуҙыйкүрпәстең иҫенә лә инеп сыҡмай, ти. Быны күреп, Күсәр хан менән Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ ҡайғыға ҡалдылар, ти.

Аптырағас-йөҙәгәс:

— Кейәүҙең бер бейеп алыуын һорайыҡ әле!— тип ҡысҡырҙы, ти, таҙ.

Ҡуҙыйкүрпәс, бер ҙә ҡарышып тормай, бейергә төшөп китте, ти. Ул туҡтар-туҡтамаҫтан Маянһылыу бейей башланы, ти. Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙың ҡылдарын өтөп ебәргәйне, толпар майҙан уртаһына килеп тә баҫты, ти. Шунда уҡ ҡыҙ менән егет Күк толпарға менеп алдылар ҙа сабып китеп тә барҙылар, ти.

Ләкин Күк толпарҙың сабыуы әллә нишләп гәҙәттәгенән күп ҡайтыш ине, һыртына ултырып барыуы ла гәжәпкә ҡаршы, бик уңайһыҙ ине, ти. Шуға күрә арттан баҫтырып килгән Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Күк толпарҙы шунда уҡ ҡыуып етеп, ҡылыс менән һелтәгәйне, ҡылыс Күк толпарҙың сандыр итен телеп ебәрҙе, Күк толпар абынып-һөрлөгөп китте лә, Маянһылыу осоп төшөп ҡалды, ти. Шунан Күк толпар, ҡапыл бер яҡҡа тайпылып, күҙҙән юғалды, ти.

Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡарағол, Маянһылыуҙы үҙенең атына алып, Күсәр хандың саңдауына ҡайтып китте, ти. Был ваҡытта инде Күк толпар ҡыуғынсыларҙан күҙ яҙҙырып, бер ҙур күл янына килеп сыҡҡайны, ти. Ҡуҙыйкүрпәс толпарынан төштө лә, был ни хәл, тип, атының күҙҙәренә ҡараны, ә Күк толпар, телгә килеп: «Ниңә миңә ҡарайһың? Бармағыңа ҡара!» — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс бармағына ҡараһа, ҡылт итеп иҫенә төштө, ти: ул, туй ваҡытында ҡабаланып, ҡылдың ике бөртөгөн генә өткән, ә өсөнсөһө бармағына ураған көйө онотолоп тороп ҡалған икән. Бына шу-

ның арҡаһында Күк толпар ғәҙәттәгенән бер ҡат ҡайтыш сапҡан, һыртына ултырып барыу ҙа уңайһыҙ булған, быҒаса абыныу белмәгән Күк толпар һөрлөгөп китеп, Маянһылыу осоп төшөп ҡалған икән.

Ҡуҙыйкүрпәс был хәлгә бик-бик ҡайғырҙы, бармағын ҡырҡып ташларҙай булып-үкенде, ти. Ләкин эш уҙғайны инде, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс шулай ҡайғыға батып ултырғанда, Күк толпар, телгә килеп, уның ҡайғыһын тағы ла арттырып ебәрҙе, ти. «Минең ярам өс көнһөҙ уңалырлыҡ түгел. Мине өс көнгә ошо күл эсенә индереп ҡуй»,— тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарын күл эсенә индереп ҡуйҙы ла үҙе күл буйындағы суҡ тирәк төбөнә килеп ултырҙы, ти. Бер саҡ тирәк башына бер ҡарға килеп ҡунды, ти. Ҡуҙыйкүрпәс шул ҡарғаға:

— Ҡарға, минең яныма төш әле, һиңә бер йомошом бар ине,— тип әйтте, ти.

Ҡарға:

— Ҡар-рҡ, ҡар-рҡ, һин ҡат-һаң, бер-р ҡа-лаҡ ҡа-ның миңә! — тип осто ла китте, ти.

Ҡарға киткәс, уның урынына бер һайысҡан килеп ултырҙы, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс шул һайысҡанға:

— Һайысҡан, минең янға төш әле, һиңә бер йомошом бар ине,— тип әйтте, ти.

Һайысҡан:

— Шыҡыр-шыҡыр, һин шыҡырайһаң, бер ҡалаҡ ҡаның миңә! — тип осто ла китте, ти.

Шунан тирәк башына бер суҡ турғай килеп ҡунды, ти. Ҡуҙыйкүрпәс уға:

— Суҡ турғай, минең янға төш әле, бер йомошом бар ине,— тип әйтте, ти.

Суҡ турғай шунда уҡ пырылдап осоп төштө лә:

— Йомошоңдо тыңлайым,— тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс бер япраҡҡа яҙыу яҙып, суҡ турғайҙың аяғына бәйләне лә:

— Бына ошо япраҡты Маянһылыуға илтеп бирсе, — тине, ти. Суҡ турғай пырылдап осоп та китте, ти.

Маянһылыу, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡайҙалығын белмәй, асыҡ тәҙрә алдында моңайып ултыра ине, ти. Шул ваҡыт баяғы суҡ турғай яҡындағы бер ағасҡа килеп ҡунды ла сут-сут итеп һайрай башланы, ти. Маянһылыу, ниңә был тиклем өҙөлөп-өҙөлөп сырҡылдай икән был турғай, тип, абайлабыраҡ ҡараһа, уның аяғына бәйләнгән хатты күрҙе, ти. Суҡ турғай, һайрап бөткәс, өйгә инеп, Маянһылыуҙың иңбашына уҡ килеп ҡунды, ти. Маянһылыу хатты алып уҡып, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡайҙа, ни хәлдә ятҡанын белде, ти. Шунан ул үҙе лә хат яҙып, суҡ турғайҙың аяғына бәйләне лә, үҙәге өҙөлгәндә ҡабыр тип, биш-алты бөртөк булһа ла бауырһаҡ тағып ебәрҙе, ти.

Суҡ турғай ике арала йомошсо булып, көнөнә өс-дүрт тапҡыр килеп-китеп йөрөнө, ти.

Ҡуҙыйкүрпәстән айырылып тороп ҡалыуға өсөнсө көн тигәндә, иртә менән Маянһылыуҙың янына Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың бисәһе инеп, уның башын ҡараған булып ултыра ине, ти. Маянһылыу уның итәгендә йоҡлап китте, ти. Шул саҡ тәҙрәнән

теге суҡ турғай килеп инеп, Маянһылыуҙың иңбашына ҡунды, ти. Таҙҙың һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр бисәһе: «Был ҡош, моғайын, Ҡуҙыйкүрпәстәндер әле»,— тип уйланы ла суҡ турғайҙы тотоп алып: «Ҡуҙыйкүрпәс ҡайҙа? Әйт, йәнеңде алмаҫ борон!» — тип, турғайҙың йөнөн йолҡа башланы, ти. Эй йолҡа, эй йолҡа, ти, ҡәһәр һуҡҡыры бисә, ә турғай шымған да, тауыш-тын да сығармай ти. Йолҡколай торғас, турғайҙың башында бары бер генә суҡ йөн тороп ҡалды, ти. Һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр теге бисә шул суҡ йөндө йолҡоп алғайны, бахыр турғай: «Суҡ, суҡ...» — тип ике тапҡыр ғына ҡысҡырҙы ла йән бирҙе, ти, мәхлүгең.

Маянһылыу ҡоштоң «суҡ-суҡ» тигән тауышына уянып китте лә:

— Харап ҡына иттең ҡошто! — тип ҡысҡырып ебәрҙе, ти. Шул ерҙә Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр бисәһе тышҡа йүгереп сығып, бөтә саңдауға:

— Ҡуҙыйкүрпәс Суҡ буйында ята икән, шунда барығыҙ! — тип оран һалды, ти.

Күсәр хандың иң ышаныслы кешеләре, был хәбәрҙе ишеткәс тә, шунда уҡ ат менеп, Суҡ күле буйына киттеләр, ти.

Ҡуҙыйкүрпәстең янына, беренсе булып, Маянһылыуҙың ике ағаһы килеп етте, ти. Беренсе ағаһы ҡылысы менән, Ҡуҙыйкүрпәскә сабайым, тип һелтәнгәйне, Ҡуҙыйкүрпәс айырата бер таһыллыҡ менән уның ҡылысын ҡулынан ҡайырып алды ла урталай һындырып ташланы, ти. Шунан уға, минән бүләк булһын тип, атаһынан ҡалған ҡырма бүркен бирҙе,

ти. Маянһылыуҙың икенсе ағаһы, Ҡуҙыйкүрпәс менән алышыуҙың файҙаһыҙ булырын һиҙенеп, ҡылысын уға үҙе үк килтереп тотторҙо, ти. Ҡуҙыйкүрпәс Маянһылыуҙың был ағаһына, минән бүләк булһын тип, атаһынан ҡалған айбалтаһын бирҙе, ти. Маянһылыуға минән иҫтәлек итеп бир тип, көмөш көҙгөһөн тотторҙо, ти.

«Был бик ирмәк кеше икән дә баһа» тип, Маянһылыуҙың ағалары аттарын менеп ҡайтып киттеләр, ти.

Көн ауышыуға өс тәүлек тулып, күл эсендә һауыҡтырылырға ҡуйылған Күк толпарҙың яраһы уңалырға тейеш ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс, шуны көтөп, атаһынан ҡалған ҡама тунын кейҙе лә, билен көмөш ҡәмәре менән быуҙы ла, әҙерәк серем итеп алайым





әле тип, тирәк төбөнә ятты, ти. Ул шунда йоҡлап китте, ти. Ни өсөн тиһәң, төнөн Маянһылыу хаҡында уйланып үткәргәнлектән, ул таң һарғайғанға тиклем керпек тә ҡаҡмағайны, ти.

Маянһылыуҙың икенсе ағаһы уға Ҡуҙыйкүрпәс иҫтәлек итеп биргән баяғы көмөш көҙгөнө килтереп тапшырҙы, ти. Маянһылыу быға бик шатланып, ағаһына ҙур рәхмәттәр әйтеп, көҙгөнө ҡулына алып ҡарағайны: «Аһ, һәләк иткән Ҡуҙыйкүрпәскәйем-

де!» — тип, бөтөнләй иçһеҙ булып йығылды, ти. Ни өсөн тиһәң, көҙгөлә бөтәһе лә асыҡ күренеп тора ине, ти: Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡарағол, боçоп ҡына суҡ тирәк янына барған да шунда моңайып ултырған Ҡуҙыйкүрпәсте бысаҡ менән сәнсеп үлтергән, ә хәҙер ул Ҡуҙыйкүрпәстең ҡәмәрен сисеп, ҡама тунын һалдырып тора ине, ти. Суҡ тирәк яны тып-тын, бер кем дә юҡ, тик тирәк башында бер ҡарға менән бер һайыçҡан ғына Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың тиҙерәк китеүен көтөп ултыра ине, ти...

Маянһылыу, иçенә килеп, был фажиғәле хәлде атаһына йүгереп барып әйтте лә, уның яуабын да көтмәй, ат менеп, Ҡуҙыйкүрпәс үлеп ятҡан ергә сабып сығып китте, ти. Уның артынан уҡ, ике улын эйәртеп, Күсәр хан үҙе лә йүнәлде, ти.

Маянһылыу килеп еткәндә, Ҡуҙыйкүрпәс, тап көҙгөлә күренгәнсә, суҡ тирәк төбөндә үлеп ята ине, ти. Уның янында суҡ тирәкле күлдән яңы ғына һауығып сыҡҡан Күк толпары башын һалындырып, ике күҙенән мөлдөрәтеп йәш ҡойоп, шым ғына тора ине, ти. Ҡулына Ҡуҙыйкүрпәстең ҡама туңы менән көмөш ҡәмәрен тотҡан Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ атына атланып китә алмай аҙаплана ине, ти. Атҡа атланырға ғына тигәндә, Күк толпар уның аяғын тешләп, тартып төшөрөп тора икән, ти.

Маянһылыу Ҡуҙыйкүрпәстең күкрәгенә ятып иланы ла иланы, ти; илай-илай күҙҙәре шешенеп бөттө, ти. Ә Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ эстән генә: «Үҙ теләгемә ирештем, хәҙер инде минән китеп, әллә ҡайҙа бара алмаçһың, һайыçҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр ҡарт ҡатыным өçтөнән үҙеңде йәш бисә

итеп алырға күп ҡалманы инде»,— тип уйланы, ти.

Күсәр хан, Маянһылыуҙы йыуатырға тырышып:

— Үҙеңде үҙең бөтөрөп, ул тиклем ҡайғырма инде, ҡыҙым! Булған эш булған инде, Ҡуҙыйкүрпәстән дә артыҡ егеттәр табылыр...

*Илдән илгә йөрөйөм, балам,*
*Ил ғәриптәре булайым, балам,*
*Ҡуҙыйкүрпәс кеүек егетте табайым, балам,*
*Табып алып ҡайтайым, балам,—*

тине, ти.

Маянһылыу атаһына һамаҡлап ошолай тип әйтте, ти:

*Илдән илгә йөрөһәң дә, атай,*
*Ил ғәриптәре булһаң да, атай,*
*Ҡуҙыйкүрпәс кеүек аҫыл егетте*
*Таба алмаҫһың, атай. Табып ҡайтһаң да —*
*Ҡуҙыйкүрпәс була алмаҫ, атай.*

*Суҡ буйында үҫкән суҡ тирәктең*
*Япраҡтары, атай, киң булмаҫ.*
*Кемде генә эҙләп тапһаң да һин,*
*Ҡуҙыйкүрпәсемә, атай, тиң булмаҫ.*

Шунан Маянһылыу, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙға ҡарап:

— Бигерәк тамағым кипте, күлдән әҙ генә һыу алып бирер инең,— тип әйтте, ти.

«Әһә, үҙе үк башлап өндәште, эш яйланырға тора былай булғас», — тип уйланы, ти, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ. Шунан уның, Маянһылыуға ярамһаҡ-

ланып, күл ситенә барып, һыу алырға эйелеүе булды — Маянһылыуҙың: «Ҡуҙыйкүрпәстең ҡоно бына шул булыр!» — тип, арҡаһына бысаҡ менән сәнсеүе булды, ти.

Маянһылыу суҡ тирәк янына кире барып, түшенән Ҡуҙыйкүрпәскә тип әҙерләнгән сигеүле аҡ ҡулъяулығын алып, шуға Ҡуҙыйкүрпәс ҡаны менән «Ҡуҙыйкүрпәс» тип, үҙ ҡаны менән «Маянһылыу» тип яҙҙы ла яулыҡты Ҡуҙыйкүрпәстең ҡама туны keçәһенә тыҡты, ти. Шунан ҡама тун менән көмөш ҡәмәрҙе Күк толпарҙың эйәренә бәйләне, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡылысын да шунда тағып ҡуйҙы, ти. Бөтәһе лә әҙер булғас, Маянһылыу Ҡуҙыйкүрпәс кеçәһендәге өс ҡылды Күк толпарҙың ялына ҡушып, башынан һөйөп һыйпағайны, Күк толпар шунда уҡ күҙҙән юғалды — Урал тауы буйына, Ҡуҙыйкүрпәстең әсәһе йортона ҡайтып китте, ти.

Күсәр хан, уның ике улы, йыйылған халыҡ әле Күк толпарға, әле суҡ тирәк төбөндә ятҡан Ҡуҙыйкүрпәскә, әле күл ситендәге Ҡутыр башлы ҡолтор таҙға ҡарап, ни эшләргә белмәй, ҡатып торған арала, Маянһылыу суҡ тирәк төбөнә килде лә, үҙ йөрәгенә үҙе бысаҡ менән сәнсеп, Ҡуҙыйкүрпәс күкрәгенә йығылды, ти.

Берен-бере өҙөлөп һөйөп тә бергә йәшәргә насип булмаған Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың ғүмере ана шулай бөттө, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙы шул ҙур күл буйындағы суҡ тирәк төбөнә, икеһен бер ҡәбергә күмделәр, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙы күлдең теге яҡ ситенә сығарып күмделәр, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡәбере өҫтөнә ике алмағас, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ ҡәбере өҫтөнә тегәнәк үҫеп сыҡты, ти. Был тегәнәк күл аша сығып, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡәбере өҫтөнә үҫкән алмағастарға килеп сырмалды, ти. Елле көндәрҙә, алмағастар һелкенгәндә, тегәнәк, алмаларҙы өйкәй-өйкәй, уларҙың ҡанлы һуттарын ағыҙып тора башланы, ти. Ана шул алмаларҙан тамған ҡанлы һуттан ике ҡош яралып, алмағас башына ике оя яһанылар, ти. Алмағастарҙы сырмаған тегәнәктән ике ҡарға сығып, теге ике ҡоштоң ояларын туҙҙыра башланылар, ти. Шул ваҡыт ике алма-ҡош, асыуҙары килеп, был ике тегәнәк-ҡарғаны суҡып үлтерҙеләр ҙә ҡаңғылдашып осоп киттеләр, ти.

Хәҙерге аҡҡоштар ана шул ике алма-ҡоштан ҡалған икән, ти.

## Ел-ел, арбам!

Борон бер заманда, ҡарағайлы ҡара урманда, бер һунарсы йәшәгән. Уның ете улы булған, һәм етеһе лә йыл үҫәһен ай үҫеп, ай үҫәһен көн үҫеп, бик тиҙ үҫеп еткән. Ҡараңғы ҡарағай урманының саф һауаһы уларҙың күкрәген ҡолас етмәҫлек итеп киңәйткән. Ағым йылғаның боҙҙан һалҡын, көмөштән саф һыуында ҡойоноп, уларҙың тәндәре уҡ үтмәҫ, ҡылыс ҡырҡмаҫ булып сыныҡҡан. Улар бәһлеүән булып үҫкәндәр. Уларҙың иң яратҡан эштәре һунарға йөрөү, айыу, бүре аулау булған. Һунарсы ҡарт үҙе лә улдары менән бергә һунарға йөрөгән.

Улар бөтәһе лә, иң яҡшы арғымаҡтарға атланып, һәр көн иртәнсәк һунарға китә, кисен ҙур табыш менән өйгә ҡайта торған булғандар.

Шулай итеп, улар бик бәхетле итеп оҙаҡ ғүмер һөргәндәр. Уларҙың тормошонда тик бер генә күңелһеҙлек булған. Ул да булһа — өй эсендә бер генә ҡыҙ баланың да булмауы икән. Ата-әсә, бигерәк тә малайҙарҙың барыһы ла, ҡыҙ туғандары булыуын теләгәндәр. Бына бер ваҡыт әсәнең һигеҙенсе бала табыр көнө еткән. Малайҙар был көндө һунарға үҙҙәре генә китергә әҙерләнгәндәр; аталары өйҙә ҡалған. Аттарына атланғас, уландар аталарына былай тигәндәр:

— Атай, әгәр әсәйем ҡыҙ бала тапһа, беҙ ҡайта торған ете юл сатына орсоҡ ҡаҙа, әгәр ир бала тапһа, уҡ ҡаҙа. Юл сатында уҡ торһа, беҙ өйгә ҡайтмабыҙ, орсоҡ торһа, ҡайтырбыҙ.— тигәндәр.

— Ярай, улдарым,— тигән һунарсы,— һеҙ тигәнсә эшләрмен.

Улдары киткән. Оҙон көн үткән, кис еткән, таң алдында әсә бер бик матур ҡыҙ бала тыуҙырған. Һунарсы, шатлығы эсенә һыймай, ете юл сатына сапҡан. Унда орсоҡ ҡаҙаған да, атын йән-фарман саптырып, ҡатыны менән ҡыҙы янына ҡайтып киткән.

Һунарсының бик күп йылдарҙан бирле дуҫ булып ғүмер иткән күршеһе булған. Ләкин был күршенең ҡатыны Йәнбикә һунарсының ғаиләһен һис тә күрә алмаған. Һунарсының ҡатыны үҙенән матур, эшлекле булғаны өсөн дә, улдары күп булғаны өсөн дә, һунарҙан уңыш менән ҡайтҡандары өсөн дә көнләшкән ул. Тик быны бер кем дә һиҙмәгән. Хатта, үҙенең

ире лә белмәгән. Ә был ҡатын, нисек кенә булһа ла бер мөмкинлек табып, был бәхетле ғаиләнең бәхетен емереү тураһында хыялланып йөрөгән. Бына ошо ҡатын һунарсының улдары һунарға китер алдынан әйткән һүҙҙәрен тыңлап торған да үҙенең яуыз уйын бөгөн тормошҡа ашыра аласағын уйлап ҡыуанған.

Бына һунарсының ҡатыны ҡыҙ тапҡас, өй эсен сикһеҙ ҡыуаныс солғап алған. Ә теге ҡатын, бер кемгә һиҙҙермәйенсә, һунарсы артынан ете юл сатына йүгергән һәм һунарсы ҡаҙаған орсоҡто алып ырғытҡан да уның урынына уҡ ҡаҙап киткән. Икенсе көндөң кисе еткән. Егеттәр, эйәрҙәренә айыу, бүре, төлкө тиреләре аҫып, һунарҙан ҡайтып килгәндәр. Ләкин, ете юл сатында уҡ ҡаҙап ҡуйылғанлыҡты күреү менән, кире боролғандар. Һәм шул китеүҙән бер ҡасан да кире ҡайтмағандар.

Һунарсының ҡыҙы бик матур, бик ҙур булып, тиҙ үк үҫеп еткән. Ул да, ағалары кеүек, ҡарағайлы урмандың саф һауаһын туйғансы һулаған, емешеләктәрен ашаған, көмөш һыулы йылғаһында ҡойоноп, ҡорос кеүек булып, сыныҡып үҫкән. Уның исеме Һыуһылыу булған. Атаһы менән әсәһе Һыуһылыуға ағалары тураһында һөйләмәҫкә, уға был ҙур ҡайғыны белдермәҫкә булғандар.

Һыуһылыу Йәнбикәнең ҡыҙы Олтанбикә менән уйнарға яратҡан. Ә Йәнбикә, үҙенең тәртешкә аяҡлы, иләк битле ҡыҙы Олтанбикәнең, Һыуһылыу менән сағыштырғанда, ләлә сәскәһе янында һырышып үҫкән тегәнәк кеүек булғаны өсөн, тағы ла көнләшкән. Күршеләрен улдарынан яҙҙырған кеүек, яңғыҙ ҡыҙҙарынан да яҙҙырыу өсөн, төрлө хәйлә-



ләр әҙерләгән. Бер ваҡыт ул, ағын йылғаның ҡояшҡа ҡыҙған, йомшаҡ ваҡ ҡомо өҫтөндә уйнап ултырған ҡыҙҙар янына барып ултырған да, төҫөнә ҡаты ҡайғы сығарып, былай тип һөйләгән:

— Ай-һай, ғүмер тигәнең үтеп кенә тора шул. Бер саҡ был ҡомда, Һыуһылыу, һинең ете ағайың, бесәй балалары шикелле аунап, ҡояшҡа ҡыҙынып яталар ине. Ә хәҙер һеҙ...

— Ни тиһең, еңгә, ағайҙарың, тиһеңме? — тип һораған Һыуһылыу, ғәжәпләнеп.



— Эйе,— тигән Иәнбикә, йөҙөнә тағы ла ҡатыраҡ ҡайғы сығарып.— Ҡайҙалыр киттеләр ҙә юҡ булдылар шул, һыуға ырғытҡан таш кеүек булдылар...

— Ҡайҙа киттеләр һуң улар, еңгә?

— Әсәйеңдән һора. Ул әйтер. Тик, мин әйтте, тимә, үҙем белдем, тиген, йәме!..

Ошо һөйләшеүҙән һуң, Һыуһылыу был турала һораша-һораша ата-әсәһенән йөҙәтеп бөткән. Ләкин атаһы ла, әсәһе лә:

— Һинең бер ағайың да булғаны юҡ,— тиеүҙән башҡа бер ни ҙә әйтмәгәндәр. Улар, ағалары юғалыуын әйтеп, ҡыҙҙарын ҡайғыға төшөрөргә теләмәгәндәр.

Бер нисә көндәр үткәс, Йәнбикә Һыуһылыу менән Олтанбикә уйнаған ергә тағы килгән. Тағы Һыуһылыуҙың ағайҙары тураһында һүҙ ҡуҙғатҡан.

— Йә, Һыуһылыу, әсәйең ни тине?

— Һинең ағайҙарың булғаны юҡ, тине...

— Бушты һөйләгән.

— Юҡ, минең әсәйем бер ҡасан да бушты һөйләмәй ул.

— Мин һиңә бер хәйлә өйрәтәйем. Ул саҡта әсәйең әйтмәй булдыра алмаҫ. Һин әсәйеңдән ҡурмас ҡурҙырт, унан һуң, иркәләнгән булып: «Әсәй, ҡурмасты табанан эҫе көйөнсә ҡулың менән алып бир»,— тиген. Башҡаса алма! Әсәйең ҡурмасты усына алыу менән, ике ҡулын ҡыҫып тот та ҡуй. Ебәрмә. Ныҡ итеп тот! Унан һора: «Әсәй, әйт, ағайымдар бар инеме минең?» — тиген. Ул, ҡулы яныуға түҙмәйенсә, әйтер.

— Һеҙ бик уҫал кешеһегеҙ икән дә баһа! Туған әсәйеңде шулай ғазапларға ярай тиме ни? Яҡшылыҡ менән һораһам, әсәйем миңә былай ҙа әйтер,— тигән дә Һыуһылыу, яуыз ҡатынға асыуланып, ҡайтып киткән.

Өйгә ҡайтҡас, әсәһенә йылға буйында булған хәлде һөйләп биргән, ләкин яуыз ҡатындың исемен әйтмәгән. Хәҙер инде әсәһе әйтмәй булдыра алмаған.

— Бар ине, ҡыҙым, ағайҙарың бар ине, балам,— тигән әсәһе.

— Ҡайҙа һуң улар? — тип һораған Һыуһылыу.

Әсәһе, илай-илай, Һыуһылыуға был ваҡиғаны һөйләп биргән.

— Ете ағайың бар ине шул, ҡыҙым,— тип һүҙен башлап киткән ул,— етеһе лә арыҫлан кеүек көслө батыр егеттәр ине. Улар өсөн был урман эсе тар булды, күрәһең. Беҙҙе ташлап киттеләр. Улар ҡыҙ туғандары булыуын теләнеләр. Һигеҙенсе бала ҡыҙ булмаһа, өйгә ҡайтмайбыҙ, һеҙҙе тәрбиәләү барыбер кесе ул өҫтөнә төшә бит, тинеләр. Шулай тинеләр ҙә һунарға киттеләр. Шунан һуң һин тыуҙың. Беҙ: «Улдарыбыҙҙан яҙманыҡ»,— тип сикһеҙ ҡыуандыҡ. Тик ҡыуанысыбыҙ, балаҡайым, бушҡа ғына булды. Ниндәйҙер бер яуыз йән, ете юл сатына атайың ҡаҙаған орсоҡто алып, уның урынына уҡ ҡаҙап киткән. Һунарҙан ҡайтып килгән ағайҙарың был уҡты күргәндәр ҙә аттарын кирегә борғандар. Шул китеүҙән инде бер ҡасан да әйләнеп ҡайтманылар. Хәҙер инде улар бик алыҫта, ат елеп, ҡош осоп етмәҫ ерҙә, ете диңгеҙ артында торалар, ти... Бына шулай, ҡыҙым...

— Мин уларҙы эҙләп табырмын да алып ҡайтырмын! — тигән Һыуһылыу, ышаныслы итеп.

Шул көндән алып Һыуһылыу: «Мин ағайымдар янына барам, миңә ел-ел арба яһап бир»,— тип атаһының быуынына төшкән.

Атаһы менән әсәһе башта бик ныҡ ҡаршы торғандар. Юл ҡурҡыныстарын һөйләп, ҡыҙҙарын был уйҙан ҡайтарырға тырышҡандар. Тик Һыуһылыуҙы бер ни ҙә ҡурҡытмаған, бер ни ҙә уның күңелен ҡайтармаған. Ашамай, эсмәй, уйнамай, тик шул аға-

ларын эҙләп табыу тураһында ғына уйлап йөрөй һәм көндән-көн ябыға башлаған. Ахырҙа һунарсы ҡыҙына ел-ел арба яһап бирергә булған.

Ел-ел арба бик оҙаҡ яһалған. Арба яһалып бөткәнсе, Һыуһылыу үҙенә юл кәрәк-яраҡтары, ағайҙарына бүләктәр әҙерләгән. Әсәһе уға матур-матур күлдәктәр теккән. Ебәк ептәр менән мөһөрләп сигеп, шау уҡа итеп, тәңкәле елән, селтәр, ҡашмау яһаған. Бына бер ваҡыт ел-ел арба ла эшләнеп бөткән. Атаһы Һыуһылыуҙың бармағына бер алтын балдаҡ кейҙергән дә былай тип әйткән:

— Ел-ел арбаның осоу сере ошо балдаҡта булыр, уны йәнеңде һаҡлаған кеүек һаҡла.

Әсәһе ел-ел арбаның күсәренә өс тапҡыр төкөргән дә:

— Ҡыҙым, ауыр хәлгә төшһәң, мин һинең яныңда булырмын,— тигән.

Һыуһылыу үҙенә иптәшлеккә Олтанбикәне алып, йәйге төндөң бер аяҙ таңында, ете диңгеҙ яғына ҡарап, осоп киткән.

*Ел-ел арбам, ел, арбам,*
*Ете диңгеҙ кис, арбам,*
*Ете ағайға ет, арбам,*
*Ете ағайға ет, арбам...—*

тип йырлай-йырлай барған ул бөтә юл буйына. Йырламаһа, ел-ел арба осмаған, йөрөмәгән.

Улар шул осоуҙан бер туҡтауһыҙ, ете көн, ете төн осҡандар. Болоттар, ел-дауылдар, бурандар араһынан үткәндәр. Һигеҙенсе көндө бер диңгеҙ янына барып төшкәндәр. Сәй ҡайнатып эскәндәр, һыу ингән-

дәр. Олтанбикә, һыу инеп бөткәс, тиҙ генә йүгереп сыҡҡан да Һыуһылыуҙың кейемдәрен кейеп алған. Олтанбикә лә әсәһе кеүек көнсөл булғанлыҡтан, үҙенең күлдәктәре Һыуһылыуҙыҡынан яҡшыраҡ әйберҙән тегелгән булһа ла, уға Һыуһылыуҙың күлдәктәре матур күренгән, Һыуһылыуҙың ағаларында ла үҙе ҡунаҡ ҡыҙ ғына булыу уға ғәрлек төйолған. Шуға күрә ул Һыуһылыуҙың күлдәктәрен нисек тә тартып алырға, ағаларына бер туған һеңел булып барырға булған.

— Әсәй, Олтанбикә күлдәктәремде бирмәй,— тип илаған Һыуһылыу.

— Бир минең ҡыҙымдың күлдәктәрен, юғиһә, хәҙер үк барып етермен дә сәстәреңде йолҡормон!..— тип ҡысҡырған күсәрҙәге бер төкөрөк.

Олтанбикә ҡурҡып, Һыуһылыуҙың күлдәктәрен сисеп биргән.

— Юрый ғына, шаяртып ҡына кейһәм, илап та бара, һәтәү,— тигән ул, хәйләкәр көлөп.

Улар артабан осоп киткәндәр. Бер туҡтауһыҙ тағы ете көн, ете төн осҡандан һуң, икенсе диңгеҙ янына килеп еткәндәр. Тулы ҡаҙан ҡайнатып, тағы сәй эскәндәр. Һыу ингәндәр. Олтанбикә тағы Һыуһылыуҙың кейемдәрен кейеп алған. Һыуһылыу тағы әсәһенә ҡысҡырған. Инде уға икенсе төкөрөк өндәшкән:

— Ҡыҙымдың күлдәктәрен сисеп бир, юғиһә, хәҙер үк барып етеп, сәстәреңде бөртөкләрмен!..

Олтанбикә тағы күлдәктәрен сисеп биргән. Улар артабан осоп киткәндәр. Тағы ете көн, ете төн осҡандар. Унан өсөнсө диңгеҙ янына килеп еткәндәр. Тағы

һыу ингәндәр. Олтанбикә Һыуһылыуҙың күлдәктәрен тағы кейеп алған. Был тапҡыр ҙа әсәһенең өсөнсө төкөрөгө ҡыҙын бәләнән ҡотҡарған. Ҡыҙҙар ары осҡандар. Инде Һыуһылыу ел-ел арбаһын һис тә ергә төшөрмәй оса биргән. Шулай итеп, һәр бер диңгеҙ араһын етешәр көн, етешәр төн осоп бара торғас, улар етенсе диңгеҙ янына барып төшкәндәр. Был диңгеҙ, башҡаларына ҡарағанда ла ҙур булып, күк шикелле күгәреп ята икән. Ҡыҙҙар ял иткәндәр, сәй эскәндәр. Унан һуң Олтанбикә йәнә: «Әйҙә, әхирәт, һыу инәйек»,— тип ялына башлаған. Һыуһылыу башта ҡаршы торған.

— Һин минең кейемдәремде кейәһең, кәрәкмәй, инмәйем,— тигән.

— Йә, юҡты һөйләмә, әхирәт, мин шаяртып ҡына кейҙем бит уларҙы,— тигән Олтанбикә, юхаланып. Һыуһылыу ышанған. «Әхирәт булып, алдап тормаҫ инде»,— тип уйлаған ул. Етмәһә, диңгеҙ ҙә күм-күк булып, тымып ята. Уның яры буйында меңләгән аҡҡоштар йөҙәләр, баш осонда аҡсарлаҡтар осалар. Һыуһылыуҙың да шул аҡҡоштар кеүек йөҙөп уйнағыһы килгән, һәм ул, ҡурҡынысты онотоп, һыуға һикергән. Улар, аҡҡоштар менән уҙышып йөҙә-йөҙә, һыу ингәндәр. Һыуһылыу бик күп йөҙөп арығандан һуң, кейенәйем тип, яр ситенә сығып барғанда, Олтанбикә уны туҡтатҡан:

— Туҡта, әхирәт, тағы бер сумышып ҡына ҡарайыҡ инде, һыу төбөндә кем оҙағыраҡ тора алыр икән,— тигән.

— Әйҙә, сумышайыҡ, тик мин барыбер һинән оҙаҡ сумам бит инде,— тигән Һыуһылыу һәм, балыҡ

шикелле, ҡапыл ғына һыу өҫтөнә ырғып сыҡҡан да һыу төбөнә сумып киткән. Һыу өҫтө, ҙур таш ырғытҡандағы кеүек, ҡаты тулҡынланып киткән дә, һуңынан бик оҙаҡ ваҡытҡа тиклем, бер ни ҙә булмаған кеүек, тынып ҡалған.

Һыуһылыу һыу өҫтөнә ҡалҡып сыҡҡанда, һыу эсендә Олтанбикә инде булмаған. Ул, Һыуһылыу сумып китеү менән, ярға йүгереп сыҡҡан да уның бөтә кейемдәрен кейеп алған.

— Әхирәт, һин тағы шаяртырға булдыңмы ни? Ҡуйсы, бир минең кейемдәремде,— тигән Һыуһылыу.

— Бирермен бына, көтөп тор!.. Ай-һай, үҙе генә ҡәҙерле ҡунаҡ булып, ағайҙарының һылыуы булып барыр ине, бугай. Юҡ, бына күрше ҡыҙы булып барып ҡара әле, күңелле булырмы икән? — тигән Олтанбикә. Үҙе һирәк эре тештәрен ыржайтып, рәхәтләнеп көлгән.

Һыуһылыу әсәһенә өндәшеп ҡараған. Ләкин инде төкөрөктәр кипкән. Әсәнән ярҙам килмәгән, Һыуһылыуҙың ялыныуҙары ла, асыуланыуҙары ла ярҙам итмәгән. Олтанбикә уның кейемдәрен сисмәгән. Һыуһылыу, илай-илай Олтанбикәнең кейемдәрен кейеп, ел-ел арбаға менеп ултырған. Тик инде йырламаған. Олтанбикә хәҙер инде үҙе эре генә йырлап ебәргән:

*Ел-ел арбам, ел, арбам,*
*Ете диңгеҙ кис, арбам,*
*Ете ағайға ет, арбам,—*

тип йырлаған ул, Һыуһылыуға оҡшатырға тыры-

шып. Лəкин, ел-ел арба урынынан ҡуҙғалмаған. Ул тағы йырлаған, ҡарғанған, һүгенгəн, ə арба осмаған. Шунан һуң ул Һыуһылыуҙы, туҡмап, семтеп, сəстəренəн тартып, йырларға күндергəн. Һыуһылыу, күҙ йəштəрен көскə тыйып, йырлай башлаған.

*Ел-ел арбам, ел, арбам,*
*Ете диңгеҙ кис, арбам,*
*Ете ағайға ет, арбам,*
*Ете ағайға ет, арбам...*

Арба, урынынан ҡуҙғалып, бик йəһəт осоп киткəн. Улар тиҙ арала ағайҙарына барып та еткəндəр. Ҡыҙҙарҙы ел-ел арбанан күтəреп алғандар. Олтанбикə Һыуһылыуға бер генə һүҙ ҙə əйтергə бирмəгəн.

— Ағайҙарым,— тигəн ул, иркəлəнеп, иламһырап,— бынау əшəке күрше ҡыҙын үҙемə иптəшлеккə алғайным, ə ул мине саҡ-саҡ диңгеҙгə батырып үлтермəне. Күлдəктəремде, селтəр, ҡашмауҙарымды талап алмаҡсы булды. Шуның өсөн үҙен үлтереп, һыуға ташлағыҙ, ағайҙарым...

Ағайҙары Олтанбикəнең һүҙенə ышанғандар. Һыуһылыуға бик ныҡ асыуланғандар. Лəкин уны үлтермəгəндəр. Шундай һылыу һəм ҡарап тороуға бик аҡыллы һымаҡ ҡыҙҙы үлтерергə ҡулдары бармаған уларҙың. Тик уны ҡəҙерлəп өйгə алып инмəгəндəр. Ҡунаҡ итмəгəндəр. Уны йылҡы көтөүсеһе итеп ҡуйғандар.

Айҙар, йылдар үткəн, ə Һыуһылыу, һаман ҡайғы йырҙарын йырлай-йырлай, көтөү көткəн.

— Ни эшлəп гел генə моңайып йырлап йөрөй икəн был ҡыҙ? Ни йырлай икəн ул? — тип ҡыҙыҡ-

һынған уның кесе ағаһы. Ул, йәшенеп кенә, һәр ваҡыт Һыуһылыуҙың артынан күҙәткән, йырын тыңлаған. Был йырҙар уның күңелендә ниндәйҙер шик уятҡандар.

— Нисек беҙҙең һеңлебеҙ анауындай тәртешкә аяҡлы, иләк битле булыр икән? — тип уйлаған ул. Һәм Һыуһылыуҙың йырҙарында күңеленә ниндәйҙер яҡынлыҡ тойған.

Бер ваҡыт шулай Һыуһылыу, йылҡыларына һыу эсерер өсөн, уларҙы һыулауға алып төшкән саҡта, кесе ағаһы, шундағы бер ҙур ҡая ташҡа ышыҡланып, уның йырын тыңлай башлаған. Һыуһылыу көтөүен һыулауға ҡуйған да, диңгеҙ ситендәге ҡая ташҡа ултырып, йырлай-йырлай аяҡ остарына төшөп торған оҙон ҡара сәстәрен тарай башлаған.

*Оло ағайҙың аттары,*
*Оло-оло һыу эсә,*
*Кесе ағайҙың аттары,*
*Кесе-кесе һыу эсә.*
*Тәртешкә аяҡ, иләк бит*
*Һеңлегеҙме, һеҙҙеңсә?*
*Ел-ел арба яһаттым,*
*Болоттарға мин аштым,*
*Ете диңгеҙҙе үтеп,*
*Ете ағайҙы мин таптым.*
*Ағайҙарым алданды,*
*Ятты һеңел иттеләр,*
*Үҙ туғанын, көтөүсе итеп,*
*Бигерәк ныҡ кәмһеттеләр...*

Һыуһылыу йырлап бөтөүгә, ҡая таш артынан кесе ағаһы килеп сыҡҡан да уның ҡаршыһына килеп баҫҡан һәм уға, тәү күргән кеше кеүек, ғәжәпләнеп текәлгән. Ошо ваҡытта ул был ҡыҙҙың үҙәренең әсәләренә айырып алғыһыҙ оҡшағанлығын күргән.

— Беҙҙең һылыуыбыҙ бит һин!.. Һеңлем бит һин минең!.. — тип ҡысҡырып ебәргән ул.

— Ағайҡайым! — тигән Һыуһылыу һәм уның ҡосағына ташланған. Унан һуң ул бөтә булған хәлде һөйләп биргән.

— Ағайҙар, килегеҙ бында, килегеҙ! Мин үҙ һеңлебеҙҙе таныным! — тип ҡысҡырған кесе ағаһы, шатланып. Шунда уҡ бөтә ағалары, еңгәләре йыйылып килеп еткәндәр.

— Бына ошо беҙҙең һеңлебеҙ, теге түгел! — тигән ул ағаларына.

Тик өлкән ағалары быға бик тиҙ генә ышанып етмәгәндәр.

— Был һүҙгә ышанырға беҙҙең дәлилебеҙ юҡ,— тигәндәр улар. Еңгәләре лә шулай тигәндәр.

— Ел-ел арбамды килтерегеҙ, мин һеҙгә дәлил күрһәтәм,— тигән Һыуһылыу.

— Хәҙер килтерәм,— тигән кесе ағаһы ҡыуанып һәм, күҙ асып-йомғансы, ел-ел арбаны диңгеҙ ярына килтереп еткергән.

Ул арала еңгәләре Олтанбикәне лә етәкләп алып килгәндәр.

— Әйҙә, Олтанбикә әхирәт, ултыр, осайыҡ!..— тигән Һыуһылыу. Үҙе тиҙ генә ел-ел арбаға менеп ултырған. Олтанбикә ҡарышҡан, ултырырға телә-

мәгән. Ағайҙары уны күтәреп ултыртҡандар.

— Әгәр ул һеҙҙең һеңлегеҙ булһа, беҙҙең атайыбыҙ яһаған ел-ел арба уның ҡушҡанынса осор,— тигән Һыуһылыу.

Олтанбикә бөтә көсө менән тырышып йырлаған, аҡырынған, баҡырынған. Тик ҡулында теге серле алтын балдаҡ булмағас, ел-ел арба урынынан да ҡуҙғалмаған. Бынан һуң Һыуһылыу үҙе, һандуғас шикелле сутылдап, йырлап ебәргән.

*Ел-ел арбам, ел, арбам!..*

Ел-ел арба шунда уҡ ер өҫтөнән еңел генә ҡуҙғалып киткән. Ул, һауаға бик юғары күтәрелеп, болоттар араһында йөрөгән-йөрөгән дә кәйелеп ергә килеп төшкән.

— Йә, инде ни әйтәһегеҙ? — тигән Һыуһылыу ағайҙарына. Ағайҙары уны ҡосаҡлап күтәреп алғандар ҙа яңылышыуҙары, мәкерле ҡыҙҙан алданыуҙары өсөн ғәфү үтенгәндәр.

— Бына нисек булып сыға бит ул,— тигән Һыуһылыу.— Мин уны иң яҡын дуҫым, әхирәтем тип ышанып, ошондай алыҫ, ҡурҡыныслы юлға юлдаш итеп алып сыҡтым. Ә ул бына ниндәй әшәке, хыянатсы булып сыҡты!..

— Эйе, дуҫлыҡҡа хыянат итеүҙән дә яманыраҡ енәйәт юҡтыр,— тигәндәр Һыуһылыуҙың ағайҙары һәм Олтанбикәгә сикһеҙ нәфрәт, асыу менән ерәнеп ҡарағандар. Ә Олтанбикә, сәстәрен йолҡоп, ҡысҡырып илап, ергә йығылған. Кеҫәртке шикелле шыуып йөрөп, Һыуһылыуҙың һәм уның ағайҙарының аяҡтарын үбеп, ғәфү үтенә башлаған. Шул ваҡыт бы-



ғаса тып-тын ятҡан диңгеҙ сайҡалып киткән, асыулы үкереп, ҡайнап, тулҡынлана башлаған. Тау хәтле эре тулҡындар менән бергә, кеше йотор балыҡтар ҙа, ауыҙҙарын асып, яр ситенә эркелгәндәр. Һыуһылыу һәм уның ағайҙары, еңгәләре, бөтәһе лә ҡурҡып, аптырап диңгеҙгә ҡарап ҡатып ҡалғандар. Ә диңгеҙ һаман ҡотора, ярһыулана барған. Бына бер ваҡыт ул, урғып, ҡайнап, үкерә-үкерә, яр ситенә килеп сыҡҡан да ҡапыл былар торған урынды баҫып алған. Диңгеҙ кире ҡайтҡас инде, Һыуһылыу һәм уның ағалары үҙ араларында Олтанбикәне күрмәгәндәр...

Хыянатсы ҡыҙҙы йотҡас, диңгеҙ ҡайтанан тынысланған, ҡояш яҡтыһы аҫтында, меңтөрлө нур сәсеп балҡып, күҙгә күгек булып, тынып ҡалған... Ә Һыуһылыу ағаларын, еңгәләрен, ел-ел арбаһына ултыртып, аталары янына осороп алып ҡайтып киткән.

## Аҡбуҙат

Борон-борон заманда, атаһы үлгәс, әсәһе юғалғас, Һәүбән тигән бер бала биш-алты йәшендә етем тороп ҡалған, ти. Ауыр эш эшләргә йәш булғас, өйҙән өйгә йөрөп, йөҙ һыуын түгеп, һоранып тамаҡланып көн күргән, ти.

Көндәрҙән бер көндө ул яланға сығып киткән. Туғайҙағы шишмәне — көлдәй, әрмәнде тауышын — туйҙай, әтлек, йыуа, ҡуҙғалаҡты һыйҙай күреп ҡыуанған. Бара торғас, ҡурай тауышын ишетеп, тыңлаған да шул яҡҡа табан киткән, һаҙлыҡтар кисеп,



үҙән буйлап Иҙелгә ҡарай атлаған, ти. Ырғыҙ бейҙә һыйыр көткән Тарауыл ҡарттың янына барып сыҡҡан, ти. Тарауыл ҡарт Һәүбәндән исәнлек-һаулыҡ, ил-һыу именлеген һорашҡан. Һәүбән атаһы үлгәндән башлап әсәһе ғәйеп булғанға хәтле үҙ тормошон энәһенән ебенә саҡлы һөйләп биргән, ти. Тарауыл ҡарт, Һәүбәндең һүҙен ишеткәс, бик ҡыҙғанған, тәрән итеп көрһөнөп ҡуйған, ти.

— Үҙ көнөм дә ауыр, балам, һеҙҙәйҙәрҙе күрһәм, бигерәк йөрәгем һыҙлап китә шул,— тигән. Оҙаҡ уйлап ултырған да һунар ҡоралдарын йүнәтә башлаған, ти.— Балам, бынау күлгә барып әйләнәйек әле булмаһа, берәй суртан мәскәүләп булмаҫмы икән,— тигән дә, бер ҡулына мәскәүен, икенсе ҡулына һыҙмаһын тотоп, Һәүбәнде эйәртеп алып киткән, ти. Юлда барғанда, Тарауыл ҡарт Һәүбәнгә үҙенең хәлен һөйләп биргән, ти.— Балам, бейҙең бисәһе һаран, көн буйына ашап-эсергә бер табаҡ ҡатыҡ, бер баш ҡорот биреп кенә ебәрә, уның менән тамаҡ аҫрауы ҡыйын. Бына ошолай йөрөп, һыҙмам менән ҡош атам, мәскәү менән суртан мәскәүләйем. Кис ҡайтып киткәндә, ҡармаҡтарымды әрмәнде менән емләп, йәйенгә ултыртып китәм. Шулай итеп тамаҡламаһаң, йән аҫрауы ҡыйын, балам,— тигән, ти.

Һәүбән, Тарауыл ҡарт артынан эйәреп барғанда, ҡарттың ҡулындағы ҡоралдарына ҡарай-ҡарай, ҡыҙығып:

— Олатай, ошондай һыҙмам булһа, мин дә ҡош атырға өйрәнер инем, юҡ бит. Ҡош атып алһам, асҡа ҡаңғырып та йөрөмәҫ инем,— тип әйткән, ти.

Тарауыл уға: «Шулай булыр ине шул»,— тигән дә бик оҙаҡ өндәшмәй барған. Ҡулындағы һыҙмаһы Һәүбәндең атаһыныҡы булғанға, бала берәй нәмә уйлап әйтмәнеме икән, тип шикләнгәндәй булған.

— Балам, атайың бахыр бик һәйбәт һунарсы, мәргән кеше ине. Унын бик матур һыҙмаһы була торғайны, хәҙер ҡалмағандыр шул,— тип әйткән, ти. Һәүбән:

— Унын һыҙмаһы булған, тиҙәр шул. «Атайың үлгәс, кәфенлек алырға бер нәмәһе лә булманы, шунан әсәйең, бахыр, атайыңдың һыҙмаһын биреп, кәфенлек алды», тип һөйләйҙәр,— тигәс, Тарауыл ҡарт күҙ йәштәрен һөрткән дә: — Кәфенлеге булмағас, үҙенең иҫке-моҫҡоһо менән ураштырып ҡына ҡуйһа ла, арыу булыр ине лә бит, әҙәм рәтле итеп күмәйем, тигәндер инде. Нисек итһен, күп йылдар бергә ғүмер иткән юлдашы бит,— тигән. Һәүбән:

— Ай, олатай, әле һин уны һөйләйһең, булғаны булған инде, атайым үлгәс, уның етеһен, ҡырҡын уҡытырға бер нәмәһе лә булмағас, әсәйем зарланып ил араһына әҙләнеп сығып киткән, шул китеүҙән ҡайтмай ғәйеп булған, тип һөйләйҙәр. Мин, ул саҡта бәләкәй булғас, асығын белмәйем. Әсәйем ғәйеп булған инде, атайымдың һыҙмаһы ғына булһа ла, былай ҡаңғырып йөрөмәҫ инем, ҡош-маҙар атырға өйрәнер инем,— тигән һүҙҙәрҙе әйткәс, Тарауыл ҡарт, бик оҙаҡ бер һүҙ ҙә әйтмәй, уйлай барган, ти. Шунан ҡапыл, бер нәмә уйлаған кешеләй, туҡтаған да:

— Балам, йәшем алтмышҡа етте. Йәшәгән саҡлы йәшәмәм инде. Һин йәш бала әле, ҡаңғырып йөрөмә.



Мә, был һыҙманы һиңә бирәйем, бер ҡомартҡы итеп тоторһоң. Кемдән алғаныңды берәүгә лә әйтмә, бындай һыҙма Уралда юҡ,— тип ҡулындағы һыҙманы Һәүбәнгә биргән. Һәүбән ҡыуанысынан ни эшләргә лә белмәгән, Тарауыл ҡартҡа рәхмәттәр әйткән, ти. Былар суртан мәскәүләп, уны бешереп тамаҡланып, бергә ятып ял иткәндәр. Көн кискә һарҡҡас, бер-береһе менән һаулашып, икеһе ике яҡҡа киткән.

Һәүбән, йыл, ай, көн һанап үҫеп, ун ете-ун һигеҙ йәшкә етеп, һыҙма менән һунарға йөрөй башлаған.

Берҙән-бер көн, күл яғалап барғанда, бер алтын өйрәк йөҙөп йөрөгәнен күргән. Уны-быны абайлап тормаған, тоҫҡай һалып, атып йыҡҡан да йөҙөп барып өйрәкте күл ситенә яҡынлата ғына башлаған икән, теге алтын өйрәк, ҡапыл телгә килеп, һөйләй башлаған.

Шунда был алтын өйрәк:

*— Егет, атҡан һунарың*
*Өйрәк түгел, белһәң һин,*
*Күлдә йөҙөп уйнаған,*
*Данлы Шүлгән батшаның*
*Йәндәй күргән ҡыҙы мин.*
*Ай, егетем, егетем,*
*Мине күлдән сығарма,*
*Күбәләктәй йәнемдән*
*Йәшлегемде айырма.*
*Ни һораһаң, бирәйем,*
*Юлыңда ҡорбан булайым,*
*Өйөр-өйөр мал тиһәң,*
*Барын һиңә бирәйем,—*

тигән һүҙҙәрҙе әйтеп, Һәүбәнгә ялбарған, ти. Һәүбән, был һүҙҙәрҙе ишеткәс, аяҡларлыҡ ергә саҡлы йөҙөп алып килгән дә туҡтаған, аптырап ни әйтергә белмәй торған. Өйрәк һаман шул һүҙен ҡабатлағас Һәүбән, уны һыуҙан сығармай ғына, үҙенең хәлен әйтә башлаған:

*— Атам-әсәм ғүмергә*
*Көн иткәндәр тарлыҡта,*
*Мин үҫкәнмен аслыҡта,*
*Икеһе лә юҡ хәҙер,*
*Етем ҡалдым йәшлектә;*
*Морон терәр ер булмай,*
*Буй үҫтерҙем хурлыҡта.*
*Бөгөн тәүге һунарҙа*
*Юлыҡтым мин монарға,*
*Шулай ҙа мин ебәрмәм,*
*Теләһәң дә сумырға.*

Өйрәк уға былай тип яуап ҡайтарған, ти:

*— Ирәмәлдәй һарайға*
*Алтын таштар тултырған;*
*Төрлө төҫтә йылҡылар*
*Өйөр-өйөр көттөргән;*
*Бер ынтылып өргәндә*
*Тау-таш, ерҙе онтаған,*
*Ҡылыс киҫмәҫ муйынлы,*
*Батырҙарҙы туплаған;*
*Бар байлыҡҡа тороплоҡ,*
*Тарҙа серҙәш булырлыҡ*
*Аҡ* батша атайымдың*

* А ҡ — изге мәғәнәһендә.

*Һөйөп менгән аты бар —*
*Йылҡы малдың ҡото бар.*
*Ут юҡта ул ут бирер,*
*Һыу юҡта ул һыу бирер,*
*Осһоҙ-ҡырыйһыҙ диңгеҙҙән*
*Осоп сығыр ҡош булыр;*
*Ялы ап-аҡ ебәктәй,*
*Төҫө талғыр буҙ ғына,*
*Йомро ғына тояҡты*
*Баҫып тора беҙ генә;*
*Ҡамыш ҡолаҡ, баҡыр күҙ,*
*Бәбәге лә аҡ ҡына;*
*Мундаһы бейек, тар бөйөр,*
*Суртан тәнле, ныҡ ҡына;*
*Ҡарсыға морон, киң танау,*
*Ҡуш аҙаулы, һоҫа теш,*
*Осло эйәк, ас яңаҡ,*
*Ҡуш урайлы,— шул ғына.*
*Шул буҙ атты бирәйем,*
*Уралыңда һин үҙең,*
*Һыу илемдә мин үҙем*
*Бәхетле ғүмер итәйем.*

Һәүбән, был һүҙҙәрҙе ишеткәс, өйрәккә:

*— Тәмле һүҙгә алданып,*
*Ҡыу баш ҡалдым донъяла.*
*Бирер малың янда юҡ,*
*Һүҙең менән алдама,—*

тигән икән, өйрәк бынау һүҙҙәрҙе әйткән, ти:

*— Батша ҡыҙы үҙем мин,*
*Һине алдап тораммы?*

*Донъя малын ҡыҙғаныып,*
*Ергә сығып үләмме?*
*Был күл минең һарайым,*
*Көн дә ҡоштай ҡойонам;*
*Ер ҡояшы сыҡҡанда,*
*Йөҙөп, уйнап ҡыуанам.*
*Егет, мине алһаң да,*
*Ергә сыҡһам, мин үләм;*
*Өйгә алып ҡайтһаң да,*
*Бер ҡабымлыҡ ит булам.*
*Егет, һиңә ике һүҙ,*
*Һайлап, береһен тыңларһың,*
*Берен дә һайлай белмәһәң,*
*Алйотлоҡта үлерһең.*

*Егет, мине ебәр ҙә*
*Бер ҡарамай алға кит,*
*Бөтә төҫтән өйөрләп*
*Йылҡы сығыр, шуны көт.*
*Һауымы еткән һыйырҙар*
*Мөзөлдәп сығыр быҙауһыҙ,*
*Алпанлап баҫыр ҡуйҙары*
*Мөңрәп сығыр ҡуҙыһыҙ;*
*Күл шаулатып, күл ярып,*
*Ерҙә дауыл ҡуптарып,*
*Аҡбуҙ сығыр — мал ҡото,*
*Бөтә малдан һуң ҡалып,*
*Маңлайынан һыйпаһаң,*
*Телгә килеп һөйләр ул,*
*Ни эшләһәң, бар эшең*
*Һис ҡарыуһыҙ эшләр ул.*

*Алтынланған эйәрҙең*
*Ҡашына ҡамсы эленгән,*
*Болғар күндән матурлап,*
*Башына йүгән кейелгән.*
*Ҡумы, айылы — барыһы*
*Бергә ҡушып тегелгән,*
*Мәңге унан алмаҫҡа*
*Беркетелеп ҡуйылған,*
*Утлар булһа, ул үҙе*
*Башы һуҡҡан яғына,*
*Һорап тормаҫ, китер ул;*
*Бер бөртөктәй ҡыл үртәп*
*Саҡырғанда, килер ул.*
*Бөтә малың бөтһә лә,*
*Буҙ ат ҡалыр яныңда,*
*Юлдаш булыр юлыңда,*
*Батыр булыр яуында.*
*Ебәр, егет, китәйем,*
*Барына әмер итәйем,*
*Һыу иләндә мин, һылыу,*
*Рәхәт ғүмер итәйем.*

Һәүбән шунан өйрәккә былай тигән, ти:

*— Һылыу, һүҙең тыңланым,*
*Мин дә бер уй уйланым:*
*Икәү китәйек алға беҙ,—*
*Мал килерен күрәйем.*
*Һыуһыҙ үләмен, тиһәң,*
*Сарыҡҡа һыу ҡояйым,*
*Үҙеңде көнгә тейҙермәй,*
*Шул сарыҡҡа һалайым;*
*Әйткән һүҙең тап булһа,*

*Һине азат ҡылайым;*
*Һин дә ирәүән көн ит, тип*
*Теләк теләп ҡалайым.*

Шул ваҡытта Һәүбәнгә өйрәк ошо һүҙҙәрҙе әйткән, ти:

*— Мин күлемә суммайынса,*
*Малдар сыҡмаҫ далаға,*
*Саҡырыуға килмәҫтәр,*
*Һөйләп бирмәй атама.*
*Мине алып һин, егет,*
*Һис тә мандый алмаҫһың:*
*Күгәрсен туным кеймәгәс,*
*Мине төндә күрмәҫһең;*
*Йәр тип мине һөйөргә*
*Ҡуйыныңда тапмаҫһың.*
*Ергә сығып ҡыуарһам,*
*Мине һылыу тимәҫһең...*
*Ер егете ер һөйөр:*
*Тәне ерҙән яралған;*
*Һыу ҡыҙының бар ере*
*Нурҙан, уттан яралған.*
*Ҡояш һине йылытыр,*
*Мине майҙай иретер,*
*Минән аҡҡан бер тамсы*
*Илең ыуҙай ҡоротор.*

Өйрәктән был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Һәүбән ышанған да өйрәкте ебәргән. Үҙе, артына ҡарамай, өйрәк әйткәнсә, алға атлап киткән, ти. Бер аҙ киткәс тә, йылҡы сырҡыраған, ҡуй-һарыҡ мөңрәгән, һыйыр баҡырған тауыштар ишетелә башлаған. Бына бер

саҡ ел-дауыл ҡубып киткән, Һәүбән алға атлай ҙа алмай башлаған, аптыраған, ни эшләргә лә белмәгән. Ахыры түҙмәгән, артына әйләнеп ҡараған. Ҡараһа, ни күҙе менән күрһен: ер ҡаплап, мал сыҡҡан. Ә теге Аҡбуҙаттың күлдән саҡ муйыны ғына сығып килгән мәле икән. Һәүбәндең артына ҡарағанын күргәс тә, Аҡбуҙат күлгә кире сумған. Аҡбуҙаттың кире сумғанын күргәс, теге малдар, бер-береһен тапарҙай булып өркөшөп, береһе лә ҡалмай, Аҡбуҙат артынан күлгә сумышып бөткәндәр ҙә ҡуйғандар, ти.

Ел-дауыл туҡтаған. Һәүбән, үҙ күҙенә үҙе ышанмай, аптырап, ни эшләргә белмәй уйлап торған, ти. Күл ситенә лә барып ҡараған, унда ла тып-тын, ти. Ултырып уйлаған-уйлаған да мәхрүм булып ҡайтып киткән, ти. Йәйләүгә ҡайтһа, бөтә тирмә аҡтарылып бөткән, бала-саға, ҡарт-ҡоро, әбей-һәбей, бисә-сәсә, ҡыҙ-ҡырҡын — барыһы бергә йыйылып, аптырашып һөйләшеп торалар, ти. Улар янына, таяғын таянып, оҙон сыбыртҡыһын яурынына һалып, әлеге Тарауыл ҡарт та килеп еткән, ти. Уның, ауылда аҙған-туҙған малын һорашып: «Бынау һеҙҙең сиктәрәк мал көтә инем. Ғәрәсәт дауыл сығып китте лә, малдар ҙа, үҙем дә, ҡайҙа баҫып торғанды, ҡайҙа барып бәрелгәнде белмәй, тарҡалышып бөттөк. Бына шул аҙған-туҙған малдарымды эҙләп, һеҙҙең йәйләүгә килеп сыҡтым әле»,— тип һөйләп торған сағында ғына, Һәүбән дә килеп өлгөргән, ти. Һәүбән, ҡарт-ҡороларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, тыңлап торған да һүҙ ыңғайында Тарауыл ҡарттан:

— Олатай, был ниндәй күҙ күрмәгән, ҡолаҡ

ишетмәгән дауыл булды һуң? — тип һораған. Тарауыл ҡарт уға:

— Ай, ҡустым, быны сере бик күп. Быңдай дауыл беҙҙең быуында булғаны юҡ. Олатайҙар һөйләүе буйынса, хәтерҙә ҡалғаны ғына бар. Улар ошолай һөйләй торғайны: «Борон-борон заманда бөтә донъяны һыу баҫҡан, беҙҙең олатайҙар булмаған, Урал тауы сыҡмаған, был тирәлә дүрт аяҡлы йән эйәһе йөрөмәгән, тик дейеүҙәр йәшәгән, һыу батшаһы ғына баш булған саҡта, Урал тигән батыр килеп яу асҡан. Уның Аҡбуҙ толпары юлынан Урал тауы бар булған. Дейеүҙәрҙе ҡырған урында һыу ҡороп, сағылдар ҡалҡҡан. Һыу батшаһы, еңелә башлағас, төпһөҙ, ялдым-ятыу урынды эҙләп, бына ошо һеҙҙең яндағы күлгә сумған. Ул күлдең төбө юҡ, ер аҫтындағы даръяға тоташҡан. Шуға Урал батыр һыу батшаһын тота алмаған. Ул һыу батшаһы Шүлгән тип аталған. Шуға был күлде Шүлгәнкүл тип атағандар. Урал батыр үлгәс, Шүлгән батша уның Аҡбуҙатын урлатҡан. Урал батырҙың улдары ла үлеп бөткәс, һыу батшаһы, Аҡбуҙатты менеп, миҙгел-миҙгел Урал буйына сығып әйләнә торған булған. Аҡбуҙат күлдән сыҡҡанда, үҙ батырҙарын иҫенә төшөрөп, елкенеп ҡанаттарын ҡаҡһа, шул ҡанат еленән тау-таш ҡолатыр дауыл ҡуба, бер нәмә ҡалмай аҫты-өҫкә әйләнә»,— тип һөйләй торғайнылар. Был дауылды мин шулай түгелме икән тип уйлайым,— тип әйткән, ти.

Һәүбән һыу ҡыҙының һүҙе ысын икәненә ышанған. Тарауыл ҡартҡа ла, бүтән берәүгә лә күргәнен һөйләмәгән, ҡулынан килмәгән көйөнсә дауыл ҡуп-

тарып йөрөй, тип асыуланырҙар тип уйлаған.

Тарауыл ҡарт, һөйләшеп бөтөп, үҙ юлына китә башлағас, Һәүбән уны туҡтатҡан да:

— Олатай, һин кем булаһың? — тип һораған. Тарауыл ҡарт үҙенең кем икәнен һөйләп биргәс, Һәүбән, иҫенә төшөрә һалып:

— Олатай, һин мине таныйһыңмы? — тип һораған. Тарауыл ҡарт, Һәүбәндең буй-һынына, төҫ-башына ҡарап, баштан-аяҡ күҙен йөрөткән дә:

— Юҡ, ҡустым, бер ҙә сырамыта алмайым шул. Күҙем ҡайтҡан, күҙем! — тип көрһөнөп ҡуйған. Унан: — Ҡустым, былай булғас, танып китәйем инде, һин кем балаһы булаһың, төҫ-башыңа ҡарағанда, ир-егет һымаҡ күренәһең. Сура батырҙың берәй ярсығы түгелме? — тип һораған. Һәүбән шунда ҡарттың һыҙма биргәндәренә саҡлы барыһын да һөйләгәс, Тарауыл Һәүбәнде ҡосаҡлап алған да:

— Ай, ҡустым, Сура батыр арыҫлан ине, ул барҙа, был һыу батшаһы ер өҫтөнә сығып аяҡ баҫа алмай ине. Улым, мин биргән һыҙма бармы әле? — тигән. Һәүбән:

— Бар, олатай, уны йәнемдән артыҡ күрәм, бына ул һыҙма! — тип ҡулындағы һыҙмаһын күрһәткәс, Тарауыл ҡарт һыҙманы ҡулына алып тотоп ҡарап торған да үпкән, ти. Шунан Һәүбәнгә һыҙманы кире биреп:

— Ҡустым, быны биргәндә, һин бала инең, мин быныҡ серен әйтмәнем. Был һыҙма — атайыңдың һыҙмаһы. Был һыҙма — Урал батыр балаларынан ҡалған ҡомартҡы. Һыу батшаһы ошо һыҙманан ғына ҡурҡа. Ныҡ һаҡла, берәүгә лә әйтмә,— тип үҙ



уйҙарын һөйләп бөткән дә үҙ юлына киткән. Һәүбән алтын өйрәк тураһында уға һөйләмәгән, ти.

Һәүбән алтын өйрәкте аңдып күп йөрөгән. Айҙар, йылдар үткән. Һәүбән күл ситендә ҡунып һағалап та ҡараған, һис осрата алмаған.

Көндәрҙән бер көн Һәүбән, Тарауыл янына барғас, һүҙҙән һүҙ сыҡҡан да, ҡарттан күл батшаһы тураһында һөйләүен һораған. Тарауыл ҡарт:

— Ул батшаның сығып-нитеп йөрөгәнен күргән кешене белмәйем. Бер саҡ мин күл ситендә йөрөгәндә, бер ҡатын осраны. Шул ҡатын: «Бынау күлдә бер алтын өйрәк йөрөйсө, ул ниндәй өйрәк икән?» — тигәс, икәүләп күл ситенә бара һалып ҡараныҡ. Беҙҙе күргәс тә, теге өйрәк күлгә сума һалып юғалды. Мин ҡабат ҡараштырғылаһам да, ул өйрәкте һис күрә алманым. Тағы бер осрағанымда теге ҡатын: «Һинең менән беҙҙе күргәндән бирле теге өйрәк сыҡмай. Нисә айҙар буйы абайланым, гел айҙың ун дүрте етһә, төндә күгәрсен төҫлө булып сығалар ҙа, супырлашып, көлөшә-көлөшә һыу инәләр, ен ҡыҙҙары, ахырыһы», — тип һөйләне. Борон да шулай тип һөйләй торғайнылар, — тип һөйләгән. Һәүбән:

— Ул ниндәй ҡатын икән? — тигәс, Тарауыл ҡарт:

— «Мәсем хандың бала ҡараусыһы инем, ҡыҙы ошо күлгә һыу инә килгәндә, мин күҙ-ҡолаҡ булырға эйәреп килгәйнем. Шул хандың ҡыҙы ҡаш менән күҙ араһында ғәйеп булды. Шуға хан, ҡыҙымды тапмай ҡайтма, тапмаһаң, күл ситендә асҡа үл, бер ергә лә китмә, тип ҡалдырҙы. Шунан бирле асҡа ҡаңғырып йөрөйөм», — тип, ҡанлы күҙ йәше менән һөйләп, илай торғайны ул ҡатын. Хәҙер уға күп йылдар булды инде, — тип барыһын да һөйләп биргән.

Һәүбән Тарауыл ҡарттың һөйләгән һүҙҙәрен барыһын да эсенә алып ҡына торған да, унан айырылғас, айҙың ун дүртенсе кисе еткәс, күл ситенә барған. Төн аяҙ, тымыҡ, шылт иткән нәмә лә юҡ. Бер аҙ һағалап ятһа, бына күлдең бер яҡ ситендәрәк тупырлап һыу ингән тауыш ҡолағына салынған. Һәүбән



ер ҡырлап ҡына шыуышып ҡараһа, өйрәк түгел, алтын тәхет өҫтөндә алтын сәстәрен һалындырып, бер ҡыҙ сәс тарап ултыра, уның тирәһендә күк күгәрсендәр уйнап йөрөй, ти. Һәүбән ипләп кенә барған да һиҙҙермәй генә теге ҡыҙҙың сәсенән урап тотҡан, ҡыҙ һиҫкәнеп киткән. Теге күгәрсендәр осоп киткән, ти. Һәүбән ҡыҙҙың сәсен ебәрмәйенсә:

*— Һылыу төҫөн алышҡан:*
*Өйрәк түгел, ҡыҙ икән,—*

тип әйткән. Был ҡыҙ баяғы һыу батшаһының ҡыҙы икән. Шунда ул ҡыҙ Һәүбәнгә:

*— Мине ҡайҙан тап иттең*
*Төн уртаһы сағында?*
*Нисә ҡараусым бар бит,*
*Ҡарап тора янымда!*
*Егет, ебәр, сәсемде,*
*Бүлдермә һин эшемде!*
*Күгәрсендәр киттеләр,*
*Илгә хәбәр иттеләр.*
*Атам белһә был эште,*
*Һис аямаҫ башыңды! —*

тип әйткән. Һәүбән ҡыҙға:

*— Һылыу, әйтсе атыңды,*
*Бер һөйләрмен дан итеп,*
*Йә булмаһа ҡайтайыҡ,*
*Бергә торайыҡ көн итеп! —*

тигән икән, ҡыҙ уға:

*— Егеткәйем, шаулама,*
*Атым һорап даулама,*
*Хатта мине күргәнде*
*Илгә ҡайтып һөйләмә!*

*Егет, һиңә тиң булмам,*
*Мине алырға уйлама;*
*Нурҙан тыуған тоҡоммон,—*
*Ерҙә йөрөтөп хурлама.*
*Ер улына тиң булмаç*
*Нурҙан тыуған ҡыҙ бала;*
*Һарайҙа үçкән ҡыҙҙар ҙа*
*Мөлхәтһенмәç далала.*
*Егет, һүҙең оҙайтма,*
*Атам килһә, яу һалыр;*
*Илең туҙандай ҡалыр,*
*Тоҡомоңдо юҡ ҡылыр,—*

тип әйткән. Быны ишеткәс, Һәүбән ҡыҙға былай тигән:

*— Һине эҙләп күп йөрөнөм,*
*Ай тыуғандарын көтөп;*
*Инде, һылыу, ебәрмәм,*
*Илаһаң да ут йотоп.*
*Егет тигән дәүеремдә*
*Күңелем һис ниҙән ҡурҡмаç,*
*Батыр егет йөрәге*
*Ҡоро ҡапаҡтан* өркмәç.*
*Яу асһа ла атайың,*
*Тайшанмаçҡа уйым бар.*
*Яңғыҙлатмаç үҙемде*
*Урал тигән илем бар.*

Егет был һүҙҙәрҙе әйткәс, ҡыҙ уйға ҡалған. «Атам данын әйткәс тә ҡурҡманы, был ниндәй егет

---

* Ҡапаҡ — ҡарасҡы.

икән»,— тип уйлаған. Шунан ул Һәүбәнгә бынау һүҙҙәрҙе әйткән, ти:

*— Егет, батырмын тиеп,*
*Тау ярырҙай һөйләйһең;*
*Атам илен һаҡлаған*
*Дейеүҙәрҙе белмәйһең.*
*Теге мәлде үҙеңә*
*Йылҡы малы әйҙәнем,*
*Йылҡы менән китергә*
*Аҡбуҙатты димләнем.*
*Йылҡы сыҡҡан сырҡырап.*

*Һыйыр, һарыҡ мөң(ө)рәп,*
*Бары бергә ҡушылып,*
*Хан малындай эркелеп.*

*Улар артынса ажғырып,*
*Шүлгән күлен яғалап,*
*Аҡбуҙат та сыҡҡан бит,*
*Ғәйрәт сәсеп, баҫмалап.*
*Күлде ярып елкенгән,*
*Һине күрергә ынтылған;*
*Уның ғәйрәт еленән*
*Урал тауы һелкенгән.*

*Түҙә алмай, батыры*
*Ҡолап төшкәс һыртына,*
*Аҡбуҙат та, ғәрләнеп,*
*Кире ҡайтҡан йортона.*

*Шулай толпар ат менгән,*
*Дейеү-пәрейҙе йыйған,*
*Һыу йәненең барыһын*
*Үҙ ҡулында туплаған*

*Шүлгән күле батшаға*
*Кем булаһың уҡталған?*

Ҡыҙҙың был һүҙҙәренә Һәүбән бынаулай тип яуап ҡайтарған, ти:

*— Атаң бында хан булһа,*
*Дейеү-пәрейҙең барын*
*Тирәһенә туплаһа,*
*Аҡбуҙ толпарын менеп,*
*Ел-дауылдар ҡуптарһа,*
*Уҫаҡ япрағындай ҙа*
*Йөрәгем өшөп һелкенмәҫ!*
*Ун ике башлы дейеүең*
*Иләмә утын һалһа ла,*
*Уралымда дау асып,*
*Сергелектән ҡан ҡойоп,*
*Иләмә яу һалһа ла,*
*Һис ҡурҡмамын атаңдан,*
*Йөрәгемә уҡ атһа ла!*
*Сура батырҙан ҡот йыйып,*
*Батыр тыуған затым бар;*
*Етем-еҫер күҙ йәшен*
*Һыҡратмаҫҡа антым бар.*
*Һылыуҡайым, маһайма,*
*Шүлгән күле тәрән, тип,*
*Атам илдә ҙур батша,*
*Дейеүҙәрҙе йыйған, тип,*
*Уралда илаған етемдең*
*Күҙ йәше аҡһа, күл булыр,*
*Ҡәберен ағыҙып батырҙың*
*Юшҡын түкһә, сүл булыр.*
*Һыуҙа йөҙгән ҡыҙ бала*

*Ҡайҙа һыулау табыр ул?*
*Шүлгән һайыҡһа юшҡындан,*
*Ике башлы дейеүҙәр*
*Ҡайҙа ялдым* табыр ул?*
*Ил зарына моңайған*
*Иңләп ятҡан Уралым,*
*Йылғыр аҡҡан Иҙелем,*
*Тоноҡ аҡҡан Яйығым.*
*Нөгәр** йыйып йәшәргә*
*Атаңа торлаҡ бирмәҫ ул.*

Ҡыҙ, Һәүбәндән был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡурҡып киткән дә уға бынау һүҙҙәрҙе әйтеп һалған, ти:

*— Егет, һүҙең һүҙ булһын,*
*Һиңә антым бирәйем,*
*Үҙеңде алып илемә,*
*Атам торған еремә,*
*Ҡан-яу асмай арала,*
*Һоҡланғаның бирәйем.*
*Алтын һарай эсендә*
*Мамыҡ түшәк йәйәйем,*
*Ни теләһәң алырға,*
*Һорағаның бирәйем.*
*Илем гиҙеп йөрөрһөң,*
*Бар һарайҙы күрерһең,*
*Мине Нәркәс тип һөйһәң,*
*Һарайымда ҡалырһың.*
*Беҙҙә толҡа тапмаһаң,*
*Мөлхәтһенмәй барына,*

---

* Я л д ы м — һыуҙың иң тәрән ятыуы.

** Н ө г ә р — һуғышсы, хәрби хеҙмәткәр.

*Шүлгән һарай иленә,*
*Нәркәстәй хур ҡыҙына,—*
*Аҡбуҙ толпар менерһең,*
*Ҡулға бәхетең туплап,*
*Уралыңа елерһең.*

Һәүбән, ҡыҙҙың был һүҙҙәрен ишеткәс, уның аты Нәркәс икәнен белгән. Нәркәстең үҙ һүҙендә торор-тормаҫына ышаныр өсөн, уны тағы бер тапҡыр ант иттергән. Шунан улар икәүләп һыу батшаһына китергә булғандар. Нәркәс күҙ йоморға ҡушҡан. Һәүбән күҙен йомған. Күҙен асырға ҡушҡан. Һәүбән күҙен асһа, ҡыҙҙың алтын һарайында тора, ти, был. Һәүбән унда бер нисә көн ҡунаҡ булған. Һарай ҡыҙҙары йырлап-бейеп ҡунаҡ иткәндәр, тик Һәүбән бер ҙә күңел биреп ашамаған-эсмәгән, ти. Нәркәс Һәүбәндең бойоҡҡанын, толҡа тапмағанын һиҙгән дә атаһына барған, үҙ хәлен баштан-аяҡ ошолай һөйләп биргән, ти:

— *Шүлгән тигән ҙур күлең*
*Һыулау булды йәшемдән.*
*Уйнап-көлдөм эсендә,*
*Һис йәш түкмәй ҡайғымдан.*
*Ун һигеҙгә еткәнсе,*
*Күп һунарсы осраттым,*
*Күптәр тоҫҡап атһа ла,*
*Барынан да яҙлыҡтым.*
*Алтын өйрәк тун кейһәм,*
*Ер ыласыны һиҙмәне,*
*Кистең йылғыр еле лә*
*Сәсем һыйпап һөйөргә*

*Ҡара башлы ҡамыштан*
*Үтер юлын белмәне;*
*Ҡамыштағы ҡама ла*
*Һыу инғәнем һиҙмәне.*
*Аҙаҡ тапҡыр береһендә*
*Өйрәк булып атылдым,*
*Ай нурына мансылып*
*Һыу инғәндә тотолдом.*
*Ерғә сыҡһам, үлә инем,*
*Һүҙем биреп ҡотолдом,*
*Атың әйтеп ант иттем*
*Арала ут асмаҫҡа,*
*Батыр һоҡланған заттан*,*
*Атай, һаранланмаҫҡа.*
*Бына, атай, ул батыр*
*Һарайымда ҡунаҡта,*
*Антым шулай ҙур булғас,*
*Ҡунаҡ иттем аулаҡта.*
*Бына һүҙең әйт, атай,*
*Минең антҡа торорлоҡ.*
*Мәргән батыр — алдыңда,*
*Уның күңеле булырлыҡ*
*Бүләгең бир малыңдан;*
*Инде малың ҡыҙғанһаң,*
*Үҙем барыр уйым бар.*

Ҡыҙынан был һүҙҙәрҙе ишеткәс, батша бик аптырауға ҡалған. Унан һуң үҙенең вәзирҙәрен йыйып, Ҡәһҡәһә тигән ун ике башлы дейеүен саҡырып алып,

* Зат — аҫыл әйбер мәғәнәһендә.

уларға кәңәш иткән, ти. Ҡәһҡәһә батшаға былай кәңәш биргән, ти:

*— Буҙ ат бирһәң егеткә,*
*Көсөң китер ҡулыңдан.*
*Буҙ ат китһә ҡулыңдан,*
*Айырылырһың юлыңдан.*
*Һыңар башлы аждаһаң*
*Уға күренер мунсаҡтай;*
*Ике башлы аждаһаң*
*Уға күренер янсыҡтай;*
*Өс дәү башлы аждаһаң*
*Уға күренер турһыҡтай;*
*Илең тотҡан Ҡәһҡәһәң,—*
*Ул да ҡалыр бурһыҡтай,*
*Батшам, һиңә бер аҡыл:*
*Һарайың тулы ер ҡыҙы,*
*Үҙ ҡыҙыңдан да һылыу*
*Мәсем хандың бер ҡыҙы.*
*Уны күрһә, ул егет*
*Аҡбуҙатты онотор,*
*Бер ҡарыуһыҙ, алам тип,*
*Егет шуға ынтылыр,—*

тип әйткән, ти. Батша, Ҡәһҡәһәнең был кәңәшен хуп күреп, урлап килтерелгән ҡыҙҙар һарайына Нәркәс менән бергә Һәүбәнде ебәрмәк булған, ти. Шунда батша Нәркәсте саҡырып алған да уға:

*— Балам, күңелең хуш булһын,*
*Егеткә бирәм теләгең,*
*Һинең ҡәҙерең тағы артһын,*

*Күреп сыкһын байлығым.*
*Һарайҙарға алып бар,*
*Һарай кыҙҙарын күрһен,*
*Һис бер кыҫымға калмай,*
*Кыҙҙар менән һөйләшһен,—*

тип әйткән, ти. Нәркәс, атаһының был бойороғон ишеткәс, Һәүбәнгә бөтә һарайҙы күрһәтеп сыкмак булған. Улар күп һарайҙарҙы үткәс, бик ҙур бакса аша сығып, бер алтын һарайға барғандар. Был һарайға еткәс, Нәркәс Һәүбәнгә:

*— Был һарайҙа мин әйткән*
*Данлы толпар Буҙ ат бар;*
*Танау тартып ажғырыр,*
*Күҙенә теклән карап тор;*
*Якын килеп сапсынһа,*
*Алдына барып баҫып тор,*
*Тибергә тип, арт бирһә,*
*Янбашынан һөйөп тор.*
*Колактарын шымайтһа,*
*Ер батыры мин, тип көл.*
*Шунан килер янында,*
*Һыртын һыйпап һөйөрһөң;*
*Ялынан алып ике кыл,*
*Беләгеңә бәйләрһең;*
*Койроғонан ике кыл*
*Аяғыңа бәйләрһең,—*

тигән дә, һарайҙы асып, уны Акбуҙат янына индергән, ти.

Акбуҙат, Һәүбәнде күргәс, үрә һикереп, танау тартып ажғырып ебәргән, ти. Һәүбән унан курк-маған. Акбуҙаттың янып торған бакыр күҙенә теклән

ҡарағас, Аҡбуҙ, башын сайҡап, ҡырғараҡ барып торған да алғы аяҡтары менән сапсына башлаған. Аҡбуҙаттың сапсынған аяҡ тауышын ишетеп, һаҡлап торған дейеүҙәр һарай түбәһенән килеп төшә башлағандар. Дейеүҙәрҙең ярҙамға килгәнен күргәс, Аҡбуҙат, бөтә асыуы менән Һәүбәндең алдына килеп, баштарын сайҡап, сапсырға ынтыла башлаһа ла, Һәүбән һис тайшанмай ҡаршы барған, ти. Аҡбуҙ, Һәүбәнде былай ҙа ҡурҡыта алмағас, әйләнеп типмәксе булған икән, Һәүбән уның янбашынан һөйгән. Аҡбуҙат, былай ҙа булдыра алмағас, ҡолаҡ шымайтып, Һәүбәндең өҫтөнә ырғымаҡ булған икән, Һәүбән, уға ҡарап:

*— Аҫау тотоп өйрәткән*
*Урал батыры Һәүбән мин,*
*Батыр һөймәҫ ат һуйып,*
*Итен ейгән* батыр мин.*
*Һаҙаҡ теймәҫ Нәркәсте*
*Атып алған Һәүбән мин.*
*Урал тигән илемде*
*Яуҙан һаҡлар батыр мин,—*

тип әйткән икән, Аҡбуҙат айбанған, ти. Уның айбанғанын күргәс, дейеүҙәр ҙә берәм-берәм һарайҙан шыла башлаған. Һәүбәндең батырлығын күргән Аҡбуҙат, яңғыҙ ҡалғас, Һәүбәнгә килеп башын эйгән, ти. Быны күргәс, Һәүбән Нәркәс әйткәндәрҙең барыһына ла ышанған. Аҡбуҙаттың ял-ҡойроғонан ҡыл алғас, Аҡбуҙ былай тип әйткән, ти:

*— Егет, ерҙең батыры*
*Һәүбән батыр һин булһаң,*

---

* Е й г ә н — ашаған.

*Йомро тояҡ йылҡыла*
*Ат толпары мин булам.*
*Ялым һиңә көс бирер,*
*Ҡылыс тотһаң ҡулыңда;*
*Ҡойроҡ ҡылым көйҙөрһәң,*
*Янына сабып килермен,*
*Ат булырмын яуыңда.*

Аҡбуҙат ошо һүҙҙәрен әйткән дә, Һәүбәнде үҙ батырындай күреп, уның алдында ҡолаҡтарын ҡайсылап, иркәләнеп торған, ти. Шунан Һәүбән, Аҡбуҙатты һыртынан һөйөп, уның янынан сығып киткән. Нәркәс Һәүбәндең сыҡҡанын ҡырҙараҡ көтөп тора икән. Уның иҫән-һау сыҡҡанын күргәс, шатлығын белдереп, өндәшмәй генә йылмайып ҡуйған да ҡыҙҙар һарайына эйәртеп алып барған, ти. Һарай ҡапҡаһы төбөнә еткәс, Нәркәс, Һәүбәнгә был һарай тураһында һөйләп, былай тигән:

*— Һарай тулы ҡыҙ булыр,*
*Һылыуҙары күп булыр,*
*Аралап күҙ һалырһың,—*
*Айҙан яҡты йөҙ булыр;*
*Ике бите уйылып,*
*Ҡара ҡашы ҡыйылып,*
*Оҙон керпеге аша*
*Ҡарап көлгән күҙ булыр;*
*Ҡарсығалай түш киргән,*
*Толомон сәсмәүләп үргән,*
*Ынйылай теш йылтыратып,*
*Наҙлы көлгән ҡыҙ булыр.*
*Бал ҡортондай билле үҙе,*
*Йөрәгеңә ятырҙай,*

*Айһылыу тигән ҡыҙ булыр;*
*Уралдан урлап алынған,*
*Мәсем хандың ҡыҙы ул.*
*Ҡыҙҙы һөйһәң, атамдан*
*Шуны һора, бирер ул.*
*Уралға алып китерһең,*
*Атаһына илтерһең,*
*Ханға кейәү булырһың;*
*Егет, тағы онотма,*
*Бында шундай ҙур сер бар:*
*Был һарайҙан сыҡҡас та,*
*Убыр ҡарсыҡ ҡаршылар,*
*Һине һүҙ менән арбар,*
*Һәрмәнгеләп юхалар.*
*Ҡулың бирмә тоторға,*
*Аяғың бирмә һөртөргә.*
*Барын эшләп бөткәс тә,*
*Күл ситенә сыҡҡас та*
*Ҡойроҡ ҡылын көйҙөрһәң,*
*Ел-дауылһыҙ янында*
*Аҡбуҙатты күрерһең.*

Һәүбән, Нәркәстән был һүҙҙе ишеткәс, бер аҙ таң ҡалып торған да, уға ҡарап:

*— Атаңа әйтмәҫ сереңде*
*Миңә әйттең, һылыуҡай,*
*Илгә сәсмәҫ сереңде*
*Миңә сәстең, һылыуҡай.*
*Был сереңде әйтеүең*
*Дуҫ күрепме, һылыуҡай?*
*Мине һынап, ялтып,*
*Үҙ күрепме, һылыуҡай?*

*Миңә әйтсе бер һүҙең,*
*Кер ҡалдырмай, һылыуҡай,*
*Һине һөйһәм, ни була,*
*Күңелем яттан алдырмай?*
*Күктең айы һылыуҙа*
*Ҡояш һөйгәс йөҙөнән,*
*Ҡояштан нур алғанға,*
*Гөл үптермәй үҙенән.*
*Айһылыуҙың йөҙө лә*
*Тыштан ғына көлһә ул,*
*Күңеле нурлы булмаһа,*
*Айҙай ғына булыр ул,—*

тигән. Нәркәс быны ишеткәс, бик оҙаҡ уйлап торған да:

*— Егет, аҙаҡ серем шул:*
*Һиңә булмам, уны бел.*
*Ерҙә булған батырға*
*Атам бирмәç, бәхил бул!*
*Егетем бар һөйөлгән,*
*Батыр булып танылған,*
*Сер тотоуҙа ир булып*
*Үҙ янымда һыналған.*
*Уны мәңге ташламам,*
*Уны ситкә бирмәмен:*
*Атын да һис әйтмәмен;*
*Йөрәгемдә яғылған,—*

тип әйткән, ти. Һәүбән ҡыçташмаған. Нәркәс Һәүбәнде ҡыҙҙар һарайына индереп ебәргән. Һәүбән, һарайға ингәс, иçәнлек-һаулыҡ һорашып, бар ҡыҙҙарға ла күҙ ташлаған. Айһылыу бөтә ҡыҙҙар араһында бер үҙе айырылып тора икән, ти. Ул Һәүбәнгә

табан килгән дә бынау һүҙҙәрҙе әйткән, ти:

*— Төҫөң-башың, егеткәй,*
*Ер егетенә оҡшай.*
*Тылсымдарҙы уҙа алып,*
*Нисек килдең һин былай?*
*Уралда уйнап-көлгән*
*Иркә ҡыҙҙарҙы ташлап,*
*Һулыған йөҙлө ҡыҙ көҫәп*,*
*Нишләп килдең һин былай?*
*Әллә Шүлгән ҡоропмо,*
*Батшалары үлепме,*
*Күп илаған күҙ йәштән*
*Ерҙә даръя булыпмы?*
*Әллә Уралда ат менгән,*
*Илен йәнендәй һөйгән*
*Батырҙары ҡырылып,*
*Бары балыҡ булыпмы?*
*Әллә Уралда түгелгән*
*Ир-егеттәр ҡанының,—*
*Зар илаған әсәләр*
*Һыҡҡырап биргән һөттөң*
*Иҙеләндә ҡойоноп,*
*Дейеүҙән дә ҡурҡмаҫтай,*
*Шүлгәндә лә батмаҫтай,*
*Һыу батшанан өркмәҫтәй,*
*Йәшкә батҡан Уралын*
*Көләс итер беләкле,*
*Арыҫландай йөрәкле*
*Йәш батырҙар үҫепме?*

---

* Көҫәп — теләп.

Һәүбән Айһылыуҙың был һүҙҙәренә ҡаршы былай тип яуап биргән, ти:

*Әрмәнде йөҙгән күлдәрҙә*
*Батҡан батыр булырмы?*
*Утыҙ тешенә аш әҙләп,*
*Кисен йоҡо туйҙырған;*
*Киң Уралдың буйында*
*Үҙе лә көләс ҡыҙҙарҙы*
*Моңон сәсеп көлдөргән;*
*Ҡоно* булмаҫ өйрәкте*
*Атып, итен ейҙергән;*
*Балаға ла буй биргән*
*Йылҡы тотоп, ат менгән;*
*Кирәгә бауын төн киҫеп,*
*Ҡыҙҙар урлап йәр һөйгән;*
*Ауҡан** тынлыҡ урманда*
*Шаңҡып йырын йырлап*
*Илаған батыр булырмы?*
*Уралдың һылыу ҡыҙҙары*
*Һыу төбөндә һарайҙа*
*Ҡан илаһа бығауҙа,*
*Шул бығауҙы сисмәһә,*
*Уралға ул булырмы?*
*Иленә батыр булырмы?*

Һәүбәндең был һүҙҙәрен ишеткәс, ҡыҙҙар барыһы ла әсе күҙ йәштәрен түгеп, уны урап алғандар, ти. Һәүбән дә быларҙы ҡыҙғанған, күҙ йәштәре сыҡһа ла, ҡыҙҙарға һиҙҙермәҫкә тырышҡан. Шунан Һәү-

---

* Ҡ о н — үс.

** А у ҡ а н — иркен, киң.

бән, ҡыҙҙар менән һаулашып, һарайҙан сыҡҡан.

Һәүбән сығыуға бер ҡарсыҡ уның алдына килгән дә былай тигән, ти:

*— Егет, егет икәнһең,*
*Шүлгән күлдә булғанһың,*
*Алтын өйрәк атҡанһың,*
*Хан һарайға килгәнһең,*
*Хандың һылыу ҡыҙына*
*Оҡшар егет булғанһың.*
*Хан ҡыҙы һөйә лә һине,*
*Егете барға тартына.*
*Һиңә хәйлә өйрәтәм,*
*Ҡулың бирсе ҡулыма,—*
*Бер типкәндә ватырһың*
*Егетенең һарайын,*
*Ҡыҙын үҙең алырһың,*
*Бир аяғың үбәйем —*
*Үҙеңә көс бирәйем.*

Һәүбән, ҡарсыҡҡа ҡулын бирмәйенсә, уйға ҡалған. Нәркәстең ҡарсыҡ тураһында һөйләгән һүҙеме, ҡарсыҡ һүҙеме,— ҡайһыһы раҫ икәненә ышана алмайынса, оҙаҡ уйлап торған. Шунан, ҡарсыҡ тураһында һорашмаҡ булып, ҡабат Айһылыу янына инергә уйлаһа ла, ҡапҡаны ҡабат аса алмаған, ти. Шулай ҙа ул Нәркәс һүҙен тотҡан: ҡарсыҡҡа ҡулын да, аяғын да бирмәй, китә башлаған. Быны күргәс, теге ҡарсыҡ:

*— Егет, батыр икәнһең,*
*Үҙең серле икәнһең:*
*Ебәк менән уралған,*
*Алтын менән ҡоршалған,*

*Ынйы менән биҙәлгән,*
*Ел-ямғыр ҙа теймәгән,*
*Керпеге йәш күрмәгән,*
*Күңеле ғәм белмәгән,*
*Сит намыҫын ер итеп,*
*Күҙ йәштәрен күл итеп,*
*Күңел асып йәшәгән,*
*Һине ерҙәй һанаған,*
*Үҙен көнгә тиңләгән*
*Ҡыҙға мине тиңләйһең!*
*Минең алһыу йөҙҙәрем*
*Буштан ғына кипмәгән,*
*Маңлай күҙең булһа ла,*
*Күңел күҙең юҡ икән.*
*Алтын ҡалаҡтан ашап,*
*Мамыҡ түшәктә йоҡлап,*
*Гөл эсендә уйнаған*
*Ҡыҙҙы миндәй күрәмһең?*
*Минең һүҙгә ышанмай*
*Бәхетең уртаҡ буләмһең? —*

тигән һүҙҙәрҙе әйткән, ти. Һәүбән, оҙаҡ уйлап торғас, ҡарсыҡҡа яҡын килеп, унан былай тип һораша башлаған:

*— Йөҙөң-башың, әбекәй,*
*Йонсоғандай күренә,*
*Күкрәгеңдән сыҡҡан һүҙ*
*Тонсоғандай күренә.*
*Был илдә бер яңғыҙмын,*
*Серең һөйлә, әбекәй.*

Ҡарсыҡ Һәүбәнгә:

*— Ышанмаҫ иргә сер һөйләү*

*Башыма яҙыҡ булыр ул;*
*Ҡурҡаҡ иргә һүҙ һөйләү*
*Башыма ҡаҙыҡ булыр ул.*
*Ҡулың тотһам, күкрәгем*
*Үҙе телһеҙ һөйләр ул;*
*Аяғың тотһам, юлдарың*
*Үҙе асыҡ булыр ул;*
*Телем асып һөйләһәм,*
*Батша телем киҫер шул,—*

тип әйткән, ти. Һәүбән, тәрән уйға батып, ни эшләргә белмәй торғанда, Нәркәстең килгәне күренгән, ти. Уның килгәнен күргәс, теге ҡарсыҡ был ерҙән киткән. Нәркәс, Һәүбәндең эргәһенә килеп:

*— Әйҙә, егет, һуңлама,*
*Минең һүҙҙе ташлама!*
*Атам көтә ҡунаҡҡа*
*Һарайында, шаулама.*
*Атам урын биргәндә,*
*Уң яғынан алырһың;*
*Атам һыуһын биргәндә*
*Һул ҡул менән алырһың;*
*Атам ашын биргәндә,*
*Ике ҡуллап алырһың;*
*Атам бысаҡ биргәндә,*
*Уң ҡул менән алырһың;*
*Атам ҡарап көлгәндә,*
*Уң күҙеңде ҡыҫырһың;*
*Атам аяҡ һуҙғанда,*
*Ҡул ҡаушырып торорһоң;*
*Атам тороп киткәндә,*
*Ҡырын ятып ҡалырһың;*

*Атам ҡылыс тотҡанда,*
*Теш һыҙыҡлап торорһоң;*
*Атам һуҙһа ҡулдарын,*
*Кире артҡа китерһең;*
*Шунан һарай һелкенер,*
*Унан ҡурҡмай көлөрһөң.*
*Ошоноң барын эшләһәң,*
*Айһылыу менән икеңде*
*Үҙ ереңдә күрерһең,—*

тип әйткән, ти. Һәүбән шул ерҙә ризалыҡ белдергән дә, Нәркәстең һүҙен бүлеп:

*— Был сереңдең айышын*
*Һорап белеп буламы?*
*Әллә һарай эсендә*
*Теҙелеп килгән йоламы? —*

тип һораған. Был һорауҙы ишеткәс, Нәркәстең төҫтәре үҙгәреп, Һәүбәнгә текләп ҡарап торған да уны ҡосаҡлап үпкән, күҙҙәренән мөлдөрәп йәш сыҡҡан, ти.

Һәүбәнде шунда йоҡо баҫҡан, ти. Битенә ҡояш төшкәнгә һиҫкәнеп китеп, күҙен асып ҡараһа, алдында Нәркәс тә, һарайҙар ҙа юҡ, ти. Бөтә күргәндәрен, әллә төш кенә булдымы, тип уйлап, күҙен ситкә йүгертһә, үҙенән алыҫ түгел күл ситендә Аҡбуҙат ҡолаҡтарын ҡайсылап тора, ти. Уның янында Айһылыу ултырғанын күргәс, Һәүбән бигерәк тә аптыраған. Нәркәс үпкәләгәндәй булды, атаһы янына ла барманым, был ҡыҙ менән Аҡбуҙат ни эшләп бында сыҡҡан, ҡыл көйҙөрөп саҡырманым да баһа, тип аптырап торғанда, Аҡбуҙат, Һәүбән янына килеп:

*— Нәркәстән һорашмаһаң,*
*Шаһ һарайын аскайның,*
*Тәхетенән төшөрөп,*
*Һыуға батша булғайның.*
*Нәркәс һылыу матурҙың*
*Бергә туйын ҡылғайның.*
*Ҡарсыҡҡа ҡулың бирһәң,*
*Үҙ әсәңде тапҡайның;*
*Унан аяҡ үптерһәң,*
*Атаң ҡонон тапҡайның,*
*Айһылыу тигән матурҙан*
*Айырылып ҡалғайның,—*

тип әйткән, ти. Һәүбән быға бик аптыраған, серҙе аңламағас, сәбәбен һораған. Аҡбуҙат уға былай тип аңлатҡан, ти:

*— Мине менер ир булһаң,*
*Ҡуйыныңа ел тулмаһын,*
*Ҡайҙа барһаң, уяу бул,*
*Ауыҙың асыҡ булмаһын!*
*Бөгөн һөйгән йәреңдең*
*Күңеле бер тип уйлама!*
*Күңеле китһә, ят булыр,*
*Тирә-яғың ут булыр.*

Айһылыу, Аҡбуҙаттың был яуабын ишеткәс, бик күңелһеҙләнгән, тик быны Һәүбәнгә лә, Аҡбуҙға ла белдермәгән, ти. Һәүбән шунда, теҙгендәрен рәтләп, Аҡбуҙатҡа мengән дә Айһылыуҙы үҙ янына саҡырып алған. Улар икәүһе Аҡбуҙатҡа менгәшеп Мәсем хандың һарайына киткәндәр. Һәүбән, һарайға яҡынлағас, атын туҡтатҡан да Айһылыуҙан: «Бергә

инәбеҙме, башҡа-башҡа инәбеҙме?» — тип һораған ти. Айһылыу:

*— Егет, мин бик аҙаным,*
*Күҙ ышанмай күргәнгә;*
*Шулай ҡотолдоммо, тип*
*Аҡылым етмәй уйларға;*
*Ни әйтергә белмәйем*
*Һинең әйткән һорауға;*
*Ҡарыш ситкә тайпылһам,*
*Тағы дошман алыр, тип*
*Үҙ башымдан ҡурҡамын;*
*Һиңә, бергә бар, тиһәм,*
*Урлаусы һин икән тип*
*Уйларҙар, тип ҡурҡамын,—*

тип әйткән, ти. Һәүбән быға ҡаршы:

*— Минең башым һау булһа,*
*Ҡабат дошман ала алмаҫ,*
*Атаңа бергә барһаҡ та,*
*Беҙгә яла яға алмаҫ.*
*Шулай ҙа һин яңғыҙың*
*Ҡайтып һөйлә атаңа,*
*Атаң һүҙең тыңлаһын,*
*Асыҡ белһен дошманын.*
*Йөрәге етһә атаңдың,*
*Оран һалһын йортона:*
*Шүлгәнгә яу асырға,*
*Унан ҡонон алырға.*
*Мин килермен бер аҙаҡ*
*(Атаң яйын белгән һуң,*

*Батырҙарын йыйған һуң)*
*Барымтаға* барырға,—*

тигәс, Айһылыу атаһы Мәсем хандың һарайына бер яңғыҙы ғына ҡайтмаҡ булған. Һәүбән уны яман ҡаялар, урмандар, яман һыу-күлдәр аша оҙатҡан. Үҙе Аҡбуҙаты менән ҡалған. Аҡбуҙ менән ҡасан осрашыу тураһында һөйләшә башлағас, ул Һәүбәндең уйын белгән дә шунда уҡ ғәйеп булған, ти. Һәүбән, уның ғәйеп булыуына аптырап, ҡыл көйҙөрөп саҡырырға уйлап ҡына торғанда, Аҡбуҙат, ҡайҙандыр иҫке кейемдәр алып, Һәүбән янына килеп еткән, ти. Һәүбән был кейемдәрҙе кейгән дә, Аҡбуҙатты оҙатып, үҙе Айһылыу артынан Мәсем хан йортона киткән.

Һәүбән Мәсем хан торған йәйләүгә барып еткәндә, халыҡтың ҡырмыҫҡа һымаҡ ҡайнап, төрлө ерҙә эркелешеп, йыйылып һөйләшкән сағы булған. Халыҡ янына барып, именлек-һаулыҡ һорашҡан да үҙен бер юлаусы итеп күрһәткән. Халыҡтың һүҙен тыңлап тороп, хан ҡыҙының ҡайтыу хәбәре бөтә халыҡ телендә ҙур яңылыҡ итеп һөйләнгәнен белгәс, хан һарайы тирәһендәге төркөмгә табан атлаған. Шул саҡта урта йәштәрҙәге бер ҡатындың хан һарайынан сыҡҡанын күреп, бөтә халыҡ ҡыҙҙың ҡайтыу хәбәрен һорашырға ынтылған, ти. Теге ҡатын бер һүҙ ҙә әйтмәй, ҡулын һелтәп: «Ишетерһегеҙ әле, һөйләмәйем!» — тип, халыҡты йырып-йыртып, үҙ торлағына ҡайтып киткән, ти. Һәүбән был ҡатындың

---

* Барымта — көслөк менән мал баҫып алыу.

ҡайҙа барып ингәнен күҙәтеп торған да уның артынан атлаған. Ҡатын Һәүбәндең кем икәнен яйлап һораша башлағас, Һәүбән уға үҙенең алыҫтан килгән бер юлаусы булыуын һөйләп, ҡунып китергә һораған, ти. Ҡатын: «Былай төбәп килгәс, ҡунырһың инде, сит кеше ҡайҙа бара белһен»,— тигән, ти.

Һәүбән арлы-бирле сисенеп бөтөүгә, ҡатын-ҡыҙҙар, әбей-һәбейҙәр, ҡарт-ҡоролар, был ҡатындың ҡайтҡанын күрә һалып, килеп ингәндәр, ти. «Айһылыуҙы күрҙеңме? Бик ябыҡҡанмы? Ҡайҙа булды икән, һораштыңмы?» тигән һорауҙарын яуҙыра башлағандар, ти.

Хужа ҡатын: «Айһылыуҙы күреп, иҫән-һаулыҡ ҡына һораштым, хәлен һораша алманым, үҙе бик ябыҡ, ҡоро һөлдәһе генә ҡалған»,— тип һүҙен бөтөрөүгә, ҡыҙҙар: «Ниңә хәлен һорашманың? Нисек булғанын белергә кәрәк ине»,— тип ныҡыша башлағандар икән, хужа ҡатын: «Һораша ғына башлағайным, еңгә, ҡуй әле, ҡайтҡаныма үҙем дә ышана алмайым... Бер-ике көнһөҙ бер нәмә лә һөйләй алмайым, тигәс, көсләшмәнем. Тик хандың үҙ ярандарына: «Аллаға шөкөр, биргән саҙаҡа, салған ҡорбандар арҡаһында балам ҡотолған. Шүлгән батшаһы урлаған булған икән», тип һөйләгәне генә ҡолағыма салынып ҡалды»,— тип әйткән ти. Был ҡатындың һүҙен тыңлап, башын түбән баҫып ултырған бер ҡарт:

— Ярай, мин әле Сура батырҙың ярсығы ҡалып, атаһының ҡоно өсөн барымтаға алдымы икән, тип уйлағайным. Былай ҡан-яуһыҙ ҡотолоп ҡайтҡас, шөкөр итергә кәрәк. Юғиһә Мәсем хан Сура батыр-

ҙың ете ятына* саҡлы үлтереп бөтөрөргә ант иткәйне бит,— тип һүҙ ҡыҫтырып ҡуйған, ти. Хужа ҡатын уға өҫтәп:

— Сура батырҙың тағы кемен эҙләй? Урманда аҙыҡ эҙләп йөрөгән бисәһен дә ҡотҡармай, Шүлгән күленә баулап һалған бит, уға тағы ни кәрәк? — тип әйткән икән, шундағы бер ҡатын:

— Ҡуй инде, ханға осрағас, үҙенең Сура батыр бисәһе икәнен әйтмәһә лә, бер нәмә лә булмаҫ ине лә бит,— тип ҡуйған, ти. Шунан теге ҡарт:

— Һеҙ белмәйһегеҙ шул! Уны һыуға һалғанда мин ситтән күреп торҙом бит. Мин нисек икәнен беләм инде,— тигәс, ҡатындар:

— Әллә, беҙ ишеткән-белгәнебеҙҙе һөйләйбеҙ инде,— тип һүҙҙе шунда туҡтатҡандар, ти.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Һәүбән, атам менән әсәмде Мәсем хан үлтерҙеме икән ни, тип уйлаған. Сура батыр тураһында һүҙ сыҡҡас, барыһының да һүҙһеҙ шымып ултырғанын күреп, теге ҡарттан:

— Олатай, был тирәлә Сура батыр берәү инеме, икәү инеме? — тип һораған, ти. Ҡарт уға:

— Мырҙам, илдә дан тотҡан, ил намыҫын һаҡлаған Сура батыр берәү ине. Мин Урал япрағында** ла, Урал армыттарында ла телгә алып һөйләрлек бүтән Сура тигән кешене ишеткәнем юҡ. Сура батырҙың бисәһен һыуға һалған саҡта бахырҙың: «Йөрәккәйем, балам ҡалды! Шуның өсөн бауырым һыҙлай; иремде үлтергәнегеҙҙе белдем, кешегә әйтмәҫкә ант

---

* Ете ят — ете быуындан үткән туған ят иҫәпләнгән.

** Урал япрағы — Уралдан ситтәрәк ятҡан тау.

иттем, ауырып үлде, тип илгә оран һалдым, ҡыйын булһа ла, күрҙем дә, түҙҙем дә, исмаһам, үҙемде үлтермәгеҙ инде!» — тип ялбарғанын ишетеп торҙом. Юҡ, хан ҡуйманы, күлгә ырғытты. Хан, ҡатындың һүҙенән, балаһы барҙыр, тип эҙләргә уйлағайны, уларҙың йәйләүе беҙҙең тирәнән күсеп китеү арҡаһында, таба алманы. Ҡалған балаһы улмы, ҡыҙмы,— уныһын белмәнем,— тигәс, Һәүбән тағы аптыраған. Был серҙе асыҡ белгеһе килгән:

— Олатай, минең ишетеүемә ҡарағанда, Сура батыр икәү булырға кәрәк. Бер Сура батыр үлгәс, бисәһе, кәфен таба алмайынса, батырҙың һыҙмаһын биреп, кәфен алған; етеһен уҡытырға хәйерлеге булмағас, илгә сығып киткән, шул китеүҙән ғәйеп булған, тип һөйләйҙәр,— тигән. Ҡарт быға яуап биреп:

— Мырҙам, бисәһе ғәйеп булыуы шулай, мин һөйләгәнсә. Сура батырҙың үлеме лә мин һөйләгәнсә. Тик һыҙмаһын кәфенгә биргән икән тигән һүҙ буш. Ул һыҙма һатылмаған. Уны хан таптырмаһын, тип шулай һөйләйҙәр. Уның кемдә икәнен бисәһе белә ине,— тип әйткән, ти. Һәүбәндең:

— Үҙен үлтергәс, хан нисек һыҙмаһын алмаған икән? — тигән һорауына, ҡарт:

— Алыр ине, ул һыҙманы таба алманы, уның ҡайҙа ҡалдырылғанын белмәне. Ул һыҙманың Урал батырҙан ҡалғанын хан белә. Сура батыр, һунарҙан йөрөп килгәс, бик арыған да, һыҙмаһын үҙе менән һәр ваҡыт һунарға бергә йөрөй торған юлдашы Тарауыл ҡартҡа биреп, уны һунарға ебәргән. Ул йөрөп ҡайтҡансы үҙе ял итергә булған. Шул көнө

Мәсем менән Аҡбулат бей ҙә һунарға сыҡҡан булған икән. Тарауыл ҡарт китеп барғанда миңә осраны. Мин шунан Сураның хәлен беләйем тип уға табан атлаһам, Мәсем хан менән Аҡбулат йоҡоһонан яңы уянған Сураны, хоҙай күктән көткәнде ерҙән бирҙе бит әле тип, шатланып үлтереп торалар. Шунан һуң, ни эшләргә: һыуға һалһаҡ, Сура батырҙың үлеме, тереме икәнен халыҡ белмәç, уға арҡаланып, һаман беҙгә ҡаршы булыр, туҡта, халыҡҡа, ауырып үлде, тип хәбәр таратырға ант иттереп күмдерәйек, тип һөйләштеләр. Мин дә, быны күргәс, Тарауылды эҙләп киттем, тапманым, шунан ҡайтыу яғына йүнәлдем. Аҙаҡ бисәһенең килгәнен белдем. Бисәһе, бахыр, нишләһен, шулай эшләгән. Ай, Сура батыр, Уралды бирмәйенсә, Аҡбулат бей менән, Мәсем хан менән бик күп йылдар һуғышып килгән кеше ине. Ул бар саҡта ир-ат Уралдың һыуында балыҡтай йөҙә, урманында ҡоштай һайрай ине. Батыр әрәм булды шул,— тигән. Шунан Һәүбән күлдә осраған ҡарсыҡ ысындан да әсәйемме икән әллә, тип уйлап ҡуйған.

Һәүбән ата-әсәһенең хәлен был ауылда ишетеү менән генә туҡтамаған, тирә-яҡ ауылдарҙа йөрөгән. Атаһы менән әсәһенең хәлен һорашҡан, барыһы ла шул бер төрлө һөйләгән. Һәүбән тағы ауылдар арамаҡ булһа ла, Мәсем хандың ҙур туй яһарға оран таратҡанын ишеткәс, кире хан йәйләүенә ҡайтҡан, ти. Бында ҡайтһа, ни күҙе менән күрһен, арғымаҡ уйнатҡан, юрға юрғалатҡан, ҡушаҡта йүгерек етәкләгән бейҙәр, аҡһаҡалдар, уларҙың улдары, мырҙалар хан йәйләүе тирәһенә тулғандар, ти. Бей-

ҙәрҙән, тархандарҙан бүтән халыҡ та күп килгән, ти. Майҙандың икенсе яғында бер төрлө ат-тунһыҙ батырҙар, ҡарт-ҡоролар, өсөнсө яҡта ҡыҙ-ҡырҡын, бисә-сәсә, әбей-һәбей, бала-саға йыйылған, ти. Майҙан уртаһында Мәсем хандың бисәләре, өс кейәүе менән ҡыҙы тора, ти. Улар эргәһенә йыйылған аҡһаҡалдар, бейҙәр, майҙан башланыуҙы көтөп, хан тирәһендә уралалар, ти. Батырҙар, билбауҙарын ыҡсымлап тотоп, бер урында тороп түҙмәй, ары-бире йөрөйҙәр; йырсылар, тамаҡтарын көйләп, сей йомортҡа эсәләр; ҡурайсылар ҡурайҙарына һыу бөркөп, ҡурай дымлайҙар, ти. Сабарҙар* майҙан тирәләп рәт һаҡлап урап йөрөгән саҡта, Һәүбән майҙан түңәрәгенә барып, бөтәһенә күҙ йөрөтөп сыҡҡан, ти. Тик хан тирәһендә Айһылыуға оҡшаған ҡыҙ уның күҙенә салынмаған, ти. Ары-бире итеп, халыҡ йыйылып бөткәс оҙаҡ та үтмәгән, күмәк һарай ҡыҙҙары менән бергә Айһылыу майҙанға килгән, ти. Уның матур йөҙөн күргәс, бөтә йәш-елкенсәк тауыш-тынһыҙ уға табан күҙ текәп ҡарап ҡалған. Мәсем хан, майҙан уртаһына сығып, былай тип әйткән, ти:

*— Майҙан йыйҙым ил данлап,*
*Ҙур ҡыуаныс булғанға;*
*Дейеү алған ҡыҙымды*
*Хоҙай азат ҡылғанға.*
*Ҡәҙер төнө** булғандай,*

---

* С а б а р — сапҡын, хәбәр йөрөтөүсе.

** Ҡ ә ҙ е р  т ө н ө — дини мифология буйынса, йылына бер тапҡыр ғына була торған ошо төндә теләк теләп ҡалған кеше теләгенә ирешер, имеш.

*Күңелем тулды шатлыҡҡа;*
*Нәҙер әйттем** аллаға:
*Ҡыҙым иҫән ҡайтҡанға,*
*Тәхетемде һаҡларҙай,*
*Шүлгәндән ҡон алырҙай,*
*Шул дейеүҙе үлтереп,*
*Башын алып ҡайтырҙай*
*Батырға бирәм ҡыҙымды.*

Хандың был һүҙен ишеткәс, батырҙарҙың береһе лә бер ни әйтергә ҡыя алмай, уйлап торған, ти. Шунан Аҡбулат бей, Айһылыуға ҡарап:

*— Айһылыуым, әйтсәле,*
*Баштан үткән бар хәлең,*
*Килгән батырҙар белһен,*
*Нисек һау ҡалды йәнең,—*
тигәс, Айһылыу бынау һүҙҙәрҙе һөйләгән, ти:

*— Бер көн сыҡтым яланға,*
*Бүртә юрға уйнатып,*
*Һарайҙағы бар ҡыҙҙы*
*Үҙ артымдан эйәртеп.*
*Уйнап-көлөп туғайҙа,*
*Шүлгән күле буйында,*
*Сәскә шәлкемләгәндә,*
*Бер ни күрҙем янымда:*
*Айыу тиһәм,— ҡырас йөн,*
*Бүре тиһәм,— ирәбе,*
*Һис тартынмай уҡталды.*
*Ҡымтып алды беләге.*
*Ҡурҡышымдан мин ҡапыл*

* Нәҙер әйтеү — һүҙ биреү.

*Ни эшләргә лә белмәнем,*
*Һушым киткән шунда уҡ,*
*Үле булған бар тәнем.*
*Күҙем асып ҡараһам,*
*Ҡыҙҙар тора янымда,*
*Бары тора ҡурҡышып,*
*Мине күреп өркөшөп.*

*Йөҙҙәре еҙҙәй һарғайған,*
*Көләс йөҙҙәр юғалған;*
*Бары миндәй урланып,*
*Тыуған илдән айырылған;*
*Улар менән таныштым,*
*Ил-торлағын һораштым,*
*Шунан килде бер ҡарсыҡ,*
*Бите-йөҙө йыйырсыҡ,*
*Барыбыҙ ҙа күмәкләп*
*Эргәһенә йыйылдыҡ.*

*Барыбыҙҙан тәүҙә ул*
*Һорап белде илебеҙ,*
*Нәҫел-нәсәптәрҙе беҙ*
*Һөйләп бирҙек барыбыҙ.*
*Ул ҡарсыҡ та бермекләп*
*Үҙ хәлдәрен һөйләне:*
*«Ирем — Уралда данлы*
*Батыр ине йәшенән,*
*Һеҙгә уның кемлеге*
*Билдәлелер атынан*
*(Уның үлемен әйтмәйем,*
*Хәтере ҡалыр берәүҙең).*
*Ханға мәңге юл сапмаҫ*
*Сура батыр ир ине,*

*Тоҫҡап атһа, яҙлыҡмаҫ,*
*Мәргәнлектә бер ине.*
*Үлем йоҡоһо баҫып,*
*Яңғыҙ ятып йоҡлаған;*
*Ҡанға һыуһаған дошман,*
*Ятҡан ерҙә тап итеп,*
*Йөрәгенә уҡ атҡан.*

*Илгә оран һалмаҫҡа*
*Үҙемдән ант алдылар;*
*Бына хәҙер үҙемде*
*Шулар һыуға һалдылар.*
*Шунда уҡ йотто бер януар,*
*Һыу йоторға бирмәне,*
*Ауыҙы шундай ҙур ине,*
*Һис бер теше теймәне.*

*Өңөнә килгәс уҡшыны,*
*«Әйҙә, тиҙерәк сыҡ,— тине,—*
*Килер ереңә килдең,*
*Башҡа юлың юҡ,— тине.—*
*Иҫән булған сағында*
*Ирең мине атҡайны,*
*Тирең һуйып алам, тип*
*Бысаҡ һурып алғайны».*
*Шунда мин, телгә килеп,*
*Азат ит, тип һораным,*
*Ҡан илағас, ҡыҙғанды,*
*Миңә бысаҡ һуҙманы.*
*«Йәштән ҡолда йәшәгән,*
*Ата-әсәһен ташлаған,*
*Тел-йолаһын оноткан*
*Меҫкен икән һин,— тине,—*

*Мин дә шул көндән башлап,*
*Шүлгән батыры булһам да,*
*Ҡәһҡәһә атын алһам да,*
*Батша ҡушыуын тотһам да,*
*Уралға сығып йөрөһәм дә,*
*Кемде генә йотһам да,—*
*Зарлы миңә аш булмаç,*
*Йөрәгем аслыҡ киçһә лә.*

*Килдең хәҙер был илгә,*
*Ҡалырһың һин күп йылға;*
*Шүлгән күле шундай ул;*
*Ҡанлы йәштәр аҡҡан һуң,*
*Бер урынға эркелеп,*
*Бара-тора бер килеп*
*Күҙ йәшенән бар булған,*
*Тәхет тотҡан батшаһы*
*Әсәнән үк бей булған.*
*Был һарайҙар һалынған*
*Тереләй һуйған һөйәктән;*
*Һарай тирә баҡсаһы,*
*Биҙәп торған сәскәһе*
*Һуғарылған ҡан менән»,—*
*Тине шунда ул миңә»,—*
*Тип һөйләне беҙгә әбей.*

*Урлаусының тап үҙе*
*Мине урлаған шул берәү*
*Булып сыҡты, белгән һуң;*
*Аҙаҡ килде бер егет*
*Уралдан мин, тине ул.*
*Ҡарап сыҡты һарайҙы,*

*Тап килтерҙе мине ул.*
*Күҙе йәшләнә биреп,*
*Сығып китте һарайҙан,*
*Күп үтмәне, ул киткәс,*
*Йоҡо баҫты күҙемде.*
*Серем итеп, уянһам,*
*Ҡырҙа тойҙом үҙемде.*
*Ырғып торҙом һиҫкәнеп,*
*Ҡарап торҙом тирәмде,*
*Үҙ-үҙемә ышанмай,*
*Күҙем һирпеп ҡараһам:*
*Томанһырап, күгәреп,*
*Болоттарҙы ялмалап,*
*Урал тора алдымда.*
*Керпек үтә йылмайған*
*Уҫал күҙҙәй һөҙөлөп,*
*Ҡамыш үтә ҡараған*
*Шүлгән ята янымда.*
*Туғайҙағы үләндәр*
*Сәскәләргә биҙәлгән;*
*Ҡолағыма салынды*
*Ҡош урманда һайраған,*
*Йылғыр иҫкән еләҫ ел*
*Сәстәремде елпетте;*
*Барын күргәс, шатлығым*
*Йөрәгемдә елкетте.*
*Ырғып торһам урынымдан,*
*Күҙем төштө берәүгә,*
*Алыҫ түгел үҙемдән*
*Ултырған бер егеткә.*
*Йөрәктәрем шыуланы,*

*Һис түҙемем ҡалманы.*
*Яҡын барҙым янына,*
*Егет көләс йөҙлө ине,*
*Текләберәк ҡараһам,*
*Баяғы егет үҙе ине.*
*Яуға сапҡан батырҙай,*
*Алтын-көмөш эйәрле,*
*Болғар тартҡы, айыллы,*
*Туҡымдары ынйылы,*
*Тибенгеһе сәмсәле**
*Болан тире таралғы***,*
*Өҙәңгеһе көмөштән,*
*Эйәр ҡашы алтындан,*
*Семәрләнгән аҡыҡтан;*
*Йылан ҡамсы ҡашында,*
*Ҡанъяғала*** ҡуржыны****,*
*Ҡырпыуҙары сәхтиән*****,*
*Күмелдерек****** түшендә,*
*Арт һанында — ҡойошҡан*******;*
*Ебәк сылбыр нуҡталы,*
*Ҡуш ауыҙлыҡ йүгәнле,*
*Теҙгенен ҡашҡа шаҡарған;*
*Ҡырас яллы, төк сәсә********,*

---

* Сәмсәле тибенге — семәрле шпор.
** Таралғы — нәҙек ҡайыштар.
*** Ҡанъяға — эйәр артындағы ҡайыш.
**** Ҡуржын — сумка, артмаҡ.
***** Сәхтиән — йоҡа һары күн.
****** Күмелдерек — ат түшлеге.
******* Ҡойошҡан — эйәр алға шыумаһын өсөн ҡойроҡ төбөнән аша алынған ҡайыш.
******** Сәсә — аттың бәкәлендәге алтын йөн.

*Сыртан һыртлы, тар бөйөр,*
*Ҡубаға һебә*, ҡуян бот,*
*Текә тояҡ, ас яңаҡ,*
*Ҡамыш ҡолаҡ, киң танау*
*Ҡарсыға түш, баҡыр күҙ,—*

*Әтәс муйын, ҡуш урай,*
*Суңҡа** эйәк, ҡымты ирен*
*Аҡбуҙ толпар янында.*
*Үҙе төҫкә ат шулай,*
*Кәңәш биреп егеткә,*
*Тап әҙәмдәй һүҙ һөйләй.*
*Ана мине шул егет*
*Азат итте һарайҙан.*
*Алам һине, тимәне,*
*Намыҫыма теймәне,*
*Юлға төшөрөп ебәрҙе,*
*Саҡырһам да һарайға,*
*Миңә үҙе килмәне.*

Ошолай тип ҡыҙ бөтәһен дә һөйләп биргәс, барыһы ла аптыраған, ти. Шул саҡта Мәсем хан:

— *Бына, ҡыҙым, бер алма,*
*Батырҙарыңды һайла.*
*Күнгән батыр шартыма*
*Алмаң алыр ҡулыңдан,*
*Үҙең күргән ҡарсыҡты*
*Алып килер Шүлгәндән,—*

* Ҡ у б а ғ а  һ е б ә — йылҡының бөйөрөнә дуғалана биреп тоташҡан ҡыҫҡа ҡабырғаһы.

** С у ң ҡ а — осло.

тигән дә ҡыҙын майҙандағы батырҙар араһына ебәргән, ти. Айһылыу батырҙар алдынан йөрөп уҙһа ла, бер батыр ҙа алманы алырға баҙнат итә алмаған, ти. Шунан Мәсем хан батырҙарға иртәгә саҡлы уйлап килергә ирек биргән, ти. Халыҡ таралғас, Һәүбән йәйләүҙән ҡырғараҡ сыҡҡан да, ҡыл көйҙөрөп, Аҡбуҙатын саҡырған. Һәүбән Аҡбуҙатҡа күлдәге ҡарсыҡты иртәгә майҙанға алып килергә ҡушҡан. Аҡбуҙ: «Шүлгәнгә яу асмайынса, унан бер нәмә лә алып булмаҫ»,— тигәс, Һәүбән, Аҡбуҙатты менеп, Шүлгән күленә үҙе киткән, ти. Шүлгәнгә яҡынлау менән, Аҡбуҙаттың тояҡ тауышын һиҙеп, күлдә гөж иткән тауыш ишетелгән, ти. Аҡбуҙат: «Ана, хандың ҡыҙы һаҡсылары менән күл өҫтөнә сыҡҡан икән, беҙ килгәнде ишеткәс, ҡасты. Мин күлде ашанан-аша сабып сығырмын, һин ҡылысың менән һелтәп, һыуҙы ярып уҙырһың. Беҙҙең үткән бер ерҙән, күлде бүлгеләп, үткәүел яһалыр. Батшаның күле ваҡланыр, шунан түҙмәй батша ҡыҙы сығыр. Ни теләйһең, ул һиңә шуны бирер. Тик, ҡара, ныҡ ултыр»,— тигән. Һәүбән Аҡбуҙат әйткәнсә эшләгән. Күл ваҡланып бүлгеләнгәс, Нәркәс түҙмәйенсә күлдән сыҡҡан да Һәүбәнгә:

*— Ай, егетем, ни теләп,*
*Бында яуға килдең һин?*
*Аҡбуҙатты аямай*
*Бүләк итеп бирҙем мин.*
*Ҡылысың менән тураҡлап,*
*Һалмалай иттең күлемде,*
*Утрау менән бүлгеләп,*
*Кәртәләнең юлымды;*

*Ҡәһҡәһәнән айырып,*
*Яңғыҙ ҡылдың атамды.*
*Күл һайығыр, ер бүлгәс,*
*Мин нишләрмен шул саҡта?*
*Ҡомоғор күл төптәре,*
*Ылымыҡ баҫыр ул саҡта;*
*Үкән-төкән күбәйер,*
*Әрмәнделәй булам, тип*
*Тән йәйер ҡабырсаҡ та.*
*Егет, һора теләгең,*
*Харап итмә был саҡлы,—*

тип ялбарған, ти. Һәүбән Нәркәскә былай тип әйткән, ти:

*— Күлең ташҡан йәш менән,*
*Ҡомоҡтормай ҡуймамын,*
*Ерҙән сыҡҡан шишмәнән*
*Бүтән юлын ҡуймамын;*
*Гөбөрләнән* олпатлы*
*Атаңа һын бирмәмен;*
*Ҡәһҡәһә — ер балаһы,*
*Уны унда ҡуймамын;*
*Үҙең — һыуҙың һылыуы,*
*Һине һыуҙан алмамын.*
*Атаңа ҡайтып әйт хәҙер:*
*Һыртына тажын йөкмәһен,*
*Таж биҙәген юғалтмай,*
*Арҡаһына ҡаплаһын.*
*Ҡәһҡәһәгә әйт хәҙер:*

---

* Гөбөрлө — гөбөргәйел.

*Күлдә ятып ут йотоп,*
*Ҡанлы күҙ йәше көтөп,*
*Шунда йоҡо һимертеп,*
*Ҡыҙ-ҡырҡынды тилмертеп,*
*Бөтә илде өркөтөп,*

*Даны менән ҡурҡытып,*
*Айбарланып ятмаһын.*
*Эйәртеп сыҡһын дейеүҙең*
*Ерҙән ҡасҡан барыһын,*
*Ҡая таштан ҙур торлаҡ*
*Аҡбуҙатҡа ҡаҙыһын!*
*Үҙе торған һаҙ күлен*
*Ер аҫтынан юллаһын;*

*Эшен бөткәс, Ҡәһҡәһә —*
*Үҙе коштай канатлы,*
*Сысҡан төҫлө аяҡлы,*
*Ҡояштан ҡурҡыр йөрәкле,*
*Кеше һөймәҫ ҡош булһын.*
*Ҡан эсеүсе дейеүҙәр*
*Аяҡ-ҡулһыҙ ҡалырҙар;*
*Ҡамыш булыр торлағы,*
*Бармаҡ буйы ҙурлығы,*
*Йыландай булып, йөҙгәндә*
*Борғоланыр буйҙары.*
*Күлең ҡалыр тын булып,*
*Күптәргә торлаҡ булып;*
*Бары шунда көн итер,*
*Үҙ-араһы йоп булып.*
*Һарайҙағы ҡыҙҙары*
*Бары сыҡһын бушанып,*
*Йөрөһөндәр хуш булып,*

*Һайраһындар ҡош булып.*
*Йыйырсыҡ битле бер ҡарсыҡ —*
*Ул да күлдә ҡалмаһын,*
*Аҙаҡ сикке һулышын*
*Үҙ илендә һулаһын!*

Нәркәс, был һүҙҙәрҙе ишеткәс, атаһына ҡайтып киткән, ти. Һәүбән, атынан төшөп, бер аҙ көткән икән, күҙ алдында теге ҡарсыҡты күргән. Ҡарсыҡтан һорашырға уйлағас, Аҡбуҙат уны тыйған, ти. Һәүбән шунан ҡарсыҡты, күҙ асып йомғансы, майҙан була торған ауылға алып барып ташлаған да атын ебәргән. Үҙе тағы ла көндәге тирмәгә барып ҡунған, ти.

Иртәгеһенә йәйләү халҡы, иртүк тороп, үҙ эшенә тотонған. Ҡатын-ҡыҙ һыйыр һауып, һарыҡ, һыйыр көтөүен оҙатҡан. Ҡояш һөңгө буйы күтәрелгәс тә, йылҡы өйөрө ҡайтҡан. Ҡолон бәйләгәндәр. Бөтә халыҡ яңынан майҙанға йыйылған, ти.

Майҙан асылғас, Мәсем хан батырҙар алдында әлеге Шүлгәндәге ҡарсыҡты алып ҡайтыу шартын ҡабатлап әйткән. Батырҙар береһе лә һүҙ аса алмай торғанда, теге ҡарсыҡ үҙе алға сығып: «Ханым, мине эҙләтеп, батырҙарҙы яфалама, мине аллам ҡотҡарҙы»,— тип әйткән, ти.

Барыһы ла аптырашҡан, ҡыҙға ҡарсыҡты күрһәткәндәр, ти. Ҡыҙ шул ҡарсыҡ икәнен танығаи, ти. Хан шунда уҡ үҙенең кеше башы киҫә торған кешеһен саҡыртып алған да, халыҡҡа ишеттермәй генә, ҡарсыҡтың башын киҫергә ҡушҡан, ти. Баш киҫеүсе ҡарсыҡты һөйләтмәй алып китә башлағас,

тирә-яҡтан килгән халыҡ менән батырҙар ҡарсыҡтың хәлен һөйләтеүҙе һорай башлағандар, ти. Хан рөхсәт итмәгәс, Һәүбән, алама кейем кейеп, хан алдына барып баҫҡан да:

*— Ай, оло хан, оло хан,*
*Һүҙ тыңлайыҡ ҡарсыҡтан,*
*Уны ҡотҡарған егетте*
*Мин әйтермен аҙаҡтан,—*

тип әйткән, ти. Мәсем хан шунда:

*— Бөгөн төндә мин йыйҙым,*
*Илдең шәйех*, изгеһен;*
*Бер хоҙайҙан һораныҡ*
*Ул ҡарсыҡтың килеүен.*
*Изгеләрҙең хаҡына*
*Ҡабул иткән теләгем:*
*Хоҙа ҡушҡан Хыҙырға*
*Башҡарырға һорауым.*
*Минең һүҙем бер булыр,*
*Миңә кем ҡаршы килер?*
*Әммә шәйехтәр әйтте:*
*«Ҡарсыҡ туйҙа булмаһын,*
*Халыҡ алдында хоҙаның*
*Ярҙам серен әйтмәһен,*
*Уны өйгә алырҙар,*
*Унда ҡунаҡ итерҙәр,*
*Аҙыраҡ ҡунаҡ булғас та,*
*Шүлгәненә илтерҙәр,—*

тигәс, ҡарсыҡ, хандың был һүҙҙәренә буйһоноп, баш киҫеүсе артынан эйәрә башлаған икән, Һәүбән уны

---

* Ш ә й е х — дин башлығы.

ебәрмәй туҡтатҡан да, хандың алдына барып, бынау һүҙҙәрҙе әйткән, ти:

*— Уралда Сура тигән*
*Бер батыр булған икән,*
*Хан-бейҙәрҙең әмеренә*
*Буйһонмаҫ булған икән.*
*Сура батыр бер мәлде*
*Сыҡҡан икән һунарға,*
*Ҡайта алмаған әйләнеп*
*Үҙ йортона ҡунырға:*
*Үлем йоҡоһо баҫып,*
*Яңғыҙ йоҡларға ятҡан;*
*Яуыз хан уға тап булып,*
*Йөрәгенә уҡ атҡан.*
*Күп тә үтмәй, батырҙың*
*Бисәһе лә юғалған,*
*Һәүбән атлы балаһы*
*Яңғыҙы тороп ҡалған.*
*Илендә морон төртөрлөк*
*Бер яҡыны булмаған,*
*Быҙау-маҙар ҡарап та,*
*Һис бирәүгә һыймаған.*
*Бер саҡ Һәүбән киткән, ти,*
*Күп ерҙәрҙе үткән, ти;*
*Йөрөй торғас ҡыҙырып,*
*Бер ҡартты тап иткән, ти.*
*Был ҡарт унан һорашҡан,*
*Хәлен белеп ҡыҙғанған;*
*Ҡулындағы һыҙмаһын*
*Бер һүҙ әйтмәй, һорамай,*
*Мә, улым,— тип биргән, ти,*

*(Ул ҡарт үҙе мөлкәтһеҙ,*
*Күп ярлының бере икән,*
*Ырғыҙ бейҙә мал көткән*
*Тарауыл тигән ир икән.)*
*Һәүбән һыҙма алғас та,*
*Керешкән, ти, һунарға;*
*Мәргәнлектә дан тотҡан,*
*Батырлығы тағы ла*
*Яйыҡ, Сура батырҙан,*
*Төкләс менән Алмастан —*
*Барынан да шәп икән.*
*Улар еңмәс Шүлгәнде*
*Бер уҡталып ҡаҡшатҡан;*
*Шүлгәндең шәп Аҡбуҙын,*
*Урлап алған бар ҡыҙын —*
*Берен ҡуймай ҡотҡарған;*
*Ҡарсыҡты ҡотҡарыусы ла*
*Хызыр түгел, шул булған.*
*Үткән төндә яу асҡан*
*Шүлгән күле ханына,*
*Күлде ат күҙҙәй итеп,*
*Ваҡ-ваҡ итеп телгеләп,*
*Шүлгәндән алыҫ түгел*
*Ҡая битен тиштереп,*
*Үҙ атына торорға*
*Дейеүҙән һарай һалдырған.*
*Батшаһын иткән ташбаҡа,*
*Дейеүҙәрен — ярғанат,*
*Ил талаусы мәлғүнде —*
*Барыһын иткән харап:*
*Бөгөн тағы ат менеп,*



*Ата-әсәһен әҙләй, ти;*
*Атаһы ҡонон алырға,*
*Ҡарымтаға ҡан юллап,*
*Үлтереүсе бер ханға*
*Яу асырға бара, ти.*

Был һүҙҙәрен әйтеп бөткәс, Һәүбән майҙандағы халыҡҡа ҡараған да: «Үҙенең һөйләүенсә, был ҡарсыҡ Һәүбәндең әсәһе булырға оҡшай. Әгәр барығыҙ ҙа шомланып, минең һүҙгә ышанмай, был ҡарсыҡтан һөйләтмәй, ауыҙ асып ҡалһағыҙ, ҡарсыҡ ҡабат күренмәҫ»,— тигән.

Бар халыҡ аптырашҡан. Мәсем хан да, был һүҙҙе ишеткәс, тирәһендәге бейҙәре менән һөйләшә башлаған. Шунан Һәүбәнде үҙ янына саҡырып алған да: «Әгәр һүҙең раҫ булмаһа, башыңды киҫермен»,— тип әйткән, ти. Һәүбән быға риза булған, ти.

Мәсем хандың кешеһе ат менгәнсе, Һәүбән ҡырғараҡ сыҡҡан да халыҡ араһынан ғәйеп булған; ҡыл көйҙөрөп, Аҡбуҙатын саҡырған. Аҡбуҙат күҙ асып күҙ йомғансы килеп еткән. Һәүбән Аҡбуҙҙан бөтә эштең эшләнгәнен һорашып белгән дә, яу ҡоралдарын кейеп, атын менеп, майҙанға килгән, ти. Ул килгәс, бөтә халыҡ, был кем икән, ниндәй кеше икән, тип аптыраған, ти. Һәүбән килеп еткәс үк, Айһылыу менән ҡарсыҡ уның үҙҙәрен ҡотҡарған егет икәнен Аҡбуҙ атынан танып, өҙәңгеләгә ике аяғын килеп ҡосаҡлап, «ошо егет мине...» тип илап ебәргәндәр, ти. Һәүбән шунда, атынан төшөп, ҡарсыҡты ҡосаҡлап алған, унан яңынан атына менеп, хандың алдына барған да уға бынау һүҙҙәрҙе әйткән, ти:

*— Һиңә төбәп, Мәсем хан,*
*Һорай торған һүҙем бар:*
*Сура тигән батырҙа*
*Юллар ҡоноң бармы ни?*
*Ҡыҙың урлар Шүлгәндең*
*Барымтаһы бармы ни?*

*Ошоға тейеш яуапты*
*Танмай һөйләп бирһәң һин,*
*Мин дә көçәр уйымдың*
*Барын һөйләп бирермен..*

Мәсем хан, Һәүбәндең был һорауына яуап итеп:

*— Суранан ҡон юлларлыҡ*
*Һис ҡарымтам юҡ минең;*
*Малым талап алды, тип,*
*Барымтам да юҡ минең.*
*Шүлгән асыуы шул миңә:*
*Ыу һалғайным күленә,*
*Ҡамышына ут һалып,*
*Хас ҡылғайным иленә,—*

тигән һүҙҙәрҙе әйткәс, Һәүбән шул ерҙә ханға:

*— Ата-әсәнән йәш ҡалып,*
*Әсе күҙ йәшен татып,*
*Ерҙең аçҡы ҡатын да*
*Күреп сыҡҡан батыр мин.*
*Умарталар ватһа ла,*
*Һыйыр ейеп туйһа ла,*
*Көтөү һарыҡ быуһа ла,*
*Ҡаҙ-өйрәкте ҡырһа ла,—*
*Алпанлаған айыуҙы,*
*Йылғыр күҙле бүрене,*
*Сағыл буйлап уйнаған*
*Өлпө ҡойроҡ төлкөнө,*
*Ил ҡоротҡан яуыз, тип*
*Һаҙағымды уларға*
*Ужарланып атманым,*

*Урал буйын буйланым,*
*Ил дошманын уйланым.*
*Ҡарымтаһыҙ ҡан ҡойған,*
*Ил батырын үлтереп,*
*Бисәләрен тол ҡылған;*
*Балаларын ҡыҙғанмай,*
*Үкһеҙ етем ҡалдырған;*
*Кәрһеҙ ҡатын-ҡыҙҙарҙы*
*Бәйләп һыуға һалдырған;*
*Илдең эсендә йәшәп,*
*Яу күтәреп, ҡан ҡойған;*
*Илдең намыҫын тапап,*
*Нәҫелен маҡтап хан булған;*
*Илдең күп малын ейгән,*
*Уның көр телен киҫкән;*
*Ике аяҡлы, йомро баш —*
*Тоҫҡап һаҙаҡ атырҙай,*
*Ҡан дошманым күрерҙәй,*
*Эҙләп тапҡан дошманым,*
*Ата торған һунарым —*
*Алдымда торған Мәсем хан,—*
*Бына шуларҙың бере ул;*
*Шүлгән күлгә ыу һалып,*
*Яҡын-тирәнең малын*
*Ҡырып, малһыҙ ҡалдырған*
*Йылғыр күҙле бүре ул!*
*Ҡарымтаһыҙ Сураның*
*Ҡанын ҡойған айыу ул!*
*Иҙел батыры Ҡыпсаҡты,*
*Ирәмәл батыры Ҡатайҙы,*
*Яйыҡ батыры Төкләҫте,*

*Тора батыры Тамъянды,*
*Яланда Ирәндекте,*
*Нөгөштә Юрматыны,*
*Үҙән батыры Табынды*
*Ҡымтып торған дейеү ул!*
*Аҡбуҙатҡа мендем мин,*
*Шул батырҙар ҡоно өсөн*
*Ҡарымтаға килдем мин;*
*Илдең ирен ҡол иткән,*
*Бисәләрен тол иткән*
*Мәсем тигән яуыздан*
*Шуларҙың хаҡын юллап,*
*Ҡарымтаға килдем мин,—*

тигән дә хандың башын сабып өҙгән, ти. Мәсем хандың ҡулында ҡол булған бөтә халыҡты ҡотҡарған, ти. Һәүбәндең батырлығын күргәс бөтә халыҡ уға килеп, үҙенең аһ-зарын һөйләй башлаған. Халыҡ уға былай тип әйткән, ти:

*— Ай, илдең арыҫланы,*
*Нисә йылдар ҡол иткән,*
*Үҙенә көсләп тилеткән**
*Яуыз хандың ҡулынан*
*Илде азат иттең һин!*
*Һиңә юлдаш булырлыҡ,*
*Арҡалашҡа*** торорлоҡ*
*Ирҙәребеҙ бар ине,—*
*Барын яуыз Мәсем хан,*

---

* Тилеткән — баш эйҙергән, күндергән.
** Арҡалаш — таяныс, терәк.


20 166

*Илдән айырып ситләтеп,*
*Ҡатындарын тол итте.*
*Шуларҙы һин ҡайтарһаң,*
*Илгә аҙамат булырһың,*
*Ҡан илаған етемгә*
*Ата һымаҡ булырһың!*

Һәүбән, халыҡтан ныҡлап һорашҡас, ул батырҙарҙы эҙләп алып ҡайтырға һүҙ биргән дә эҙләп сығып киткән. Бара торғас, бер ҙур ҡошҡа осрап, ул ҡоштоң янына барған. Ҡош оса алмаған, ти. Шунда ҡош, телгә килеп, һөйләй башлаған, ти:

— Мин тау башында ултыра инем, Мәсем хандың аттары мине күреп өрктөләр. Мәсем хан шуға мине аттырып, ҡанатымды ҡырҡтырып, үҙемде ҡаянан ташланы. Оҙаҡ ҡуҙғала ла, йөрөй ҙә алмай яттым. Атылған ерҙәрем уңалһа ла, ҡанаттарым һаман осорға ярамай, ҡаңғырып ошонда ултырам. Балаларым асҡа тилмереп яталыр инде. Егет, миңә ярҙам ит, атыңдың ауыҙындағы күбеген һөрт, ҡанаттарым төҙәлер,— тип әйткән, ти, был ҡош.

Һәүбән Аҡбуҙаттың ауыҙындағы күбектәрен һөрткәс, ҡоштоң ҡанаттары төҙәлгән, ти. Шунан ҡош:

— Егет, был ярҙамың өсөн ни бирәйем, ниндәй ярҙам күрһәтәйем? Мин ғүмер буйына Мәсем хандан, Шүлгән дейеүҙәренән яфа сигеп, бала үрсетә алмай зарыҡҡан ҡош инем. Мин шундай ҡош, атһыҙға ат булам, юлдашһыҙға юлдаш булам,— тип әйткән, ти. Һәүбән:

— Һин миңә ни ярҙам күрһәтә алаһың? — тип һораған икән, ҡош уға:

— Мин һиңә үҙем өсөн генә түгел, Мәсем һарайындағы тотҡон һандуғастарҙы, Шүлгән һарайындағы тотҡон ҡыҙҙарҙы ҡотҡарып, Уралымдағы һайрар ҡоштарҙы арттырғаның өсөн дә ярҙам итергә тейешмен,— тип яуап ҡайтарған, ти. Һәүбән:

— Һин уны ҡайҙан беләһең? — тигәс, ҡош:

— Шүлгәндәге һарай ҡыҙҙары минең балаларым ине, шулар килеп әйтте, һөйөнсө алдылар,— тигән. Һәүбән тағы:

— Һин — ҡошһоң, ә ул ҡыҙҙар нишләп кеше балаһы төҫлө һуң? — тип һорағас, ҡош:

— Улар кеше шул. Мин дә кеше инем, ҡош булып ҡалдым,— тип әйткән, ти.

Һәүбән ҡоштан бөтә серҙе һораша башлаған. Ҡош уға эштең айышын теҙеп һөйләп биргән, ти.

— Иң тәүҙә был тирәлә һыу батшаһы ғына булған. Урал батыр, үҙенең Иҙел, Һаҡмар, Нөгөш, Яйыҡ тигән улдары менән килеп, һыу батшаһына яу асҡан. Улар килгәндә, был тирә күк-күмгәк һыу булған. Улар яуҙа ат йөҙҙөрөп һуғышҡандар. Урал батырҙың ат йөҙҙөрөп килгән юлынан тау ҡалҡып сыҡҡан. Бына ошо Урал тауы — Урал батырҙың тәү килгән юлы. Тау ҡалҡып сыҡҡас, һыу батшаһының иле икегә ярылған. Урал батыр дейеүҙе үлтергән бер ерҙә сағыл ҡалҡып сыҡҡан; һыу кәмегән һайын, һыу батшаһының ғәскәре бөтә барған, дейеүҙәре үлгән һайын, ҡоро ер күбәйгән. Шунан уның төйәге күләүек-күләүектәрҙә генә тороп ҡалған. Көсө бөткәс, һыу батшаһы ошо Шүлгән күлгә килеп урынлашҡан. Шүлгән күл ер аҫтындағы һыуға тоташҡан, уны бөтөрә алмағандар. Батша шунда йәшәп ҡалған.

Хәҙер Урал тип йөрөтөлгән тау — Урал батырҙың улдары менән тәү башлап яуға килгән юлы. Мин Урал батырҙың бисәһе инем. Мине Һомай тип атайҙар. Уландарым менән ирем яуға киткәндә, мин килендәрем менән үҙ илемдә ҡалғайным. Уландарым ҡайтып, килендәрҙе алып киттеләр. Мин аҙаҡ бармаҡ булып ҡалдым. Балаларым бында килгәс, Шүлгән батшаһын аңдып, ошо тирәлә урынлашҡандар. Шүлгән батша һаман иремә ҡаршы дошманлығын ташламаған. Ирем балаларым менән кәңәш иткән. Ошо күлдең һыуын эсеп бөтөрәйек, күлен һайыҡтырайыҡ, Шүлгән батшаһы бер ҡайҙа ла бара алмаç, тип һөйләшкәндәр. Тәүҙә аталары эсә башлаған. Шүлгән батшаһы быны белеп ҡалған да иремдең эсенә ғәскәрҙәрен индереп ебәргән. Улар уның эсенә инеп, йөрәген телгеләп үлтергәндәр. Ирем үлер сағында улдарына: Шүлгән батша ғәскәре ҡалған урындан һыу эсмәгеҙ, үҙегеҙгә һыу табығыҙ, тигән. Улар, ерҙе тишеп, йылға ағыҙғандар. Бына хәҙерге дүрт йылға — Иҙел, Яйыҡ, Һаҡмар, Нөгөш — шулар ағыҙған йылғалар булыр,— тип әйткән, ти. Һәүбән шунда:

— Өләсәй, һин нишләп ҡош булып ҡалдың? — тип һорағас, Һомай:

— Беҙ алыç юлдан килгәндә, барыбыҙ ҙа ҡош булып осабыҙ. Килендәрем дә шулай. Бараһы ергә еткәс, ирҙәре ҡатындарын үпһә, үҙ төçөнә ҡайтып, яңынан ҡатын булалар. Мин килеп еткәнсе ирем үлгәйне, шуға мин үҙ төçөмә ҡайта алманым. Улар бала-сағалы булып ҡартайып үлделәр. Бына был һин менгән Аҡбуҙат ирем Урал батырҙың аты ине.

Үҙе үлгәс тә, уны Шүлгән урлағайны. Иҙелдең улдарынан береһе, Аҡбуҙатты юллап, Шүлгән батшаһына яуға китте. Шүлгән батшалығына барғас, унын ҡыҙына күҙе төшкән. Батша, быны белеп ҡалып, Иҙелдең улынан үҙ һарайында вәзир булып ҡалыуҙы һораған. Егет, батша ҡыҙын алыу уйы менән, батша вәзире булып ҡалған. Тик аҙаҡ сиктә батша уға ҡыҙын бирмәгән, етмәһә уны, мыҫҡыл итеп, Ҡәһҡәһә тип атаған. Шунан аҙаҡ Ҡәһҡәһә Урал буйындағы бөтә данлы ҡыҙҙарҙы, минең балаларымды урлап торған. Иҙелдең бүтән улдары тоҡомонан — ете батыр, баяғы Ҡәһҡәһә тип ат ҡушылған улының тоҡомонан Мәсем ҡалған. Мәсем, ил талап, хан булған. Ете батыр Мәсемдең ил талап ханлыҡ алыуына риза булмай, уға ҡаршы яу асҡан. Бер саҡ Мәсем хан ете батырҙы, килешәйек, тип үҙенә ҡунаҡҡа саҡырған. Улар барғас, бөтәһен дә иҫертеп, ҡул-аяҡтарын бәйләп, диңгеҙ аръяғындағы батшаға һатҡан. Һин хәҙер шуларҙы алырға китеп бараһың икән. Бая килеп һөйөнсө алған ҡыҙҙарым әйттеләр. Мин унда һине атыңдан да тиҙ алып барырмын. Әгәр минең менән барһаң, уларҙы яуһыҙ урлап ала алаһың. Тик шул: минең ҙур кәмселегем бар. Тамаҡланып барып ҡайтырға үҙ итем етмәй, һинең бот итеңде лә, уларҙың бот иттәрен дә ашарға кәрәк булыр. Бында ҡайтып еткәс, ул яраларҙы атыңдың ауыҙ күбеге менән төҙәтергә тура килер. Инде атың менән барһаң, яу менән алаһың. Яу ҙур булыр. Шулай ҙа барыбер һин еңерһең, батырҙарыңды ҡотҡарып алырһың,— тигән. Һәүбән, ҡош-

тоң был һүҙҙәрен нык колак һалып тыңлағандан һуң, оҙак уйлап торған. Шунан кошка:

— Өләсәй, бар, һин балаларың янына кайт. Кош булһағыҙ ҙа, һине лә, балаларыңды ла берәү ҙә ата алмаç, рәхәт йәшәрһегеҙ,— тигән дә үҙе юлға сыккан.

Бара торғас, Һәүбән диңгеҙ аръяғындағы батша иленә барып еткән. Унда һаксылар менән һуғыш башланған. Һәүбән уларҙы кырып, һарайға якынлашкас, батша касып, илдән ғәскәр йыйып һуғышып караһа ла, булдыра алмаған. Батша ғәскәрҙәре Акбуҙаттың еленән йығылғандар. Һәүбән үҙе батшаны, бейҙәрҙе тотоп үлтергән. Бөтә халык, Һәүбәндең батырлығын, Акбуҙаттың шундай дауыл куптарыуын күреп, аптырауға калған. Барыһы ла коралдарын ташлаған, ти.

Һәүбән, уларҙы еңеп, ете батырын алып кайтып киткән. Кайткас, бөтә Урал халкын йыйып, туй яһаған, ил батырҙарын көрәштергән. Ете батыр туйҙағы бөтә батырҙарҙан алдын сыккас, етеһен ете ырыуға баш итеп куйған, ти. Һомай коштоң балалары булған аккоштарҙы атмаçка кушкан. Туйҙа Айһылыу Кыпсак батырҙы һайлаған. Һәүбән, бөтә батырҙарҙы илгә таратып, һәр кайһыһын бер ырыуға баш итеп куйғас, үҙе Шүлгән күленә барған да, Акбуҙатты ебәреп, Нәркәсте сығарткан. Нәркәс һис карыулашмай сыккан, ти. Һәүбән, Нәркәсте күргәс, уға:

*— Етемлектә йөрөгәндә,*
*Һиңә тәүҙә юлыктым;*
*Һинең дөрөç һүҙеңсә,*

*Аҫыл бүләгең булған*
*Аҡбуҙатыңды алып,*
*Илемдә азат ҡылып,*
*Ҡыуаныска юлыҡтым.*
*Хәҙер килдем мин һиңә*
*Теләгеңде белергә,*
*Һөйләр һүҙең тыңларға,*
*Күңелеңде күрергә,—*

тигән. Нәркәс бер аҙ ни әйтергә ҡыймай торған. Унан аҙаҡ, һүҙгә керешеп:

*— Ҡыҙ булһам да, әсәнән*
*Ирҙәй батыр тыуҙым мин;*
*Урал буйы ерендә*
*Күп батырҙар күрҙем мин;*
*Һинең бабаң Яйыҡты*
*Көс һынауҙа еңдем мин;*
*Төҫөм йәштәй булһа ла,*
*Күп йыл ғүмер һөрҙөм мин.*
*Батша ҡыҙы булғанға,*
*Ергә сығып баҫмағас,*
*Унан ашам йыймағас,*
*Һис ғүмерем уҙманы,*
*Ҡартлыҡ мине еңмәне,*
*Йәш саҡтарым һаҡланып,*
*Һылыулығым бөтмәне.*

*Йөҙөм асһам, ҡояшың*
*Оялып болотҡа инер;*
*Көрәш көҫәп бер әҙәм*
*Килһә минең ҡаршыма,*
*Асһам уға йөҙөмдө,—*

*Күҙе ҡамашыр нурыма,*
*Минән йығылып хур булыр.*
*Һиңә көрәш асманым,*
*Күңелем уға тартманы;*
*Һине тәүҙә күргәс тә*
*Күңелемдән һөйҙөм мин,*
*Тик әйтергә ҡыйманым,*
*Аҙаҡ сиктә көттөм мин.*
*Әгәр мине тиң күрһәң,*
*Үҙеңә буй бирәйем,*
*Уралыңда тиң ғүмер*
*Һинең менән һөрәйем,—*

тигән дә, йөҙөн асып, Һәүбәнгә ҡарап йылмайған, ти. Һәүбән шунда, Нәркәстең һылыулығын күреп, таң ҡалған, ти. Һәүбән алырға риза булғас, Нәркәс атаһының бөтә мал-тыуарҙарына күлдән сығырға ҡушҡан. Шул саҡта күлдән ер ҡаплаған ҡола йылҡы сыҡҡан, ти. Һәүбән быларҙың бөтәһен дә аттунһыҙ халыҡҡа таратып биргән. Үҙҙәре, Нәркәс менән икәүләп, Аҡбуҙатты менеп, Һәүбән иленә ҡайтып киткән, ти.

*Айһылыу Йәғәфәрова*

## Урал иле

Борон, бик борон заманда, Ер йөҙөнөң изге бер үҙәгендә, иҫ киткес бер гүзәл ҡала булған, ти. Уны беҙҙең ата-бабаларыбыҙ тәгәрмәсҡала — Арҡайым тип атаған. Арҡайымдың ере бик ҙур, иркен булған,

ти. Урмандары кейеккә, йылғалары балыҡҡа, сикһеҙ яландары мал-тыуарға тулы булған. Ожмах менән сағыштырғандар был Урал тип аталған ғәжәп серле илде.

Бына ошо ҡалала Арҡайымдың башлығы Тимерғаҙыҡ үҙенең йондоҙ кеүек сибәр Зөһрә исемле ҡатыны менән ғүмер иткән, ти. Уларҙың береһенән-береһе һылыу ете ҡыҙы булған. Тимерғаҙыҡ, ҡыҙҙары ете йәшкә етеп, һыу ташырлыҡ булғас, эңерҙән иртә таңғаса һандуғастар һайраған, алланып бешкән һутлы емешле йәм-йәшел гөлбаҡсала ете ҡоҙоҡ ҡаҙҙырған, ти. Һәр береһенә ҡыҙҙарының исемен ҡушҡан. Ҡоҙоҡтар бик серле булған: тәүге ҡоҙоҡтоң һыуы һуҡырҙың күҙен асҡан, икенсеһен ауыҙ итһәң — аяҡ-ҡулдарыңдың һыҙлауы баҫылған, өсөнсөһө һаңғырауҙы дауалаған, дүртенсеһе сихыр көсөн ҡайтарған, бишенсеһе изге кешегә матурлыҡ өҫтәгән, алтынсыһы бөтмәҫ көс биргән, етенсеһе лә етмеш төрлө сир-елпеүҙе һыпырып ташлаған, ти.

Тимерғаҙыҡтың ғәжәйеп зиннәтле һарайынан кеше өҙөлмәгән. Илдең һәр тарафынан белемгә һыуһаған шәкерттәр ағылған. Һарайҙа тиңе булмаған бик ҙур китапхана ла булған. Тимерғаҙыҡ күп ваҡытын шунда уҙғарған, ә ҡунаҡтар өсөн һәр ваҡыт тәмле һый-хөрмәт, иҫ киткес татлы эсемлектәрҙең хуш еҫе аңҡып торған аш урыны әҙер булған. Ҡаланың матурлығы, баҡсаларының гүзәллеге, ил халҡының татыулығы, ултырған урындың серлелеге хаҡындағы хәбәр Ер йөҙөн генә түгел, бар Йыһанды урап сыҡҡан, ти. Бигерәк тә арҡайымдарҙың ете ҡоҙоғо, сатлама һыуыҡтарҙа ла һауаның йомшаҡ-

лығы, аяуһыҙ әсе селләлә лә еләҫ һиллеге, ер йөҙөндә тиңдәше булмаған ете ҡыҙҙың һылыулығы барыһын да хайран ҡалдырған. Ҡала эсендә саҡта бер кемгә лә бәлә-ҡаза, ҡайғы килмәгән. Ҡоштар, йәнлектәр, кешеләр, барыһы бер бөтөн булып, үҙ-ара иғтибарлы, татыу, һөйкөмлө йәшәгәндәр, ти.

Бына Тимерғаҙыҡ менән Зөһрәнең күптән көткән һигеҙенсе балаһы — малайы донъяға килгән, ти. Бәпес туйын улар ҡырҙа, йылға буйындағы туғайҙа, үткәргән. Көнө буйы туғай өҫтөндә шат тауыштар яңғырай. Бар халыҡ күңел асҡан.

Тимерғаҙыҡ бер аҡ һаҡаллы ҡунаҡ ҡарттың уйланып, моңһоу ултырғанын күреп ҡала. Ул ҡарт алдында баш эйгән дә:

— Ҡәҙерле ҡунағым, һеҙ ниңә бик моңһоу ултыраһығыҙ, әллә һый-хөрмәтем, әллә төҙөгән ҡалам, әллә сабый туйы оҡшамаймы? — тигән.

— Һый-хөрмәтең ашъяулыҡҡа һыймай, тәгәрмәс ҡалағыҙ — Йыһан төҙөлөшөнөң көҙгөһө — бындай оҫталыҡ ярҙамында ғына тыуа торғандыр. Йыйын йыйып, халыҡтан сауап алыуыңа рәхмәтем икһеҙ-сикһеҙ, изге төйәгебеҙ Арҡайым ғүмере Ер дәүеренә тиң булһын. Мин беләм: һин — Тимерғаҙыҡ, ергә атылған Йыһан улы, был донъяла эшеңде бөткәс, Урал халҡына аң-белем, һөнәр юлын күрһәткәс, йондоҙ булып, кире күктә янасаҡһың. Ете ҡыҙыңдың тормошо ла Йыһандыҡылар менән үтәсәк.

— Эйе. Минең яҙмышым Ерҙең баш халҡы менән бәйләнгән,— ти Тимерғаҙыҡ.— Ә бына уланым, Ел батыр, өсөн борсолам, уны нимә көтә, Аҡһаҡал?

— Ул ут-һыуҙарҙы үтеп, сынығып, батыр егет

булып үҫәсәк...— Тик ниңәлер әйтер һүҙен әйтеп бөтөрмәгән...

Ҡыҫҡа тиклем ял итеп, көнөн күңелле үткәргән халыҡ, ҡояш байып барғанда, кире ҡалаға юл алған. Әсәһе алдында малай — Ел батыр иҙерәп йоҡлай, арыған апайҙары ла тынып ҡалған, аталары, байрамдан ҡәнәғәт булып, күңелләнеп таралған халыҡты күҙәтеп бара икән.

Ҡәнифә ҡапҡаһына етеп барған саҡта ҡапыл көслө ел сыҡҡан, бер аҙҙан ҡойон күтәрелеп, тирәяҡҡа йәшен шарҙары атыла башлаған, һыбайлылар алдында ҙур ҡарасҡы пәйҙә булған.

— Тимерғаҙыҡ, көймәңдән сыҡ! — тип ҡысҡырып ебәргән ҡарасҡы имәнес тауыш менән.— Һинең менән һөйләшә торған һүҙ бар!

— Һин кем? — тип аптыраған Тимерғаҙыҡ тынысһыҙланып.— Бығаса мин һине күргәнем дә, һинең хаҡында ишеткәнем дә юҡ.

— Ха-ха-ха!.. Ҡайһы берәүҙәр мине Ҡара Йөрәк тиҙәр. Мин һине күптән һағалап йөрөйөм. Арҡайым эсендә һөйләшеп булмағанға күрә, бына ҡала ситенә килдем.

— Ниндәй йомошоң бар миндә, Ҡара Йөрәк? Һөйлә, тыңлайым.

Ҡара Йөрәк ер һелкетеп көлгән.

— Йомош!.. Ундай нәмә кеше затында ғына була! Йомошто алғас, уны кире ҡайтарырға кәрәк, ә мин кире ҡайтарырға йыйынмайым. Миңә һинең малайың, әле генә исем ҡушылған Ел батыр кәрәк! Яңыраҡ минең дә ҡыҙым тыуҙы, киләсәктә уға Ерҙе дер ҡалтыратып торған көслө ир кәрәк буласаҡ. Мин дә

бөгөн Иблес затынан булғандарҙың барыһын да мәжлескә йыйҙым һәм йыйындың ҡарарын һиңә еткерәм: малайың беҙҙең ҡулда ир етергә тейеш. Һинең тәрбиәңдә ул ҡаты бәғерле, ҡара йөрәк булып үҫмәйәсәк, аңланыңмы?!.

Ҡара Йөрәк һалҡын ҡарашы менән Тимерғаҙыҡҡа ҡарай һәм йөнтәҫ, оҙон ҡулдарын һуҙып, көмөш көймәгә ҡара нурҙар ебәрә. Ҡайһы аралалыр, ҡайҙандыр килеп сыҡҡан Аҡһаҡал Ҡара Йөрәк ҡаршыһына барып баҫа, шул саҡта ҡара нур ҡылысҡа киҫелгән кеүек икегә ҡырҡыла.

— Һин!.. Һин тағы миңә ҡамасаулайһыңмы?! — тип ҡысҡырып ебәргән Ҡара Йөрәк ажғырып.— Күпме минең юлыма арҡыры торорға була!.. Икегеҙҙе лә юҡ итәм мин хәҙер!

Аҡһаҡал да ҡулдарын алға һуҙған һәм аҡ нур менән ҡара нур бәрелешеп, ергә утлы йәшен яуҙырған. Күҙ асып йомған арала Ел батырҙы ҡара ҡойон эләктереп алған да, болоттар аша үтә бейеккә күтәрелеп, зыр әйләндерә башлаған, ти. Бер нәмә лә эшләй алмай, иҫен юғалтып торған халыҡ малайҙың ҡара бесәйгә әйләнгәнен күреп шаҡ ҡатҡан. Шул саҡ Аҡһаҡал аҡ ҡуласа нурға әйләнеп, ыҙа сиккән ҡара бесәйҙе уратып, ҡурсалап алған да ҡара ҡойон осонда ҡайҙалыр китеп юғалған. Бер аҙҙан ғәрәсәт тынған: Аҡһаҡал да, Ел батыр ҙа, Ҡара Йөрәк тә юҡҡа сыҡҡан. Ҡан-йәш ҡойоп, ҡала халҡы Арҡайымға йүнәлгән. Тирә-яҡты ҡайғы баҫҡан. Гүзәл баҡсаларҙа һандуғастар тынып ҡалған. Бар халыҡ, Тимерғаҙыҡ һүҙен көтөп, майҙанға йыйылған.

— Шатлыҡ менән бергә ҡайғы ла килде ҡала-

бызға,— тип һүҙен башлаған ул.— Беҙ Арҡайымда таңға тиклем генә ҡала алабыҙ. Ҡара Йөрәк уны ер менән тигеҙләйәсәк. Урал илендәге бар аҡһаҡалдарға ла үтенес яҙырмын, әгәр теләһәгеҙ, һеҙ уларға барып ҡушыла алаһығыҙ, әгәр Арҡайым ерен ташлап китә алмаһағыҙ, уның тирә-яғындағы ер-һыуға ултырығыҙ,— тигән, ти.

— Ә ниңә беҙ Ҡара Йөрәк менән көрәшмәйбеҙ? — тигән батырҙар.

— Баш халыҡ — батыр халыҡ, ҡыйыу халыҡ,— тип һүҙен дауам иткән Тимерғаҙыҡ,— уның ҡатнашлығында донъя йөҙөндәге бар яуызлыҡтар ҙа еңеләсәк. Ҡалабыҙға юлды бер ваҡытта ла тапмаһындар тип, ошо таңда Ҡара Йөрәк, Арҡайымды туғыҙ тапҡыр уратып, ҡара нур һуҙасаҡ. Был яуызлығын тормошҡа ашырмаһын өсөн, хәҙер барыбыҙға ла ашығырға кәрәк. Ҡалабыҙҙа бер йән эйәһе лә ҡалмаһас, мин уны, Ҡара Йөрәк күҙенән ҡасырып, изге зәңгәр томан менән күмермен.

— Ел батыр һәләк булмаҫмы, ул хәҙер ҡайҙа икән, беҙгә уны эҙләп табырға рөхсәт ит,— тигән халыҡ Тимерғаҙыҡҡа.

— Ел батырҙың ҡайҙа икәнен мин дә белмәйем,— тигән Тимерғаҙыҡ, башын аҫҡа эйеп.— Хәҙер ул — Ер улы. Малайҙы баш халыҡ аҡһаҡалының етегә бүленгән йәне — ете ураy аҡ нур һаҡлай...

Тимерғаҙыҡ һәр ырыу аҡһаҡалына төбәп, үтенес хаты яҙа һәм Арҡайым халҡы менән мәңгелеккә хушлаша, нуры һүнгән һарайына ҡайта. Моңайып ҡалған ҡыҙҙары, малайының сәңгелдәге янында башын эйеп ултырған Зөһрәһе янына килә.

— Һөйөклө ҡыҙҙарым, Зөһрәм, беҙҙе баҡсала нур-көймә көтә,— ти. Ҡыҙҙары теләр-теләмәҫ кенә нур-көймәгә сығып ултыра, тик әсәләре генә сәңгелдәк янынан тора алмай.

— Ашығайыҡ, Зөһрә, беҙҙе күккә саҡыралар,— ти Тимерғаҙыҡ.

Ҡатыны уның күҙҙәренә ялбарыулы ҡарай.

— Һин ҡәҙерлем, ҡыҙҙарҙы алып китә тор, ә миңә тағы ла саҡ ҡына сәңгелдәк янында ҡалырға рөхсәт итсе... Был — минең Ерҙәге һуңғы үтенесем...

Тимерғаҙыҡ ҡатынының һуңғы үтенесен кире ҡаға алмаған һәм нур-юлдан нур-көймәлә ҡыҙҙары менән бергә күккә күтәрелгән. Бына ҡапыл күк көмбәҙе асылған һәм, нур-көймә осҡон кеүек тирә-яҡҡа сәсрәп, Тимерғаҙыҡ, ете ҡыҙын ҡулынан тотоп, йондоҙ булып балҡып киткән. Йондоҙ ҡыҙҙар ергә бағалар һәм, үҙҙәренең ете ҡоҙоғон юҡһынып, һағыштан сүмес рәүешендә теҙелеп баҫалар. Зөһрә һылыу ғына, төн уртаһын үткәреп, Ел батыр сәңгелдәге янында бәүелеп ултыра. Ҡайғыһы, балаһына булған һөйөүе Ерҙә тота уны. Ә ҡыҙҙары әсәләрен һағынып, аталары тирәһендә өйөрөләләр. Тимерғаҙыҡ та түҙмәй:

— Зөһрә һылыу, Ерҙә түгел, күктә лә мин һинһеҙ йәшәй алмайым, тиҙерәк килсе... — тип ялбара нур тауышы менән алыҫтан.

Зөһрә һылыу таң алдынан теләр-теләмәҫ кенә Ерҙән айырыла һәм яп-яҡты таң йондоҙо булып күккә үрләй. Таң ата. Ошо көндән башлап, ғүмер буйы бер-береһен яратыусы Тимерғаҙыҡ менән Зөһрә һылыу, уларҙың ҡыҙҙары — Етегән йондоҙ Ерҙе

күҙләй, ҡайҙалыр аҙашып, мәңгелеккә баш халыҡ менән ҡалған Ел батырҙы эҙләй, ти. Ә Арҡайымдан төньяҡҡа күскән халыҡ бер ҙә аҙашмаған, сөнки уларға юлды Тимерғаҙыҡ күрһәтеп торған. Әлбиттә, Урал иле кешеләре лә уны хөрмәтләп иҫкә алған. Йәштәр иһә Зөһрә йондоҙға ҡарап, ярһыу йөрәктәрендә һөйөү хисе йөрөткән. Олораҡтары ете ҡоҙоҡтоң шифалы һыуын онотмай: «Етегән тигән ете йондоҙҙо ете уратып әйтһәң, сауап була»,— тип һамаҡлап йөрөгән.

...Һәр таң һайын Ер йөҙөнә Ҡояштың нурҙары ҡойола, бар Урал илен иркәләй, тик Арҡайым-тәгәрмәсҡала ғына, зәңгәр томан аҫтында быуаттар тәрәнлегендә бәүелеп, баш халыҡтың серле ҡомартҡыһы булып, беҙҙең көнгә үрелеп ҡарай, ти.